# BASHKIR FOLK ARTS
## RIDDLES

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО
## ЗАГАДКИ

# BASKURT HALK FOLKLORU
## BULMACA

КИТАП
Уфа · 2007

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## IX ТОМ

## ЙОМАҠТАР

КИТАП
Өфө · 2007

УДК 82:398
ББК 82
Б 28

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир),
*Фәнүзә Нәҙершина, Миңлеғәле Нәҙерғолов, Айбулат Псәнчин,*
*Ринат Йосопов, Розалия Солтанғәрәева, Зөфәр Тимербулатов,*
*Фирҙәүес Хисамитдинова, Гөлнур Хөсәйенова, Ғайса Хөсәйенов.*
Төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы — ***Фәнүзә Нәҙершина.***
Яуаплы мөхәррир — *Фирҙәүес Хисамитдинова*

**Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов* (главный редактор),
*Фануза Надршина, Миңлегали Надергулов, Айбулат Псянчин,*
*Ринат Юсупов, Розалия Султангареева, Зуфар Тимербулатов,*
*Фирдаус Хисамитдинова,Гульнур Хусаинова, Гайса Хусаинов.*
Составление, вступительная статья, комментарии — ***Фануза Надршина.***
Ответственный редактор — *Фирдаус Хисамитдинова*

**При перепечатке ссылка на том обязательна**

**Башҡорт халыҡ ижады.** 9-сы том. Йомаҡтар. — Өфө: Китап,
Б 28 2007. – 416 б.
ISBN 978-5-295-04304-8 (Т. 9)
ISBN 5-295-01393-6

Был томға, төркөмдәргә бүленеп, традицион һәм яңы осорҙа тыуған 4 меңдән ашыу йомаҡ индерелде. Инеш мәҡәләлә жанрҙың тарихи ерлеге, үҙенсәлектәре, поэтик тәбиғәте тикшерелде. Өҫтәмә мәғлүмәттәр аңлатмалар бүлегендә килтерелә.

Китап ғалимдарға, халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныусы киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнгән.

УДК 82:398
ТП – 140/07 ББК 82

ISBN 978-5-295-04304-8 (Т. 9)
ISBN 5-295-01393-6

© Ф. А. Нәҙершина, төҙөүсеһе, 2007

## ЙОМАҠ – ЗИҺЕН АСҠЫСЫ

Халыҡ ижадының паремик жанрҙары системаһында йомаҡ төп урындарҙың береһен биләүсе, һәр халыҡтың ижадында осрай торған үҙенсәлекле һәм бик боронғо жанр. Уның тыуыуы һәм сәнғәт әҫәре булып формалашыуы хаҡында фәндә төрлө фекерҙәр әйтелде.

Совет заманы фольклорсылары йомаҡ жанрының генезисын һәм үҫеш тарихын боронғо йәмғиәттәге социаль-иҡтисади шарттар менән, кешеләрҙең хеҙмәт эшмәкәрлеге менән бәйләнештә аңлаттылар. Уларҙың фекеренсә, йомаҡ кешеләрҙең ижтимағи тормошонда уй йомоу, йәғни кинәйәле һөйләш кәрәклеге нигеҙендә барлыҡҡа килгән[1].

Тарихи-этнографик материалдарға һәм халыҡ ижадының төрлө жанрҙарына таянып, беҙ ҙә башҡорт йомаҡтарының генезисын боронғо кинәйәле телгә бәйләп өйрәнеү мөмкинселеген фараз итә алабыҙ, сөнки әүәлге уй йәшереп һөйләү әҙәрен халыҡ араһында әле лә шаҡтай йыш осратырға була.

[1] Зеленин Д. К. Табу слов у народов Восточной Европы и Северной Азии. Ч. 1. Запреты на охоте и иных промыслах // Сборник Музея антропологии и этнографии. Л., 1929. Т. VIII. Ч. II. 1—8-се биттәр. Запреты в домашней жизни // Сборник Музея антропологии и этнографии. Л., 1930. Т. IX. 9-сы бит; Колесницкая И. М. Загадка в сказке // Ученые записки ЛГУ, серия филологических наук. Вып. 12, 1941. 123—126, 141-се биттәр; Аникин В. П. Русские народные пословицы, поговорки, загадки и детский фольклор. М., 1957. 56—61-се биттәр; Адамбаева Ж. Д. Литературно-стилистические и языковые особенности казахских загадок. Автореферат кандидатской диссертации. Алма-Ата, 1966; Суфиев А. Таджикские народные загадки. Автореферат кандидатской диссертации. Душанбе, 1965; Татар халык ижаты. Табышмаклар / Төз. Х. Мәхмүтов. Казан, 1977. 7—9-чы битләр.

Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, борон башҡорт халҡында ҡайһы бер хайуан, йәнлектәрҙең исемдәренә ҡарата «табу һүҙҙәр» ҡулланылған. Мәҫәлән, ҡара ышаныу буйынса, ҡуян йорт хайуандарына сир, афәт килтереүсе зарарлы йәнлек итеп иҫәпләнгән. Шуға күрә уны халыҡта үҙ исеме менән түгел, ә «шеш ҡолаҡ», «өтөк ҡойроҡ», «ҡыр тәкәһе» тип йөрөткәндәр. Бүрегә ҡарата «туҡмаҡ ҡойроҡ» атамаһы ҡулланылған[1]. Бөрйән, Күгәрсен яҡтарында элек айыуҙы «бабай» тип йөрөтөү булған. («Айыу» тиһәң, асыулана, «бабай» тиһәң, ҡыуана). Проф. Кирәй Мәргәндең күрһәтеүенә ҡарағанда, айыуҙың шулай уҡ «домбай», «урман хужаһы» йәки «солоҡ эйәһе» тигән алмаш исемдәре лә бар[2].

Башҡорт халҡында борон айыу һәм бүре культының шаҡтай ныҡ таралған булыуы беҙгә күптән инде билдәле. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр хатта «башҡорт» этнонимының килеп сығышын да бүре тотемы менән бәйләйҙәр (И. П. Рычков, В. Н. Татищев, В. И. Филоненко һ. б.). Ырыу-ҡәбилә системаһында айыу, бүре этнонимдарының булыуы, уларҙың ер-һыу исемдәренә инеп китеүе шулай уҡ осраҡлы хәл түгел тип, уйларға кәрәк. Һәр хәлдә, айыу, бүренең боронғо башҡорттарҙың тотем хайуаны булыуы беҙҙә шик тыуҙырмай, һәм уларға ҡарата табу һалыу (ҡулланыу) билдәле социаль-ижтимағи осорҙоң бер күренеше тип ҡабул ителә.

Тыйылған һүҙҙәр хаҡында айырым мәғлүмәттәрҙе шулай уҡ фольклор әҫәрҙәрендә, һәр төрлө ырымдарҙа яҡшы күрергә мөмкин. Мәҫәлән, халыҡта «арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай» тигән мәҡәл бар. Мәҡәлдең кинәйәле мәғәнәһе теге йәки был кешенең яйын-көйөн тапһаң, уның менән килешергә, һөйләшергә мөмкин тигәнде аңлата. Ә уның тура мәғәнәһен аңлау өсөн «йыландың арбауы нимә һуң?» тигән һорауға икенсе бер мәҡәл яуап бирә булһа кәрәк: «Йылан» тиһәң — илата, «ҡамсы» тиһәң — тик ята. Йылан күргәндә, ярһыуын баҫыу ниәтендә «ҡамсы!», «ҡамсы!» тип өндәшеү, йәки арбау — һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышаныуға ҡайтып ҡала. Был күренеш татар халҡында ла бар[3].

Кинәйәле һүҙҙең аҫыл өлгөләрен беҙ фразеология үрнәктәрендә бик яҡшы күрәбеҙ. «Айыу майы һөртөү» (урлау мәғәнәһендә), «түбәһе тишек» (йәғни һөйләшкәнде аңлай), «борсағын эре яра» (маҡтаныу мәғәнәһендә) кеүек һүҙбәйлә-

---

[1] Ишбердин Э. Ф. Названия животных и птиц в башкирских говорах. Канд. дисс. Өфө, 1969. 48—49-сы биттәр (ҡулъяҙма).

[2] «Башҡорт халыҡ йомаҡтары» / Төҙ. Кирәй Мәргән, Фәнүзә Нәҙершина. Өфө, 1968. 8-се бит (инеш һүҙ).

[3] Татар халык мәкальләре / Төз. Н. Исәнбәт. Казан, 1959. Т. I. 571-се бит.

нештәр, моғайын, телмәрҙе матурлау, уның экспрессивлылығын күтәреү маҡсатында ғына барлыҡҡа килмәгәндәрҙер.

Аҙаҡ килеп, шуны ла иҫкә алырға мөмкин: халыҡта һүҙҙең ни турала икәнен башҡалар аңламаһын өсөн ике кешенең серле итеп һөйләшеүе бар. Ул һүҙҙәге ижектәрҙең урынын алмаштырыу, йә һүҙҙең һәр ижегенә өҫтәмә рәүештә тартынҡы өн, ғәҙәттә, «ф», «п», «с» өндәрен ҡушып һөйләү. Мәҫәлән, «Ер аҫтында еҙ бүкән» тигән йомаҡ фыфылдау формаһында түбәндәгесә була: «Ефер афыҫтыфындафа ефеҙ бүфекәфән». Әлбиттә, быңдай форма икенсерәк характерҙағы нәмә, ул, күрәһең, һуңғараҡ тыуған күренештер. Ләкин нисек кенә булмаһын, уның боронғо кинәйәле һөйләш традициялары йоғонтоһонда барлыҡҡа килеү мөмкинлеге бик тә ихтимал. Ҡыҫҡаһы, борон башҡорт халҡында ла башҡа бик күп халыҡтарҙағы кеүек үк, айырым осраҡтарҙа йәшерен тел ҡулланыу булған, тип, икеләнмәйенсә әйтә алабыҙ.

Хәҙер инде табулаштырылған ҡайһы бер әйберҙәрҙең алмаш исемдәрен йомаҡтар менән сағыштырып ҡарайыҡ.

Айыу — бабай:

«Ҡара урман эсендә яҫы табан бабайым ята».

Ҡуян — ҡыр тәкәһе:

«Салт аяҙҙа болот юҡ,
Сал тәкәлә мөгөҙ юҡ».

Йылан — ҡамсы:

«Еҙнәм атын менеп булмай, еҙ ҡамсыһын тотоп булмай».

Күренеүенсә, килтерелгән алмаш исемдәр менән йомаҡтарҙағы образдар араһында айырма юҡ тиерлек. Уларҙың төҙөлөү принциптары араһындағы оҡшашлыҡ шулай уҡ күҙгә бәрелеп тора. Был инде табу һүҙҙәр менән йомаҡтарҙың генезис уртаҡлығы хаҡында фараз итергә урын ҡалдыра. Йәшерен телдә лә, йомаҡтарҙа ла теге йәки был әйбер үҙ исеме менән аталмай, уның хаҡындағы фекер ситләтеп әйтелә, әммә был күренеш әле улар араһында тигеҙлек билдәһе ҡуйырға ярай тигән һүҙ ҙә түгел. «Йомаҡ менән кинәйәле һүҙ араһындағы төп айырма шунда, — тип яҙа В. В. Митрофанова, — һуңғыһында үҙ-ара һөйләшеүселәрҙең башҡаларға билдәле булмаған ниндәй ҙә булһа нәмәне белеүҙәре талап ителә. Йомаҡтар иһә телгә алынған әйберҙең типик билгеләре нигеҙендә төҙөлә, уларҙы бөтә кеше логик фекер ярҙамы менән сисә ала[1]».

Кинәйәле һүҙ менән йомаҡтар араһындағы уртаҡлыҡ хаҡында һөйләгәндә, бик боронғо күренеш — генетик уртаҡлыҡ

---

[1] Митрофанова В. В. Специфика русских народных загадок // Русский фольклор. Специфика фольклорных жанров. М.; Л., 1966. Т. X. 87-се бит.

хаҡында ғына фекер йөрөтөргә мөмкин. Артабан, йомаҡтың жанр булып формалашыуы үҙ аллы юлдан киткән тип уйларға кәрәк. Әммә йомаҡҡа йәшерен тел шикелле магик көскә эйә булыусы ижад төрө итеп ҡарау байтаҡ ваҡыттар дауам иткән булырға тейеш. Мәҫәлән, йомаҡты ваҡытлы-ваҡытһыҙ әйтергә ярамай тигән ышаныуҙы төрлө халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорт халҡының йолаларында күрергә мөмкин. 1968 йылғы фольклор экспедицияһы ваҡытында Ишембай районы Кинйәбулат ауылынан 72 йәшлек Ханнанова Маһикамал әбей, мәҫәлән, беҙгә көндөҙ йомаҡ яҙҙырыуҙан ҡәтғи рәүештә баш тартты. Бының сәбәбен төпсөнә башлағас, ул: «Көндөҙ йомаҡ ҡойошһаң, кешенең күҙе һуҡырая, имеш», — тип яуап бирҙе. Ошондай ышаныу татар халҡында ла бар: Н. Исәнбәттең «Татар халык мәкальләре» тигән китабында «Табышмаҡты көндөҙ әйтһәң, бүре осрай, имеш», тигән ырым килтерелгән[1].

Оҡшаш хәлде рус һәм башҡа славян халыҡтарында ла күрәбеҙ. Ғилми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, славян халыҡтарында йомаҡ, ғәҙәттә, ҡышҡы кис ваҡыттарында ҡойолған, ә йәй көнө, көндөҙ йомаҡ ҡойошорға ярамаған. Ә инде святки, рождество кеүек байрамдар осоронда йомаҡ уйындарына ҙур иғтибар бирелгән[2].

Ваҡытҡа бәйле тыйыуҙар башҡа континенттарҙа һәм географик киңлектә йәшәүсе халыҡтарҙың ғөрөф-ғәҙәттәрендә лә сағыла. Мәҫәлән, Африканың ҡайһы бер райондарында «көндөҙ йомаҡ ҡойошһаң, кеше аҡылын юғалта йәки уға мөгөҙ үҫә» тигән ышаныу йәшәгән[3].

Татар фольклорсыһы Х. Ш. Мәхмүтов себер татарҙарында элегерәк «йәшерен көстәргә» магик йоғонто яһау ниәтендә һунарға сығыр алдынан йыйылып табышмаҡ әйтешеү булған, тип яҙа[4].

Был күрһәтмәләр барыһы ла, һис шикһеҙ, йомаҡтың боронғо йәмғиәттәге әһәмиәте һәм функцияларының характеры хаҡында һөйләй[5]. Ә инде ижтимағи үҫештең артабанғы баҫҡыстарында жанрҙың йәшерен телгә өйрәтеү һәм магияһы-

---

[1] Татар халык мәкальләре / Төз. Н. Исәнбәт. Казан, 1967. Т. III.

[2] Колесницкая И. М. Народные загадки // Русское народное поэтическое творчество. Пособие для вузов. Под ред. проф. Богатырева П. Г. Изд. второе. М., 1956. 292-се бит.

[3] Лавонен Н. А. Карельская народная загадка. Л.: Наука, 1977. 20-се бит (Мәғлүмәт Харт тикшеренеүҙәренән алып килтерелгән).

[4] Татар халык ижаты. Табышмаклар / Төз. Х. Мәхмүтов. Казан, 1977. 9-сы бит.

[5] Был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: Ф. Нәҙершина. Йомаҡтар тарихынан. «Ағиҙел» журналы, 1966. 7-се һан; шул уҡ автор. Халыҡ һүҙе. Өфө, 1983. 118–130-сы биттәр.

лыҡ функциялары кәмей, икенсе, яңы функциялары өҫтөнләөк итә башлай. Тора-бара халыҡтың рухи донъяһында йомаҡтарҙың тәрбиәүи-дидактик роле беренсе урынға сыға.

Төҙөләшә яғынан һорау һәм яуап рәүешендә ойошҡанлыҡтан, йомаҡ кешеләрҙең тапҡырлығын, аҡылын, зиһенен һынап ҡарау өсөн дә бик уңайлы ижад төрө булып тора, шуға күрә элекке замандарҙа кешене белеү, уны баһалау ихтыяжы тыуғанда, йомаҡ үҙенә күрә бер аҡыл һынау сараһы булып торған. Жанрҙың аҡыл һынау функцияһы халыҡ ижадында айырыуса асыҡ сағылған. Ил батырының зирәклеген белеү өсөн аҡһаҡал тарафынан йомаҡ әйтеү, кинәйәле һорауҙар биреү эпизоды, мәҫәлән, эпик ҡомартҡыларҙа киң урын ала.

Йомаҡ ҡойоуға бәйле боронғораҡ мотивтар әкиәттәрҙә айырыуса йыш осрай («Баглантаҙ менән хан ҡыҙы», «Аҡыллы ҡыҙ» һ. б.).

Йомаҡтың ижтимаги функцияһы халыҡ ижадында ғына түгел, ә тормош-көнкүрешкә ҡараған йолаларҙа ла һаҡланып ҡалған. Рус халҡында, мәҫәлән, туй ваҡытында ҡыҙ янына ултырыр алдынан буласаҡ кейәүгә йомаҡ ҡойоу гәҙәте бар. Быны инде, һис икеләнмәйенсә, боронғо традицияға бәйле күренеш тип әйтә алабыҙ. Шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә, туй барышында әйтелә торған йомаҡтар үҙҙәренең характеры менән күберәген әкиәттәрҙә осрай торған ябай һорау-йомаҡтар тибында булалар. Ғалимдарҙың иҫәпләүҙәренсә, ҡыҙ йортона инер алдынан кейәүгә йомаҡ ҡойоу гәҙәте — сит ырыу кешеһен ҡыҙ ырыуына ҡабул иткән ваҡытта башҡарыла торған бик боронғо бер йоланың алыҫтағы яңғырашы ул.

Башҡорттарҙың хәҙерге туй йолалары араһында йомаҡ ҡойошоу (өйөшөү, әйтешеү) эпизоды күҙәтелмәй, әммә беҙҙең тарафтан 1989 йылда Дәүләкән районының Иҫке Мерәҫ ауылында Хәкимова Мәрйәм Әхмәтйән ҡыҙынан (1923 йылғы) яҙып алынған материал буйынса, элек, хатта сағыштырмаса яңыраҡ осорҙа әле, туй ваҡытында ҡоҙалар менән ҡоҙалар араһында йомаҡ менән аҡыл-зиһен үткерлеген һынашыу гәҙәте булғанлығы асыҡланды. Информаторҙың һөйләгәне мәғлүмәткә бай, шуға күрә уны тулыһынса килтереү маҡсатҡа ярашлы булыр:

«Йомаҡты элек өйөшә торғайныҡ. Хәҙер онотолоп бөттө.

Бер заман туй яҫаныҡ. Эй, туйҙа ҡоҙалар менән йомаҡ өйөшәбеҙ. Ҡыҙыҡ инде. Йомаҡтың бит бик көлкөләләре бар. Шуларын әйтеп, шырҡ та шырҡ көлөшәбеҙ.

Мәжлес бөткәс, йоҡларға ятабыҙ. Йоҡлап булмай. Йомаҡ өйөшөп, көлөшә-көлөшә хәлдән таябыҙ. Оҙон-оҙон көлкөлө йомаҡтар була ине. Бер яҡ ҡоҙалар икенсе яҡ ҡоҙаларға

йомаҡ өйә. Өс йомаҡты белмәһә, йомаҡ ҡойоусылар был белмәгән кешене «һата».

— Һаттым, ниен алдың? — ти үҙенең янындағы бер икеөс кешегә.

— Башын алдым бумалаға,
— Ҡолағын алдым ҡаҙан ҡолағына,
— Күҙен алдым тәмгә.
— Һаттым, ниен алдың?
— Ҡорһағын алдым суманға[1].
— Һаттым, ниен алдың?
— Ҡулын алдым һеберткегә.
— Һаттым, ниен алдың?
— Аяғын алдым кеҫәүгә[2]».

Аңлашылыуынса, бында йомаҡтарҙың боронғо функцияһы (үҙ ырыуыңа башҡа ырыу кешеһен алғанда аҡыл һынашыу) үҙәк урында тормай, бер үк ваҡытта уны күрмәү ҙә мөмкин түгел. Һөйләүсе, нигеҙҙә, йомаҡтың күңел асыу функцияһына баҫым яһай, әммә материал үҙе боронғо мотивтарҙы һис кенә лә ысҡындырмай. Быны өс йомаҡтың яуабын таба алмаған кешегә бирелгән «яза» рәүеше күрһәтә. Әйткәндәй, халыҡ ижадына йомаҡты сисә алмаған осраҡта ҡулланылған «яза»ның икенсе төрҙәре лә һаҡланған. «Бағлантаҙ менән хан ҡыҙы» исемле әкиәттә, мәҫәлән, йомаҡтың яуабын таба алмаған кейәү егеттәренең киҫелгән баштарынан оло-оло убалар ҡалҡып сығыуы һүрәтләнә. Бында, әлбиттә, әкиәт фантастикаһы, гипербола алымы көслө. Әммә ошо уйҙырмаға нигеҙ биргән мотив осраҡлы түгел.

Йомаҡ ҡойошоу мәлендә «яза»ның еңелерәк ысулдары ла булған — ул өс яуапты таба алмаған баланың маңлайына өс мәртәбә сиртеүе (был күренеш беҙ үҫкән саҡта ла бар ине).

Йомаҡтың боронғолоғо һәм төрлө йолалар менән бәйле булыуы башҡорт сәсәндәренән ҡалған түбәндәге юлдарҙа бигерәк тә асыҡ сағылған:

Биҙәр-биҙәр, биҙәр йомаҡ,
Биш атанан ҡалған йомаҡ,
Ҡатай ҡыҙы ҡойған йомаҡ,
Ҡыпсаҡ ҡыҙы тапҡан йомаҡ.

Сәсәндәрҙең элек майҙандарҙа, төрлө йыйындарҙа йомаҡ әйтешеп, тапҡырлыҡта ярышыуҙары шулай уҡ жанрҙың халыҡ тормошондағы әһәмиәте хаҡында һөйләй.

---

[1] Суман — кәрзинкә кеүек ҫауыт (информатор аңлатмаһы).

[2] Нәҙершина Ф. А. Рухи хазиналар (Асылыкүл, Дим, Өршәк буйы башҡорттарының фольклоры). Өфө, 1992. 69-сы бит.

Кешеләрҙе аҡылға өйрәтеү, зирәклек, тапҡырлыҡ тәрбиәләү ихтыяжы йәмғиәттә бер ҡасан да кәмемәй һәм йәшәү шарттары үҙгәргән, ҡатмарлашҡан һайын был талаптың кәрәклеге арта ғына бара. Борон-борондан халыҡ йәштәрҙә аҡыл, зиһен тәрбиәһен бик юғары баһалаған, быны сәсәндәр теле менән, мәҫәлән, ошо рәүештә әйтеп биргән:

Үҙеңә йомаҡ әйтәйем,
Тапһаң, улым итәйем,
Тапмаһаң, ҡолом итәйем:
Көндөҙ ҡуйым көтөрһөң,
Төндә йөнөн тетерһең,
Йоҡом ҡалды тимәҫһең, —
Көндөҙ серем итерһең[1]...

Йомаҡтарҙың функцияһы аҡыл һынау, кешеләрҙең зиһенлелеген, тапҡырлығын арттырыу менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Поэтик әҫәр булараҡ, улар кешеләрҙе, бигерәк тә йәш быуынды, халыҡтың образлы фекер йөрөтөү оҫталығы менән таныштыралар. Йомаҡтарҙы сисеү мәлендә кеше матурлыҡты күрә һәм аңлай белергә өйрәнә, шулай уҡ халҡының үткәндәре һәм хәҙерге тормош-көнкүреше менән таныша. Фольклорсы, күренекле педагог М. А. Рыбникова йомаҡтарҙы юҡҡа ғына «тормошто, донъяны танып белеү, өйрәнеү курсы» («Курс народного мировидения[2]») тип атаманы. Был һүҙҙәрҙе тулыһынса башҡорт йомаҡтарына ҡарата ла әйтергә мөмкин.

Халыҡ ижадының башҡа төрҙәренән айырмалы рәүештә, йомаҡ үтә ябай, ләкин кешенең көндәлек тормошонан айырылғыһыҙ булған конкрет әйбер һәм күренештәр менән эш итә, шул ябай ғына нәмәләрҙе поэтиклаштыра. Кешеләр араһындағы шәхси һәм ижтимағи мөнәсәбәттәр, хәл-ваҡиғалар тураһында ниндәйҙер дөйөмләштерелгән фекер, дөйөм һығымта сығарыу жанрҙың маҡсатына инмәй. Уның стихияһы — тәғәйен донъя, тәғәйен күренештәр. Был конкрет әйберҙәрҙең даирәһе ғәйәт киң: ер һәм күк, тәбиғәт күренештәре, кеше, уның көнкүреше, хеҙмәте һ. б. Үҙ нәүбәтендә ошо конкрет нәмәләр йомаҡтарҙа тағы ла конкретлаштырылып, тағы ла деталләштереп бирелә: жанр өсөн ғөмүмән үҫемлектәр һәм ғөмүмән хайуандар, ғөмүмән хеҙмәт юҡ, уның өсөн тик конкрет үҫемлектәр (арпа, көнбағыш...), конкрет хайуандар (һыйыр, һарыҡ...), конкрет хеҙмәт процестары (йөн-киндер иләү, балаҫ һуғыу, иҙән һеперею...) ғына бар. Һүрәтләнгән

[1] «Башҡорт халыҡ ижады». Т. I. Өфө, 1954. 63-сө бит.
[2] Рыбникова М. А. Загадки. М. : Academia, 1932. 6-сы бит.

һәр нәмәнең кешегә яҡын булыуы исемдәрҙәге 1-се заг ялғауҙары ла, 1-се заттан һөйләү алымы ла күрһәтеп тора. Мәҫәлән: «Кескәй генә тайым бар, кергән-сыҡҡан атлана» (тупһа), «Астым, яптым, кендегенән тарттым» (ишек, ишек бауы).

Ситләтелгән төшөнсәләр (йәшәү, үлем, донъя) тураһында йомаҡтар йәнле репертуарҙа һирәк. Абстракт нәмәләр хаҡында һүҙ барған хәлдә лә йомаҡтар һүрәт яһау өсөн, ғәҙәттә, кешенең көндәлек тормошонан алынған әйбер-күренештәрҙе файҙаланалар. Ябай ғына, хатта артыҡ «прозаик» әйберҙәр ҙә йомаҡта образлаштырылып, юғары поэтика менән һуғарылып бирелә. Иҙән ярығы («Өҫтәл аҫтында йәш килен көлә»), ишек тупһаһы («Кергәндә кәкре тайға атланып керәм»), мейес мөрйәһе («Ауыл аша шайтан ҡарай»)... — былар бөтәһе лә йомаҡтарҙа ғәжәп тапҡыр образ дәрәжәһенә күтәрелгән. Шуға ла жанрҙың ысынбарлыҡҡа булған мөнәсәбәтен поэтик мөнәсәбәт тип атарға булыр ине.

Йомаҡтарҙағы арауыҡ, урын, ваҡыт төшөнсәләре лә бик үҙенсәлекле. Мифологияға ҡоролған эпостарҙағы, тылсымлы әкиәттәрҙәге мифологик арауыҡ, ваҡыт тураһындағы төшөнсәләр йомаҡтарға хас түгел. Жанрҙың тәбиғәтенә ярашлы был төшөнсәләр кеше мөхитенә ныҡ яҡынлаштырылған (ишек алды, өй башы, өй тирәһе; тау башы, ҡара урман эсе, ялан, яр буйы, күл тирәләй, үр, түбән, юғары, бейек; уң, һул; аръяҡ, бирьяҡ; ер, күк, һирәкләп диңгеҙ). Ваҡытҡа ҡарата: иртә, кис, таң атҡанда, төндә, көндөҙ; йәй, ҡыш, яҙ, көҙ...). Әммә ошо яҡын мөхиттә ниндәй генә хәлдәр һүрәтләнмәй. Бер генә миҫал: «Мейес башында тархан туйы». Тархан һынлы тархан мейес башында туй үткәрһенсе! Ниндәй көтөлмәгәнлек эффекты! Баҡһаң, «тархан» тигәнең йылыға йыйылған тараҡан икән. Зиһене бар кеше быны образдағы тәүге ижектәрҙәге оҡшашлыҡҡа ҡарап әйтә алған.

Йомаҡ текстарында осраған географик төшөнсәләр йәшерелгән, яуабы (йәбешкәһе, йомолдоғо) табылырға тейеш булған предметтарға, күренештәргә бәйле, йәғни көндәлек тормошҡа яҡынлаштырылған: «Бохарҙан алған билбауым биләмә килеп етмәй» (беләҙек); «Мәскәүҙән килгән күк айғыр, боһороп-боһороп һыу эскән» (биҙрә); «Мәскәүҙә ярған бүрәнә юнысҡыһы Өфөгә килеп, тап итте» (хат); «Атаһы ат еккәнсе, улы Петербурға барып етә»; «Атаһы аяғына кейгәнсе улы Ырымбурҙан урай»; (төтөн тураһындағы йомаҡтар); «Һаҡмарҙағы һары айғырым Урал аша кешнәйҙер» (йәшен) һ. б.

Халыҡта йомаҡтың асылына, тәбиғәтенә ҡағылған бик үткер фекерҙәр бар:

... Йомаҡ әйткән һүҙ йыйыр,
Йөн йомғаҡтай йомарлап,
Һүҙ эсенә уй йомор...

«Йомро-йомро йомғағым, шул йомғаҡтай йомағым» һ. б. шуның кеүек ҡобайыр, әйтемдәр йомаҡтың жанр үҙенсәлеген, характерын, йәғни уның нигеҙендә нимәнелер йомоу, ниндәйҙер бер фекерҙе йәшереү ятҡанлығын шаҡтай асыҡ күрһәтеп торалар. Ысынлап та, йомаҡта уйланылған нәмә йәки күренеш бер ҡасан да үҙе аталмай, бәлки уға оҡшаш сифаттары булған икенсе бер нәмә һүрәтләнеп, шул билдәләр буйынса йәшерелгән әйбер, күренештең исеме табыла. Күсеп йөрөгән болот, ямғыр яуыу, мәҫәлән, йомаҡта йөҙөп барыусы кәмәгә («Кәмә йөрөй, кәмә йөрөй, артынан һыуы тама йөрөй»), күк көмбәҙе — ялан, күктәге ай — тай эҙенә («Бөтөн яланда бер тай эҙе»), йәйғор — аллы-гөллө көйәнтәгә («Аллы-гөллө көйәнтәмде ситән аша ташланым») оҡшатып биреләләр.

Икенсе бер төр йомаҡтарҙа йәшерелгән әйберҙең иң характерлы үҙенсәлектәре генә билдәләнеп (башҡа оҡшаш нәмә, күренеш менән алмаштырып тормайынса), шул сифаттар буйынса йомаҡтың яуабы табыла. Бына, мәҫәлән, йондоҙ тураһында йомаҡ:

Аҡтыр, үҙе юғары,
Йым-йым итеп ултыра.
«Бөгөн таңда килмәһәң,
Китәмен», — тип ултыра.
Ҡаҙ тураһында:
Ҡыйыҡ-ҡыйыҡ атлаған,
Аҡ сәкмәнен ҡаплаған.

Ҡайһы бер йомаҡтар тик өн оҡшатыуға ғына ҡорола. Ут яныуҙы белдергән йомаҡтар, мәҫәлән, шундайҙарҙан:

«Өф-өф... форр..», йәки «Тфү-тфү, гәү-гәү!»

Үҙе һүрәтләй торған нәмә һәм күренештәрҙе йомаҡ ысынбарлыҡтың төрлө-төрлө өлкәләренән һайлап ала.

Беҙгә билдәле булған йомаҡтарҙың күпселеге ауылда ижад ителгән, шуға күрә уларҙа ауыл кешеһенең донъя һәм тәбиғәтте аңлауы, уның тормош-көнкүреше сағылған. Крәҫтиәндең йорт-ҡаралтыһы, урын-ер йыһазы, ҡош-ҡорто, мал-тыуары, баҫыуы, баҡсаһы, хеҙмәт, һунар ҡоралдары — быларҙың һәр ҡайһыһы йомаҡтарҙа ныҡ ентеклелек менән һүрәтләнә. Бына, мәҫәлән, йорт-ҡаралты, өй тураһындағы йомаҡтар:

Ишек,
Ишек өҫтөндә бишек (*өй. өй башы*);

Оҙон бабай һуҙылып ятҡан,
Балалары теҙелеп ятҡан (*түбә таҡтаһы, өрлөк*);

Өй урата ҡыл арҡан (*мүк*).

Өй эсендәге йыһаз, урын-ер, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары йомаҡта шундай уҡ ентеклелек менән яҡтыртыла. Теге йәки был әйбер нимәнән һәм ҡайһылай итеп эшләнгән, өйҙөң ҡайһы еренә нисек итеп ҡуйылған, кеше өсөн уның ниндәй хәжәте бар — быларҙың береһе лә йомаҡтың иғтибарынан ситтә ҡалмаған, киреһенсә, иң әүҙем һүрәтләү объектына әйләнгән. Ошо йомаҡтарҙы тематик төркөм эсендә ҡараһаң, тулы бер этнографик һүрәтте күҙ алдына килтерергә мөмкин. 1917 йылғы Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт ғаиләһенең өй эсен урындыҡтан (һикенән) башҡа күҙ алдына килтереү мөмкин түгел: ул өйҙөң төп йыһазы. Шуға күрә лә уны йомаҡ:

Өй түрендә хан урыны,
Хан урыны, ял урыны, —

тип тасуирлай.

Урындыҡ өҫтөндәге балаҫ, кейеҙҙе, ҡораманан һырылған ҡорғанды, ҡабарып торған түшәк-яҫтыҡ, мендәрҙәрҙе йомаҡ шулай уҡ бик тапҡыр образ, хәрәкәттәр аша һүрәтләй:

Ҡағылдым, һуғылдым,
Түргә килеп һуҙылдым (*балаҫ, кейеҙ*);

Бабай бүрке йөҙ ямау (*ҡорған*);

Ҡабара-ҡабара ҡабартма кеүек,
Ҡабарып бешкән икмәк кеүек (*мендәр*).

Шаршау, сымылдыҡ, таҫтамал, ҡайылған-сигелгән төрлө биҙәү әйберҙәре — ауыл өйөнөң айырылмаҫ өлөшө, улар айырыуса киленле өйҙә күп булыусан. Был күренеш шулай уҡ йомаҡтарҙа үҙенсәлекле сағылыш тапҡан:

Килен артынан килдем,
Донъяны уртаға бүлдем (*шаршау*);

Ҡыҙҙың ҡайғыһы,
Киленден (*ҡәйнәнен*) шатлығы (*нағыш, ҡайыу-сигеү*);

Аҡ тирмәнең төнлөгө юҡ (*сымылдыҡ*);

Ике башлы торомтай
Тәҙрә башын һаҡлай (*таҫтамал*) һ. б.

Йомаҡтарҙа кешенең үҙе, уның сәсенән алып тырнаҡтарына тиклем бөтә ағзалары хаҡында ғәжәйеп ҡыҙыҡлы һүрәтләүҙәр табырға мөмкин:

Оло урман,
Оло урмандан кесе урман,
Кесе урмандан йылтыраҡ,
Йылтыраҡтан мышылдаҡ,
Мышылдаҡтан шапылдаҡ,
Шапылдаҡтан шаҡылдаҡ
(*сәс, ҡаш, күҙ, танау, ирен, теш*).

Кешенең кейем-һалымы, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре тураһында халыҡ бик күп йомаҡ ижад иткән, айырыуса боронғо милли кейем һәм биҙәү әйберҙәре хаҡындағы әҫәрҙәр мөһим этнографик әһәмиәткә эйә булып тора.

Кәкре ҡайын башында
Ҡаңҡый әтәс ултыра.
Ҡанатынан ҡан тама,
Күрһәм йөрәгем яна;

Өй башында боҙло киле, —

был йомаҡтарҙа образдар шул тиклем көслө, шул тиклем тапҡыр, улар буйынса көмөш тәңкәнән, ҡыҙыл мәрйендәрҙән типселгән башҡорт ҡашмауы ифрат аныҡ булып күҙ алдына баҫа.

Тикшеренеүселәрҙең дөйөм фекеренсә, йомаҡтарҙың күпселеге хеҙмәт кешеһенең көндәлек эш һәм тормош-көнкүреш тәжрибәһе нигеҙендә барлыҡҡа килгән. «Йомаҡ, — тип яҙа М. А. Рыбникова, — алыҫтан күҙәтеүҙәр, күҙгә бәрелгәндән алынған тәьҫирҙәр һөҙөмтәһе түгел, ә нәмәләрҙең кешеләр менән бәйләнешен һәм үҙ-ара мөнәсәбәтен тыуҙырған хеҙмәт тәжрибәһенең нәтижәһе ул[1]».

Был һүҙҙәрҙе һәр халыҡтың, шул иҫәптән, башҡорт халҡының йомаҡтарына ҡарата ла әйтергә мөмкин. Йомаҡтарҙың күбеһенең хеҙмәткә, эш ҡоралдарына, тормош-көнкүреш әйберҙәренә бәйләнгән булыуы ғалим фекеренең хаҡлығын раҫлай.

«Ысын мәғәнәһендәге хеҙмәт ҡоралдар яһауҙан башлана[2]», — ти Ф. Энгельс. Беҙҙең халыҡ та хеҙмәт процесында ҡоралдың хәл иткес роль уйнағанлығын элек-электән бик яҡ-

---

[1] Рыбникова М. А. Күрһәтелгән хеҙмәт. 18-се бит.
[2] К. Маркс һәм Ф. Энгельс. Һайланма әҫәрҙәр. Өфө, 1961. Т. II. 83-сө бит.

шы аңлаған. Был йәһәттән боронғоларҙың «Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр» тигән һүҙҙәрен хәтергә төшөрөү генә лә етер ине. Инде йомаҡтар тәңгәленә килһәк, әйткәнебеҙсә, хеҙмәт, хеҙмәт ҡоралдары хаҡындағы образлы һүрәтләүҙәр халыҡ телендә ифрат та күп. Бында беҙ башҡорт халҡының боронғо һунарсылыҡ, һуғыш ҡоралдары — йәйә һәм уҡ тураһындағы йомаҡтарҙы ла сағыштырмаса һуңғараҡ осорға ҡараған примитив ҡоралдар: ураҡ, һуҡаларҙы тасуирлаған әҫәрҙәрҙе лә һәм, аҙаҡ килеп, фәндең һуңғы ҡаҙаныштары булған ҡатмарлы машиналарҙы сағылдырған йомаҡтарҙы ла осрата алабыҙ:

Яртыһының яртыһы —
Үҫкән ағас яртыһы,
Яртыһының яртыһы —
Тос тимерҙең яртыһы,
Яртыһының яртыһы —
Осҡан ҡоштоң яртыһы (*уҡ, йәйә*);

Бәләкәй генә бөк(ө)рө,
Йыһан ерҙе бөтөрҙө (*ураҡ*);

Бәлди-бәлди күккә етмәй,
Ҡара билбау билгә етмәй (*сыбағаш*);

Оло танау ҡара үгеҙ
Ерҙе йыра аяуһыҙ (*трактор*) һ. б.

Йорт һөнәрселеге (етен талҡыу, еп иләү, киндер, балаҫ һуғыу, теген тегеү), ялан эштәре (иген урыу, бесән сабыу, ер тырматыу) һ. б. бик күп хеҙмәт төрҙәре тураһындағы йомаҡтар ҙа ифрат ҡыҙыҡлы һәм ҙур иғтибарға лайыҡ. Йомаҡтарҙың нигеҙендә кешеләрҙең хеҙмәт тәжрибәһе, хеҙмәт кешеһенең эстетикаһы шул тиклем ҙур урын ала, хатта теге йәки был эш сфераһынан бик алыҫ торған нәмәләрҙе йәки күренештәрҙе, әйтәйек, уҡыу, яҙыуҙы ауыл кешеһе үҙенең көндәлек хужалыҡ эшмәкәрлеге аша образлаштыра. «Ере аҡ, орлоғо ҡара», «Аҡ ер, ҡара тары, кем сәсһә, шул урыр», «Бишәү сәсә, икәү йыя». Шулай уҡ күк есемдәре, тәбиғәт күренештәре, йыл фасылдары хаҡында тасуир иткәндә лә хеҙмәт кешеһе метафора, оҡшатыуҙарҙы башлыса үҙ ҡулдары менән етештерелгән, хужалыҡ, көнкүреш әйберҙәре араһынан һайлап ала: ай — «ябыҡ тирмәләге ярты икмәк», йәки «кәштә башындағы аҡ ҡалас», ҡояш — «күктә янған кәбән» йә «өй башындағы һары май», йондоҙҙар — «зәңгәр балаҫҡа һибелгән ынйылар», ҡар — «аҡ ашъяулыҡ», «аҡ ҡорған» һ. б.

Башҡорт йомаҡтарының тематик диапазонында халыҡтың социаль-ижтимағи тарихын, хеҙмәт кешеһенең синфи идеологияһын сағылдырған айырым әҫәрҙәр бар. Дөрөҫ, бында идеология, мәҡәлдәрҙәге шикелле, дөйөмләштерелгән фекер рәүешендә формалашмаған, әммә йомаҡтарҙа һүрәтләнгән әйбер, кешеләргә булған мөнәсәбәттән сығып, синфи идеология тураһында билдәле бер фекер йөрөтөргә мөмкиндер тип уйлайбыҙ. «Үҙе яланғас — бөтә донъяны кейендерә» (энә), «Байҙы йылыта, ярлыны илата» (тун), «Тоҡос башлы түрәләр түр башына менәләр» (ҡорот), «Ауыҙы-башы бөрөшкән, байҙар менән йөрөшкән» (бәлеш); «Алһыу битле йомро ҡыҙ, бикә түгел, бей түгел, уға башың эй, бөгөл» кеүек йомаҡтарҙа, мәҫәлән, хеҙмәт кешеһенең социаль хәле үҙенсәлекле образдар аша бик асыҡ сағылған.

Башҡорт халыҡ йомаҡтарының һүрәтләү даирәләре, нигеҙҙә, ошолар.

Йыйнап ҡына әйткәндә, улар тәбиғәт күренештәрен һәм кешенең тормош-көнкүрешен сағылдыра.

Йомаҡтарҙы хронологик тәртиптә (ижтимағи формациялар, улар эсендәге айырым осорҙар буйынса) классификациялау асылда мөмкин түгел. Кеше тормошондағы күп нәмә дөйөм алғанда ныҡ тотороҡло булып, быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға күсә килә. Шуға күрә теге йәки был нәмәнең һәм уның тураһындағы йомаҡтың ҡасан барлыҡҡа килгәнен өҙөп кенә әйтеүе сиктән тыш ауыр. Ошо сәбәпле бында революцияға тиклемге һәм революциянан һуң ижад ителгән йомаҡтар хаҡында ғына һүҙ алып барырға мөмкин. Халыҡ телендә йөрөгән күпселек йомаҡтарыбыҙ революцияға тиклем донъяға тыуған. Ҡыҫҡа, тапҡыр, юғары образлы булыуҙары арҡаһында улар бик оҙаҡ ваҡыттар буйы халыҡ күңелендә һаҡлана алғандар.

* * *

Кешене уратып алған конкрет әйбер һәм күренештәр йомаҡтарҙа ниндәй художество саралары арҡылы һүрәтләнә һуң? Был һорауға яуап бирер өсөн йомаҡ жанрының айырым төрҙәре хаҡында бер ни тиклем мәғлүмәт биреү ихтыяжы килеп тыуа, сөнки йомаҡтарҙың бөтә төрҙәрендә лә һүрәтләү алымдары бер үк дәрәжәлә киң ҡулланылмай.

Башҡорт халыҡ йомаҡтарын барлығы дүрт төргә бүлеп ҡарарға мөмкин: образлы йомаҡтар, һорау йомаҡтар, мәсьәлә йомаҡтар, әйтеш йомаҡтары.

**Образлы йомаҡтарҙың** нигеҙендә йәшерелгән әйберҙең образы, һүрәте ята, яуап эҙләүсенең бурысы иһә шул һүрәттең

нимәне аңлатыуын асыҡлауҙан ғибарәт. Образдар күпселектә метафораға ҡоролғанлыҡтан, фольклористикала бындай йомаҡтарҙы метафорик йомаҡтар тип йөрөтөү ҡабул ителгән.

**Һорау йомаҡтарҙа** тыңлаусының иғтибары ниндәй ҙә булһа художестволы образ тирәһенә йүнәлтелмәйенсә, ғәҙәттәгенән сәйерерәк тойолған һорау аша көтөлмәгәнсә асылырға тейеш булған әйбер йәки күренеш тәңгәлендә туплана. Һорау күп осраҡта йор, көлкөлө формала бирелә, һәм уның яуабы ла, ғәҙәттә, тапҡыр, ҡыҙыҡлы яңғырай. Мәҫәлән:

— Әтәс алтыһы тулғас, ни эшләй?

— Етегә сыға.

— Һыйыр һыуҙан сыҡҡас ни эшләй?

— Ҡоро ергә баҫа.

Шул рәүешле, күпселек һорау йомаҡтары үҙҙәренең төҙөлөштәре яғынан үтә ябай булыуҙары менән айырылып торалар: ҡатмарлы конструкциялар, ситләтелгән образдар улар өсөн хас түгел. Тик айырым осраҡтарҙа ғына күп юллы һорау йомаҡтар күренгеләп ҡала, ләкин шуныһы — күп юллыҡ йомаҡтың төп өлөшөндә килмәйенсә, ә яуап бүлегендә ойошоп, үҙенсәлекле бер күренеш төҫөн ала. Миҫал өсөн «Ни нәмәлә ни нәмә юҡ?» тигән һорау йомағын алырға мөмкин булыр ине. Уның яуабы, күпселек йомаҡтарҙың яуабынан айырмалы рәүештә, ритм һәм рифмаға ҡоролған биш юллыҡ строфанан тора:

Атта мөгөҙ юҡ,
Һыйырҙа ял юҡ,
Ҡошта һөт юҡ,
Ташта тамыр юҡ,
Йомортҡала йөй юҡ.

**Мәсьәлә йомаҡтар** (уларҙы икенсе төрлө арифметик йомаҡтар тип йөрөтәләр) шулай уҡ ниндәй ҙә булһа күсерелгән образға түгел, бәлки, кешенең зирәклеген һынауға йүнәлдерелгән һан, иҫәп-хисапҡа ҡорола: «Ике һигеҙ, бер туғыҙ, тағы һигеҙ, ун туғыҙ. Нисә була барлығы?» (123), йәки: «Дүрт кешегә өс йоморҡа булған. Йоморҡаларҙы бүлгәс, һәр береһенә берәр йоморҡа тейгән. Ҡарт ҡыҙы менән, егет ҡатыны менән берәр йоморҡа ашағандар. Нисек ул шулай?» (Ҡарттың ҡыҙы егеттең ҡатыны булған.)

**Әйтеш йомаҡтары** үҙҙәренең йөкмәткеләре менән дә, формалары яғынан да башҡа төр йомаҡтарҙан ныҡ ҡына айырылып тора. Был айырмалылыҡтың төп сәбәбе — әйтеш йомаҡтарының фәҡәт сәсәндәр ижады булыуында. Ғәҙәттәге йомаҡтарҙан айырмалы рәүештә, әйтеш йомаҡтарында берен-

се планда социаль-ижтимағи темалар тора. Ил ағалары булараҡ, сәсәндәр үҙҙәренең әйтеш, ҡобайыр-йомаҡтарында юғары ижтимағи мәсьәләләрҙе күтәреп, ил, халыҡ исеменән һөйләр булғандар. («Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне»[1].)

Әйтеш йомаҡтары араһында халыҡ йомаҡтарын файҙаланыу, уларҙы шиғри туҡымаға һалыу нигеҙендә барлыҡҡа килгәндәре лә осрай:

— Ауыҙы бар — көйшәмәҫ,
Ул ни булыр сәсәнем?
Арҡаһы бар — аунамаҫ,
Ул ни булыр, ҡәрҙәшем?

— Ауыҙы бар — көйшәмәҫ,
Йылҡы тигән түгелме?
Арҡаһы бар — аунамаҫ,
Һыйыр тигән түгелме?[2]

Ҡарап үтелгән йомаҡ төрҙәре араһында үҙәк урынды образлы йомаҡтар алып тора. Улар һан яғынан да, сифат яғынан да жанрҙың йөҙөн билдәләүҙә хәл иткес роль уйнайҙар. Шуға күрә йомаҡтың һүрәтләү саралары һәм шиғри үҙенсәлектәре хаҡындағы күҙәтеүҙәрҙе ошо төр нигеҙендә алып барыу кәрәк булыр.

Әйткәнебеҙсә, образлы йомаҡтарҙың иң ҙур күпселеге метафоралар ярҙамында ойоша. Бер әйбер йәки күренеште икенсе әйбер, күренеш менән алмаштырыу өсөн (йәғни метафора яһау өсөн) улар араһында ниндәйҙер оҡшашлыҡтың булыуы мотлаҡ. Йомаҡтарҙа башлыса форма, төҫ, тауыш, функциялар уртаҡлығы нигеҙендә яһалған метафоралар хәрәкәт итә.

Муйыны — д у ғ а, арҡаһы — э й ә р (дөйә),

Башы — т а р а ҡ, ҡойроғо — у р а ҡ (әтәс)

кеүек йомаҡтарҙа, мәҫәлән, метафоралар әйберҙәрҙең форма оҡшашлығына ҡоролған.

Өй башында й ә ш е л  ҡ а ҙ,
Йәшел ҡаҙҙың б а ш ы  т а ҙ (*миндек*),

Ҡара һыйырымдың ҡарыны йыуан (*ҡаҙан*) —

был йомаҡтарҙа төҫ уртаҡлығы алғы планда тора, йомаҡтың

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ. Ә. И. Харисов. Өфө, 1954. Т. I. 65-се бит.

[2] Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Ғилми архивы: Ф. 3. Оп. 12. Д. 237.

яуабын ошо оҡшашлыҡ буйынса эҙләгәндә генә табырға мөмкин. Тауыш уртаҡлығына ҡоролған метафоралар ҙа бик тапҡыр яңғырай. Ел-дауыл тураһындағы йомаҡтар, мәҫәлән, шундайҙарҙан:

Ике тауҙың араһы,
Һыҙғыра пәрей балаһы,

Ҡотһоҙ Ҡолой бүре кеүек олой (*ел, дауыл*) һ. б.

Йоҙаҡ тураһындағы «Бәләкәй генә көсөгөм өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә» тигән йомаҡ иһә функциялар оҡшашлығына ҡоролған метафораға өлгө була ала. Йомаҡтарҙағы образ-метафора ниндәй генә сәйер тойолмаһын, ул реаль тормош, кешенең көнкүреше, хужалыҡ эшмәкәрлеге менән бәйләнгән була.

Тарихи-этнографик әҙәбиәттән билдәле булыуынса, башҡорт халҡы борон-борондан бирле малсылыҡ менән көн күреп йәшәгән. Шуға ла уның фольклорында изге мал образы бик йыш осрай торған образ. Батырҙарҙың ҡанаты булған толпарҙар, аҡбуҙаттар хаҡында ғына күпме эпик әҫәр һәм йырҙар ижад ителгәнлеген иҫкә төшөрәйек. Афористик ижадта был хәл шулай бик асыҡ һәм үҙенсәлекле сағылыш тапҡан. Башҡорт йомаҡтарын хатта өҫтән генә байҡап сыҡҡанда ла метафораларҙың ҙур бер өлөшөнөң мал образы аша һүрәтләнгәнлеген күреүе ауыр түгел. Бына, мәҫәлән, ҡайһы бер миҫалдар:

Яҙ ҙа килә арғымаҡ,
Көҙ ҙә килә арғымаҡ,
Ун ике япраҡ аҫтында
Юшап йөрөй арғымаҡ (*йыл хисабы*);

Ағиҙелдә аҫау айғыр
Урал аша кешнәйҙер,
Һаҡмарҙағы һары бейә
Тау һыртынан төшмәйҙер
(*күк күкрәү, йәшен йәшнәү*).

Тормош-көнкүрештә яңы әйбер һәм күренештәр барлыҡҡа килеү менән яңы йомаҡтар, йәғни яңы образдар тыуыуы тәбиғи. Билдәле булыуынса, революцияға тиклемге башҡорт йәмғиәтендә игенселек менән шөғөлләнеү малсылыҡҡа ҡарағанда һуңғараҡ осорҙа башлана. Игенселек менән шөғөлләнеү киң ҡолас алғас, халыҡтың поэтик фекерләүендә яңы образ-метафоралар, яңы сағыштырыуҙар барлыҡҡа килә. Әйтәйек, ай элек йомаҡта «күк һыйырҙың көмөш мөгөҙө», йә «күк

тирмәләге көмөш ырғаҡ» рәүешендә һүрәтләнһә, хәҙер — «ябыҡ тирмәләге ярты икмәк», тағы ла һуңғараҡ — «кәштә башындағы аҡ ҡалас» сүрәтендә лә тасуирлана башлай.

Шул рәүешле, йомаҡ кеүек ябай ғына күренгән жанр аша ла халыҡтың тормошо, уның поэтик фекерләүе, рухи донъяһы хаҡында ғәйәт ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр алырға мөмкин. Һәр халыҡтың йомаҡтарында дөйөм кешелек өсөн хас булған ҡайһы бер образдарҙан тыш, шул халыҡтың үҙенә генә хас образ-метафоралар бик күп. Әйтәйек, башҡорт халыҡ йомаҡтарында йондоҙҙар күберәген ынйы, һуйырташ, ҡырсынташ, өҙ ҡаҙау рәүешендә кәүҙәләнһә, рус халыҡ йомаҡтарында улар, башлыса, түгелгән орлоҡ, борсаҡ, хатта ҡыяр, шалҡан рәүешендә образлаштырыла. Сағыштырығыҙ:

Башҡорт халыҡ йомаҡтары:

Зәңгәр балаҫҡа ынйылар һибелгән,
Балаҫына ултырып булмай,
Ынйыларын алып булмай.

Кирәгәһеҙ күк тирмәнең
Эсе тулы ҡырсынташ.

Рус халыҡ йомаҡтары:

Рассыпался горох по сту дорог,
Никто его не соберет:
Ни царь, ни царица,
Ни красна девица, ни бела рыбица.

Рассыпалось к ночи зерно,
Глянули поутру — нет ничего.

Полное корыто огурцов намыто.

Выгляну в окошко: стоит репы лукошко[1].

Һәр халыҡтың милли ерлегендә тыуған күпме милли үҙенсәлек, күпме милли рух аңҡып тора килтерелгән образ-метафоралар ҙа!

Әйбер, күренеш, хәрәкәттәрҙе һүрәтләү йомаҡтарҙа ҡайһы бер ваҡыт бөтөнләй көтөлмәгән, ярым фантастик төҫ ала: «Ҡарт әбей үлеп ята, үҙе көлөп ята» (бүрәнә ярығы), «Ишеге юҡ, тәҙрәһе юҡ — эсе тулы халыҡ» (ҡыяр), «Башы ғранда, ҡойроғо яланда» (юл). Был — оксюморон, йәки

[1] «Загадки» // Изд. подготовила В. В. Митрофанова. Л.: Наука, 1968. 18—19-сы биттәр.

поэтик парадокска ҡоролған йомаҡтар. Улар халыҡ телендә ифрат та күп. Оксюморон, бер яҡтан, тыңлаусының «колағын торғоҙорға» ярҙам итһә, икенсе яҡтан, кешенең зиһен хәрәкәтен, аҡыл көсөргәнешен арттырыуы мөһим поэтик сара булып тора.

Йәнләндереү — йәнһеҙ әйберҙәрҙең һәм тәбиғәт күренештәренең кеше сифаттары менән һүрәтләнеүе — шулай уҡ йомаҡтарҙа йыш осрай торған сәнғәт алымы: «Биш ағай бура бурай» (ойоҡ энәләре, ойоҡ бәйләү), «Дүрт ағай юлға сыҡҡан. Икеһе алдан, икеһе арттан бара» (арба тәгәрмәстәре).

Йомаҡтарҙағы поэтик образды тыуҙырыуҙа эпитет, оҡшатыу, сағыштырыу, йәнәшәлек кеүек художество сараларының роле бик ҙур. Эпитет, мәҫәлән, тыңлаусының фекерен предмет, күренештең төп сифатына йүнәлтергә һәм шуға таянып, ҡуйолған йомаҡтың асылына төшөнөргә ярҙам итә. Эйтәйек, «Ҡара малай көҙгөнән ҡарай» (һөлөк), «Арғы ситән буйында ҡыҙыл этәс йүгерә» (ут) кеүек йомаҡтарҙа төп мәғәнәүи йөкләнеш фәҡәт эпитетҡа төшә.

Оҡшатыу, сағыштырыу алымдары иһә нәмә һәм күренештәрҙең оҡшашлығына йә айырымлылығына тыңлаусының иғтибарын туплай. Метафоралар яһағандағы кеүек, йомаҡ әйбер, күренештәрҙе төрлө-төрлө билдәләре буйынса сағыштыра:

Ултырыуы мулла кеүек,
Һыҙғырыуы шайтан кеүек (*һайыҫҡан*);

Тышы шарҙай,
Эсе ҡандай,
Тәме балдай (*ҡарбуз*);

Ятһа — ҡуяндай,
Торһа — дөйәләй (*эйәр*) һ. б.

Грамматик яҡтан «кеүек» бәйләүесе менән яһалған формаларға ҡарағанда, *-дай-дәй, -тай-тәй, -ҙай-ҙәй, -лай-ләй* ялғауҙары ярҙамында ойошҡан сағыштырыуҙарҙың күберәк булыуы күҙәтелә.

Йомаҡтарҙың ҡайһы берҙәре кире сағыштырыуҙарға ҡорола. Был осраҡта бер юлы нәмәләрҙең оҡшаш, уртаҡ һыҙаттары күрһәтелеү менән бергә, уларҙың төрлө әйбер булыуҙары ла телгә алына:

Йылан түгел — саға,
Ҡош түгел — оса (*бал ҡорто*).

Нәмәнең исемен уны яһау өсөн файҙаланылған материал исеме менән алмаштырғанда, метонимия алымы хаҡында

фекер йөрөтөргә мөмкин. Ҡағиҙә булараҡ, метонимия ике әйбер араһындағы эске мөнәсәбәт һәм бәйләнештәрҙе һыҙыҡ өҫтөнә ала. Мәҫәлән, ҡаба менән ҡолға хаҡындағы «Йүкәгә ултырып башын тарай» тигән йомаҡта төп билдә итеп, ҡабаның йүкә ағасынан эшләнгәнлеге алынған, һәм ошо билдәне айырмайынса тороп, йомаҡтың дөрөҫ яуабын табыу мөмкин дә түгел. Метонимия ярҙамында яһалған һүрәттәр йыш ҡына парадокс характерын ала. «Тишек тимергә ҡайын үҫкән» (балта) — был, әлбиттә, тәбиғи күренеш түгел, ә йомаҡ жанры ғына тыуҙыра алған поэтик парадокс.

Метонимияның бер төрө булған синекдоха башлыса һан, күләм мөнәсәбәттәрен үҙ эсенә ала. Йомаҡта уйланылған нәмәнең айырым өлөштәре күп булыуҙы күрһәтер өсөн конкрет ҙур һан алына: «Бер кешелә мең күҙ» (лампа селтәре), «Кибет, кибет эсендә ике мең егет» (көнбағыш), «Бер соҡорҙа мең соҡор» (иләк).

Йомаҡтарҙа һүрәтләнгән нәмәләрҙе яңғыҙлыҡ исемдәр менән атау шаҡтай киң таралған. Мәҡәлдәрҙәге яңғыҙлыҡ исемдәрҙән айырмалы рәүештә, йомаҡтарҙа ҡулланылған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең тормоштағы реаль кешеләр менән бәйләнеше юҡ. Теге йәки был исемде ҡулланыу бер осраҡта йомаҡтың яуабын табыуҙы аҙыраҡ еңелләштереү ниәтендә, икенсе осраҡта рифма, өндәр аһәңлегенә ирешеү маҡсатын күҙ уңында тотоп эшләнә. Мәҫәлән, «Һыуҙа Һөләймән, ҡырҙа Ҡырайман, илдә Иләймән» тигән йомаҡта «Һөләймән» «һөлөк» һүҙенә, «Ҡырайман» «ҡырлығурай»ға, «Иләймән» «иләк» һүҙенә ишара булып тора. Зирәк кеше шул ауаздаш өндәр ишараһын тотоп ала һәм уйланылған әйберҙең үҙен таба. F. Б. Хөсәйенов, быңдай типтағы исемдәрҙең хәҙерге башҡорт телендә лә осрауын билдәләп («Юламан», «Һөнәрмән», «Уҙаман»), һәм, боронғо төрки телдәрендә *«-ман»*, *«-мән»* һүҙ яһаусы ялғауының «кеше» тигән мәғәнәне аңлатыуын иҫкә алып, йомаҡтарҙағы һүҙ яһауҙарҙы ябай бер һүҙ уйнатыу ғына түгел, ә башҡорт теленең боронғо һүҙҙәре һәм һүҙ яһалыу рәүештәре булырға тейеш, тигән ҡыҙыҡлы фекер әйтте[1]. Тик бында шуны ла әйтергә кәрәк, әгәр кеше исемдәренә оҡшатып, йомаҡ үҙе лә яңы исемдәр, һүҙ уйнатыуҙар тыуҙыра икән (йомаҡтарҙа быңдай күренештәр ҙә аҙ түгел), был инде жанрҙың тәбиғәтенә ярашлы, уның өсөн бик яйлы булған хәл, ә мәғәнәһеҙ сәйерлек түгел. Йомаҡтағы яңы һүҙҙәр күңел асыу, зиһен уйнатыу, «ҡолаҡ торғоҙоу» йәһәтенән үтемле булалар. Ҡарағыҙ:

---

[1] Хөсәйенов F. Халыҡтың тере тарихы // «Совет Башҡортостаны» гәзите, 1966. 28 июль.

Ары ла йүгерә Зәпзәки,
Бире лә йүгерә Зәпзәки,
Тамаҡ ҡыра Зәпзәки,
Һаҡал һелкә Зәпзәки (*кәзә*);

Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Ишәй ағай икәү,
Шыбай ағай шып-яңғыҙ (*арба, сана, ат*).

Тәүге миҫалдағы яңғыҙлыҡ исем йәшерелгән предметтың исеменә ауаздашлыҡ ниәтендә килтерелһә (кәзә — Зәпзәки), һуңғыһында исем яһау, рифмалар, өндәр гармонияһы булдырыу маҡсатына яраҡлашҡан (Ишәй икәү, Шыбай шып-яңғыҙ). «Ҡарабайҙы Ҡыҙылбай ялай» тигән йомаҡтағы исем яһалышы төҫ оҡшашлығына ҡоролған (Ҡарабайы — ҡаҙан, Ҡыҙылбайы — ут, «ялай» тигәне — уттың яныш тороуы). Ҡаҙан тураһындағы «Ҡарабай аттан йығылды, халҡы-йорто йыйылды» тигән йомаҡ башҡорттарҙың йәйләүгә сығып, күсеп йөрөүҙәренә бәйле, булһа кәрәк. Бындағы образ шулай уҡ төҫ оҡшатыуға бәйле. Яңғыҙлыҡ исемле йомаҡтар араһында рустар менән аралашыу һөҙөмтәһендә тыуғандары ла бар:

Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Александр икәү,
Федор меҫкен бер үҙе
(*һыйыр имсәктәре, мөгөҙө, ҡойроғо*).

Бәләкәй генә Микитә [Никита]
Бер кешене ик(е) итә (*көҙгө*).

Теге йәки был әйбер, күренештең һүрәтен тыуҙырыу өсөн йомаҡтар төрлө өн, тауыш оҡшатыуҙарынан йыш файҙаланалар. Ҡош-ҡорт, хайуандар, тәбиғәт күренештәре, хеҙмәт процестарына ҡараған йомаҡтарҙа был алым айырыуса әүҙем. Бына, мәҫәлән, бер нисә өлгө:

Төфә-төфәй, төф-төфәк,
Зыңғыл-сыңғыл, таш түшәк (*салғы яныу, сүкеү*);

Ҡых-тфү, ҡых-тфү,
Ауыҙы майлай,
Ҡулы ййлай,
Ҡошо һайрай (*бысаҡ ҡайрау*),

Тфү-тфү, нәй-гәй,
Ул ни нәмәкәй? (*бысаҡ ҡайрау*).

Күренеүенсә, өн оҡшатыуҙар йомаҡ тексында күберәген башҡа һүрәтләү алымдары менән бергә бирелә, ләкин, шулай булһа ла образ тыуҙырыуҙа төп мәғәнәүи йөкләнеш фәҡәт уларға төшә.

Ошо рәүешле, йомаҡты йомаҡ итеп, жанр дәрәжәһенә күтәреү өсөн халыҡ үҙ телендәге поэтик биҙәктәрҙең яңынан-яңы нескәлектәрен асҡан, уларҙың художество ҡеүәһен арттырған, камиллаштырған.

Төҙөлөштәре яғынан йомаҡтар мәҡәлдәргә яҡын тора. Ҡыҫҡалыҡ — йомаҡ жанрының да характерлы бер үҙенсәлеге. Ғөмүмән, «тел даими рәүештә артыҡ нәмәләрҙән ҡотолорға», «кәрәк булған нәмәләрҙе һәр саҡ ҡалҡыу итеп күрһәтергә ынтыла[1]». Был тенденция халыҡ ижадының мәҡәл һәм йомаҡ кеүек төрҙәрендә айырыуса көслө.

Күпселек йомаҡтар ҡыҫҡа ғына образлы ябай һөйләм рәүешендә төҙөлә. Күп һүҙлелек, оҙон-оҙон һүрәтләүҙәр, ҡатмарлы-ҡатмарлы һүҙбәйләнештәр, инеш һүҙ, инеш һөйләмдәр — быларҙың барыһы ла йомаҡтың тәбиғәте өсөн ят нәмә.

Билдәле, йәнле репертуарҙа ҡушма һөйләм формаһында төҙөлгән йомаҡтар ҙа аҙ түгел. Тик шуныһы: был ҡушма һөйләм эсенә ингән ябай һөйләмдәр мотлаҡ рәүештә ҡыҫҡа, йыйнаҡ була, уларҙың айырым киҫәктәре йыш ҡына төшөрөп ҡалдырыла; теркәүес, бәйләүес кеүек ярҙамсы һүҙҙәрҙә лә мохтажлыҡ булмай. Бына, мәҫәлән, бер нисә өлгө:
Ҡояш менән ай тураһындағы йомаҡ:

Алтыным китте,
Көмөшөм килде.

Болот менән үлән:

Күктә — күгәрсен,
Ерҙә — әберсен.

Күләгә тураһында:

Ҡып та итмәй, шып та итмәй,
Әҙәм белмәй, эт өрмәй.

Йомаҡтарҙа шиғри һөйләмгә хас булған бик күп һыҙаттар бар. Аллитерация, ассонанс, ритм, рифма шикелле жанрҙың поэтик йөҙөн билдәләүҙә мөһим роль уйнаусы художество саралары бында үҙҙәрен ифрат иркен һиҙә.

---

[1] Мартине А. Принцип экономии в фонетических изменениях. М., 1960. 84-се бит (М. Бакировтың «Тел һәм шиғыр» тигән мәҡәләһе буйынса килтерелә // «Ағиҙел» журналы, 1971. 2-се һан. 101—102-се биттәр).

Йомаҡ юлдарында ритмик ағымдар тыуҙырыуҙа ижектәр һанының сиратлашыу тәртибе һәм паузаларҙың роле бик ҙур. Иң әүҙем үлсәмдәрҙең береһе 7—7 үлсәме:

Тау арҡыры ‖ туп аттым, (4+3) 7
Атҡан тубым ‖ юғалттым. (4+3) 7

(*Йондоҙ атылыу.*)

Үҙе аға ‖ яры юҡ, (4+3) 7
Барып еткән ‖ ере юҡ. (4+3) 7

(*Болот.*)

Үҙе ‖ ҡулын күтәргән, (2+5) 7
Ҡулы ‖ мор(о)нон күтәргән. (2+5) 7

(*Сәскә.*)

Ситтән ҡараһам ‖ аҡлы, (5+2) 7
Татып ҡараһам ‖ татлы. (5+2) 7

(*Шәкәр.*)

8—8 үлсәмендәге йомаҡтар күберәген 4+4, 3+5, 5+3 схемаһында төҙөлә:

Йәшел елән ‖ йәйеп ҡуйҙы, (4+4) 8
Бар ҡайғыны ‖ алып ҡуйҙы. (4+4) 8

(*Йәй.*)

Тулғанда ‖ йөҙөн күрһәтә, (3+5) 8
Бөлгәндә ‖ артын күрһәтә. (3+5) 8

(*Самауыр.*)

Кәштә башында ‖ аҡ тауыҡ, (5+3) 8
Ултырып тора ‖ маҡтанып. (5+3) 8

(*Сәйнүк.*)

Ҡыҫҡараҡ үлсәмдәргә ҡоролған йомаҡтар ҙа байтаҡ:

Тышта — тау, (3)
Өйҙә — һыу. (3)

(*Ҡар.*)

Баҫһам — бырыҡты, (5)
Тейһәм — тырыҡты. (5)

(*Тәбәлдерек.*)

Өйҙә саҡта — сөйҙә, (6)
Тышта саҡта — буйҙа. (6)

(*Кейем.*)

Йомаҡтарҙағы үлсәм төрҙәре, ритмик быуындарҙың күләме, билдәле инде, килтерелгән миҫалдар менән генә сикләнмәй. Абсолют төҙөк юллы строфаларҙан тыш, йомаҡтар араһында ижектәр һаны бик үк тигеҙ булмаған строфалар ҙа аҙ түгел,: 4—5, 5—4, 6—7, 7—6, 8—7, 7—8 һәм башҡа бик күп төрлө үлсәмдәргә ҡоролған йомаҡтар бар. Шуныһы, етмәгән ритмик быуындар, ҡағиҙә булараҡ, оҙонайтылған пауза ярҙамында тултырыла. Ҡарағыҙ:

Таш ҡала,
Таш ҡала эсендә суйын ҡала,
Суйын ҡала эсендә һөйәкһеҙ бала.

(*Мейес, таба, икмәк.*)

Был йомаҡтың тәүге юлы өс ижектән, икенсеһе — ун, өсөнсөһө — ун ике ижектән тора. Ижек һандары араһындағы айырманың ни тиклем ҙур булыуына ҡарамаҫтан, йомаҡ тексында ҡытыршылыҡ һиҙелмәй, сөнки ялғау алымы (алдағы юл ниндәй һүҙгә бөтһә, унан һуң килеүсе юл да шул уҡ һүҙ менән башланыу) оҙонайтылған пауза тыуҙырған.

Йәнә миҫал:

Ағас,
Ағас һайын ботаҡ,
Ботаҡ һайын оя,
Оя һайын йоморҡа. (*Борсаҡ.*)

Һанау интонацияһы менән әйтелгән йомаҡтарҙа ла етмәгән ижектәрҙе оҙонайтылған паузалар тултырып килә:

Ҡырҡтылар мине, (*5 ижек*)
Һуҡтылар мине, (*5 ижек*)
Тунап-тунап бөттөләр мине, (*9 ижек*)
Ыуып-ыуып, өф иттеләр, (*8 ижек*)
Тәгәрләтеп артыма типтеләр — (*10 ижек*)
Барыбер үҙемдекен иттем: (*9 ижек*)
Алдарына килеп ултырҙым. (*9 ижек*)

Шул рәүешле, ҡайһы ғына йомаҡты алып ҡарама, унда ярылып ятҡан ритм тояһың. Хатта бер генә юллы йомаҡтарҙа ла төрлө-төрлө ритмик быуындар хәрәкәт иткәнен билдәләргә мөмкин.

Йомаҡтарҙың ритмик ҡеүәһе, рифма, аллитерация, ассонанс кеүек художество саралары ҡулланғанда, айырыуса асыҡ күренә. Башҡорт халыҡ йомаҡтарында был сараларҙың иң

һәйбәт үрнәктәре түпланған. Юл башы, эске һәм юл аҙағы рифмалары айырым-айырым да, бер йомаҡ эсендә бөтәһе бергә ҡушылып та бик еңел хәрәкәт итәләр.

Ап-аҡ юрған таптым —
Ер өҫтәнә яптым.

*(Ҡар.)*

Ялт-йолт ялтырай,
Ҡалт-ҡолт ҡалтырай.

*(Йәшен йәшнәү, күк күкрәү.)*

Йомаҡтарҙа рәдифле рифмалар йыш ҡына осрай. Мәҫәлән:

Ҡорап-ҡорап таш ҡуйҙым,
Ҡара һыйырым буш ҡуйҙым.

*(Усаҡ менән ҡаҙан.)*

Бер төрлө тартынҡы йәки һуҙынҡы өндәрҙең ҡабатланып килеүе лә (аллитерация, ассонанстар) йомаҡтарға музыкаллек, аһәңлек өҫтәй:

«Тей», — тиһәң, теймәй,
«Теймә», — тиһәң, тейә.

*(Ирендәр.)*

Ҡыйын ерҙә ҡыйғас ҡышлай.

*(Олтораҡ.)*

Аллитерация һәм ассонанстар күберәген ритмик быуындарҙың башында килеүсән.

Шиғри әҫәрҙәрҙәге строфа төрҙәре, нигеҙҙә, юлдар һаны һәм уларҙың үҙ-ара рифмалашыу тәртибе менән билдәләнә. Бәләкәй күләмле жанр булараҡ, йомаҡтарҙа артыҡ күп юллы, ҡатмарлы төҙөлөшлө строфалар осрамай. Шулай ҙа мәҡәлдәр менән сағыштырғанда, йомаҡ строфалары бер ни тиклем оҙонораҡ. Жанрҙың тәбиғәте һүрәт яһағанда әйбер-күренештәрҙең сифаттарын күп яҡлап тасуирлауға, һанап сығыуға, хатта айырым осраҡтарҙа, бәләкәй генә хикәйәгә урын ҡалдыра (быны беҙ алда, иген, икмәк тураһындағы йомаҡ үрнәгендә бик асыҡ күрҙек). Ике юллыҡ строфанан ҡала, өс, дүрт, хатта биш юллыҡ строфалар шаҡтай әүҙем; һирәкләп алты, ете, һигеҙ юллыҡтар осрай. Ләкин поэтик закондарға буйһоноп төҙөлгәнлектән, был строфалар ҙур күләмле булып ҡабул ителмәй.

Ике юллыҡ строфаларҙа юлдарҙың рифмалашыу тәртибе күберәген — а-а; өс юллыҡтарҙа — а-а-а, а-а-в, а-в-в, а-в-а; дүрт

юллыктарҙа — а-а-а-а, а-а-в-в, а-в-в-в, а-в-с-в, а-а-в-а, а-в-а-в; биш юллыктарҙа — а-а-а-а-а, а-а-а-в-в, а-а-в-в-в, алты юллыктарҙа — а-а-а-а-а-а, а-а-в-в-в-в, а-а-в-а-с-а, а-в-с-с-д-с, а-в-с-в-д-в ете юллыктарҙа — а-в-в-в-с-в-в, а-а-в-в-в-с-в, а-а-а-в-в-с-с, а-в-а-в-с-с-с, а-а-а-а-в-в-в; һигеҙ юллыктарҙа — а-а-а-а-а-в-в-в.

Йомаҡтарҙа шиғри һөйләм өсөн хас булған бөтә һыҙаттар бар. Айырым йомаҡтар хатта йыр ҡалыбына һалынып, көйләп әйteләләр:

Бейек кенә бейек ҡаялар,
Унда шонҡар оялар.
Ите генә хәрәм, һурпаһы хәләл —
Ул ни булыр икән, балалар?

*(Бал ҡорттары, кәрәҙ, бал.)*

Шул рәүешле хеҙмәт халҡы үҙен уратып алған тирә-йүнгә, ябай ғына әйбер-күренештәргә ғәжәйеп тәрән поэтик ҡараш ташлап, һоҡландырғыс поэтик образдар һәм үҙенсәлекле поэтик формалар тыуҙырған. Был образ һәм формалар үҙҙәренең тапҡыр һәм камил булыуҙары арҡаһында быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргәсә килеп етеп, халҡыбыҙҙың рухи йөҙөн, эстетик ҡараштарын сағылдырып торалар.

Башҡорт халыҡ йомаҡтары — башҡа халыҡтарҙың йомаҡтары кеүек үк, быуаттар төпкөлөндә тыуып, төрлө тарихи шарттар эсендә үҙ аллы ижад тармағы булып формалашҡан ҡиммәтле мираҫ ул. Социаль-ижтимағи үҫештең бөтә баҫҡыстарында ла йомаҡтар халыҡтың тормош, рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүсе мөһим бер сара булып торған.

Ижтимағи үҫештең түбәнге баҫҡыстарында йомаҡтар йәшерен телгә өйрәтеү, магиясылыҡ функцияларын үҙ эсенә алған булһа, артабан кешеләрҙең аҡыл-зиһенен һынау, зирәклек, тапҡырлыҡ тәрбиәләү функцияларын башҡарғандар. Донъяға поэтик ҡараш тәрбиәләүҙә лә уларҙың роле ифрат ҙур булған. Хатта профессиональ сәнғәте, фән һәм мәҙәниәте үҫкән совет дәүерендә халыҡтың афористик ижадына ихтыяж юғалманы.

Совет осоронда тыуған йомаҡтар репертуарына халыҡтың үҙе тыуҙырған ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре менән бер рәттән айырым авторҙар: йәмәғәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар тарафынан ижад ителгән әҫәрҙәр өҫтәлә килә.

Яҙма әҙәбиәт аша таралған йомаҡтар халыҡтың үҙ ауыҙ-тел ижады менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй, уның традицияһына нигеҙләнеп тыуа һәм үҫә. Ғөмүмән, был ике төр ижадтың бер-береһенә йоғонтоһо көслө. Революцияға тиклем ижад ителгән традицион йомаҡтар совет ысынбарлығы шарттарын-

да тулы хоҡуҡ менән йәшәне, улай ғына ла түгел, ҡулланылышта ундай әҫәрҙәр өҫтөнлөк итте. Тәбиғәт донъяһына ҡағылған йомаҡтар, кешенең тән ағзалары, күпселек көнкүреш әйберҙәре хаҡындағы әҫәрҙәр айырыуса тотороҡло.

Ә инде иҫке тормошто, иҫке ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған элекке йомаҡтарҙың ҡайһы берҙәре яңы шарттарҙа, үҙҙәренең әһәмиәттәрен юғалтып, бөтөнләй онотолоуға табан юл тотһа, икенселәре яңы тормошҡа яраҡлы рәүештә, мәғәнәләрен үҙгәртеп, яңы төшөнсәләрҙе поэтиклаштырыусы әҫәрҙәр булып киттеләр. Был тәбиғи процесс. Иҫке примитив эш һәм һуғыш ҡоралдарын, йорт эсе, кейем-һалым, хужалыҡ әйберҙәрен һүрәтләүсе ҡайһы бер боронғо йомаҡтарға хәҙерге көндә йәшәү өсөн ерлек юҡ, уларҙың ҡайһыларын хәҙер музейҙарҙа ғына күрергә була. Шуға күрә улар әкренләп йәнле репертуарҙан төшөп ҡала баралар. Әйтәйек, борон мөһим бер һунар һәм һуғыш ҡоралы булған суҡмарҙы аңлатҡан «Өйгә эленгән атаң башы», «Тупаҡ баш, йәнгә хас» кеүек йомаҡтарҙың яуабын хәҙерге йәш быуын кешеһе йә бөтөнләй әйтә алмаясаҡ, әйткән хәлдә лә икенсе аҙмы-күпме шуға оҡшашыраҡ башҡа бер төшөнсә менән алмаштырып бирәсәк. Сөнки, ҡорал булараҡ, суҡмар үҙе күптән инде халыҡтың көнкүрешенән төшөп ҡалған. Ошо уҡ сәбәп арҡаһында сыбағаш менән иген һуғыуҙы анлатҡан «Ары ла лап-лап, бире лә лап-лап, кейеҙ ҡаплап, һөңгө һаплап» тигән боронғо йомаҡтың да беҙҙең заманда тиҙ генә аңлашылып етмәгәнен әйтергә кәрәк.

Ҡайһы бер иҫке йомаҡтарҙың йөкмәткеһенә яңы мәғәнә һалып ҡулланыу ҙа хәҙер шаҡтай күп осрай. Мәҫәлән, элек ҡул тирмәнен аңлатҡан «Айыу аҡыра, йөнө ҡойола» тигән йомаҡ хәҙер инде һуҡҡыс машина төшөнсәһен бирә. Октябрь революцияһынан һуң яңы тормош тыуҙырған бик күп йомаҡ барлыҡҡа килде.

Традицион йомаҡтар шикелле, хәҙерге йомаҡтар ҙа, нигеҙҙә, шул конкрет көнкүреш әйберҙәренә, кешенең хеҙмәтенә, мәҙәниәт тормошона бәйле төшөнсәләр менән эш итәләр, ошо конкрет нәмәләрҙе поэтиклаштыралар. Яңы заман, яңы ижтимағи мөнәсәбәттәр хаҡында йомаҡтарҙа туранан-тура дөйөмләштерелгән фекер ятмаһа ла шул уҡ яңы тормоштоң конкрет әйберҙәрен ниндәй дәрәжәлә һәм нисек һүрәтләнеүенә ҡарап, халыҡтың көнкүрешен, уның тормошондағы оло үҙгәрештәрҙе шаҡтай асыҡ күҙ алдына баҫтырырға мөмкин.

Күмәк хужалыҡтарҙы яңы етештереү ҡоралдары, атап әйткәндә, яңы техника менән тәьмин итеү, крәҫтиәндең тормошон, рухи донъяһын яңыртыусы мөһим бер тарихи фактор булды. Оҙаҡ ваҡыттар буйына һуҡа менән һабан, сыбағаштан

тыш иген ҡоралы күрмәгән крәҫтиән өсөн ауылға тәүге машиналарҙың килеүе ысын мәғәнәһендә мөғжизә ине. Халыҡ үҙенең ижадында техниканы, яңы етештереү ҡоралдарын поэтиклаштырып, уларҙы образ дәрәжәһенә күтәрҙе. «Кешнәп-кешнәп ер ҡыҙыра ҡара юрғам яланда», «Әйләнә ул дырылдап, зырылдап та тырылдап, ашай һалам, төкөрә бойҙай, тауыш бирә тырылдап» — трактор менән комбайнды, мәҫәлән, йомаҡ ошо рәүешле һүрәтләне.

Халҡыбыҙҙың тормошонда киҫкен боролош тыуҙырған мәғрифәт, мәҙәниәт өлкәһендәге ҡаҙаныштар халыҡ ижадында шулай уҡ үҙенең асыҡ сағылышын тапты.

Мәғлүм булыуынса, революцияның тәүге көндәренән үк наҙанлыҡты бөтөрөү кеүек мөһим һәм кисектергеһеҙ бурыс ҡуйылды. Нәҡ бына ошо ил күләмендә ҡуйылған мөһим һәм ҡатмарлы мәсьәлә башҡорт халҡында «Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған туҙыр» кеүек мәҡәл аша үҙенең ябай, халыҡсан әйтелешен тапты.

Әгәр ҙә мәҡәлдә аң-белем, мәҙәниәткә эйә булыу тураһында дөйөмләштерелгән фекер әйтелһә, ғөмүмән, мөнәсәбәт белдерелһә, йомаҡта уҡыу-уҡытыу, мәктәп тормошона ҡағылған конкрет әйберҙәр хаҡында һөйләнелә: «Бәләкәй генә ҡағыҙға бөтә донъя һыйған», «Йылғаһы, диңгеҙе бар — һыуы юҡ» (карта). Белем шишмәһе булған китапты халыҡ ябай һүрәтләү менән генә сикләнмәй, ә бәлки уға үҙенең оло хөрмәтен дә белдерә: «Ҡат-ҡат ҡатлама, аҡылың булһа, ташлама». Уҡыу, белем алыу менән бәйле нәмәләрҙең образлаштырылып, башҡа көнкүреш әйберҙәре менән бер рәттән йөрөүе, ябай ғына булһа ла оло нәмә — халыҡтың мәҙәни тарихы тураһында һөйләүсе әһәмиәтле факт булып ҡабул ителә.

Мәҙәни тормошто сағылдырған йомаҡтар хаҡында һөйләгәндә, радио, кино, телефон, спорт, музыка ҡоралдарына бағышланған йомаҡтарҙы билдәләп үтергә кәрәк:

Үҙе һөйләй — күренмәй.

*(Радио.)*

Теҙелеп киткән күп ағас,
Япраҡ ярмаҫ ҡыу ағас.

*(Телеграмм бағаналары.)*

Аръяҡта ла яры бар,
Бирьяҡта ла яры бар.
Дүрт мөйөштә, ике ярҙа,
Йылым һымаҡ тоғо бар.

*(Бильярд.)*

Кешенең тормош-көнкүрешен кәүҙәләндереүсе яңы йомаҡтар беҙҙә әле бик аҙ йыйылған. Ләкин булған тиклем материал да халҡыбыҙ тормошондағы үҙгәрештәрҙе шаҡтай асыҡ күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек бирә. Элекке һике урынына — карауат, мейес-сыуалдар урынына — йылытҡыс батареялар, май шәмдәре урынына — электр лампалары — былар бөтәһе лә йомаҡтарҙың һүрәтләү объекты булып өлгөрҙө:

Ике баш, дүрт аяҡ,
Осратырһың һәр өйҙә.

*(Карауат.)*

Түр башында йылы гармун
Бөтә өйҙө йылыта.

*(Батарея.)*

Шулай итеп, тормоштағы һәр бер мөһим күренеш йомаҡтарҙа, башлыса балалар ижадында, үҙенсәлекле сағылыш таба бара. Түбәндәге йомаҡтар ҙа шуға миҫал:

Беренсе, икенсе, өсөнсө...
Айға менгән бишенсе. Ул ни?

*(Ер юлдаштары һәм айҙағы вымпел.)*

Аяғы юҡ, ҡулы юҡ — йөрөй,
Ауыҙы юҡ — тауыш бирә,
Күҙе юҡ — күрә,
Төшөрөп ергә бирә.

*(Айҙың икенсе яғын төшөрөүсе ракета.)*

Йомаҡтар репертуары хәҙерге шарттарҙа күберәген яҙма әҙәбиәт аша ингән төрлө әҫәрҙәр иҫәбенә байыға. Балалар яҙыусылары һәм мәктәп йәшендәге балалар, йәш үҫмерҙәр ижад иткән йомаҡтар шаҡтай йыш осрай. Бына шуларҙың ҡайһы берҙәре:

Әйтәйем бер йомаҡ:
Йәйен һоро, ҡышын аҡ,
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, ҙур ҡолаҡ —
Нимә икәнен уйлап тап. *(Ҡуян.)*

Ерҙә ята табаҡ,
Исеме уның... *(Ҡабаҡ.)*

Былдай йомаҡтар, ғәҙәттә, гәзит-журналдар, дәреслектәр, радио аша таралалар һәм тора-бара үҙҙәренең авторҙарын юғал-

тып, халыҡлашып китәләр. Әлбиттә, айырым авторҙар тарафынан сығарылған йомаҡтарҙың иң уңышлылары, иң һәйбәттәре генә дөйөм репертуарға инеү «һәләтенә» эйә.

Хәҙерге йомаҡтарҙың күпселеге боронғо традицияға нигеҙләнеп тыуа һәм йәшәп китә. Һөйләм төҙөлөшө яғынан ике киҫәклелек, ритмик ойошҡанлыҡ, йыйнаҡлыҡ, тапҡырлыҡҡа ынтылыу кеүек жанрҙың йөҙөн билдәләүсе һыҙаттарҙы яңы йомаҡтар тап ана шул традицион йомаҡтарҙан алалар. Теге йәки был образды тыуҙырыуҙа мөһим роль уйнаған һүрәтләү алымдары ла үҙҙәренең тамырҙары менән боронғо формаларға барып тоташа. Трактор тураһындағы йомаҡтар, мәҫәлән, шундайҙарҙан:

Кешнәп-кешнәп ер ҡыҙыра ҡара айғыр яланда.

Оло танау ҡара үгеҙ ерҙе йыра аяуһыҙ.

Тәүге ҡараштан уҡ был йомаҡтарҙың традицияға нигеҙләнеп барлыҡҡа килгәнлектәре күҙгә бәреләә: беренсенән, бында башҡорт фольклорында йыш осрай торған мал, ат образы, икенсенән, традицион йомаҡтарға бик ныҡ хас булған метафоралылыҡ. Шул уҡ тракторҙы аңлатҡан:

Ашамай ул бесәнде,
Ҡапмай ул һаламды.
Үҙе китә һөйрәтеп,
Ун бер кәҫле һабанды, —

тигән йомаҡ иһә бөтөнләй икенсе характерҙа. Был йомаҡта традиция ла, яңылыҡ та бар. Традициялылығы унын, бер яҡтан, ҡаршы ҡуйыу, йәғни антитезаға ҡоролғанлығында булһа (ә был — боронғо йомаҡтарҙа йыш осрай торған алым), икенсе яҡтан, предметты унын сифаттары, эш-хәрәкәттәре буйынса һүрәтләүендә (был шулай уҡ традицион йомаҡ төҙөүҙең бер юлы). Йомаҡтағы яңылыҡ — унын формаһында, йәғни профессиональ шиғыр ҡалыбына ҡоролған булыуында.

Яңы дәүерҙә халҡыбыҙҙың афористик әҫәрҙәр фондын киңәйтеүҙә туғандаш халыҡтарҙың, бигерәк тә рус халҡының, ижад йоғонтоһо мөһим роль уйнай. Быуаттар һуҙымында халыҡтарҙың бер дәүләт эсендә йәшәп, үҙ-ара аралашыуҙары, мәктәптәрҙә рус телен уҡытыуға ҙур урын бирелеүе, рус телендә сыҡҡан китаптарҙың һ. б. матбуғат баҫмаларының төрлө тәржемәләр рәүешендә таралыуы быға сәбәпсе булған. Бер үк төрлө шарттар, бер үк маҡсат төрлө милләт халыҡтарының рухи яҡынлығын тыуҙыра, шуға күрә бер халыҡтың ижад емеше икенсе халыҡта күп ваҡыт үҙенеке итеп ҡабул ителә. Рус теле аша ингән:

Бейек-бейек тауҙарҙа,
Зифа буйлы талдарҙа
Йүгерә-йөрөй аҡ сәкмән, —

тигән йомаҡтың, мәҫәлән, Башҡортостандың төрлө райондарында яҙып алыныуы беҙгә ошо хаҡта һөйләй.

Әммә шуны ла әйтмәй булмай: кешеләрҙең тормошона, уларҙың йәшәү рәүешенә ҙур йоғонто яһаған китап, радио, телевидение, интернет кеүек күренештәр йомаҡ ҡойошоу традицияларын ҡырҡа һүлпәнәйтте, күрәһең. Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған фольклор экспедициялары материалдары араһында йомаҡтарҙың бик аҙ теркәлгәнлеге күҙгә ташлана. Балаларға тәғәйенләнгән матбуғат баҫмаларындағы авторҙар сығарған йомаҡтарҙың халыҡлашып китеүенә лә артыҡ өмөт юҡ, быны тик ваҡыт ҡына күрһәтер. Шулай ҙа был китапҡа ундайҙарҙан айырым үрнәктәр алырға тура килде. Йыйынтыҡтың текст өлөшөндә улар йондоҙсоҡ (*) менән билдәләнде, ҡайһылары «Аңлатмалар»ҙа иҫкәртелде. Дөйөм алғанда иһә йомаҡтарҙа башҡорт халҡының үткәндәре һәм хәҙерге тормош-көнкүреше, уның донъяға ҡарашы, художество фекерләүенең үҫеше хаҡында ғәйәт күп мәғлүмәттәр ята. Шуға күрә беҙ был поэтик хазинаны халҡыбыҙҙың ижтимағи һәм рухи мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн ҡиммәтле, ғилми әһәмиәте һис ҡасан кәмемәй торған мөһим бер сығанаҡ итеп ҡарай алабыҙ. Ошоларҙы иҫкә алып, халыҡтың юғары поэтикалы традицион йомаҡтарын туплаған төрлө күләмдәге йыйынтыҡтарҙы әленән-әле баҫтырып тороу зарур. «Мәҡәл — тел аҫҡысы, йомаҡ — зиһен аҫҡысы» тип, юҡҡа ғына әйтмәгән бит ата-бабаларыбыҙ.

Уҙған быуаттың аҙағында паремик жанрҙарҙы лингвофольклористика фәне юҫығында өйрәнеүҙә, айырыуса мәҡәл һәм йомаҡтарҙың структураһын тикшереү буйынса, сит илдәрҙә (А. Дандис, М. Кууси, А. Крикманн, Э. Кенгэс-Маранда), шулай уҡ Рәсәйҙә (Г. Пермяков, И. Левин, А. Жалковский, Ю. Щеглов) ғилми хеҙмәттәр донъя күрҙе. Ундай тикшеренеүҙәрҙең ыңғай яҡтарын иҫәпкә алып (формализмға бирелмәйенсә) башҡорт халҡының паремик ижадын өйрәнеү — киләсәкке бурыстарҙың береһе булып ҡала.

*Фәнүзә Нәҙершина*

# ТӘБИҒӘТ

## I. ЕР ҺӘМ КҮК. ТӘБИҒӘТ КҮРЕНЕШТӘРЕ

### Йыл хисабы

1. Өс йөҙ алтмыш биш сыйырсыҡ,
Ҡырҡ һигеҙ тубырсыҡ,
Ун ике аҡҡош, бер торна,
Шуны белмәй ултырма[1].

2. Өс йөҙ алтмыш биш бала турғай,
Ҡырҡ һигеҙ инә турғай,
Ун икеһе аҡҡош,
Шуны белмәгән — йолҡош.

3. Ун ике ыласын,
Ҡырҡ һигеҙ сәүкә,
Өс йөҙ алтмыш биш сыйырсыҡ
Бер йомортҡа һалдылар.

4. Өс йөҙ алтмыш биш бала ҡаҙ,
Ҡырҡ һигеҙ инә ҡаҙ,
Ун икеһе өйрәк,
Шуны белмәгән — дурак.

5. Ун ике батыр егет
Өс йөҙ алтмыш биш өйрәк
Алып ҡайттылар.

6. Ҙур тирәк,
Ун ике ботаҡ,
Ботаҡ һайын дүрт тармаҡ,
Тармаҡ һайын ете япраҡ,
Япраҡтың бер яғы ҡара,
Бер яғы аҡ,
Уйлап тап та менеп ят[2].

7. Яҙ ҙа килә арғымаҡ,
Көҙ ҙә килә арғымаҡ,
Ун ике япраҡ аҫтында
Юшап йөрөй арғымаҡ.

8. Бер тирәк,
Ун ике ботаҡ,
Һәр ботаҡта дүрт һабаҡ,
Һәр һабаҡта ете япраҡ.

9. Бер имән үҫә:
Ун ике сатлы,
Ҡырҡ һигеҙ ботаҡлы,
Һәр ботағында етешәр япраҡ бар.

10. Бер өйәңкелә ун ике ботаҡ,
Ботаҡ һайын утыҙ япраҡ,
Һәр япраҡтың бер яғы ҡара,
Бер яғы аҡ.

11. Өйәңке, өйәңке,
Ботаҡ һаны — ун ике.
Һәр ботаҡтың дүрт тармағы,
Һәр тармаҡтың ете япрағы,
Ҡара булыр бер яғы,
Аҡ булыр бер яғы.

12. Бер баҡса,
Баҡсала ун ике түтәл,
Түтәл һайын утыҙ үҫемлек,
Үҫемлектә дүрт емеш,
Бер емештә ете бүлек,
Бүлек һайын егерме дүрт орлоҡ.

13. Бер күркә,
Ун ике аҡҡош,

Илле ике инә ҡаҙ,
Өс йөҙ алтмыш биш бала ҡаҙ.

14. Ун ике аҡҡош осоп бара,
Бүлкә-бүлкә төшөп бара;
Һәр бер бүлкәлә өсәр ҡош,
Һәр бер ҡошта дүртәр ҡанат,
Һәр бер ҡанатта ете ҡауырһын,
Һәр бер ҡауырһында егерме дүрт мамыҡ.

15. Ун ике йондоҙға бер ай.

16. Өс йөҙ алтмыш биш турғай,
Ҡырҡ һигеҙ һайыҫҡан,
Ун ике торна, бер аҡҡош.
Белә алһаң, һин тутыйғош,
Белә алмаһаң, һин байғош.

17. Тирмә, тирмә,
Тирмә башы кирмәгә,
Эсе ун ике кирәгә.

18. Донъяла бар бер ағас,
Өс йөҙ алтмыш биш япрағы,
Япрағының бер яғы аҡ,
Бер яғы ҡара,
Ни булыр шул?
Йә, әйтеп ҡара!

19. Бер ағас,
Был ағаста ун ике ботаҡ,
Һәр ботаҡта утыҙ япраҡ,
Һәр япраҡтың бер яғы ҡара,
Бер яғы аҡ.

20. Бер төп борсаҡ,
Ун ике ҡуҙаҡ,
Шулар эсендә
Өс йөҙ алтмыш биш борсаҡ.

21. Ун ике сыйырсыҡ,
Илле ике тубырсыҡ.

## Ай эсендә көн иҫәбе

22. Бер сүлмәктә утыҙ балан,
Утыҙына бер исем.

23. Torойҡ-торойҡ торналар,
Торҡолдашып баралар,
Утыҙлаған йомортҡаны
Бер ояға һалалар.

24. Әләләй, һәләләй,
Оя тапмай, йомортҡа һалмай,
Айына утыҙ балалай.

25. Ҡыйҡым, ҡыйҡым, ҡыйҡым ҡош,
Ҡыйҡылдашып бара, имеш.
Утыҙлаған йомортҡа
Ояһында ҡала, имеш.

26. Утыҙ улын теҙгән,
Урындарын биргән.

## Йыл эсендәге айҙар

27. Ун ике аҡҡош ҡыуыша,
Берен-бере уҙа алмай.

28. Ун ике аҡҡош, бер торна,
Шуны белмәй ултырма.

29. Ун ике ботаҡ аҡ тирәк.

30. Ун ике туған,
Теҙелешеп торған.

31. Бар ун ике батыр,
Береһе артынан икенсеһе йөрөп ятыр,
Йөрөр, йөрөр ҙә,
Тағы әйләнеп, урынына ҡайтыр.

32. Аҡ тирмә,
Күк тирмә,
Ун ике индем,
Бер сыҡтым.

## Декабрь, ғинуар, февраль, март айҙары

33. Ду-ду итә дүрт бүре,
Дүртеһе лә күк бүре.
Дүртеһе лә йөн тетә,
Тештәре һөйәккә үтә.

## Аҙна, көн

34. Ете елкенсәк,
Бер һелкенсәк.

35. Ете елпенгән,
Бер талпынған.

36. Бер ояла ете йомортҡа.

37. Ете туған юлға сыҡты,
Етеһе лә бер йәштә,
Исемдәре башҡа[3].

## Сәғәт һәм уның минуттары

38. Бер тауыҡ аҫтында алтмыш йомортҡа.

## Көн менән төн

39. Ике туған,
Береһе аҡ булған,
Береһе ҡара булған.

40. Тирмәм эсе аҡ булғанда,
Тышы ҡара булалыр.
Тирмәм эсе ҡарайғанда,
Тышы аҡтан булалыр.

41. Донъяла бар бер йәнлек,
Уның бер яғы аҡ,
Икенсе яғы ҡара.

## Көн

42. Кисен үлә,
Иртән терелә[4].

## Төн

43. Ҡара һыйыр килде,
Бөтөн донъяны еңде[5].

44. Көндөҙ үлә,
Кис терелә.

## Йыл миҙгелдәре

45. Береһе — сәрхәт,
Береһе — михнәт.

46. Бер ҡарттың ун ике улы бар,
Шуларҙың өсәүһе һоро көпө кейә,
Өсәүһе йәшел күлдәк кейә,
Өсәүһе һары сәкмән кейә,
Өсәүһе аҡ тун кейә.

47. Дүрт ҡоҙағый йүгерәләр,
Береһен-береһе уҙа алмайҙар.

## Яңы йыл

48. Яңы тыуған малай —
Бөтәһенә ағай[*].

## Ҡыш

49. Бабайым килә һағынып,
Аҡ толобон ябынып.

50. Бер ҡарт килә ҡағынып,
Ауа-түнә абынып,
Аҡ сәкмәнен ябынып.

51. Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ, бабай.

52. Ҡурыштыра, бөрөштөрә,
Ике ҡулды һуғыштыра.

53. Донъяла бер аҡ тана,
«Мин көслө», — тип маҡтана.

54. Битеңде алландырыр,
Өҫтөңдө ҡарландырыр*.

## Яҙ

55. Алтын ҡашлы,
Көмөш башлы,
Туҡһан ике йәшле[6].

56. Ҡара мыйыҡлы еҙнәм
Һағынып-һағынып килгән.

57. Аҡ юрғанын ташлай,
Һыртын аса башлай.

## Ҡыш, яҙ

58. Аҡ күбәләк осоп китте,
Ҡара ҡарға килеп ҡунды.

59. Аҡ юрғаным алып ҡуйҙым,
Йәшел юрғаным йәйеп ҡуйҙым.

## Яҙ менән көҙ

60. Тауҙа тараҡ,
Ике ботаҡ,
Берәүһе гөллө,
Берәүһе гөлһөҙ.

## Март айы

61. Ун икенең — мин бере,
Тирәккә тағам бөрө*.

## Йәй, йәй айҙары

62. Йәшел елән йәйеп ҡуйҙы,
Бар ҡайғыны алып ҡуйҙы.

63. Кейгән кейеменең беҙәге
Бар донъяны биҙәне.

64. Бер байҙың өс бисәһе бар,
Көнө-төнө йүгерәләр,
Барыһына ла өлгөрәләр,
Беҙгә ризыҡ килтерәләр.

65. Берәүҙең өс килене,
Өсөһө лә егәрле,
Көнө-төнө эшләйҙәр,
Беҙгә ризыҡ өҫтәйҙәр.

## Көҙ

66. Ашай ҙа ашай,
Илай ҙа илай,
Бала-сағаны
Өйгә ҡыуалай[7].

67. Үҙе илай[8], үҙе һыйлай.

68. Үҙе туҡ кеүек,
Ҡайғыһы юҡ кеүек,
Илай башлаһа — туҡтамай.

## Ваҡыт

69. Тыны ла юҡ, йәне лә юҡ,
Тынып торған сағы ла юҡ.
Йүгерә-йүгерә үтә бара —
Уңға-һулға боролошо юҡ*.

## Күк күкрәү, йәшен йәшнәү, ямғыр

70. Һарайҙағы һары айғырым
Һағынғанда кешнәйҙер.

71. Ағайымдың айғыры тибешә,
Еңгәмдең үгеҙе һөҙөшә.

72. Юғарыла яу ҡупҡан.

73. Дөбөр-дөбөр итер,
Дөбөрләп китер,
Ялт-йолт итер,
Ялтырап китер.

74. Беренсеһе ялтырай,
Икенсеһе шалтырай.

75. Ағайымдың ҡапҡаһы
Шарт-шорт итеп асылды.
Ағайымдың кәртәһе
Ялт-йолт итеп ватылды.

76. Ҡәҙерməттең ҡапҡаһы
Шалтырай ҙа шалтырай,
Ҡолағында алҡаһы
Ялтырай ҙа ялтырай[9].

77. Ялт итте, йолт итте
Ағиҙелдең ҡапҡаһы.
Шарт итте, шорт итте
Ҡарурмандың арҡаһы.

78. Ағиҙелдең ҡапҡаһы ялт-йолт итә,
Ҡарурмандың кәртәһе шарт-шорт итә.

79. Ҡара ҡаҙ ҡаңҡ-ҡаңҡ итә,
Ҡанат осо ялт-йолт итә[10].

80. Күтәрелде, бәрелде,
Күк ишеге ярылды.
Шарт итте, шорт итте,
Ялт итте, үтеп китте.

81. Ыу-ыу итә, геү-геү итә,
Туғыҙ миллионға етә.

82. Дөбөр-дөбөр Домбай килә,
Бөтә урамды һелкетеп.
Домбай артынан еңгәм килә,
Лыстыр еңен һелкетеп.

83. Дөбөр-дөбөр ҡоҙа килә,
Бөтә урамды һелкетеп.
Ҡоҙа артынан мин дә киләм,
Ике еңем һелкетеп.

84. Ала ҡаҙы ҡалтыр-ҡолтор,
Ҡанат осо ялтыр-йолтор.
Балаһы илай вәр-вәр,
Танауы ҡанай шар-шар.

85. Ҡара ҡаҙым ҡаңҡ итте,
Ҡанат осо ялт итте.

86. Һаҡмарҙағы һары айғырым
Һағынып тороп кешнәһә,
Билтерҙәге[11] биш бейәм,
Бишеһе лә ҡолонлай;
Ҡолондары һары ала,
Тирә-яҡҡа тарала.
Уны күргән бәндәнең
Зиһендәре тарала.

87. Ялт-йолт ялтырай,
Япан ағас ҡалтырай.
Ынйы һымаҡ теҙелә,
Ебәк һымаҡ һуҙыла.

88. Ағиҙелдә аҫау айғыр
Урал аша кешнәйҙер,
Һаҡмарҙағы һары бейә
Тау һыртынан төшмәйҙер.
Ҡолондары ҡаралыр,
Аҡтыр, күктер,
Һөйөнгән әҙәм күптер.

89. Тап итте — таба ярылды,
Шап итте — айран түгелде.

90. Айыу аҡыра, йөнөн ҡоя,
Халыҡ һыуға туя.

91. Бик иркен зәңгәр болон,
Көтөүсе унда улым.
Сыбырткыһы шарт итә,
Тирә-яғы ялт итә*.

## Ялағай

92. Ялман уты ялтылдай.

93. Ялман уты ялтыраҡ,
Тауышы-тыны юҡ.

94. Ялман ялап ала,
Ялаған ере янмай ҡала.

## Йәшен

95. Ем-ем итә,
Емелдәп китә.

96. Боҙ өҫтөндә болан уйнай,
Ҡойроғонда йылан уйнай.

97. Өй башында ялт та йолт.

98. Тәңәүелдә тәңре ҡамсыһы.

99. Йылтыр, йылтыр, йылт итә,
Йылтырбикә йөн тетә.

100. Өнө бар — үҙе юҡ,
Төҙәп атырға күҙе юҡ.

101. Ялт-йолт итте,
Йылғаға төшөп китте.

102. Ялт-йолт итте,
Тамырланып та китте.

103. Ялт-йолт итә,
Ете саҡрым ер китә.

104. Ялт-йолт итер —
Тейгән ерен юҡ итер.

105. Бер күренер — юғалыр,
Тейгән ерен ут алыр.

106. Уҡ атылды — борсағы сәселде[12].

107. Өй түбәмдә сатлы ҡамсы.

108. Өй башында сатлы-сотло тимерсыбыҡ.

## Болот

109. Аяғы ергә етмәҫ
Башы күккә теймәҫ.

110. Йомабикә юрғаны,
Лаҫтыр-лоҫтор туҙғаны[13].

111. Ҡат-ҡат-ҡат кейеҙ,
Ҡатланмаған аҡ кейеҙ.
Һоро-һоро-һоро кейеҙ,
Һырланмаған һор(о) кейеҙ.

112. Ҡояштан көслө,
Елдән көсһөҙ.

113. Аяғы юҡ — ил гиҙә,
Күҙҙәре юҡ — йәш түгә[14].

114. Унда сабыр, бында сабыр
Ҡара атым,
Тау башынан дыулап барыр
Ҡара атым.

115. Күк түбәлә күк түшәк,
Ҡуйылған шунда түшәп,
Елдәр иҫһә, ҡабара,
Ергә төшһә, тарала[15].

116. Ҡайғы белмәһәк тә илайбыҙ.

117. Оңғол да соңғол,
Ҡат-ҡат ҡабара,
Һыуы барҙа ҡарала,
Һыуы бөтһә, таҙара.

118. Килә-килә күп була,
Илай-илай юҡ була.

119. Урман аша апара таша.

120. Тау башында ямаулы турпыша.

121. Түбә өҫтөндә түңгәк.

122. Үҙе аға — яры юҡ,
Барып еткән ере юҡ.

123. Юҡтан бар була,
Барҙан юҡ була.

124. Бара ла бара,
Тауҙарҙы яра,
Толомо ҡара,
Өҙөлөп ҡала.

## Болот, ямғыр

125. Урман аша сапсаҡ таша.

126. Ел-дауыллап етә килер,
Ике еңен һелкә килер,
Ялан, һаҙҙан үтә килер,
Ҡайын һыуын һибә килер.

127. Түбә арҡылы ҡаҙ үтте,
Бөтөн ерҙе һаҙ итте.

128. Лыҫтыр унын башы,
Ҡара унын ҡашы,
Гел түгелә йәше.

129. Көнбикәнең күбәһе,
Күбеп сыҡҡан түбәһе.
Төпкенәһен асҡан,
Тишелгән дә аҡҡан.

130. Елә-елә елә килер,
Ҡайынһарға[16] кӗрә килер,
Ҡайын һыуын эсә килер.

131. Кәмә йөрөй, кәмә йөрөй,
Артынан һыу тама йөрөй.

132. Ала икән, ҡола икән,
Ҡара икән, бара икән;

Аҡ икән, күк икән,
Кеше араһында юҡ икән.

133. Ала икән, ҡола икән,
Аҡ икән, ҡара икән,
Ҡайҙалыр бара икән,
Күҙ йәше тама икән.

134. Биҙрәһе юҡ, сапсағы юҡ —
Һыуы ҡойола.

135. Ҡара төйөнөм сиселде,
Төймәләре сәселде.

136. Аҡ мунсағым асылды,
Эсенән ебәк сәселде.

137. Күктән килде, ергә китте[17].

138. Көтәләр, көтәләр,
Килһәм — ҡасып бөтәләр.

139. Елбикә алып килгәнде
Ербикә йотоп алған.

140. Килһә, тәҙрә сиртә[18].

141. Ҡанатын йәйеп ҡаҙ килә.

142. Һауанан килә,
Һауанан уҙа.
Һауанан тороп,
Юлдарҙы боҙа[*].

## Болот, ямғыр, ер

143. Албаҫты кеүек баҫты,
Ҡояшты йотто —
Ер боҫто,
Ауыҙын да асмай
Албаҫтыны упты.

## Ямғыр, ер, үлән

144. Береһе сәсә,
Береһе эсә,
Береһе үҫә[19].

## Болот, йәшел үлән

145. Күктә күгәрсен,
Ерҙә әберсен.

## Йәйғор

146. Өй түбәмдә саңғы юлы.

147. Өй түбәмдә аллы-гөллө ебәк билбау.

148. Һыу өҫтөндә төҫлө көйәнтә.

149. Таҫмалана, дуғалана
Аллы-гөллө йәшел суҡ.

150. Урман аша төрлө таяҡ ташланым.

151. Аллы-гөллө яулығымды
Ситән аша ырғыттым.

152. Эй әлем суҡ, әлем суҡ,
Аллы-гөллө йәшел суҡ,
Өй түбәмә элгән суҡ.

153. Өйөм түбә ашаһынан
Ала арҡан ташланым.

154. Аллы-гөллө көйәнтәмде
Йылға арҡылы ташланым[20].

155. Ағиҙел аша алтын дуға ырғыттым.

156. Һыр, һыр, һыры бар,
Һырлап торған нуры бар.

157. Һыр-һыр һыры бар,

Ете төрлө нуры бар,
Ете ҡат күккә юлы бар[21].

158. Урман аша алтын дуға ташланым.

159. Ул ниндәй күпер?
Үҙе матур, үҙе таҡыр —
Бер кем сыға алмай.

160. Ҡыҙыл икән, ал икән,
Йәшел икән, һар(ы) икән,
Кеше йөрөмәҫ, атлы үтмәҫ —
Шундай күпер бар икән.

161. Күк диңгеҙгә күпер һалдым,
Сыға алмай тороп ҡалдым.

162. Аҡһыл, һары, йәшел таҫма —
Биҙәлгән гүзәл дуға.
Бөгөн күреп, шул дуғаны
Хайран ҡалдым шуға.
Эленгән ере бейек,
Дуғаға булмай тейеп*.

## Ҡояш

163. Алатауҙа алып[22] ҡалҡаны.

164. Алып батыр килгән,
Ҡалҡанын түргә элгән.

165. Өй башында һары май.

166. Эҫе майлы тәрилкә.

167. Өйөм башы оло икмәк[23].

168. Ҡыҙыл һыйыр тау ялай.

169. Тау башында алтын тәңкә ялтырай.

170. Тау башында әүен яна,
Ҡараһам, күҙемдең яуын ала.

171. Мейес төбөндә бер ҡалас.

172. Балтаһыҙ, ҡулһыҙ боҙ вата.

173. Аллы-гөллө ал сәскә,
Тирә-яғы мунсаҡлы.

174. Урмандан сығар,
Ҡойроҡ осо сып-сыбар.

175. Урман аша шеш тимер.

176. Иртән ҡаҙай һөңгөһөн,
Кисен ҡаҙай һөңгөһөн,
Ҡарап йөрөй көндөҙөн.

177. Килә, килә, көлә килә,
Бар йылыһын бирә килә.

178. Егет егетлеген итә —
Йылмайып, боҙ иретә.

179. Алтын эйәр — ҡашы,
Ал тирмән — ташы,
Йөҙ егерме йыл йәшәй
Уны белгән кеше.

180. Донъя биҙәр йәм бит ул,
Һүнмәй торған шәм бит ул.
Алыҫ булһа ла үҙе,
Балҡып нурлана йөҙө*.

181. Иртән килә, кис ҡайта.

182. Иртән менә, кис төшә.

183. Менгән һайын асыла бара,
Төшкән һайын йомола бара.

184. Күктә кәбән яна.

185. Тау артынан ут сыҡҡан.

186. Тау башында ут яна.

187. Тау башында еҙ төймә,
Ергә төшһә — ер көлә,
Һыуға төшһә — һыу кибә.

188. Икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙҙә
Алтын эшләпә йөҙә*.

189. Көн буйына бешереп,
Тәгәрәй ҡыҙған таба.
Ҡайнар тиргә төшөрөп,
Һүрелә кискә табан.
Ул нимәкәй, кем таба?

## Ҡояшты болот ҡаплау

190. Яҡтыны япраҡ ҡапланы,
Ер йөҙөн томан ҡапланы.

## Ҡояш менән ай

191. Ағаһы энеһенә ҡунаҡҡа килә,
Энеһе ағаһынан ҡаса килә[24].

192. Күк тирмәнең эсендә
Булыр ике туп,
Көндөҙ береһен тот,
Төндә береһен тот.

193. Алтыным китте,
Көмөшөм килде[25].

194. Алтын хужа яланға сыҡты,
Көмөш хужа яландан ҡайтты[26].

195. Ике аҡҡош алмаш оса —
Береһе көндөҙ, береһе төндә,
Берен-бере ҡыуып етә алмай.

196. Ике аҡҡош ҡыуыша,
Беренә-бере етә алмай.

197. Иртә лә, кис тә өйөн алмаштыра.

198. Бағанаһыҙ, бауһыҙ сатыр эсендә
Филтәһеҙ, майһыҙ ике шәм.

199. Иртән сыға,
Кисен юғала.
Унының урынына
Иптәше ҡала.

## Ҡояш нуры

200. Кирәгәм осонан инде,
Түр башына менде.

201. Тәҙрәнән тәҙрәгә
Алтын орсоҡ үткән[27].

202. Тәҙрә аша алтын таяҡ үткән.

203. Тәҙрә аша еҙ һөңгө.

204. Һыуға төшә — еүешләнмәй,
Ергә төшә — бысранмай.

205. Урман аша үтә,
Тау аша үтәлмәй.

206. Тәҙрәнән һыйҙы,
Ишектән һыйманы,
Һандыҡҡа һыйҙы,
Һалып бикләп булманы.

207. Шаҡылдатмай, ишекте асмай — өйгә инә.

208. Тәҙрәмде ҡаҡмай,
Асмай, ватмай —
Быяла аша өйгә инә.

209. Тәҙрәмдән керҙе,
Иҙәнемә йәйелде.

210. Ҡыуҙым, ҡыуҙым — китмәне,
Ваҡыты етте,
Үҙе белеп китте.

211. Өйөм урата ут сыҡты.

212. Урманға төшмәй,
Ҡырға төшә. Ул нимә?

213. Лампа түгел — яҡтырта,
Мейес түгел — йылыта.

## Ҡояш байыу

214. Зәңгәр балаҫ эсендә
Түңәрәк көҙгөм юғалды.

215. Күк сымылдыҡ эсендә
Түңәрәк көҙгөм юғалды.

## Ҡояш, ай, йондоҙҙар

216. Кирәгәһеҙ күк тирмә —
Төндөгөндә ике аҡ таш,
Кейеҙендә мең ваҡ таш.

217. Төнгө ҡунағы иртәнгә ҡалмай,
Көндөҙгө ҡунағы кискә ҡалмай.

218. Бер атаһы, бер анаһы,
Йәнә йөҙ мең балаһы.

## Ҡояш, болот, йылға

219. Уты юҡ — яна,
Ҡанаты юҡ — оса,
Аяғы юҡ — йүгерә.

## Ай

220. Ағас башында көмөш алҡа.

221. Ағас башында алтын йөҙөк,
Уның бер яртыһы өҙөк.

222. Күктә тора кәүҙәһе,
Ергә төшә шәүләһе.

223. Көндөҙ йоҡлай,
Кис булһа уяна.

224. Өй башында ярты икмәк[28].

225. Ҡапҡа башында Ҡобрам мөгөҙө.

226. Ябыҡ тирмәлә ярты икмәк.

227. Бәләкәй генә икмәк
Бөтә ғаләмгә етә.

228. Күк һыйырҙа көмөш мөгөҙ.

229. Кәштә башында аҡ ҡалас.

230. Кәштә башында ярты күмәс.

231. Тәгәс тулы аҡ май.

232. Күк тирмәлә көмөш ырғаҡ элдем.

233. Төндә йылмая,
Көндөҙ юғала.

234. Төндә түтәй ҡалҡынған,
Ҡарап ҡала артымдан.

235. Төндә ауыҙын йыра,
Таң атһа, юғала.

236. Ураҡ түгел — кәк(е)ре,
Ҡояш түгел — яҡты.

237. Бер ҡараһаң, кителер,
Бер ҡараһаң, бөтәйер —
Үҙен күрә бөтә ер*.

238. Бер мәлендә ул — йом(о)ро йомғаҡ,
Бер мәлендә ул — нәҡ ураҡ.
Арымай ҙа, талмай ҙа,
Йөрөй гел ерҙе урап*.

239. Ҡай ваҡыт ҡояш кеүек,
Ҡай ваҡыт ураҡ кеүек.

240. Кирәгәм башы аҡ яулыҡ.

241. Кирәгәм осо асыла төштө,
Аҡ тәңкәһе сәселә төштө.

242. Төпһөҙ даръя төбөндә
Көмөш беләҙегем ята.

243. Күк яланда тай әҙе,
Ярылып ята бер үҙе[29].

244. Тигеҙ ерҙә тай эҙе.

245. Үҙенең нуры юҡ,
Кешенән нур ала.
Урландыҡ нур менән
Кем шулай алдана?*

## Һыуҙағы ай шәүләһе

246. Төндә йөрөй — ятмай,
Һыуға сума — батмай;
Аҡмай, йөҙмәй, тик тормай,
Тик торһа ла тоттормай.

## Күк йөҙө

247. Тимгел-тимгел тимгел таш,
Тимгел-тимгел ала таш,
Күрер күҙгә күркәм таш,
Күтәрергә ауыр таш.

248. Күсәбайҙың күк тирмәһе
Ҡатланған да ҡапланған.

249. Зәңгәр ашъяулыҡ бөтә донъяны ҡаплаған.

## Күк, йондоҙҙар, ай

250. Ере үлсәнмәгән,
Малы һаналмаған,
Көтөүсеһе мөгөҙлө[30].

## Йондоҙҙар, күк йөҙө

251. Ай янында алтмыш күҙ,
Алтмышы ла алтын күҙ.

252. Бабамдан ҡалған киң балаҫҡа
Төн йоҡламай ынйы һиптем.

253. Гәүһәр һиптем — ергә төшмәй,
Алайым тиһәм — буйым етмәй.

254. Күк келәмгә ынйы һиптем.

255. Зәңгәр балаҫҡа ынйылар һибелгән,
Балаҫына ултырып булмай,
Ынйыларын алып булмай.

256. Йәйелгән балаҫ,
Сәселгән борсаҡ,
Борсағын йыйып булмай,
Балаҫына ултырып булмай.

257. Боҙ өҫтөнә борсаҡ һиптем.

258. Тәтәйбикә тәңкәләрен
Тимгел-тимгел һипкәндәр,
Төндә ҡарап үткәндәр,
Таңда йыйып киткәндәр.

259. Атайымдың бер туны бар — ябынып булмай,
Эсе тулы ваҡ ынйы — һанап булмай.

260. Бейек тауҙың башында тимер ҡаҙыҡ
ялтырай.

261. Өй башында сыбар кейеҙ.

262. Аҡтыр үҙе, юғары,
Йым-йым итеп ултыра,
«Бөгөн таңда килмәһәң,
Китәмен», — тип ултыра.

263. Әбейемдең мең күҙе бар,
Йым-йым итеп ултыра.
«Бөгөн таңда килмәһәң, —
Китәм», — тиеп ултыра.

264. Беҙ, беҙ, беҙ инек
Беҙ ун ике ҡыҙ инек.
Бер таҡтаға йыйылдыҡ,
Таң атҡансы юҡ булдыҡ.

265. Барҙыр бер ҡатын —
Бармаҡтары бары алтын.

266. Кирәгәһеҙ күк тирмәнең
Эсе тулы ҡырсынташ[31].

267. Ваҡ ҡыналыр үҙҙәре,
Йылтырайҙыр күҙҙәре.

Ваҡ ҡыналар үҙҙәре,
Төндә баҙлай күҙҙәре.

268. Күл тулы алтын балыҡ.

269. Алтын алҡанан тама,
Тамсыһы ергә етмәй.

270. Һан етмәҫлек еҙ ҡаҙауым
Бер таҡтаға ҡағылған.

271. Өй башында ваҡ-ваҡ алтын ҡаҙаҡ.

272. Өй башында еҙ иләк.

273. Өй башында алтын кейеҙ.

274. Өйөм башы ҡырсынташ.

275. Өйөм башына тары һиптем.

276. Төндә ҡараһам — күк тулған,
Иртән ҡараһам, юҡ булған.

277. Төндә һанап бөткөһөҙ,
Көндөҙ эҙләп тапҡыһыҙ.

278. Кисен күренер,
Таңын күмелер.

279. Үҙе ялтырай, үҙе ҡалтырай.

280. Зәңгәр ебәк өҫтөндә
Аҡ сәскәләр емелдәй.

281. Өҙәм тиһәң — буй етмәй,
Һанаганда — һан етмәй.

282. Аҡтыр, күптер,
Таң атыуға юҡтыр.

283. Түбә өҫтөндә тыранса,
Тыранса һайын бер аҡса.

284. Мейес һайын бәрәмәс,
Нишләтерһең бирмәгәс!

285. Кәштәм тулы һуйырташ.

286. Төнө буйы беҙ килдек,
Таң атҡанда юҡ булдыҡ.

287. Ай менән килделәр,
Күк тирмәгә инделәр,
Уйнанылар, көлдөләр,
Ҡояш менән киттеләр.

## Етегән йондоҙ

288. Ҡаҙыҡҡа бәйләнгән айғыр тулай,
Ҡойроҡтарын болғай,
Тулаһа ла бер тирәнән китә алмай.

289. Өй башында һаплы сүмес.

## Тимерҡаҙыҡ йондоҙо

290. Капитандар уға ҡарай,
Төндәрҙә йөҙгән саҡта.
Үҙ бурысын яҡшы үтәп,
Нурланып тора һаҡта*.

## Ай, йондоҙҙар

291. Бер көтөүсе һарыҡ көтә,
Һарыҡтары ҡанатлы,
Көтөүсеһе мөгөҙлө.

292. Бер көтөүсе мең һарыҡ көтә[32].

293. Йөҙ бәрәскә бер көтөүсе.

294. Күктә тора кәүҙәһе,
Ергә төшә шәүләһе,
Тәңкә сыбары бик күп,
Тик берәүһе ураҡ күк.

295. Мең шырпыға бер лампы.

296. Мейес тулы бәрәмес,
Уртаһында бер ҡалас.

297. Мең тәңкә, мең тәңкә,
Уртаһында бер тәңкә.

298. Иркен ерҙә бер батша,
Батша янында һалдаттар.

299. Өҫтәлгә борсаҡ һипкәндәр,
Уртала табаҡ ята.
Борсаҡты йыйып алһалар,
Алһыуланып таң ата*.

## Йондоҙ атылыу

300. Ҡараңғыла уҡ аттым,
Атҡан уғым юғалттым;
Тау арҡыры туп аттым,
Атҡан тубым юғалттым.

301. Өй башынан таш ырғыттым —
Ергә килеп төшмәне.

## Йондоҙ шәүләһе

302. Ынйы муйынсам ҡойоға төштө,
Ебәк бауы һуҙыла төштө.

## Таң атыу

303. Алтын табаҡ ярыла төштө,
Аҡ мамығы ағыла төштө.

304. Аҡ һандығым асылды,
Эсенән ебәк сәселде.

## Киске шәфәҡ

305. Ҡара кәзә утта яна.

## Шаңдаҡ

306. Ағайыма ни булған?
Мин ни әйтһәм, шуны әйтә.

307. Һөйләгәнеңде үҙеңә ҡайтара.

## Һауа

308. Үҙе тора, үҙе күренмәй.

309. Үҙе бында,
Үҙе беленмәй.
Тынға беленә,
Күҙгә күренмәй.

## Һыуыҡ

310. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ —
Үҙе һүрәт төшөрә[33].

311. Ишектән инер, түрҙән уҙыр.

312. Ишектән инер иңкәйеп,
Түргә менер туңҡайып.

313. Тубыҡтан тотоп ала,
Ҡолаҡтан семтеп ала.

314. Рөхсәтһеҙ инер, түргә йүгерер.

315. Өйгә килеп тә инде,
Һаулыҡ бирмәй уҙып та китте.

316. Ишеккә килде һөмһәйеп,
Туҡтап торҙо туңҡайып.

317. Ишектән инер, эсеңә керер — күрмәҫһең.

318. Иңкәйеп инә, һике аҫтына йүгерә.

319. Һуҙылып керер, түргә менеп ултырыр.

320. Кәртәм артында күк бурҙай,
Һөйәккә теше үтмәй.

321. Бураланған дөйә бурбайыңдан ала.

322. Байҙы ҡосаҡлай,
Ярлының ҡуйынына керә.

323. Старт юҡта — йүгертә,
Гармун юҡта — бейетә.
Ҡулдары юҡ — семетә,
Быныһы нимә? Кем әйтә?*

## Ҡар

324. Аҡ ашъяулыҡ таптым,
Ер өҫтөнә яптым[34].

325. Ап-аҡ булған ашъяулыҡ,
Ер өҫтөнә ташланыҡ.

326. Ап-аҡ юрған таптым,
Ер өҫтөнә яптым[35].

327. Ҡара урман өҫтөнә мамыҡ күпсек ташланым.

328. Аҡбикәнең аҡ юрғанын
Йәйеп ҡуйҙым ҡантарҙа[36]
Йыйып алдым һәүерҙә[37].

329. Мамыҡ түшәгем
Ергә түшәнем.

330. Ҡабара ла ҡабара,
Ҡабарынған мамыҡтай.

331. Аҡ мамыҡ менән бөтә донъя тулған.

332. Ҡара ерҙең өҫтөнә
Ҡаҙ мамығы кем һипкән?
Аҡ юрғанды кем теккән?
Ап-аҡ ондо кем түккән?

333. Айыу бабай йөн тетә,
Йөнлө ецен һелкетә.

334. Аҡ ҡына,
Семтеп ала саҡ ҡына,
Ята шым ғына,
Үлер ваҡыты етте иһә —
Илай тын ғына.

335. Тауышһыҙ-тынһыҙ оса,
Ышыҡҡа килеп боҫа,
Шым ғына ята-ята ла
Үлер алдынан бер геүләп ала.

336. Ҡанатһыҙ — оса,
Аяҡһыҙ — саба;
Тышта өйөлә,
Өйҙә йәйелә.

337. Осоп килә,
Йөҙөп ҡайта.

338. Осоп килә, йөҙөп китә,
Ваҡыт еткәс, һеңеп бөтә.

339. Урамда — батыр,
Өйҙә — илаҡ.

340. Тышта — тау,
Өйҙә — һыу[38].

341. Ҡыш буйы ятты-ятты ла
Яҙ еткәс, тороп сапты.

342. Ҡышын ята таштай,
Яҙын саба аттай.

343. Ятты-ятты ла
Йылғаға ҡарай сапты[39].

344. Өй урата аҡ арҡан.

345. Мамыҡ юрған,
Ҡат-ҡат һыр(ы)ған —
Үҙе һып-һыуыҡ.

346. Шәкәр тиһәң — шәкәр түгел,
Һөт тә түгел — үҙе аҡ;
Мамыҡ тиһәң — мамыҡ түгел,
Йә, был нимә? Уйлап тап[40].

## Ҡар менән ҡара ер

347. Аҡ һыйыр: «Торайыҡ», — ти,
Ҡара һыйыр: «Ятайыҡ», — ти.

348. Аҡ һыйырым тороп китте,
Ҡара һыйырым ятып ҡалды.

349. Аҡ айыу тороп китер,
Ҡара айыу ятып ҡалыр[41].

350. Ҡара һыйырым ятып ҡалды,
Аҡ кейеҙем ябып алды.

## Ҡар яуыу

351. Аҡ ябалаҡ аҡ кейеҙгә ятыр.

352. Тау башында еңгәләр
Талир тәңкә һибәләр.

353. Аҡ түшәгем йыртылды —
Бөтә ергә йөн тулды.

354. Әбейемдең түшәге йыртылған,
Донъя булып, йөн тулған.

355. Йәш килен һыуға бара,
Тәңкәләре ҡойолоп ҡала.

356. Ҡотора ла үкерә,
Барлыҡ ерҙе тултыра.

357. Бейек бура бурайҙар,
Ҡойма менән урайҙар.

358. Ирбәгәй ҙә һирбәгәй,
Ирекһеҙләп, ил биләй.

359. Тәңкә төшә, тәңкә төшә,
Төшкән ере аҡ була,
Төшә килә юҡ була.

## Ҡар иреүе

360. Элек үҙе һыуҙан тыуҙы,
Хәҙер үҙе һыу тыуҙыра[42].

361. Ятҡан ятҡан да
Һыу булып ҡасҡан.

## Буран, өйөрмә, көрт

362. Урамда айыу олой.

363. Елдем-килдем һырғалаҡ,
Алтмыш ағас башынан
Алдым-эйҙем һырғалаҡ,
Етмеш ағас башынан
Елдем-эйҙем һырғалаҡ.

364. Ҡаҙ мамығын ҡағына,
Ҡағына ла туҙғына.

365. Үкерә лә ҡотора,
Бөтә ерҙе тултыра.

366. Дөү-дөү-дөү итә,
Хайуандарҙы йүгертә,
Әҙәмдәрҙе тилмертә.

367. Үҙе илай, үҙе дулай —
Өйгә инә алмай.

368. Бейек бура бурайҙыр,
Ҡойма менән урайҙыр.

## Боҙ

369. Үҙем — һыу,
Үҙем һыуҙа йөҙәм.

370. Утта янмай, һыуҙа батмай[43].

371. Килделәр ағайҙар балтаһыҙ,
Һалдылар күпер таҡтаһыҙ.

372. Көндөҙ ватылған быяла төндә төҙәлә.

373. Балтаһыҙ-көрәкһеҙ күпер һалынды.

374. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ күпер төҙөй.

375. Ҡышын ята таштай,
Яҙын саба аттай.

376. Күҙ тыуа,
Яҙ үлә.

377. Буҙ атым баҫма булды,
Буйҙан буйға таҫма булды.

378. Ҡиммәтле таш түгел — ялтырай[44].

379. Тышҡа ҡуйҙым — таш булды,
Өйгә индерҙем — һыу булды.
Инде ни хәл итәйем,
Утҡа ҡуйҙым — быу булды.

380. Тышта таш була,
Өйгә инһә, һыу була.

## Тәҙрә боҙо

381. Әндрәй күҙен аҡ алған.

## Ҡыйыҡта аҫылынып торған боҙҙар

382. Үҙе баш түбән үҫә,
Көн йылынһа, йәш түгә.

383. Өләсәйем үргә ҡатҡан,
Оҙон-оҙон алҡа таҡҡан.

384. Йәйен түгел, үҫә ҡыш,
Үҫә баш түбән килеш.
Ҡояштан нур бөркөлһә,
Илай-илай ул үлә*.

## Боҙ яуыу

385. Юл буйы борсаҡ сәселде —
Йыйыусы юҡ.

386. Мунсанан мунсаҡ ҡойола,
Иҙәнгә төшһә, юғала.

## Боҙ китеүе

387. Ҡалтыр-ҡолтор күс бара,
Ҡара юрға буш бара.

388. Аҡҡошом осоп китте,
Ҡара төлкөм ятып ҡалды.

## Боҙ сатнау

389. Әҙәм теймәне — сикәм ярылды.

## Ысыҡ, ҡырау

390. Өй артында аҡ мүк.

391. Өй артында аҡ тана
«Китәмен», — тип маҡтана[45].

392. Төн тыуҙыра, түнтәрә —
Көн килә лә күтәрә.

393. Төн тыуҙыра, көн йыуҙыра.

394. Ай бирҙе, ҡояш алды.

395. Аҡ мунсағым төшөп ҡалды,
Ай күрҙе, ҡояш алды.

396. Мунсаға барғанда, мунсағым төштө —
Ай күрҙе, ҡояш алды.

397. Егәрле еңгә келәткә бара,
Тәңкәләре төшөп ҡала,
Әсәләре сығып ала.

398. Келәймән еңгә келәткә бара,
Унын асҡысы тороп ҡала,
Ҡояш төшөп ала[46].

399. Таң алдында матур ҡыҙ асҡысын юғалтҡан;
Ай күргән — әйтмәгән,
Ҡояш күргән — асҡысын алған.

400. Хан ҡыҙы һыуға бара,
Беләҙеге төшөп ҡала.
Ай күреп ҡала,
Ҡояш төшөп ала.

401. Сәмсиямал һыуға барҙы,
Асҡысы төшөп ҡалды,
Ай күрҙе, ҡояш алды.

402. Өй әйләнә йүгерҙем,
Асҡысымды төшөрҙөм,
Ай күрҙе, ҡояш алды.

403. Күл әйләнә йүгерҙем,
Күнлегемде төшөрҙөм,
Ай күрҙе, ҡояш алды.

404. Аранымды бикләнем,
Асҡысымды төшөрҙөм,
Ай күреп ҡалды,
Ҡояш төшөп алды.

405. Кис ергә төшә,
Төндө ерҙә үткәрә,
Иртә менән юғала.

406. Аҡ сымылдыҡ эсендә
Айҙы нисек табайым?
Күк сымылдыҡ эсендә
Көндө нисек табайым?

## Томан

407. Көндө төн итә,
Үлән башын һыу итә.

408. Мөңрәй бара, мөңрәй бара,
Мөгөҙөн күккә терәй бара,
Ҡамышлыҡҡа төшә бара,
Ҡамыш һыуын эсә бара.

409. Таң алдында килә,
Ҡояш сыҡҡас юғала.

410. Төтөнө бар — уты юҡ.

## Тамсы

411. Суҡышһыҙ сәпсек боҙ тишә[47].

412. Үҙе оҙон, үҙе ҡыҫҡа,
Үҙе йыуан, үҙе нескә,
Өҫтә саҡта беленмәй,
Аҫҡа төшкәс, күренмәй,
Ҡойо ҡаҙый эйелмәй-бөгөлмәй.

413. Төшкәне күренмәй,
Килгәне беленмәй,
Эҙе ҡала.

414. Һикереп төштө —
Боҙҙо тиште.

415. Өй артында дөп-дөп ҡойо ҡаҙый[48].

416. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ дөп-дөп ҡойо ҡаҙый.

417. Мороно төшкән бер турғай
Мурта-турта боҙ тишә.

418. Өй артында тәңкә һикерә.

419. Өй артыңда дөп-дөп тары төйәләр.

420. Ялт-йолт ялтырай,
Яңғыҙ ағас ҡалтырай,
Ынйы һымаҡ теҙелә,
Уҡа һымаҡ һуҙыла.

## Ел, дауыл, ҡойон

421. Көйләй ҙә көйләй,
Үҙенең бер ҙә көйө юҡ.

422. Ике тауҙың араһы,
Һыҙғыра пәрей балаһы.

423. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡапҡа аса[49].

424. Ҡулы юҡ, аяғы юҡ,
Ерҙә йүгереп, ҡапҡа аса.

425. Тауышы бар, һүҙе юҡ,
Һөйләшергә үҙе юҡ.

426. Үҙе йәнһеҙ, тауышы йәмһеҙ.

427. Аяғы ла юҡ, башы ла юҡ —
Үҙе елдереп йөрөй.

428. Ҡулы юҡ, аяғы юҡ —
Тәҙрәмде ҡаҡҡылай.
Тартҡылай, һуҡҡылай,
Өйгә инергә һорай[50].

429. Ҡулы юҡ — тәҙрә ҡаға,
Ауыҙы юҡ — йырлай.
Өйгә инәм, тип илай.

430. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,
Һөйләшергә теле юҡ,
Ҡояш кеүек нуры юҡ,
Күрергә күҙе юҡ,
Һис етмәгән ере юҡ.

431. Ялман ялан гиҙә.

432. Ҡырҙа йөрөй, урманда ята.

433. Тауға тартһаң — бармай.

434. Ҡыйҡым-ҡыйҡым, ҡыйҡым ҡош
Ҡыйҡылдаша, шаулаша.

435. Салғыйымды аса,
Үҙе минән ҡаса.

436. Ҡапҡамды аса ла
Ҡапҡам артына ҡаса.

437. Ятыр-торор өйө юҡ,
Үҙенең һис көйө юҡ.
Ҡаға урам ҡапҡаһын,
Шаҡый тәҙрә ҡапҡасын,
Эҙләй гел тишек-тошоҡ
Инергә һорай ышыҡ*.

438. Иртә килә, сиртә килә,
Ике ҡанатын һирпә килә,
Ҡамышлыҡтан үтә килә,
Ҡамыш башын һелкә килә.

439. Ҡулһыҙ-аяҡһыҙ тәҙрә ҡаға.

440. Иртә менән тора,
Тәҙрә үтә өрә.

441. Лап-лап тәҙрә яба.

442. Өй түбәмдә бүре олой.

443. Ҡанатһыҙ — оса,
Ҡулһыҙ — һуғыша.

444. Ҡотһоҙ Ҡолой
Бүре кеүек олой.

445. Күсеп килде, күсеп китте.

446. Оҙон орсоҡ өйөрөлдө,

Өйөрөлдө, бөтөрөлдө.
Сүп сарҙарға төрөлдө,
Тағы күккә үрелде*.

447. Йүгәнһеҙ ат,
Исемһеҙ ҡарт,
Килә лә китә,
Килә лә китә —
Күп зарар итә.

448. Килгәнен һиҙәм,
Киткәнен һиҙәм.
Үҙен күрмәйем,
Төҫөн белмәйем*.

## Яҙғы ел

449. Уҡ та түгел,
Ут та түгел,
Һыу ҙа түгел,
Быу ҙа түгел —
Үҙе ҡарҙы кисә.

## Төтөн

450. Өй башында айыу бейей.

451. Анау ауыл бураһы,
Бынау ауыл бураһы,
Күтәрелгән ҡураһы.

452. Мөрән-мөрән мөрәлде,
Мөгөҙө күккә терәлде.

453. Оҙон ағай, ҡайҙа бараһың?

454. Оҙон-оҙон ағайҙар
Эшкә китеп баралар.

455. Оҙон-оҙон Ыуаһар,
Күккә сығыр Тыуаһар,
Бырҡылдауыҡ башында,
Батман тирәк аҫтында.

456. Күк этем күккә ҡарап өрә.

457. Мейес эсендә ҡара бесәй.

458. Күк атым күккә менгән.

459. Күк атын менгән,
Күккә ҡарап елгән.

460. Күк ат менгән,
Күк кейем кейгән,
Күккә менеп бара.

461. Күк бүре күккә ҡарап олой.

462. Атаһы ат еккәнсе,
Улы Петербургҡа барып етә.

463. Атаһы аяғына кейгәнсе,
Улы Мәскәүгә еткән[51].

464. Атаһы аяғына кейгәнсе,
Улы Ырымбурҙан урай.

465. Атаһы аяғына кейгәнсе,
Улы урай Уралды.

466. Атаһы аяғына кейгәнсе,
Улы урманға етә.

467. Атаһы аяғына кейгәнсе,
Улы баҙарға барып ҡайта[52].

468. Атаһы сылгауын сылғағансы,
Улы ҡалаға етә[53].

469. Улы ҡатаһын кейгәнсе,
Атаһы Бохараға барып еткән.

470. Өй башында ҡарт бабай
Ҡарта турап ултыра.

471. Йүгереп сыға, елгә оса[54].

472. Болот түгел, күккә үрмәләй.

473. Теге тегендә,
Тегенең башы күктә,
Әхирәте анда,
Ашы-һыуы бында.

474. Ана бара — юлы юҡ,
Ҡаптыр ҡара — туны юҡ.

475. Дейеү пәрейе күккә аша,
Аш-һыуы ерҙә ҡала.

476. Кәк(е)ре-бөк(ө)рө юл һала,
Күккә менеп юғала.

477. Күктә оса, ергә төшмәй.

478. Уралып-уралып үргә мена,
Уралмаһа — күҙгә инә.

479. Үҙе ерҙә,
Аяҡтары күктә.

480. Аяғы юҡ — үрә баҫҡан.

481. Ҡара айыу үкерә,
Күккә ҡарап һикерә.

482. Тыуған ере — көллөктә,
Сыҡҡан ере — өрлөктә.
Ҡанаты юҡ, йөнө юҡ,
Үҙе оса гел күктә*.

## Төтөн, көл

483. Оҙондан тыуған, күккә уҙған,
Йомшаҡ япраҡ, ҡаты тупраҡ.

## Төтөн, ямғыр

484. Күктә оса, ергә төшмәй;
Ергә төшә, күккә менмәй.

## Ут, утын яғыу

485. Арғы ситән буйында
Ҡыҙыл әтәс йүгерә.

486. Шаян һары бесәйем
Битен йыуып ултыра,
Ел сыҡтымы — ҡотора.

487. Һиңә лә бирмәй,
Миңә лә бирмәй,
Үҙе ашап ултыра.

488. Ялт-йолт итә,
Ялмап йота.

489. Телләнеп ала ла
Урап, эҫегә һала.

490. Елдән арта, һыуҙан ҡайта[55].

491. Күрергә күркәм,
Тоторға ҡурҡам.

492. Күрер күҙгә матур,
Күтәреүгә ауыр.

493. Ҡырам, емерәм —
Төкөрөктән ҡурҡам.

494. Үҙем буйы ҡыҙыл суҡ.

495. Ашатһаң — терелә,
Эсерһәң — үлә.

496. Тотһам өҙөлә,
Ҡалмай үҙемә.

497. Ҡыуыш таштың аҫтында
Ҡыҙыл тунлы ҡыҙ ята.

498. Ишектән керер,
Тишектән сығыр.

499. Иртә лә килә ҡара ҡыҙ,
Кис тә килә ҡара ҡыҙ,

Ауыҙында тимер ҡубыҙ,
Уйнап килә ҡара ҡыҙ[56].

500. Бер йәнһеҙ бер йәнһеҙҙең йәнен ала.

## Үрт

501. Эйелеп-эйелеп етә килә,
Еткән ерен йота килә,
Ҡайынлыҡтан үтә килә,
Ҡайын һыуын эсә килә.

502. Ялт-йолт итә килер,
Итәген-еңен йыя килер,
Ҡайынлыҡҡа етә килер,
Ҡайын һыуын эсә килер.

503. Үреләкилә, үреләкилә,
Ҡау үләнен ҡыҙыра килә,
Ҡарурманға керә килә,
Ҡайын һыуын эсә килә.

504. Ана бара, юлы ҡара.

505. Үҙе саба, ҡойроғо ҡала.

## Яланда усаҡ яҡҡан урын

506. Ҡыҙыл үгеҙ ятҡан ергә
Ҡырҡ йылһыҙ үлән үҫмәҫ[57].

## Ут яныу

507. Тефү-тефү, гәү-гәү!

## Утлы күмер, күмер

508. Утта үләм, утта тереләм.

509. Әрйә тулы ваҡ таш.

510. Күрер күҙгә матур сәскә,
Күтәрергә ауыр сәскә.

511. Зәңгәр-зәңгәр, зәңгәр сәскә,
Күк, күк, күк сәскә.
Күрер күҙгә матур сәскә,
Күтәрергә ауыр сәскә.

512. Һике аҫтында — тарма бар,
Көсөң етһә, барын ал.

## Йылға

513. Башы — тауҙа,
Аяғы — диңгеҙҙә.

514. Буйы ла бар, һыны ла бар,
Ҡосһаң, ҡуйында ҡалмай.

515. Аяҡһыҙ булһа ла йүгерә, туҡтап тормай,
Уны белмәгән кеше тапҡыр булмай.

516. Аты юҡ, тәртәһе юҡ,
Көн-төн саба, юлы ҡала.

517. Йүгерә, йүгерә, һаман йүгерә,
Бараһы еренә етә алмай.

518. Бормалы ла һуҙмалы,
Осона сыҡҡан булманы.

519. Үҙе сабып бара,
Ҡойроғо күренмәй.

520. Үҙе бар — күләгәһе юҡ.

521. Ҡышын йоҡлай,
Яҙын дулай.

522. Ҡыш буйы тик тора,
Яҙ еттеме — ҡотора.

523. Оло юлдан күс килә,
Иртән килә, кис килә.
Үр яратмай әйләнә,
Арты өҙөлмәй бәйләнә.

524. Күк айғырым елә килә, саба килә,
Күк еләне елгә ҡарап һелкенә килә.

525. Кеше ҡулы теймәгән,
Үҙе юл һалған.

## Йылға, яр

526. Аты бара, тәртәһе ҡала[58].

527. Ике сите һандыҡ,
Уртаһында биҙәкле яулыҡ.

528. Аръяҡта ла һандыҡ,
Бирьяҡта ла һандыҡ,
Уртаһында француз яулыҡ.

529. Аръяҡта ла ал яулыҡ,
Бирьяҡта ла ал яулыҡ,
Уртаһында миһыр яулыҡ[59].

530. Тәртәләре ҡалды, бүрәнәләре аҡты.

## Йылға, ағас, ер

531. Береһе китә,
Береһе ултырып тора,
Береһе ята.

## Шишмә

532. Кәк(е)ре ҡайын төбөнән
Атылып сыға аҡ йылан[60].

533. Тауҙан тыуһа ла тауҙы яратмай.

534. Тауҙан тыуа,
Түбән шыуа,
Ағаһын ҡыуа.

535. Тауҙан тыуа,
Диңгеҙгә ҡыуа.

## Гөрләүек

536. Ат түгел — саба,
Урман түгел — шаулай[61].

## Күл

537. Күгелйем-күгелйем киң балаҫ,
Балаҫ уртаһы ҙур көҙгө,
Көҙгө уртаһы бер билге:
Ҡараһаң, уңырһың,
Ҡарамаһаң, бөлөрһөң.

538. Туҫтаҡ тулы һыу,
Һыуҙың өҫтө быу.

539. Ҡыш көнө аҡ була,
Йәй көнө күк була.

## Мәке

540. Һыр-һыр һырғалаҡ[62],
Уртаһында бер табаҡ.

541. Бөтә ауылға бер ҡаҙан.

542. Аҡ та икән һикеһе,
Ҡаҡ та икән һикеһе,
Уртаһында көҙгөһө.

543. Үҙе тигеҙ,
Үҙе таҡыр,
Баҫһаң — батыр.

544. Ҡаҙҙың иһә — ҡан сыға.

545. Йәйен йәйелә,
Ҡышын ҡата —
Көмөш һандыҡҡа
Керә лә ята.

## Һыу

546. Еҫе юҡ, төҫө юҡ,
Унан башҡа тормош юҡ.

## Боҙ аҫтынан аҡҡан һыу

547. Ҡара төлкө ҡар аҫтынан саба.

## Һыу һирпеп алыу

548. Һоҫоп алдым — урыны юҡ.

549. Һаҡал алдым — урыны ҡалды.

550. Бауырын киҫтем — урыны юҡ.

## Һыу, ҡырсынташ, ҡамыш

551. Береһе әйтә: «Китәйек», — ти,
Береһе әйтә: «Ятып ҡалайыҡ», — ти,
Береһе әйтә: «Ҡыймыл-ҡыймыл итәйек», — ти.

## Һыу, ут, ер, ел

552. Был донъяла бар дүрт ағай,
Береһе гел йүгерә — бер ҙә арымай,
Икенсеһе гел ашай — бер ҙә туймай,
Өсөнсөһө гел эсә — бер ҙә ҡанмай,
Дүртенсеһе гел көйләй — бер ҙә тауышы бөтмәй.

## Һыу менән быу

553. Һалҡынға ҡуйһам, ташҡа әйләнә,
Йылыға ҡуйһам, һауаға менә.

## Диңгеҙ

554. Донъяла бар бер әсә,
Көнө-төнө эсә.

555. Киң яурынлы бер ата,
Балаларын тарата,
Тарата ла кире ала.

## Тулҡын

556. Иҙелдең иҙәнендә,
Батшаның сиҙәмендә
Алтмыш ике ҡаҙ уйнай.

557. Яр аҫтынан юрға килә,
Йор араһын ҡыуа килә.

558. Бал-бал, бал аяғы,
Муйыл таяғы;
Йүгереп етә алмай
Әҙәм аяғы.

## Ер

559. Ята торған яҫтығым,
Сыбарлана, йәмләнә,
Төрлө төҫкә әйләнә.

560. Яҙ килһә, кейенә,
Көҙ килһә, сисенә.

561. Эсә лә эсә, эсә лә эсә.

562. Ҡыш көнө йоҡлай,
Йәй буйы һыу эсә.

## Ер, ел, ут

563. Эсә лә эсә — бер ҙә ҡанмай,
Йүгерә лә йүгерә — бер ҙә арымай,
Ашай ҙа ашай — бер ҙә туймай.

## Йыһан, ер, ай, ҡояш

564. Бер түңәрәк өй эсендә
Өс түңәрәк шар йөҙә.

## ТУПРАҠ

565. Өй артында дарым бар,
Күтәрә алһаң, барын да ал.

## ЮЛ

566. Килдем, килдем,
Тышҡа ҡуйып индем.

567. Барам-барам — башы юҡ,
Осам-осам — осо юҡ,
Бөтмәй ҙә, юғалмай ҙа.

568. Барам-барам — осо юҡ.

569. Башы аранда, ҡойроғо яланда.

570. Ҡайынлыҡ аша ҡайыш арҡалыҡ[63].

571. Арҡа арҡыры арҡан һуҙыла.

572. Арҡа ергә арҡалыҡ таҡтым.

573. Оҙон дилбегәне йыйып булмай.

574. Тауым арҡыры таҫма һуҙылған.

575. Оҙон таҫма ята —
Күтәреп булмай.

576. Килтерҙем — һөйәй алманым,
Өйөңә һыя алманым.

577. Өйҙән өйгә йөрөй,
Үҙе өйгә инмәй.

578. Тау аша таяҡ ташланым.

579. Ағастан оҙон,
Үләндән тәпәш.

580. Бер тауға менеп китә,
Бер түбән төшөп китә,
Донъяны киҫеп үтә.

581. Һыр, һыр, һырғауыл,
Һырғауылдың осона
Кемдәр генә сығалыр?

582. Оҙон-оҙон өс ҡамыш,
Осона-башына кем сығыр?

583. Оҙон-оҙон оҙон ептең
Осо ҡайҙан табылыр?

584. Оҙон-оҙон осҡалаҡтың
Осона-башына кем сығыр?
Йомоп биргән йомаҡты
Аса-йома кем сисер?
Төрөп биргән йомғаҡты
Аса-йома кем һүтер?

## Юл, күбәләк

585. Оҙон-оҙон осҡалаҡтың
Осона-башына кем сығыр?
Сыбар-ала көйгәнәктең
Йомортҡаһын кем табыр?[64]

586. Оҙон-оҙон осҡалаҡ,
Сыбар-ала көйгәнәк.

## Соҡор

587. Көтөп ята, көтөп ята,
Килеп ингәнде тотоп ята.

588. Күмһәм — күмелмәй,
Типһәм — тигеҙләнмәй.

589. Тоҡ-тоҡ, күләгәһе юҡ.

590. Алған һайын ҙурая бара.

591. Олатайымдың ҡаҙанын
Түңкәрә алмай аһ иттем.

### Юл, соҡор

592. Оҙон арҡанды йыя алманым,
Оло ҡаҙанды ауҙара алманым.

### Түңгәк

593. Түрҙә турайып ултыра,
Үрҙә һерәйеп ултыра.

594. Берәүһе — турайған,
Берәүһе — һерәйгән.

### Ер, түңгәк

595. Берәүһе: «Ятайыҡ», — ти,
Берәүһе: «Торайыҡ», — ти.

## II. ҮҪЕМЛЕКТӘР ДОНЪЯҺЫ

## ҠЫРАҒАЙ ҮҪЕМЛЕКТӘР

### Урман

596. Сөмәй башында ҡалын сәс,
Сәсен күр ҙә тороп ҡас.

597. Ҡыш яланғас,
Йәй булһа, кейенә.

598. Мең һанат, мең һалдат,
Һәр һалдатта мең ҡанат.

599. Бабамдан ҡалған иҫке тун,
Ябын да йылыһында ҡун.

600. Энәһеҙ-епһеҙ теккән күлдәк кейгән.

### Көҙгө урман

601. Балаҫ өҫтө сып-сыбар.

## Ағас

602. Ҙур һандығым эсендә
Юнмаған уғым ята.

603. Аяғы менән ҡолағының һаны юҡ,
Һис бер ерендә ҡаны юҡ.

604. Бер аяҡ, илле ҡул.

605. Күҙ етһә, йөнөн ҡоя,
Яҙ етһә, йәшәрә.

606. Күҙ сисенә, яҙ кейенә,
Йә, әйтеп ҡара, нимә?

607. Яҙын яҙыла,
Көҙөн йыйыла,
Йәй һыуына,
Ҡыш йылына.

608. Төбө — бер,
Башы — мең.

609. Ергә һеңгән,
Күккә үрелгән.

610. Йәйен өшөй, ҡышын йылына.

611. Йәйен йәшәрә, ҡышын ҡартая.

612. Йәй көнө йәшел сәкмән кейә,
Ҡыш көнө һалып ташлай.

613. Ҡарап торһаң, йәне юҡ,
Тупраҡ ашай, һыу эсә,
Үҙе юғары үҫә.

614. Утта яна, һыуҙа батмай.

615. Йәйен йәшел, көҙөн һары, ҡышын аҡ,
Үҙе ҡанһыҙ, оҙаҡ йәшәй — уйлап тап.

## Ағас үҙәге

616. Айға ла күренмәй,
Ҡояшҡа ла күренмәй,
Ағас менән тиң үҫә,
Үҫкәне бер ҙә беленмәй.

617. Айға-көнгә күренмәй,
Ағас менән типә-тиң[65].

618. Япраҡ һымаҡ елпелдәп,
Елберләмәй ҙә елгә.
Ағас менән типә-тиң,
Күренмәй айға-көнгә*.

619. Көн үҫә, төн үҫә, ағас менән тиң үҫә.

## Ағас тамыры

620. Ай үҫә, йыл үҫә, үҙе күҙгә күренмәй.

621. Ер аҫтынан ең сыҡты,
Ике буйы тиң сыҡты.

## Ағас ҡайыры

622. Япраҡ та түгел,
Ботаҡ та түгел —
Үҙе ағаста үҫә.

## Ботаҡ, ботаҡ төбө

623. Бүрәнә һайын бүре күҙе.

624. Өйгә керер хәлем юҡ,
Бабай бармаҡ күрһәтә.

625. Артыңда атаң күҙе тора.

626. Түбә һайын тыранса,
Тыранса һайын бер аҡса.

## Ағас тамыры, япрағы, сәскәһе

627. Аяғын алдым таяҡҡа,
Үҙен алдым ҡосаҡҡа.
Ҡолағын алдым түшәмгә,
Башын алдым буяуға.

## Ағастың тамыры, ботағы, япрағы

628. Аяғы менән ҡолағының һаны юҡ,
Һис бер ерендә ҡаны юҡ.

629. Аяғы алтмыш, ҡулы етмеш,
Үҙе бер, бите мең.

## Япраҡтар

630. Яҙ килһә, йәшәрә,
Көҙ етһә, һарғая.

## Шыршы, ҡарағай

631. Ай айланым, ҡыш ҡышланым,
Йәшел ҡытат тун тышланым.

632. Ҡышын да, йәйен дә йәшел.

633. Йәй ҙә егет, ҡыш та егет,
Йөрөй йәшел кейем кейеп.

634. Йәй ҙә егет, ҡыш та егет,
Ҡартайғаны юҡ — гел егет[66].

635. Сит-ситендәп[67] юғары менер,
Сит-ситендәп түбән төшөр,
Йәшел ҡытат тунын тышлар.

636. Йәй йәйләүҙән буш ҡалмаç,
Ҡыш ҡышлауҙа ҡымшанмаç.
Көндәр нисек торһа ла
Йәшел тунын ташламаç*.

## Имән

637. Мәңге тауҙа — мең йәшәр айыу.

## Имән, уның сәтләүеге

638. Атаһы — оло батша,
Улы — кесе батша.

## Саған

639. Тупай башында йәшел ҡаҙ тәпәйе.

## Тирәк

640. Ҡайҙа ҡаҡһаң да ҡолағын сығара.

641. Аяғы алтмыш,
Ҡулы мең.

642. Аяғы алтмыш,
Ҡулы етмеш,
Бите мең бер йөҙ етмеш.

## Йыла, ҡарама

643. Ҡаты-ҡото тиһәгеҙ ҙә
Киләһегеҙ, менәһегеҙ,
Алаһығыҙ, китәһегеҙ,
Минең менән көн итәһегеҙ.

## Ҡайын

644. Аҡ кейемен кейгән,
Йәшел суғын элгән.

645. Аҡ кейемен кейгән,
Юл буйына килгән.

646. Аҡ бағана алтын ҡашлы,
Йөҙ егерме йәшле.

647. Йәшел сәсен тараған,
Хан өйөнә яраған.

648. Аҡ баҡана,
Йәшел сатыр,
Сатырын тапһаң,
Беҙҙе лә саҡыр.

## Йүкә, йүкә һыҙырыу, ҡабыҡ төшөрөү

649. Урманда ҡуян һуйҙым,
Өйгә һөйәген алып ҡайттым.

650. Йәшем еткәс тә йәш ҡоям.

651. Йәшем еткәс тә кейемем һалам.

652. Йәшем йәш кенә,
Сәскәм аш ҡына.

653. Урманда — ҡара,
Юлда — ҡашҡа,
Өйгә ҡайтһа — ағара.

654. Тун кейеп керә, тунын һалып сыға.

655. Саптым — алдым,
Ҡырҡтым — алдым,
Сисендереп, һыуға һалдым.

## Уҫаҡ

656. Инәһе тулғана —
Балалары ҡул саба.

657. Шәпи ағай шәпкәһе
Тик торғанда шыбырлай.

## Ерек

658. Тышы һоро, эсе һары,
Тырт итә, мырт итә,
Һыу буйында көн итә.

659. Тәртәгә лә ярамай,
Кәртәгә лә ярамай,
Ҡырҡып ала бирәләр,
«Ярамай»ға ҡарамай.

660. Тырт итһә лә мырт итмәй,
Һыуҙан йыраҡ китмәй.

661. Йәшелгә төрөнә,
Күккә кейенә,
«Һарғаям», — тип көйөнә.

## Тал сыбығы

662. Иҙел буйҙа Иҙелбай,
Ҡулыңа алһаң, сыйылдай.

## Өйәңке

663. Арлы-бирле боролған,
Башына ҡыуыш ҡоролған.

664. Иңкәйгән дә боролған,
Янтайған да йығылған,
Башына ҡыуыш ҡоролған.

## Сәтләүек

665. Шығыр-шығыр шығырсаҡ,
Тышы һары, эсе аҡ.

666. Бер үҙәктә меҢ ботаҡ,
Ботаҡ һайын оя,
Оя һайын йомортҡа.

667. Тосо ҡаплы,
Кимеге татлы.

668. Абау, ҡыҫты бармағым,
Ҡубып төштө тырнағым.

669. Бәләкәй генә сүлмәгемдә
Тәмле бешә сумарым.

670. Бәләкәй генә ҡаҙандың ашы тәмле.

671. Шарт-шорт ишек асыла,
Килеп сыға бер егет;
Тотоп ал да баҙыңа һал.

672. Кескәй генә һандыҡ,
Һандыҡ эсенә һалдыҡ.

673. Ауыҙы бар, теше юҡ,
Уны һөймәҫ кеше юҡ.

674. Бәләкәй генә таш һандыҡ,
Һандыҡ эсенә май һалдыҡ.
Асҡысын табалманыҡ —
Ҡапҡасын ватып алдыҡ.

675. Бәләкәй генә бер сүлмәк,
Ауыҙы, төбө күренмәй.
Ҡалай ғына йөрөтһәң дә,
Ашы һис тә түгелмәй.

676. Бәләкәй генә сүлмәктә
Тәмле генә аҡ май бар.

677. Теймә миңә,
Тейерһең — ҡыным бар,
Ҡыным эсендә йөнөм бар,
Йөнөм эсендә тәмем бар.

678. Теймә миңә, теймә миңә,
Тейһәң, тешең ҡырылыр.

679. Ҡыным эсендә ҡылысым,
Вата-ҡыра ҡыуандым.

680. Таш һандыҡ,
Һандыҡ эсендә йәнлек.
Тотоп алһаң, һанлыҡ.

## Имән сәтләүеге

681. Юл өҫтөндә еҙ бүкән.

## Өрөк

682. Аш,
Аш эсендә таш,
Таш эсендә тағын аш.

## Андыҙ

683. Айыу ҡолаҡ, алтын баш,
Тамыры зәхмәттән аш.

## Ҡомалаҡ

684. Бер ағастың башында,
Бер аҫыл ҡош ултыра.
«Иртән килеп алмаһаң,
Китәм», — тиеп ултыра.

685. Бейек тауҙың башында
Һары сәпсек ултыра.
«Бөгөн килеп алмаһалар,
Осамын», — тип ултыра.

686. Оҙон ағас башында
Ҡалтыр-ҡолтор ултыра.
«Ҡалтырбикә ҡапсығына
Төшәмен», — тип ҡотора.

687. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ағасҡа менә.

688. Кәкре ағас башында
Кәлтин-кәләй ултыра.
«Бөгөн таңда килмәһәң,
Китәм», — тиеп ултыра.

689. Оҙон сылбыр сыуалған,
Сыпсыҡ шуға уралған.

690. Аҫты аҫыулы,
Төймәһе баҫыулы.

691. Игәй-мигәй бау ишә.

692. Ҡабара ла ҡабара,
Ҡабарған күркә кеүек,
Ҡабарып бешкән күмәс кеүек,
Еҙ мыйыҡлы еҙнәм кеүек,
Һағынып килгән кейәү кеүек;
Хәле бөтөп ултырған,
Ағасҡа барып тотонған.

693. Уҡлау,
Уҡлау башы — суҡлау,
Ер күкләү,
Етмеш ағас тамыры.

## Ҡамыш

694. Һаҙ ситендә йәшел һаҡсы
Һарыса етһә һарғая.

695. Нәҙек оҙон,
Ботағы юҡ.

696. Йәшел бабайҙың һаҡалы
Һыу өҫтөндә елберләй.

697. Эсә-эсә һыуҙан туймай,
Үҙе бер ҙә һыуҙан сыҡмай.

698. Яр буйында йәшел суҡ.

## Екән ҡамышы

699. Туҫтаҡ өҫтөндә туҫтаҡ,
Иң өҫтә — бесәй ҡойроғо.

## Бәшмәк

700. Ҡыҙыл бүрекле ҡыҙ күрҙем,
Ҡасып-боҫоп ултыра.

701. Ҡара урман эсендә
Ҡыҙыл бүрекле ҡыҙ ултыра.

702. Олоһо ла, кесеһе лә эшләпә кейгән.

703. Кәүҙәһе бар — йәне юҡ,
Үҙе эшләпә кейгән — башы юҡ.

704. Ҡара урманға кергәндә,
Ҡыҙыл ауыҙлы ҡарт күрҙем.

705. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ —
Эшләпәһе бар.

706. Башы булмаһа ла — эшләпәле,
Аяғы бар — итекһеҙ.

707. Ағас ҡашында,
Сәлләһе башында.

708. Бағана башында аҡ күмәс.

709. Таяҡлы малай ҡыҙыл бүрекле.

710. Ер аҫтынан ҡалҡты,
Ҡыҙыл бүрек тапты.

711. Ҡырҙа ла, урманда ла
Ҡыҙыл бүрек кейгән бер ҡарт ултыра.

712. Ҡарһаҡ ҡына бер малай
Ҙур эшләпә кейгән.

713. Ураман эсендә мулла,
Аҡ сәлләһе башында.

## Һарына

714. Ер аҫтында еҙ бүкән[68].

715. Һаҙ төбөндә һары алтын.

716. Еҙ бәкемде ергә күмһәм дә юғалмай.

## Ҡуян тубырсығы, һарына

717. Ҡаҙый-ҡаҙый алма таптым,
Ҡаҙып төшкәс, көмөш таптым.

## Йыуа, ҡаҡы

718. Йәшел һарайға бараһың,
Йәшел таяҡ алаһың,
Бистереңдә[69] һалаһың,
Һуяһың, ҡуяһың,
Ейә-ейә туяһың.

719. Йәшел тунын һалдырҙым,
Үҙ янымда ҡалдырҙым.

## Айыу көпшәһе

720. Аяҡтай ҡолағы бар,
Таяҡтай һыны бар.

## Күрән

721. Йәшел ҡылысым ҡул киҫер.

## Үлән

722. Сәсмәй-нитмәй нимә үҫә донъяла?

723. Яҙын донъяға килә,
Көҙөн һарғайып үлә*.

## Болон, үлән

724. Йәшел балаҫ йәйелә бара,
Биҙәктәре күбәйә бара.

## Сәскә

725. Үҙе ҡулын күтәргән,
Ҡулы моронон күтәргән.

726. Сәсмәһәң дә мин сыҡтым,
Әйтмәһәң дә мин үҫтем,
Саҡырмаһаң да мин килдем.

727. Батша түгелмен — тажым бар,
Кешеләргә бирер наҙым бар.

## Ҡәнәфер, ҡыр һабыны

728. Ҡыҙыл-ҡыҙыл кейенгән,
Ҡыҙыл шәлгә төрөнгән.
Алдым шәлен, ябындым,
Аҡ мамыҡҡа тарындым.

729. Ҡыҙыл кәпәсен һалды,
Буйыма тейеп алды,
Ары үтте, бире үтте,
Бар зәхмәтте алып китте[70].

## Умырзая

730. Алатауҙың аръяғында
Алтын бала ултыра.
Аяғында алама шеш,
«Йә, Алла», — тип ултыра.

## Бәпебә, салмабаш, туҙғанаҡ

731. Ашаным, ашаным,
Бәйләп-бөрөп ташланым.

732. Һары булды, аҡ булды,
Өф иткәнгә юҡ булды.

## Томбойоҡ

733. Һыу өҫтөндә һары май.

734. Кескәй генә тәрән күл,
Тирәк унын эсендә,
Ҡылыс бәйләп, ҡынын тотҡан
Егеттәр унын эсендә.

735. Ҡыҙыл ҡырсын эсендә,
Ҡыҙҙар уның эсендә,
Итәктәрен төрөнөп,
Егеттәр уның эсендә.

736. Үҙе бәләкәй, күҙе ҙур.

737. Зәңгәр тулҡында тирбәлеп,
Йоҡлай ул көндөҙҙәрен.
Кис етеүгә асып ҡуя
Һөттәй аҡ керпектәрен*.

## Ҡурай

738. Ҡырҙа үҫкән бер бала,
Өйгә килеп моң һала.

739. Ҡырлы-ҡырлы йор бала,
Йөрәгеңә моң һала[71].

740. Аяғы алаптай,
Кәүҙәһе таяҡтай,
Ҡорһағы көбәктәй,
Башы табаҡтай.

741. Аяғын-башын киҫтем,
Ҡорһағын биш ерҙән тиштем.
Эсенә өрҙөм,
Моңланғанын күрҙем.

## Ҡыр ҡурайы, еләк, һөлөк

742. Ҡырҙа — Ҡырайман,
Ерҙә — Еләймән,
Һыуҙа — Һөләймән[72].

## Кесерткән

743. Өй ҡашында уҫал еңгә
Семтеп ала, өтөп ала.

744. Яҡын барма,
Яҡын барһаң, ҡулыңа алма,
Ҡулыңа алһаң, бәлә һалма.

745. Япрағы, һабағы бар,
Ҡамсы түгел — һыҙҙыра.
Һыҙҙырғанда ут кеүек,
Бөтә тәнде ҡыҙҙыра*.

746. Йәшел айғыр кешнәп ала,
Барып тотһаң, тешләп ала.

747. Ут түгел — тәнде яндыра[73].

748. Өй артында йәшел ут,
Үҙе үлән, үҙе мут.

749. Күмер түгел, ут түгел,
Тотһаң — ҡулды бешерә.

750. Аяҡ тыҡһаң — аяҡҡа хас,
Ҡулың тыҡһаң — ҡулыңа хас.

751. Үҫә ҡойма буйында,
Гел сағыуҙыр уйында.
Уты ла юҡ — яндыра,
Ҡорт саҡҡан эҙ ҡалдыра*.

752. Һин ҡул һуҙһаң,
Ул һиңә ут бирә.

753. Миңә кемдер ҡул һуҙһа,
Бешерәм мин ҡуҙһыҙ ҙа.

## Билсән

754. Энәһен тотҡан, юл буйына сыҡҡан.

## Ҡылған

755. Аяҡ аҫты ҡылйылан.

756. Эйелдем, урелдем —
Әбей сәсен мин үрҙем.

## Клевер

757. Юл буйында бер аш:
Үҫте ҡыҙыл баш,
Ат килеп яланы,
Һыйыр килеп яланы,
Ҡыҙыл башлы был аштан
Бер нәмә лә ҡалманы.

## Дегәнәк

758. Ауыҙы юҡ — әҙәм тешләр.

759. Бер йомғаҡта мең энә.

760. Йәбешкәнгә лә йәбешкән,
Йәбешмәгәнгә лә йәбешкән.

761. Юл буйында ҡарт бабай
Ҡармаша ла һәрмәшә.

762. Юл буйында бер бабай
Тәки мине ҡармалай.

763. Юл буйында бер бабай —
Тейгәнгә лә тейә,
Теймәгәнгә лә тейә.

764. Юл сатында Юламан,
Урала ла сырмала.

765. Болонлоҡта көсөк ята,
Балағыма йәбешеп ҡайта.

766. Яланда, япанда
Яман бүре ултыра.

767. Еҙ мыйыҡлы еҙнәм,
Сәнселмәйсә түҙмәм.

768. Еҙ мыйыҡлы еҙнәм кеүек,
Һағынып килгән кейәү кеүек.

769. Йомро-йомро терпеләр,
Һырып алды төлкөләр.

770. Уҡтау-уҡтау,
Башы суҡтау.
Ергә етмәҫ,
Етмеш ағас ботағы[74].

771. Алама башлы, тоҙ күҙле.

772. Янына барһаң — йәбешә.

773. Алдыңда атаң йоҙроғо.

# КУЛЬТУРАЛАШТЫРЫЛҒАН ҮҪЕМЛЕКТӘР

## Иген, ашлыҡ, орлоҡ

774. Йәшереп ҡуйҙым ергә —
Балаларын эйәртеп,
Килеп сыҡты илгә.

775. Баҙ аҫтында ятып, бала тыуҙыра.

776. Аямайса ергә күмһәң анаһын,
Йөҙ көндән һуң йыйып алырһың балаһын.

## Иген, икмәк

777. Ҡырҡтылар мине,
Йолҡтолар мине,
Бәйләнеләр мине,
Элделәр мине.
Туҡманылар мине,
Утҡа-һыуға һалдылар,
Тағы күтәреп алдылар,
Бысаҡ менән ярҙылар.

778. Бәүелә-бәүелә үҫтем,
Эйелә-бөгөлә күстем,
Бураға инеп боҫтом,
Алдығыҙға төштөм.

## Иген баҫыуы

779. Йылға түгел — тулҡынлана.

## Ырҙын табағы

780. Яланда, япанда
Майлы табам ултыра.

781. Атайымдың алтын көҙгөһөн
Алтмыш кеше саҡ күтәрә.

## Кәбән

782. Туғай башында бер тау,
Уны солғай еҙ ҡоршау.

783. Бер киҫәккә йөҙ ҡоршау.

784. Бер мискәлә ҡырҡ ҡоршау.

785. Юл буйында ят тора,
Бүркен кейгән ҡарт тора.

786. Өйөлгән, өйөлгән,
Өйөлгән — башы төйөлгән.

787. Ете саттың уртаһында
Бер ахахай ултыра.
Ҡанатына ҡар ҡатҡан,
Ҡаға алмай ултыра.

788. Йыуан ҡорһаҡлы,
Түбәһе нәҙек,
Малдарға бик һәйбәт аҙыҡ*.

## Күбә

789. Ялан ерҙә тай тиҙәге.

790. Ялан ерҙең күрке,
Ярлыҡаптың бүрке.

## Күбә, арҡан, кәбән

791. Ултырсы улан,
Йылтырсы йылан,
Иң олоһо — ыздарауай хан.

## Көлтә

792. Нескә бил,
Ни икәнен мин әйтмәйем —
Үҙең бел!

793. Йөҙ туған бер ҡайыш быуған.

794. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ —
Борғослап билбау быуған.

## Сүс көлтәһе

795. Бәләкәй генә байбисә
Билен быуа ла быуаға һикерә.

## Һоло көлтәһе

796. Бәләкәй генә Питыра
Билен быуып ултыра.

## Ужым

797. Йәй йәйләр,
Ҡыш ҡышлар,
Йәшел ҡытат[75] тун тышлар.

798. Йәй йәйләнем,
Ҡыш ҡышланым,
Йәшел хәтфәнән тун тышланым.

799. Ҡар аҫтында ҡышлар,
Бәрхәт тун тышлар.

800. Йәй ҙә йәйләр,
Ҡыш та ҡышлар,
Хәтфә кеүек күперер;
Йәшел тунын аҡҡа тышлар,
Башын эйеп ултырыр.

801. Ҡар аҫтында ҡышлаған,
Бүркен йәшел тышлаған.

802. Үҙе йәшел күлдәк кейгән,
Арҡаһы ергә тейгән.

## Баçыу

803. Оҙаҡ-оҙаҡ,
Юлға тоҙаҡ.

## Бойҙай

804. Юл буйына баçҡан да
Һары мыйығын тырпайтҡан.

805. Уҡ-уҡ-уҡ кеүек,
Башы алтын суҡ кеүек.

806. Бер сыбыҡта йөҙ сыпсыҡ.
Күҙе күп тә — күрә алмай,
Унһыҙ кеше түҙә алмай.

807. Һары мыйыҡлы ағайым:
«Алһаң, ҡунаҡҡа киләм, — ти. —
Аҡ түшәген бирәм», — ти.

## Арпа

808. Үҙе бер ҡарыш,
Һаҡалы мең ҡарыш.

## Һоло

809. Ағайым алған бер ҡатын,
Бармаҡтары шау алтын.

810. Уҡлау, суҡлау, тәңкәле бай ҡатыны.

811. Яланда бер аласыҡ,
Аласыҡ эсендә ҡапсыҡ,
Ҡапсыҡ эсендә ҡарсыҡ.

## Борсаҡ

812. Ағасы һайын ботағы,
Ботаҡ һайын ояһы,
Оя һайын балаһы.

813. Ҡырҡ тирәк, ҡырҡ ботаҡ,
Ботаҡ һайын ун оя,
Оя һайын ун йомортҡа.

814. Нарат-нарат нарлы ботаҡ,
Ботаҡ һайын йомортҡа.

815. Оҙон-оҙон уҫаҡ,
Уҫаҡ һайын ботаҡ,
Ботаҡ һайын оялар,
Оя һайын балалар.

816. Һары-һары-һары ботаҡ,
Ботаҡ һайын бер оя,
Оя һайын йомортҡа.

817. Ҡырҙа үҫкән ҡарағай,
Ботаҡтарын ҡарамай;
Ботағы һайын оя,
Ояһы һайын йомортҡа.

818. Ҡыуаҡ-ҡыуаҡ,
Ҡыуаҡ һайын кетәк-кетәк,
Кетәк һайын оя-оя,
Оя һайын йомортҡа.

819. Тоҡ-тоҡ-тоҡ алай,
Тоҡ эсендә биш малай.

820. Уҡлау,
Уҡлау башы суҡлау.
Ер күкләү,
Етмеш ағас ботағы.

821. Тап-тап табағас,
Табағаста мең ағас,
Алтын аяҡ күбәләк,
Йомортҡаһы түңәрәк.

## Ҡарабойҙай

822. Ҡара ергә күсте,
Ҡыҙыл булып үҫте,
Аҡ булып йәйелде,
Ҡара булып йыйылды.

823. Саптым, юндым —
Өс мөйөшлө келәт ҡуйҙым.

## Арыш

824. Былтыр илтеп ҡуйғандар,
Быйыл килеп йыйғандар[76].

## Арыш, ҡарабойҙай, борсаҡ

825. Еҙ мыйыҡлы еҙнәм,
Ап-аҡ яулыҡлы еңгәм,
Йомро-йомғаҡ йәш ҡоҙасам.

## Тары

826. Елгә елкенә елбер баш,
Эсе тулы ваҡ ҡына таш.

827. Кескәй генә ҡапсыҡ,
Эсендә һары балсыҡ.

828. Аяғы һыуҙа, башы утта.

829. Тәбәнәк тирәк,
Алтмыш ботаҡ,
Ботаҡ һайын улаҡ,
Улаҡ һайын ҡолаҡ,
Ҡолаҡ һайын йөҙ егерме йомортҡа.

## Көнбағыш

830. Таяҡ та таяҡ,
Таяҡ эсендә табаҡ,
Табаҡ эсендә балыҡ,
Балыҡ эсендә халыҡ.

831. Алтын рәшәткә эсендә
Ҡара өйҙәр туп-тулы.
Күпме өй, шул саҡлы халыҡ.

832. Таяҡ,
Таяҡ башында табаҡ,
Табаҡ эсендә ике йөҙ һалдат.

833. Болонда бер таяҡ,
Таяҡ башында табаҡ,
Табаҡ эсендә халыҡ.

834. Таяҡ,
Таяҡ башында табаҡ,
Табаҡ өҫтөндә балалар.

835. Таяҡ,
Таяҡ башында бер табаҡ,
Табаҡ эсендә ҙур кибет,
Кибет эсендә йөҙ егет.

836. Суҡ,
Суҡ башында уҡ,
Уҡ башында кибет,
Кибет эсендә ике мең егет[77].

837. Юл сатында малай тора,
Көнгә ҡарай муйынын бора.

838. Баҡсала тора малай,
Боролоп көнгә ҡарай.
Кәпәсе тулы емеш,
Унан май сыға, имеш*.

839. Ай башлы, йәшел ҡашлы.

840. Һары ебәк ҡалпаҡлы,
Борола ла ҡояшҡа ҡарай.

841. Ҡырлы-ҡырлы һомғол һабаҡ,
Һабаҡта алтын табаҡ.
Табаҡта бар мең оя,
Оя һайын бер мая*.

842. Ҡояш ҡайҙа барһа,
Уға ҡарап йылмая.

843. Оҙон-оҙон сирта[78].

844. Төбө бер, башы мең.

845. Таяҡ башында тора
Эленеп алтын иләк,

Бер таҡыя тултырып,
Орлоғон алдым иләп.

846. Бабай меҫкен ҡартайған,
Эшләпәһе янтайған.

847. Ҡояшҡа аса күҙен,
Ҡыҙҙар ярата үҙен.
Баҡса, болонда үҫә,
Бал ҡорто балын эсә*.

## Киндер, тарма

848. Төбө тамыр,
Уртаһы һеңер,
Осо май.

849. Төбө тамыр,
Уртаһы һеңер,
Башы майлы,
Ашамаға яйлы.

850. Оҙон-оҙон ҡолғалар,
Һелкенгеләп ҡуялар,
Ялбыр башлы, еҙ тешле,
Тырпайышып торалар.

851. Табаҡас башында татлым бар.

852. Тиреһен кейәләр,
Кәүҙәһен ташлайҙар,
Башын ашайҙар.

853. Тарт та йолҡ, тарт та йолҡ,
Килеп сығыр Тарматай.
Өҙөрһөң, һуғырһың,
Кейем итеп кейерһең.

854. Кәртә аҫтында тирәк,
Тирәк һайын оя,
Оя һайын йомортҡа.

855. Өй уртаһы ҡыл арҡан,
Мөйөш һайын оя,
Оя һайын бер йомортҡа.

## Киндер орлоғо

856. Бер һабаҡта етмеш япраҡ,
Етмеш япраҡта етмеш оя,
Етмеш ояла етмеш йомортҡа.

## Етен

857. Һылыу буйлы,
Зәңгәр күҙле.

## Етен орлоғо

858. Майы күп, йәне юҡ.

## Мамыҡ

859. Күтәреп була,
Йыраҡҡа ырғытып булмай.

860. Затлы нәмә — ашап булмай,
Күтәреп була — ташлап булмай.

## Мәк

861. Бикле келәт эсендә ҡара ҡом.

862. Бәләкәй генә йорт,
Эсе тулы ҡара ҡорт.

863. Бер ботаҡ,
Бер ботаҡта бер мең ҡара борсаҡ.

864. Таяҡ,
Таяҡ өҫтөндә маяҡ.
Маяҡ өҫтөндә кибет,
Кибет эсендә мең егет.

865. Уҡ, уҡ өҫтөндә суҡ,
Һикһән ике кибет,
Алтмыш ике егет.

## ЕМЕШ-ЕЛӘК, ЙӘШЕЛСӘЛӘР

### Муйыл

866. Эйелә, бөгөлә,
Аҡ мамығы түгелә,
Ҡара күҙе күренә.

867. Сәскәһе ап-аҡ ҡар кеүек,
Емеше була ҡара.
Таба алаһың туғайҙа.
Ни була? Уйлап ҡара[*].

868. Урманда ҡара төймәм эленеп тора.

869. Бер ағаста мең ҡара.

### Балан менән муйыл

870. Ҡыҙыл ситегем менән ҡара ситегем
Ағас башында элеүле ҡалды.

### Миләш, балан

871. Ете юлдың сатында
Егәрле еңгә ултыра.
Муйынсағын таҡҡан,
Ҡыҙыл кершән яҡҡан.

872. Юл буйында һылыу килен
Биҙәнә лә төҙәнә.

873. Ете юлдың сатында
Һулыған тирәк ултыра.
Ҡанатынан ҡан тамып,
Ҡарғай-ҡарғай ултыра.

874. Бөркәнсегем ҡан ише,
Бороп, талға ташланым.

875. Сытырлы-мытырлы,
Үҙе йом(о)ро,
Үҙе ҡып-ҡыҙыл.

876. Урман яғалай ҡыҙыл төймә.

877. Урманда ҡыҙыл ситегем эленеп тора.

878. Ҡаршыма килеп баҫҡан,
Ҡыҙыл муйынсаҡ аҫҡан.

879. Иҙел буйында ахаҡ төймә.

880. Сытыр-мытыр араһында
Ҡыҙыл әтәс ултыра.

881. Уҡтау ҙа уҡтау,
Уҡтау башы суҡтау,
Уны тапҡан егеттәргә
Бер сәкмәнлек ҡыҙыл буҫтау.

882. Ялбыр ағас башына
Ҡыҙыл ситек эленгән.

## Киптерергә эленгән балан

883. Өй башында ҡыҙыл ситек.

## Гөлйемеш

884. Ал яулығын ябынған,
Башына ут ҡабынған.

885. Аҡ яулығын ябынған,
Тырнағына ҡыҙыл ҡына яғынған;
Ҡулым һуҙҙым — тешләп алды,
Шул тиклем дә һағынған.

886. Тышы ҡабыҡ, эсе мамыҡ.

887. Йәй башында сәскә ата,
Сәскәләре ал ғына.
Тотһаң, сәнсер сәнскеләре —
Ҡырҙан күҙең һал ғына.

## Ҡурай елəге

888. Еҙ уймаҡтың эсендə
Ҡанлы бармаҡ ултыра.

889. Ҡыҙыл битле ҡыҙ баҫҡан,
Ҡыҫып алһаң — ҡан ҡоҫҡан.

890. Оҙон ҡурай үлəндəр,
Ҡыҙыл алҡа элгəндəр.

891. Тəме тəмле,
Алһыу тəнле,
Үҙе йəмле.

892. Эй, ҡан тамды, ҡан тамды,
Ҡан тигəнем бал булды.

893. Барса ерен ҡан алыптыр — ҡаны юҡ,
Үҙе берҙер — балаларының һаны юҡ.

894. Бəлəкəй генə ҡапсыҡ,
Ҡапсыҡ эсендə ҡыҙыл битле ҡарсыҡ.

895. Ҡыҙыл битле ҡарсыҡ,
Ауыҙы бар, теше юҡ,
Уны һөймəҫ кеше юҡ.

## Сейə

896. Əлкəн-əлкəн, əлкəн ҡош,
Əлкəндəшеп ултыра,
Ҡанатына ҡан һауған,
Емелдəшеп ултыра.

897. Сытыр-мытыр араһында
Бызырый[79] күҙле эт ята.

898. Алтмыш ҡарағай башында
Алтмыш ҡарағош ултыра.
Ҡанатынан ҡан ағып,
Ҡанын ҡойоп ултыра.

899. Йомро-йомро ҡыҙыл төймə,
Уға ҡыҙҙар ялынған.

900. Ҡыҙыл күҙең ҡыҙартып,
Ҡыҙҙырма мине, күгәрсен!

901. Кәк(е)ре ҡайын аҫтында
Ҡан тамсылап ултыра.

902. Үҙе шарҙай, һыуы ҡандай.

903. Тәме балдай, һыуы ҡандай.

## Күгән емеше

904. Оҙон ағас башында
Күк күгәрсен ултыра.
«Бөгөн таңда алмаһаң,
Китәмен», — тип ултыра.

## Еләк

905. Барғанда йырлап бара,
Ҡайтҡанда илап ҡайта.

906. Ҡыҙыл-ҡыҙыл ҡыҙыҡай,
Ауыҙынан тамған ҡыҙыл ҡан.

907. Ҡыҙыл төймә таптым,
Ауыҙыма ҡаптым.

908. Алһыу битле йомро ҡыҙ,
Бикә түгел, бей түгел,
Уға башың эй, бөгөл!

909. Тау башында бер тәкә
Башын күтәрә алмай ята.

910. Ҡыҙыл-ҡыҙыл төймәләр
Келтен-келтен ултыра.
«Бөгөнгө көн алмаһалар —
Китәмен», — тип ултыра.

911. Йомро-йомро-йомро туп,
Йомро башлы ҡыҙыл туп.
Башы түбән һалынған,
Уға ҡыҙҙар ялынған.

912. Түңәрәк, түңәрәк шар кеүек,
Ҡыҙыл, ҡыҙыл ҡан кеүек;
Башы түбән һалынған,
Ҡыҙҙарға ҡарап ялынған.

913. Ҡара ерҙә ҡаҙан аҫтым —
Ҡайнамайынса беште;
Аҡыллыға йомаҡ әйттем —
Уйланы ла белде;
Аҡылһыҙға йомаҡ әйттем —
Тыңланы ла көлдө.

914. Мин ни күрҙем, ни күрҙем,
Көнгә бешкән аш күрҙем.

## Ҡарағат

915. Эсе ҡыҙыл, тышы ҡара,
Ышанмаһаң, ашап ҡара.

## Ҡара бөрлөгән

916. Яр аҫтында ҡара тәкә
Һаҡалын һәлберәтеп ята.

## Картуф

917. Ер аҫтында еҙ бүкән[80].

918. Ер аҫтында еҙ түңгәк.

919. Аҫты туҡмаҡлы,
Өҫтө ботаҡлы.

920. Сәскәһе ағасында,
Алмаһы тамырында.

921. Башы елбәҙәк,
Төбө түңәрәк.

922. Берәү генә ер аҫтына күмелде,
Көҙ етеүгә балалары күренде.

923. Инәләре ултырып тора,
Балалары ҡуба тора.

924. Тупырлаған туп ҡына,
Аяҡ-ҡулы юҡ ҡына.

925. Төбө алмалы,
Башы салмалы[81].

926. Башы — тәтәй,
Төбөндә — унлап күкәй.

927. Башымды ла киҫәләр,
Билемде лә киҫәләр,
Бер туҡмаслыҡ он тапмайҙар,
Минең менән көн итәләр[82].

## Кәбеҫтә

928. Ҡат-ҡат тунлы,
Ҡарыш буйлы.

929. Ҡат-ҡат тун кейгән,
Әллә өшөрмөн тигән?

930. Ҡырҡ ҡат тунлы,
Быйыл уңды.

931. Ҡат-ҡат яулығым,
Сисәм дә ташлайым,
Сисәм дә ташлайым.

932. Етмеш төрлө кейем кейгән —
Береһен дә элмәгән[83].

933. Ҡат-ҡат сепрәк,
Ятҡан ере тупраҡ.

934. Ҡат-ҡат ҡатлама,
Күтәреп ал, ташлама.

935. Яҫы-яҫы яп(ы)раҡ,
Ятҡан ере туп(ы)раҡ.

936. Ҡат-ҡат ҡатлансыҡ,
Ҡатлауҙары ап-асыҡ.
Яҫы-яҫы яп(ы)раҡ,
Ятҡан ере туп(ы)раҡ.

937. Ишек алдым уратма,
Уны эҙләрһең бер аҙна.

938. Ҡат-ҡат яулығым,
Сисәм дә ташлайым,
Сисәм дә ташлайым.

939. Ҡат-ҡат Ҡатифа,
Ҡатланалыр Латифа,
Төрлән мулла килә, тип,
Төрләнәлер Латифа.

940. Ҡатман ағай килгәндә,
Ҡатланғандыр яулығым,
Төрмән ағай килгәндә,
Төрләнгәндер яулығым.

941. Ҡабара-ҡабара ҡабара күк,
Ҡабарынган күмәс күк.

942. Ҡырҡ ҡат күлдәк кейгән,
Туңҡайып үлгән.

943. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ,
Үҙе мең ҡат кейенгән.

944. Ултыра бер аҡ сүлмәк,
Өҫтөнә кейгән йөҙ күлмәк.

945. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ,
Өнһөҙ-йөнһөҙ,
Мең ҡат кейем кейгән,
Түр башына менгән.

946. Аҡ ҡаҙым һыңар аяҡ өҫтөндә ултыра[84].

947. Аҙбар тулы аҡ ҡаҙым,
Бары ла һыңар аяғын күтәргән.

948. Аҡ ҡаҙым ҡырҡ ҡат ҡанатлы,
Шулай булһа ла оса алмай.

949. Эҫеләнгән һайын
Ҡат-ҡат тун кейә.

950. Башы түңгәк,
Үҙе күм-күңгәк.

951. Ямал яулығы йөҙ ямау*[84a].

## Кишер

952. Ер аҫтында алтын ҡаҙыҡ.

953. Ер аҫтында еҙ уҡлау,
Уны белгән егеттәргә
Бер сәкмәнлек буҫтау.

954. Ер аҫтында еҙ ҡашыҡ.

955. Ҡыҙыл ҡыҙым ер аҫтында,
Сәскенәйе ер өҫтөндә.

956. Ерән бабам ер аҫтында,
Һаҡалдары ер өҫтөндә.

957. Осо нәҙек, төбө йыуан,
Ярата уны ҡуян.

958. Йәшел һаплы алтын бәке —
Ул ни?

## Һуған

959. Түтәлдә үҫкән йәш ҡыҙҙы
Кем үпһә, шул илар.

960. Түтәлдәге түтәйгә
Кем тотона, шул илар.

961. Бәләкәй генә ҡыҙ
Ҙур ҡыҙҙы илата.

962. Бохарала бар бер емеш,
Сисендерһәң, илата, имеш.

963. Ормай, һуҡмай,
Үҙе илата.

964. Ер аҫтында ерән ат,
Уның тиреһе ете ҡат;
Һуйырһың, тунарһың,
Тунағанда, иларһың.

965. Үҫкәндә — япрағы аҙыҡ,
Үҫеп еткәс — тамыры аҙыҡ.

966. Ер аҫтында ерән ат,
Уның тиреһе ете ҡат.

967. Тышы һары, эсе аҡ,
Ай-һай, күңел ләззәте!
Алыҫтан тороп илата,
Ай-һай, күңел йомшағы!

968. Тиреһе бар, йәне юҡ,
Киҫәм-киҫәм, ҡаны юҡ.

969. Бабай ҡат-ҡат тун кейгән,
Сисендерһәң, иларһың.

970. Сибәр генә апайыма
Ҡарайым да илайым,
Ҡарайым да илайым!

971. Үҙем тунайым,
Үҙем илайым.

## Борос

972. Йомаҡ-йомаҡ,
Йомағым йомғаҡ,
Ҡарасай борсаҡ,
Ҡап ҡоҫҡаҡ.

973. Ҡарасай башмаҡ ҡап ҡоҫҡаҡ.

## Шалҡан

974. Ят, ят, яп(ы)раҡ,
Ятҡан ере туп(ы)раҡ;
Үҙе һимеҙ — майы юҡ,
Тиреһе ҡалын — йөнө юҡ.

975. Ите һимеҙ, майы юҡ,
Тиреһе ҡалын, йөнө юҡ.

976. Ер аҫтында һаргылт ҡарт,
Һаҡалынан ныҡлап тарт.

977. Үҙе йомро — ай түгел,
Төҫө һары — май түгел,
Ҡойроғо бар — сысҡан түгел[85].

## Сөгөлдөр

978. Үҙе түңәрәк — туп түгел,
Төҫө ҡыҙыл — алма түгел,
Ҡойроғо оҙон — сысҡан түгел.

979. Башы йәшел яп(ы)раҡ,
Ятҡан ере туп(ы)раҡ;
Үҙе ҡыҙыл ит кеүек,
Ашамаға ҡатыраҡ.

980. Ҡыҙыл ҡыҙым ер эсендә,
Сәсе ер өҫтөндә.

981. Тарҡауылда татлы тамыр.

982. Тышы ҡандай,
Тәме балдай.

983. Ер аҫтында ҡыҙыл әтәс[86].

## Ҡыяр

984. Бәләкәй генә йорт,
Эсе тулы ҡорт.

985. Бер сапсаҡта мең егет.

986. Бер киҫмәктә мең егет.

987. Кибет,
Кибет эсендә йөҙ егерме егет.

988. Тәҙрәһе юҡ, ишеге юҡ,
Эсе тулы ваҡ халыҡ.

989. Алтын-алтын яп(ы)раҡ,
Ятҡан ере туп(ы)раҡ;
Алтын менән ҡаплаған,
Көмөш менән һаплаған.

990. Ишекһеҙ, тәҙрәһеҙ булған,
Эсенә кеше тулған[87].

## Помидор

991. Алма тиһәң — алма түгел,
Ҡыяр тиһәң — түңәрәк.

992. Түңәрәк кенә ҡыҙыл йорт,
Эсе тулы ҡорт.

## Ҡарбуз

993. Ул ни нәмә?
Ҡанға оҡшай — ҡаны юҡ,
Ҡатыны юҡ, ире юҡ,
Балаларының һаны юҡ.

994. Йәшел башлы хан,
Хандың эсе ҡан,
Ҡан эсендә мең йән.

995. Йәшел һарай эсендә,
Ҡыҙыл баяр ултыра.

996. Шар,
Шар эсендә ҡан,
Ҡан эсендә хан балалары.

997. Тәҙрә, ишек ҡуймаған,
Эсен кемдер буяған.

998. Үҙе ҡып-ҡыҙыл,
Күлдәге йәм-йәшел.

999. Бер йомарлам йомро таш,
Эсендә көнгә бешкән аш.

1000. Тышы йәшел, эсе ҡыҙыл,
Аҡса биреп алалар.
Уны күргән балалар
Тилмерешеп ҡалалар.

1001. Эсе ҡып-ҡыҙыл,
Тышы йәм-йәшел.

1002. Үҙе шарҙай,
Эсе ҡандай,
Тәме балдай.

1003. Түңәрәк тәнле,
Бал кеүек тәмле.

1004. Өйө йәшелгә буялған,
Эсендә ҡыҙыл шаршау.

1005. Ҙала тулып аунап ята,
Йомро-йомро тубал баш.
Эсе йәшерен, тышы йәшел,
Үҙе шундай тәмле аш[*].

## Ҡауын

1006. Яҫы-яҫы яп(ы)раҡ,
Ятҡан ере туп(ы)раҡ.
Ҡайыш менән бәйләнгән,
Көмөш менән һипләнгән.

1007. Хоҙай биргән туп ҡына,
Аяғы-ҡулы юҡ ҡына,
Уҡа менән тегелгән,
Көмөш менән һибелгән.

1008. Бер арҡанда утыҙ ҡуй бәйләүле ята.

1009. Тауыҡ һуйҙым — аҡ ҡанлы.

1010. Төбө тулы яп(ы)раҡ,
Тумарлаған туп һымаҡ.

## Ҡабаҡ

1011. Ҡатыны юҡ, ире юҡ,
Ҡайтып керер ере юҡ.
Келәте бар, малы юҡ,
Балаһының һаны юҡ.

1012. Үҙе — бер бөртөк,
Эсе — мең бөртөк.
Башы ерҙә,
Ҡойроғо ҡоймала.

1013. Күк кәзәм күк үләндә ятып һимерҙе.

1014. Бер һыйырым алабаш,
Яҡ-яғына ҡарамаç.

1015. Йомро ятҡан таш күрҙем,
Тоҙһоҙ бешкән аш күрҙем.

1016. — Ерҙә ята табаҡ,
Исеме уның?
— Ҡабаҡ.

## Алма

1017. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ үçә,
Үçә лә дөп итеп ергә төшә.

1018. Көн күргәндә: «Бешәм», — ти,
Ел килгәндә: «Төшәм», — ти.

1019. Оҙон ҡолға башында
Ҡыҙыл сәпсек ултыра.
«Ел-дауылдар сыҡтиһә,
Осамын», — тип ултыра.

1020. Ҡыҙарып беште — ергә төштө.

1021. Сәскәһе ап-аҡ,
Емеше ҡыҙыл.

1022. Алһыу битле ҡыҙ үҫте,
Дөп итеп ағастан төштө.

# III. ЙӘНЛЕ ДОНЪЯ

## ҠЫР ХАЙУАНДАРЫ, ЙӘНЛЕКТӘР

### Айыу

1023. Ана бара Алып,
Ҡолаҡтарын һалып.

1024. Ләп-ләп килә, атлап килә,
Йүгереп килә, үкереп китә,
Йөрәгеңде ярып китә,
Баш ҡапҡасын айырып китә.

1025. Йәйен — урманда батша,
Ҡышын — ҡарҙан да аҫта.

1026. Ҡырпаҡ ҡар төшөүгә эҙен юғалта.

### Айыу менән йылан

1027. Еҙнәм атын менеп булмай,
Еҙ ҡамсыһын тотоп булмай.

1028. Ағайымдың аҫау атын менеп булмай,
Еҙ ҡамсыһын тотоп булмай.

### Бүре

1029. Ана бара хан,
Ауыҙы-мороно ҡан.

1030. Ана бара Алып,
Ике ҡолағын һалып,

Айыу беләк, таш йөрәк,
Уны белмәгән һин дүрәк.

1031. Ас яңаҡлы әрмәнде
Алып китте сәкмәнде[88].

## Бүре күҙе

1032. Арғы ауылда ут яна.

## Бурһыҡ

1033. Тауға менер лурт-лурт,
Тауҙан төшөр лурт-лурт,
Өйөнә ҡайтыр, йоҡлап ятыр,
Уны белгәндең ғилеме артыр[89].

## Һуҫар

1034. Урманда була, ағаста ҡуна,
Артынан күптәрҙе эйәртә,
Йөрөтә, йүгертә, өшөтә, тирләтә,
Бай яғаһын (башын) биҙәтә.

## Тейен

1035. Ағастан ағасҡы(а)
Һикерә ҡарасҡы.

1036. Тап-тап, табағас,
Табағасҡа мең ағас,
Ҡойроғо бер ҡолас.

1037. Һикереп менә ботаҡҡа,
Килеп эләгә тоҙаҡҡа,
Бай тунына бер ямау.

1038. Сәтләүекте ярата,
Һунарсыны ҡарата.

1039. Үҙенән ҡойроғо оҙон.

1040. Ялҡын кеүек ялт-йолт итә,
Ҡапыл һикереп китә.
Йәйе уның эштә үтә,
Ҡышын сәтләүек сиртә.

## Аҫ (ҡараҡойроҡ)

1041. Мең-мең, мең икән,
Бармаҡтары ун икән.
Муйыл ҡара күҙе бар,
Уйлап ҡара, нимә икән?

1042. Мең-мең, мең икән,
Бармаҡтары ун икән.
Ҡорбанғәли күҙе бар,
Ҡойроҡ осонда миңе бар.

## Төлкө

1043. Ҡыҙыл билле ҡыҙ килде,
Ҡыланды ла юғалды.

1044. Ҡырҙа ҡырлау,
Ҡыҙыл ғына быҙау.

1045. Көлтә ҡойроғон уйната,
Байҙар ҡуйынын йылыта.

1046. Яһана-яһана-яһана кеүек,
Яһанып килгән кейәү кеүек.

1047. Ҡылансыҡ ҡыҙ ҡырҙа йөрөй,
Ҡыр тауығын ҡыра йөрөй.

## Ҡуян

1048. Талғыр һыйырым тал сәйнәй,
Тал төбөндә бөксәңләй.

1049. Сал тәкәлә мөгөҙ юҡ.

1050. Урмандан сығыр,
Ялан буйлап сабыр.

1051. Йылына ике тапҡыр тунын алмаштыра.

1052. Кәкре ҡайын аҫтында
Ураҙбикә бөксәңләй[90].

1053. Йөнө йомшаҡ, үҙе ҡурҡаҡ.

1054. Йәйен һоро, ҡышын аҡ,
Уға шулай яҡшыраҡ[91].

1055. Бәләкәс кенә Батыш,
Ҡайын аҫтында ятыш.
Шарт итте, ялт итте,
Шырлыҡҡа инеп юҡ булды.

1056. Әйтәйем бер йомаҡ:
Йәйен һоро, ҡышын аҡ.
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, ҙур ҡолаҡ.

1057. Әлеге лә баяғы,
Бар ине пар аяғы.
Үҙе ҡурҡаҡ, һаҡ була,
Ҡыш мәлендә аҡ була.

1058. Бер атым бар — мәңге,
Ҡолаҡтары шәңге.
Баҙарға илтеп һаттым иһә,
Давайлайһың динге[92].

1059. Ботаҡ аҫтында монтоҡ,
Ҡойроғо сонтоҡ.

1060. Ҡыуылдым-ҡыуылдым,
Ҡырға килеп быуылдым.

## Ҡуян эҙе

1061. Кәкре ҡайын аҫтында
Хандың ҡыҙы юл һалған.

## Ҡуян, эт, бысаҡ, ҡаҙан, сүмес, ҡалаҡтар

1062. Урмандан сығыр,
Бикәнтәйе тотор,
Биктимере һуйыр,
Оло ҡатыны бешерер,
Кесе ҡатыны төшөрөр,
Балалары ашар[93].

## Болан

1063. Ҡойроғо бик ҡыҫҡа,
Мөгөҙө ботаҡтай,
Сабырға бик оҫта.

## Ҡоралай

1064. Бохаранан килгән монтор,
Ҡойроғо сонтор.
Ҡайҙа минең мыртышым,
Рәт-рәт аҡ тышым?

1065. Бохаранан килгән монтоҡ,
Ҡойроғо сонтоҡ.

## Юлбарыҫ

1066. Буй-буй күлдәк кейгәндәр,
Йылы яҡтан килгәндәр.
«Ю» менән башланалыр.
Кешегә ташланалыр*.

## Маймыл

1067. Мөлдөр-мөлдөр мөлдөр күҙе,
Әҙәм төҫлө унның йөҙө —
Оҡшамай һүҙе;
Барҙыр ҡойроғо,
Хаҡтың бойороғо.

1068. Йүнһеҙҙең дә йүнһеҙе,
Һине үсекләй үҙе.

## Кенгуру

1069. Ҡолағы оҙон — ҡуян түгел,
Ҡойроғо оҙон — арыҫлан түгел,
Кеҫәһе бар — кеше түгел[*].

## Фил

1070. Кескәй генә күҙҙәре,
Мороно оҙон бигерәк.
Уның исемен әйтеү өсөн
Өс кенә хәреф кәрәк.

1071. Кәүҙәһе — бейек кәбән,
Танауы — ергә тейгән,
Аяҡтары — бүрәнә,
Юҡ ул беҙҙең тирәлә[*].

## Терпе

1072. Энәләрен ҡалдырмай йөрөй —
Үҙе тегеүсе түгел[94].

1073. Энәһе бар — тегә алмай[95].

1074. Тыны бар, өнө юҡ,
Кейеҙенең йөнө юҡ,
Үткер ҡылдан эшләгән
Тирмәһендә ҡышлаған.

1075. Үҙе бүрек кеүек кенә,
Кейгән туны энәле.

1076. Ҡым-ҡым ҡылиҡап,
Ҡойроҡтары сылиҡап,
Сәслек-сөслөк аяғы,
Һикһән төрлө таяғы.

1077. Бәләкәй генә бер ҡарсыҡ,
Тәне тулы шырпы.

1078. Йомро-йомро туп кеүек,
Бөтөн тәне шырт кеүек.

1079. Яҫы ерҙә яу йомроһо.

1080. Энәһен тотҡан,
Юл буйына сыҡҡан.

1081. Энәһе бар — тотоп булмай,
Энәһе менән тегеп булмай.

1082. Ялан ерҙә энәле йомғаҡ[96].

1083. Энәле йомғаҡ йөрөп ята,
Үләндәрҙе ҡыштырлата*.

## Йылан

1084. Оҙон-оҙон эҙ килер,
Оҙон буйлы ҡыҙ килер,
Ҡабаҡтары ҡалтырап,
Маңлайҙары ялтырап.

1085. Оҙон-оҙон юлдарҙан
Оҙон-оҙон ҡыҙ килә,
Башҡынайы ҡалтырай,
Күҙгенәйе ялтырай.

1086. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ерҙән китә.

1087. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ атлап йөрөй.

1088. Урмандан сығар,
Һырты сыбар,
Түше менән шыуар,
Ауыҙын асыр,
Телен һуҙыр,
Уға кем сыҙар?

1089. Урмандан сығар,
Һырты сыбар,
Түше менән шыуар;
Эфәләм төрлө,
Алтын һырлы,
Төймә башлы,
Тоҙ күҙле.

1090. Оҙон-оҙон оҙон юл,
Оҙон юлды кем уҙыр?
Бауыры сыбар күкәлтәйҙең
Йоморткаһын кем табыр?

1091. Таба, таба, табалама,
Таба арҡылы юрғалама.
Айғыр күрһәң, кешнәмә,
Кеше күрһәң, тешләмә[97].

1092. Тыума тыуыр, тауға шыуыр.

1093. Тауға менә таяҡһыҙ,
Тауҙан төшә аяҡһыҙ.

1094. Ялан ерҙә яу ҡамсыһы.

1095. Ялан ерҙә утлы ҡайыш.

1096. Ялан ерҙә майлы ҡайыш[98].

1097. Үлән араһында оҙон ҡамыш.

1098. Шағанайҙың сыбыртҡыһы
Шартламай ҙа яндыра.

1099. Майлы ҡайышым юлымда,
Тота алмайым ҡулыма.

1100. Яҫы ерҙә яу ҡайышы[99].

1101. Ер өҫтөндә еҙ ҡамсы.

1102. Урмандан сығыр,
Түше менән шыуыр.

1103. Яҙ етһә — терелә,
Көҙ етһә — үлә.

1104. Юл буйында майлы ҡамсы.

1105. Һыуҙа йөҙә,
Ерҙә шыуа.

1106. Ҡойроғо осло,
Туҙ башлы.

1107. Оҙон эсәк,
Бер осо төйөнсәк.

1108. Сытыр-мытыр араһына
Ҡара ҡайыш ташланым.

## Кеҫәртке

1109. Кеше тиһәң — дүрт аяҡлы,
Хайуан тиһәң — үрмәләй.

1110. Ҡыуыш таштың аҫтында
Йәшел тунлы ҡыҙ ята[100].

## Сысҡан

1111. Һоро бүре килде,
Өйөм ситен ҡырҙы.

1112. Иҙән аҫтында бесмәгән тәкә йөрөй.

1113. Баҙҙа йәшәй,
Дошманы — бесәй.

## Ирлән

1114. Ер аҫтында ҡара һыйыр он тарта.

## Йомран

1115. Ерҙе тиштем — йәшәнем,
Ер өҫтөнә сыҡтым — үлдем.

1116. Ер аҫтында ерән атым.

1117. Кәк(е)ре егет алтын ҡаҙый.

## Йомран ояһы

1118. Тоҡ — күләгәһе юҡ.

## Йомран һыҙғырыу, тәлмәрйен баҡылдау

1119. Ер аҫтында еҙнәм аты кешенләй,
Һыу аҫтында бабам аты кешенләй.

## Алйырҙан, балыҡ

1120. Боҙ аҫтында болан ала[101] дөңгөлдәк,
Ер аҫтында ерән ала дөңгөлдәк.

1121. Ер аҫтында ерән атым,
Боҙ аҫтында туры атым.

1122. Боҙ аҫтында болан ала бәкә суҡ,
Ер аҫтында ерән ала бәкә суҡ.

1123. Ер аҫтында ерән ала таҡ та тоҡ,
Боҙ аҫтында болан ала таҡ та тоҡ.

## Балыҡ, йылан

1124. Боҙ аҫтында боҙан көйшәй — сыңҡылдыҡ,
Ер аҫтында еҙән көйшәй — сыйҡылдыҡ.

## Һуҡыр сысҡан

1125. Бар ерҙә лә тормай,
Ҡырҙы күрмәй,
Кеше белмәй,
Йондоҙҙарҙы һанамай.

## Балыҡ

1126. Көмөш тәнле,
Ите тәмле.

1127. Ҡойроғо ергә теймәҫ,
Һырты көнгә көймәҫ.

1128. Әңгей, мәңгей,
Ҡолаҡтары сәңгей;

Баҙарға илтеп һатыр инем,
Дүрт копейки давай динге.

1129. Бер атым бар — мәңге-мәңге,
Ҡойроҡтары — сәңге-сәңге.
Баҙарға илтеп һатыр инем,
Сәптер алтын давай динге.

1130. Һыуҙа йөҙмәй түҙә алмай,
Һыу өҫтөндә йөҙә алмай.
Йөҙмәй түҙмәҫ кем булыр?
Көмөш күлдәк шул булыр.

1131. Яр аҫтында батман ятыр,
Уны тотҡан Боҫман батыр,
Боҫман алған бер ҡатын —
Тәңкәләре шау алтын,
Тырнаҡтары көмөш-алтын.

1132. Яр аҫтынан яу уҙа,
Һөңгөлө лә мылтыҡлы.

1133. Йәне бар, ҡаны бар,
Һыуһыҙ ерҙә торҙо(н)иһә,
Йәне лә юҡ, ҡаны ла юҡ.

1134. Ҡанаты бар — оса алмай,
Күккә табан ҡарамай,
Йондоҙҙарҙы һанамай,
Ҡоро ерҙә тора алмай[102].

1135. Башы бар — сәсе юҡ,
Күҙе бар — ҡашы юҡ.
Ҡанаты бар — оса алмай,
Болоттарҙы ҡоса алмай[103].

1136. Ана бара, эҙе юҡ,
Боғаҙлаһаң, ҡаны юҡ.

1137. Ҡанаты бар — осмайҙыр,
Аяғы бар — йөрөмәйҙер,
Ерҙә тормай, кеше күрмәй,
Нәфсе шуны теләйҙер.

1138. Аяғы юҡ — йөрөй,
Ҡанаты бар — осалмай[104].

1139. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ даръя буйлай.

1140. Һыуҙа тыуҙы,
Ерҙә үлде[105].

## Балыҡ ыуылдырығы

1141. Бәләкәй генә бәндәлә
Йөҙ ҙә етмеш биш йомортҡа.

## Әрселмәгән балыҡ

1142. Асылмаған әрйәлә
Беселмәгән тун ятыр.

## Ташбаш балыҡ

1143. Үҙенән башы ҙур.

## Күпер, боҙ, балыҡ, нәрәтә менән ау

1144. Ағас күпер,
Ағас күпер аҫтында таш күпер,
Таш күпер аҫтында утыҙ ике әрмиә,
Әрмиәнең эйәһе
Әрәле лә бәрәле.

## Ҡыҫала

1145. Ике мөгөҙө,
Алты аяғы,
Береһенең дә юҡтыр тояғы.

1146. Тегеүсе тиһәң — тегеүсе түгел,
Итексе тиһәң — итексе түгел.
Ауыҙында — энәһе,
Ҡулдарында — ҡайсыһы[106].

1147. Ҡыҫҡыстай ҡыҫа,
Урыны тик һыуҙа.

1148. Алға ла йүгерә,
Артҡа ла йүгерә,
Ҡыҫып ала,
Һелкеп һала.

## Ҡусҡар, ҡабырсаҡ

1149. Асыла ла ябыла,
Һыу буйында табыла.

## Һөлөк

1150. Сылтыр-сылтыр йүгәнем,
Һылыу ҡара дүнәнем.

1151. Быяла һауыт эсендә ҡара ҡыҙҙар йүгерә.

1152. Быяла сарҙаҡ эсендә
Ҡара ҡыҙҙар ситлектә.

1153. Бәләкәй генә ҡара малай
Көҙгөнән ҡарай.

1154. Ите бар — һөйәге юҡ,
Ауыҙы бар — теле юҡ.

## Тәлмәрйен

1155. Түңәрәк күлдә эт өрә.

1156. Үҙе бөкрәйгән,
Күҙе секрәйгән,
Сығам, ти ҙә ҡысҡыра.

1157. Бәкернисә — дүрт аяҡ,
Һикерә таяҡ-таяҡ.

1158. Үҙ күлендә үҙе батша.

## Гөбөргәйел

1159. Аяғын-ҡулын йәшерә
Таш күлдәге эсенә.

1160. Таш тирмәнең эсендә
Ураҙ кеүек байбисә.

1161. Бәләкәй генә бер әбей
Тупһа аша үт(ә)алмай.

1162. Шыптыр туным аҫтында
Секрей күҙле эт ята.

1163. Аҫты ла такта,
Өҫтө лә такта,
Башын аҫтына һалып, йоклап ята.

1164. Кырҡһаң — бысаҡ үтмәй,
Сәнсһәң — каны сыкмай.

1165. Кем үҙ йортон елкәһендә
Күтәреп йөрөтә?

1166. Һис касан да ашыкмаҫ,
Ауыр йөгөн ташламаҫ*.

## ЙОРТ ХАЙУАНДАРЫ

### Мал

1167. Ике Әүхәҙи,
Бер Әхмәҙи,
Бер сүмәлә,
Бер бумала,
Дүрт терәүес.

### Ат

1168. Иргә канат,
Солтанға һанат,
Йәй арымай,
Кыш карышмай.

1169. Койроғо һалпы,
Ике колағы кайсы,
Уны белмәгәндең
Арҡаһына — кайыш камсы.

1170. Дүрттер аяғы,
Ҡайсылыр ҡолағы,
Таштан ҡаты тояғы.

1171. Ауыҙы бар — көйшәмәҫ.

1172. Ауыҙы бар — көйшәмәҫ,
Теше бар — тешләмәҫ,
Ултырһаң — күтәрер,
Етәкләһәң — эйәрер.

1173. Тарта ла тарта,
Ул тартҡан һайын килем арта.

1174. Тимерсе лә түгел,
Балта оҫтаһы ла түгел —
Үҙе ауылда беренсе эшсе[107].

1175. Ҡыйыуҙар — ботона ҡыҫтырып,
Ҡурҡағыраҡтар етәкләп килтерә.

1176. Ауыҙыма тимер ҡаптым,
Ағайымды алып саптым.

## Өйөр айғыры

1177. Ҡолағы ҡайсылай,
Ҡойроғо ҡамсылай,
Йортон һаҡлап әйләнә,
Уҫал һаҡсылай.

## Ала ат

1178. Өлгөһөҙ бестем, йөйһөҙ тектем.

## Ат аяҡтары

1179. Дүрт ағай —
Икеһе алда,
Икеһе артта;
Ашығалар, йүгерәләр —
Береһен-береһе ҡыуып етә алмайҙар.

1180. Дүрт ҡоҙағый йүгерәләр,
Береһен-береһе уҙа алмайҙар.

### Ат тояҡтары

1181. Дүрт бабай,
Дүртеһенең дә
Һаҡалы артҡа ҡарай[108].

1182. Бәләкәй генә сеүәтә
Хандан хәбәр йөрөтә.

### Ат тояғы, ҡойроғо, ҡолаҡтары, ике күҙе

1183. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Һәпән ағай яңғыҙ;
Көлкәс ағай икәү,
Төймә һабағы икәү.

### Аттың тояғы, ҡолағы, ҡойроғо

1184. Дөбөрәт ағай дүртәү,
Килекәй ағай икәү,
Яппар ағай япа-яңғыҙ.

### Аттың тояғы, даға ҡаҙаҡтары, ҡойроғо

1185. Табыр-төбөр дүртәү,
Төймә ҡаҙаҡ бишәү,
Ағай-энеһе алтау,
Һәбләй эте яңғыҙ.

### Ат ҡойроғо

1186. Һыуға төшһә — мең,
Һыуҙан сыҡһа — бер[109].

## Ат дағаһы, даға ҡаҙаҡтары

1187. Бер ай аҫтында алты йондоҙ.

## Егеүле ат

1188. Ике ағас туҡмаҡ,
Арала йөн туҡмаҡ.

1189. Ике ағас туҡмаҡ,
Уртаһында иһаһай[110].

1190. Ике яғы бимаза,
Уртаһында һиһаһа.

## Һыйыр, ат, эт

1191. Өс малай, өс самай,
Береһе эсертә,
Береһе тарта,
Береһе һаҡлай.

## Һыйыр

1192. Алап менән һәнәк һыуға бара.

1193. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Төймә ҡаҙай икәү,
Ғәббәс ҡоҙа япа-яңғыҙ.

1194. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Илекәй ағай икәү,
Сәфәр ағай яңғыҙ.

1195. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Дөрмән ағай икәү,
Дәүли меҫкен бер үҙе.

1196. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Беҙ ағайың менән икәү,
Бисәм бахыр бер үҙе.

1197. Дөбөр-дөбөр дүртәү,

Ишәй ағай икәү,
Япай ағай япа-яңғыҙ.

1198. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Кимкәй ағай икәү,
Япасағы япа-яңғыҙ.

1199. Алпан-һәлпән,
Алама сапан,
Дүрт ҡормалы,
Кәк(е)ре ҡуллы,
Яҫы юллы.

1200. Ишек алдында сүмәлә,
Аҫтында дүрт бағана,
Алдында ике һәнәк,
Артында һепертке[111].

1201. Кәбән,
Бер яғына һөйәлгән һәнәк,
Икенсе яғына һепертке.

1202. Ике һөҙгөс,
Дүрт йөрөгөс,
Бер һелтәүес[112].

1203. Дүрт терәүес,
Ике ҡылыс,
Бер болғауыс.

1204. Дүрт мыштыр,
Ике йылтыр,
Ике тороҡ,
Бер бороҡ.

1205. Апсыҡ-апсыҡ,
Алама сапан,
Дүрт терәүес,
Бер болғауыс,
Кәк(е)ре ҡондоҙ,
Яҡты йондоҙ.

1206. Дүрт терәүес,
Бер болғауыс,
Алама сапан,

Кәк(е)ре ҡумыҙ,
Яҡты йондоҙ.

1207. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Ики-мики — икәү.

1208. Арҡаhы бар — аунамаç.

## Ала hыйыр, ала hыйыр тиреhе

1209. Ямауы бар, йөйө юҡ[113].

1210. Өлгөhөҙ бестем,
Епhеҙ тектем.

1211. Тегәм-тегәм — йөйө юҡ.

## hыйырҙың танауы, теле

1212. Ике усаҡҡа бер киçәү[114].

1213. Ике тишеккә бер болғауыс.

## hыйыр мөгөҙө

1214. Ҡоро ботаҡҡа ҡыйғыр ҡунмаç.

1215. Ҡуш ҡарағайға ҡар ҡунмаç.

1216. Кәк(е)ре ҡайынға ҡар йоҡмаç[115].

1217. Айыры ботаҡта ҡар тормаç.

1218. Ҡаҙыҡ башында ҡар тормаç.

1219. Ил ятhа ла Иләймән ятмаç[116].

1220. Ил ятhа ла ике батыр ятмаç.

## hыйырҙың мөгөҙө менән ҡойроғо

1221. Алда hәнәк,
Артта hеперткеhе.

## Һыйыр ҡойроғо

1222. Борам-борам бер үҙе.

## Һыйыр елене

1223. Турһыҡта һөтөм ойомай.

## Һыйыр имсәктәре

1224. Иҙән өҫтө бумала,
Аҫтында дүрт бағана.

1225. Бер түңгәктә дүрт ҡарый.

1226. Түшәк артында дүрт бауырһаҡ[117].

1227. Урындығым аҫтында дүрт көпшә,
Дүртеһе лә тиң көпшә.

1228. Һарайымдың аҫтында дүрт көпшә.

1229. Баҙ аҫтында дүрт көпшә.

1230. Баҙ аҫтында дүрт таған.

1231. Көймә аҫтында дүрт төймә.

## Һыйыр һауыу

1232. Дүрт батыр бер үк ергә атыр[118].

1233. Дүрт татар
Силәк төбөнә уҡ атар[119].

1234. Дүрт мишәр
Тәпән төбөн тишәр.

1235. Дүрт татар,
Дүртеһе лә бер күнәк төбөнә атар.

1236. Дүрт килендәш бер ҡойоға уҡ атыр.

1237. Дүрт апай
Биҙрә төбөн тапай.

## Дөйә

1238. Тәрән-тәрән соҡорға
Тирәк нисек үҫмәгән?
Оҙон муйын ҡусҡарға
Мөгөҙ нисек үҫмәгән?

1239. Арҡыс-торҡос,
Дүрт терәүес,
Бер болғауыс,
Торна муйын,
Ҡыйыш баш.

1240. Эйәре үҙендә, атлан да кит.

1241. Эйәре үҙендә — дуғаһы муйынында.

1242. Муйыны — дуға,
Арҡаһы — эйәр.

1243. Ҡоро ерҙең көймәһе.

## Дөйә, дөйә үркәсе, септәһе

1244. Апан-апан,
Алама сапан,
Ике конвой,
Бер ылау.

## Ишәк

1245. Ҡуян ҡолаҡлы,
Ат тояҡлы.

1246. Оҙон ҡолаҡ — ҡуян түгел,
Яй ҡуҙғала — һыйыр түгел.

## Һарыҡ

1247. Эсе күптәй, аяғы ептәй.

1248. Бото ҡылдай, эсе мискәләй.

1249. Йылыта, кейендерә,
Әҙәмде һөйөндөрә.

1250. Иртә килә Дәлим,
Кис тә килә Дәлим.
Төрлө-төрлө сәскәләрҙән
Төймә төйә Дәлим.

1251. Иртә лә ләй-ләй,
Кис тә ләй-ләй.
Төрлө-төрлө ебәктәрҙән
Төймә бәйләй*.

1252. Байбикәнең баса туны бер ҡырҡыла, бер үҫә.

1253. Йәй ҙә, ҡыш та бер тун кейеп йөрөй.

1254. Гел тун кейеп йөрөй,
Үҙе бер ҙә «тирләйем» тимәй.

1255. Тиреһе иләнмәгән,
Туны тегелмәгән,
Туғаным шуны кейеп йөрөй.

1256. Бейек-бейек тауҙарҙа,
Зифа буйлы талдарҙа
Йүгерә-йөрөй аҡ сәкмән[120].

1257. Тауға менһә — ләр-ләр,
Тауҙан төшһә — ләр-ләр.

1258. Төрөнгәс ул ап-аҡҡа,
Оҡшап тора болотҡа.
Ашата ла кейендерә,
Кешене һөйөндөрә*.

## Һарыҡ бәрәсе

1259. Бәләкәй генә буйы бар,
Әйләндереп кейгән туны бар.

1260. Асмаған һандыҡ эсендә
Текмәгән туным ята.

## Һарыҡ көтөүе

1261. Баҡырыҡ та баҡырыҡ,
Баҡырыҡ менән тулы тыҡ(ы)рыҡ.

## Һарыҡ йөнөн алыу

1262. Урман киҫәләр — юныҫҡыһы төшмәй.

## Кәзә

1263. Бәләкәй еңгәм һыуға бара,
Һырғалары ҡойола бара.

1264. Ары ла йүгерә Зәпзәки,
Бире лә йүгерә Зәпзәки,
Тамаҡ ҡыра Зәпзәки,
Һаҡал һелкә Зәпзәки.

1265. Ары ла йүгерә Зәпзәки,
Бире ла йүгерә Зәпзәки,
Төймә төйә Зәпзәки.

1266. Иртән сығыр Тәллән,
Кисен сығыр Тәллән,
Төрлө-төрлө үләндән
Төймә төйөр Тәллән.

1267. Тояғы бар — дағаһы юҡ,
Һаҡалы бар — аҡылы юҡ.

1268. Һикерәндәк, микерәндәк,
Һаҡалбай, ҡаҡ маңлай.

1269. Һаҡалы бар, аҡылы юҡ.

1270. Һаҡалы оҙон, аҡылы ҡыҫҡа.

1271. Кеше түгел — һаҡаллы.

1272. Һаҡалы бар, аҡылы юҡ,
Ул баҡсала һәр ваҡыт туҡ.
Ағастарға килһә ҡаҙа,
Ошо мәлгүн ала яҙа*.

1273. Үҙе аҡтай,
Ҡорһағы ҡаптай,
Кәкре тояғы шаҡтай.

1274. Үҙе аҡтай, ҡорһағы ҡаптай,
Башында кәкре таяғы,
Тотайым тиһәң, шаҡтай.

1275. Ҡойроғонан мөгөҙө оҙон[121].

## Кәзә тәкәһе

1276. Һаҡалы бар, аҡылы юҡ,
Ашайым тиһәң, ите юҡ [122].
Һауам тиһәң, һөтө юҡ.

## Кәзә бәрәсе

1277. Һаҡаллы килеш тыуа —
Берәү ҙә аптырамай[123].

## Эт

1278. Ҡойроғо уралған,
Теле һалынған.

1279. Ишектән инә лә
Балта һабына ултыра.

1280. Атаһы ҡырҡ,
Инәһе бер.

1281. Дүрт ҡолғаға бер ҡармаҡ.

1282. Дүрт ҡолғаға бер ҡойроҡ.

1283. Кәк(е)ре ҡойроҡ Ҡәлбениса
Ҡапҡа аҫтынан йөрөй.

### Эт ҡойроғо

1284. Арымай-талмай,
Эт артынан ҡалмай.

### Эт көсөктәре

1285. Бәләкәй апай һуҙылып ята,
Балалары тулып ята.

### Бесәй

1286. Аҡ кейеҙем өҫтөндә
Мәүли мулла ултыра.

1287. Үҙе суфый, үҙе урлаша,
Тотоп алһаң, тырнаша.

1288. Аҡ кейеҙем уртаһында
Ҡуҡрай мулла ултыра[124].

1289. Туны бар — сапаны юҡ,
Мыйығы бар, һаҡалы юҡ.

1290. Һике өҫтөндә һимеҙәк.

1291. Һике өҫтөндә бикә биҙәнә лә төҙәнә.

1292. Һике өҫтөндә бикәм,
Битен йыуа икән.

1293. Аяғы йомшаҡ, мыйығы ҡаты.

1294. Бағрый башлы, быҙ күҙле.

1295. Һике өҫтөндә ҡомғаны,
Ике күҙен йомғаны.

1296. Мейес башында ҡомған,
Ауыҙын-күҙен йомған.

1297. Көлдөксәлә ҡомған,
Ике күҙен йомған.

1298. Үҙе мейес башында,
Үҙе тун ябынып йоҡлай.

1299. Йөнө йомшаҡ, тырнағы осло.

1300. Бәләкәй генә еңгәм
Уҡлауын һөйрәтеп йөрөй.

## Бесәй күҙе

1301. Ике йондоҙ,
Ҡараңғыла тыҙ ҙа мыҙ.

## Бесәй менән эт

1302. Береһе өйҙө һаҡлай,
Береһе тышты һаҡлай,
Үҙҙәре бер-береһен күр(ә)алмай.

## Суҫҡа

1303. Тырҡылдыҡ, мырҡылдыҡ,
Мырҡылдашып ер һөрҙөк,
Һаҙға баттыҡ, тик яттыҡ.

1304. Бер ере лә ауыртмай,
Сырҡылдай ҙа мырҡылдай.

1305. Төрән танау ер һөрә.

1306. Һабан да түгелмен — һөрөргә яратам.

1307. Ҡолағы ҙур, ҡойроғо түңәрәк.

## Сусҡа, һыйыр, бейә имсәктәре

1308. Һигеҙ биләүен,
Дүрт тиләүен,
Ике муҡшы ҡатыны.

1309. Дөбөр-дөбөрҙөкө — дүртәү,
Иләймәндеке — ике,
Сөләймәндеке — ун ике.

## Мал мөгөҙө

1310. Йөҙ йыл буйы ятһа ла серемәҫ.

## Мал ҡойроғо

1311. Шәрәй ағай шәрәйгән,
Артынан уғы һерәйгән.

## Мал тиреһе

1312. Бер яғы ҡола ялан,
Бер яғы ҡара урман.

## ҠЫРАҒАЙ ҠОШТАР

## Ҡош

1313. Ҡунаҡҡа килдем — ҡыуаҡҡа ҡундым.

1314. Әрәмәгә шөшлө аттым.

1315. Баҫҡысһыҙ юғары менә,
Бауһыҙ түбән төшә.

1316. Баҫҡысһыҙ юғары менә,
Сылбырһыҙ түбән төшә.

## Ҡош, оя

1317. Балтаһыҙ, ҡулһыҙ йорт һала[125].

1318. Балтаһыҙ, ҡулһыҙ бәләкәй генә өй эшләгән.

## Ҡош ояһы

1319. Ағас башында бәйле муҡса.

## Йомортҡанан ҡош сығыу

1320. Ике ҡабат донъяға тыуған.

## Бөркөт

1321. Осоп киләм, осоп киләм,
Күҙгә эләккәнде тибеп киләм.

1322. Осоп, йөҙөп, ирәйеп,
Батша килә киңәйеп,
Ике ҡанатын йәйеп.

1323. Ҡара атым елә килә,
Юл ыңғайы тибә килә.

## Аҡҡош

1324. Ай аҫтынан юртҡан егет,
Алтын ҡурай тартҡан егет.
Көн аҫтынан юртҡан егет,
Көмөш ҡурай тартҡан егет.

## Торна

1325. Торҡо-тарҡы тора ла
Күккә менеп юғала.

1326. Сыбар кейемле,
Оҙон муйынлы,
Борсаҡ йыя,
Ҡайҙа ҡуя?

1327. Ике оҙон һырғауыл,
Һырғауыл башы йомро туп,
Йомро туп башы тағы һырғауыл,
Ул һырғауыл башы оҙон ҡыпсауыр.

1328. Торған булалар ҙа ҡысҡыралар:
«Торайыҡ та торайыҡ!»

1329. Торомтайым түрҙән уҙа,
Ике сатлы ҡойроғон һуҙа.

1330. Үҙе оҙон, сабыуы ҡыҫҡа.

## Төйләгән

1331. Йәйәһен киреп, килеп етә,
Йәшел тупты тибеп китә.

## Ҡоҙғон

1332. Ҡара ҡоҙай,
Ҡарап урай,
Емтек һорай.

## Ҡыр ҡаҙҙары

1333. Аҡлы-күкле күл буйынан
Ике сатлы юл һуҙыла.

1334. Ике сатлы еп ҡуҙғалды.
Күк күлгә инеп юғалды.

1335. Балан-балан барҙыр,
Балан ҡыуаҡ шарҙыр,
Ун ике ботаҡ үҙҙәре,
Мәрйен кеүек теҙелер,
Ебәк кеүек һуҙылыр.

## Турғай

1336. Тауҙан бейек,
Үләндән тәпәшәк.

1337. Бер ҡошом бар, тынмай,
Ағасҡа оя ҡормай,
Өйө — ерҙә,
Йыры — күктә.

## Сәпсек

1338. Сыбар кейемле урам малайы
Ил өҫтөндә көн итә.

## Селән

1339. Һаҙҙа йәшәй,
Тәлмәрйен ашай,
Үреләлә һыуҙыла.

## Аҡсарлаҡ

1340. Аҡ уймағым һыуға төштө,
Балдаҡтары уйыла төштө.

## Ҡарлуғас

1341. Ҡойроғон ҡайсылап,
Ауыҙын тамсылап,
Ағасһыҙ, мөйөшһөҙ,
Өй һалды еүешләп.

1342. Түше ап-аҡ,
Ҡойроғо ҡайсылай.

## Һандуғас

1343. Ары ла сут, бире лә сут,
Иһи ҙә, миһи ҙә.

## Сыйырсыҡ һәм уның ояһы

1344. Ҡолға башында бер өй,
Ҡунағым тәҙрәһенән йөрөй.

## Күгәрсен

1345. Гөлдөр-гөлдөр гөлдөрсөк,
Ҡыҙыл ситек, күк күлдәк[126].

1346. Гөлдөр-гөлдөр гөл итекле,
Гөлкәй ҡыҙыл ситекле.

1347. Көләс гөлкәй гөлдөрәк,
Ҡыҙыл ситек, күк күлдәк.

1348. Күҙе тоҙҙай,
Мороно моҙҙай,
Аяғы ҡыҙыл ситекле,
Йүгереүе ҡыҙҙай.

1349. Ҡыҙыл аяҡлы,
Земля ҡупай[127].

## Кәкүк

1350. Йомортҡа ла баҫмай,
Балаһын да баҡмай.

## Өкө

1351. Көндөҙ йоҡланым,
Төндә иланым (йырланым).

1352. Ағас башында бер Ҡолой
Көндөҙ йоҡлай, кис олой.

1353. Был ҡош, гүйә, ҡош батшаһы,
Сысҡандар аулай төнөн.
Ышыҡ ағас араһында
Йоҡлап үткәрә көнөн*.

1354. Көндөҙ боҫа ышыҡта,
Ауҙа йөрөй ысыҡта.

## Тумыртҡа

1355. Ағас башы туҡылдыҡ,
Туҡый-туҡый туҡ булдыҡ.

1356. Урмандан сығар,
Ҡойроҡ аҫты сыбар,
Алтын һырлы,

Дүрт ҡырлы,
Ашағаны ҡайры[128].

1357. Ҡара урман эсендә
Ағас ҡыңғырау шылтырай.

1358. Үргә менер бәлхис,
Түбән төшөр бәлхис,
Ҡойроҡҡайы биҙәкәй,
Әйт әле, был нимәкәй?

1359. Шаҡ-шаҡ шаҡына,
Сыҙар микән бағана?

1360. Аласа күлдәк,
Еҙ тырнаҡ,
Тере ҡупай.

1361. Бар урманды дауалай,
Ағастарҙы таҙарта.
Ҡышҡыһын да ял белмәй,
Туҡылдарға ярата*.

## Һайыҫҡан

1362. Ала ат еккән,
Тыранса тейәгән.

1363. Урмандан сығар,
Түше сыбар,
Башы көлтә,
Ҡойроғо баҫтырыҡ.

1364. Арбамдың баҫрауы оҙон.

1365. Баҫтырығы оҙон,
Көлтәһе ҡыҫҡа.

1366. Бәләкәй генә берәү,
Артында оҙон тerәү.

1367. Ағы аҡтай,
Ҡараһы ҡаҙҙай,
Мороно моҙҙай,

Күҙе тоҙҙай,
Йүгергәне ҡыҙҙай.

1368. Аҡ ере ҡар кеүек,
Йәшел ере һуған кеүек,
Йөрөшө мулла кеүек,
Тауышы шайтан кеүек.

1369. Тауға менһә — тыҡ-тыҡ,
Тауҙан төшһә — тыҡ-тыҡ.
Ике итәге буяулы,
Йәнгенәһе аяулы.

1370. Өйгә керһәм — шыҡ-шыҡ,
Тышҡа сыҡһам — шыҡ-шыҡ,
Ай-һай, үҙәкәй,
Ҡойроҡ осо биҙәкәй.

1371. Шыҡ-шыҡ шыҡылдыҡ,
Шыҡая-шыҡая ултырҙыҡ,
Шыҡмаға донъя тултырҙыҡ.

1372. Аҡ йөнө кершән кеүек,
Йәшел йөнө һуған кеүек,
Ҡара йөнө һөрмә кеүек,
Ултырғаны мулла кеүек,
Һыҙғырғаны шайтан кеүек.

1373. Ялт-йолт ялтланган,
Ялтыр ҡылыс бәйләнгән.

1374. Ала тинле күлдәкле,
Сәүрә тинле ситекле.

1375. Ала сапан кейенгән,
Мал һуйғанға һөйөнгән,
Шунда төшөп йүгергән.

1376. Ала тунлы тере ҡупай.

1377. Ҡаҙандан ҡара,
Ҡарҙан аҡ,
Ураҡтан кәкре,
Уҡтан төҙ.

1378. Ағы аҡтай,
Ҡараһы ҡоромдай[129].
Мороно моҙҙай,
Күҙе тоҙҙай,
Йөрөй ендәй.

1379. Ағы аҡ, ҡар кеүек,
Ҡараһы ҡара, ҡором кеүек,
Ултырыуы мулла кеүек,
Ҡысҡырыуы шайтан кеүек.

1380. Ап-аҡ, һөт кеүек,
Ҡап-ҡара, белис[130] кеүек,
Ултырһа, мулла кеүек,
Ҡыланһа, шайтан кеүек.

1381. Ағы һөт кеүек,
Ҡараһы болот кеүек,
Ултырғанда мулла кеүек,
Йөрөгәндә шайтан кеүек.

1382. Ҡайсы кеүек, ҡайсы кеүек,
Ҡайсы йәшел, ситса кеүек,
Ултырһа, мулла кеүек,
Атлаһа, юрға кеүек.

1383. Кәлт-кәлт итәлер
Кәлмәсәүер итеге.
Янда йәшел яулығы,
Килмешәктә аҙығы.

1384. Ап-аҡ эйәрле,
Йәшел сатма яулыҡлы;
Ҡатындар эсәк йыуғанда,
Беҙ ҙә унда булайыҡ,
Тал төбөнә боҫайыҡ.

1385. Ап-аҡ эйәрле,
Йәшел сатма яулыҡлы;
Ҡыҙҙар сәсен йыуғанда,
Мин дә унда булайым,
Тал төбөнә боҫайым,
Ҡойроғомдо ҡыҫайым.

1386. Башы йәшел яулыҡлы,
Сатма көмөш эйәрле;

Ҡатындар эсәк йыуғанда,
Беҙ ҙә унда булайыҡ,
Тал төбөнә боҫайыҡ,
Ҡойроғобоҙ ҡыҫайыҡ.

1387. Көлтәһе ҡыҫҡа,
Йөгө юҡ,
Баҫрауы оҙон,
Йүне юҡ.

1388. Ҡойроғон алһа — башы йәбешә,
Башын алһа — ҡойроғо йәбешә.

1389. Һауытынан һабы оҙон,
Үҙе йәнле.

1390. Һауытынан һабы оҙон,
Ҡалғанан йыраҡ ҡуйҙым.

1391. Көлтә ҡойроҡ, көлтә ҡойроҡ,
Сәпсектәргә бирә бой(о)роҡ.

1392. Келәтенән типкеһе оҙон.

1393. Бәләкәй генә келәткә
Оҙон терәү терәткән.

1394. Үҙенән ҡойроғо оҙон.

1395. Өй башында һаплы сүмес[131].

## Боҫор

1396. Урмандан сығар,
Түше сыбар.

## Тутыйғош

1397. Һөйләһә, һүҙле,
Әйтһә, ауыҙлы,
Тәне башҡа,
Маңлайы ҡашҡа.

1398. Һин әйтәһең — ул ҡабатлай.

### Ярғанат

1399. Көндөҙ йоҡлай,
Төндә эшләй.

1400. Төндә йөрөргә ярата,
Көндөҙ йөрөмәй, йоҡоға ята.

## ЙОРТ ҠОШТАРЫ

### Әтәс

1401. Шау, шау, шау ҡамыш,
Шау ҡамыштың араһында
Алтын башлы бер ҡамыш.

1402. Башы — тараҡ,
Ҡойроғо — ураҡ[132].

1403. Баш өҫтөндә тарағы,
Тәпәйендә һәнәге.
Шуны табығыҙ, йә әле!
(Нимә була? Әйт әле.)

1404. Тарағы бар — сәсен тарамай,
Урағы бар — иген ура алмай.

1405. Сәғәтһеҙ ҙә ваҡытты әйтә[133].

1406. Уҡталы ла суҡталы,
Башы йәшел нуҡталы.
Баш өҫтөндә тарағы,
Тәпәйендә һәнәге,
Шуны табығыҙ, йә әле!

1407. Ауыҙы бар — һөйәктән,
Ит һаҡалы — эйәктән.

1408. Үҙе хан нәҫеленән дә түгел —
Йөрөй таж кейеп.
Үҙе ҡараҡ та түгел —
Аяғы ҡайыш менән бәйләнгән[134].

1409. Ҡазандан килгән бер монтоҡ,
Уның башы һалпыҡ;
Ах, уның юртышы,
Арт һанының ҡыртышы.

1410. Мин ни күрҙем, ни күрҙем,
Ит һаҡаллы ҡарт күрҙем.

## Әтәс ҡысҡырыуы, таң атыу

1411. Баҙҙа баҡа ҡысҡыра,
Тауҙа таҡта ярыла.

## Тауыҡ

1412. Ҡаба-ҡаба,
Бер аҡ бала таба,
Тышы аҡ, эсе һары.

1413. Бәләкәй генә ҡоҙаса,
Итәктәрен ел аса[135].

1414. Ҡырҡ ҡат күлдәк кейгән,
Ел өрҙө (н)иһә — арты күренә.

1415. Беҙҙең килендең ҡырҡ итәге,
Урамға сыҡһа, ел ҡайтара.

1416. Яңағы бар — көйшәнмәҫ,
Ҡойроғо бар — һыйпанмаҫ.

1417. Өй артында ҡортло кейеҙ
«Ҡорт-ҡорт» тиеп ултыра.

1418. Тибенә лә суҡына,
Тамағы туймай, йәне тынмай.

## Тауыҡтың йомортҡа һалыуы

1419. Йүгерҙе-йүгерҙе,
Еренә еткәс ултырҙы.

## Тауыктың ояла ултырыуы

1420. Аҡ тау өҫтөндә аҡ мулла ултыра
Үлектәрҙең терелеүен көтә.

## Ҡаҙ

1421. Ары лап-лап
Бире лап-лап,
Килә кейеҙен ҡаплап.

1422. Ике ҡыҙыл бағана
Ҡанаттарын ҡағына.

1423. Һыуҙа йөҙә,
Күктә оса,
Табынға килә,
Табаҡҡа менә.

1424. Һыуҙа йөҙә,
Күктә оса,
Ерҙә йөрөй,
Ит менән һыйлай.

1425. Һыуҙа йыуынып алды —
Өҫтө ҡоро ҡалды.

1426. Ҡыйыҡ-мыйыҡ атлаған,
Аҡ сәкмәнен ҡаплаған.

1427. Аҡ ҡанат, пак ҡанат,
Ҡаңҡы-миңке ҡаҡ ҡанат.

1428. Ҡаңҡ итә, ҡуңҡ итә,
Өҫтәлгә килеп ултырһа —
Бар ҡайғыңды юҡ итә.

## Ҡаҙ тиҙәге

1429. Хан ҡыҙы һыуға бара,
Беләҙеге юлда ҡала.

## Ҡаҙ бәпкәләре

1430. Һыу өҫтөндә һары май
Батмай ҙа, иремәй ҙә.

1431. Һыу өҫтөндә һары күбек.

1432. Йәшел балаҫ өҫтөндә һары йомғаҡ тәгәрәй.

## Өйрәк

1433. Башы — көмөш,
Мороно — ҡамыш.

1434 Бәләкәй генә еңгәсәй
Аҡһай-аҡһай һыуға бара.

1435. Оса — лап-лап,
Төшә — лап-лап,
Йөҙә — шәп-шәп,
Йөрөй саҡ-саҡ,
Экрен атлап,
Кейеҙен ҡаплап.

1436. Бағаналары — ҡыҙыл, йорто — аҡ[136].

1437. Һоҫҡаҡ, борҡаҡ, йот тамаҡ,
Һыу өҫтөндә ас тамаҡ,
Йорт эсендә туҡ тамаҡ,
Көҙгә етһә, юҡ тамаҡ.

1438. Ҡырҙа йөрөһә — ҡыр иәнлеге,
Һыуҙа йөрөһә — һыу йәнлеге.

1439. Көрәге — алдан,
Әрйәһе — арттан.

1440. Һоҫҡо морон баҡылдаҡ,
Күп һөйләшә, таҡылдаҡ.

1441. Уҡа-уҡа тыш ҡына,
Тәкә төшкән үҙәнгә.
Ботон киҫеп бирер инем
Шул тәкәне күргәнгә.

1442. Тәкә төшкән инешкә,
Ите йомшаҡ, бер түшкә.
Хәбәр ит һин Бибешкә,
Тапаһын ул бәлешкә[137].

1443. Баҫып йөрөй ул ваҡ-ваҡ,
Әйткән һүҙе лә «ваҡ-ваҡ».
Таба(а)лмаһаң һыу буйында,
Аҡыл менән уйлап тап*.

## Өйрәк бәпкәһе

1444. Йөн йомғағым — бөҙрә,
Һыу күрҙеме — йүгерә.

## Күркә

1445. Күпмә кеүек, күпмә кеүек,
Күпереп бешкән икмәк кеүек,
Ҡысҡырыуы — шайтан кеүек,
Ғолдор, ғолдор, ғолдор, ғыу!

1446. Ҡабара-ҡабара, болот кеүек,
Кейенеп сыҡҡан кейәү кеүек,
Ҡыҙыл төймә муйынында,
Һөйгән йәре ҡуйынында.

1447. Күбеп китһә, көймә кеүек,
Күпереп бешкән икмәк кеүек,
Губернский ҡыҙҙар кеүек,
Ултырыуы мулла кеүек,
Ҡысҡырыуы торна кеүек.

1448. Көймә-көймә, көймә кеүек,
Күпереп бешкән икмәк кеүек,
Ултырҙы мулла кеүек,
Ҡысҡырҙы торна кеүек.

1449. Ҡабара-ҡабара, ҡабара кеүек,
Ҡабарып бешкән икмәк кеүек.

1450. Ҡабара-ҡабара осор кеүек,
Ҡабарып бешкән йыуаса кеүек.


1.0125.07

1451. Ҡабара-ҡабара, ҡабара кеүек,
Ҡабарып бешкән бәлеш кеүек.

1452. Килен-килен килешле,
Килен юрға йөрөшлө.
Уфимский күлмәкле,
Фирганский яулыҡлы.

1453. Ҡаҙан аҫтым ҡоро көйгә
Ҡабарҙы ла менде;
Аҡыллыға әйткән инем —
Уйланы ла белде,
Аҡылһыҙға әйткән инем —
Шырҡ итте лә көлдө.

1454. Ҡыҙыл күрпә — болоттай ҡабара.

1455. Гөбөр-гөбөр гөбөрә,
Ҡыҙыл күрһә — йүгерә.

1456. Ана бара юл менән,
Сыбар ала тун кейгән.
Ҡыҙыл мәрйен муйынында,
Аҙығы ырҙын буйында.

1457. Ана бара юл менән,
Сыбар ала тун кейгән.
Ҡыҙыл мәрйен муйынында,
Һөйгән йәре ҡуйынында[138].

1458. Ыҫпай йөрөй юл менән,
Йәшел хәтфә тун менән.
Хәситәһе муйынында,
Бар балаһы ҡуйынында.

1459. Яҫы-яҫы яума кеүек,
Яҫап ҡуйған таҫма кеүек.

## Себеш

1460. Бәләкәй генә һары йомғағым
Юл буйлап тәгәрәп китте.

1461. Йомро йомшаҡ һары йомғаҡ
Йүгереп йөрөй сирәмдә.

1462. Ап-аҡ өй,
Эстән кемдер сиртә көй,
Өй ватылды — ныҡ һуҡты —
Бер нәмә килеп сыҡты:
Бәләкәс аяҡтары,
Үҙе йомшаҡ, һап-һары*.

## БӨЖӘКТӘР

### Бал ҡорто, уның бал йыйыуы

1463. Бер байҙың бар баҡсаһы,
Баҡсаһында мунсаһы.
Мунсаһына һыу ташый
Нескә билле бисәһе.

1464. Безләй ҙә безләй,
Бигерәк йәне түҙмәй,
Гел тәмлене эҙләй.

1465. Яр аҫтында мунсаһы,
Яр өҫтөндә булһасы!
Йүгерә-йүгерә һыу ташый
Нәҙек билле мәрйәһе.

1466. Гөлбаҡсала бер мунса,
Шул мунсаға һыу ташый
Нескә билле Гөлниса.

1467. Нәҙек билле мәрйә
Йүгерә-йүгерә һыу ташый.

1468. Йомро янбашлы мәрйә
Йүгереп-йүгереп һыу ташый.

1469. Баҡсалағы мунсала
Нескә билле бер еңгә.

1470. Ояһында беҙе бар,
Бөҙрә сәсле ҡыҙы бар,
Ите хәрәм, һурпаһы хәләл,
Шул ни булыр? Белеп ал!

1471. Күрер-күрмәҫ күҙҙәре,
Селтәр бәйләй үҙҙәре,
Селтәрҙәре түңәрәк,
Эшләй улар үрмәләп.

1472. Бер ағайҙың баҡсаһы бар,
Баҡсаһында ҡыҙҙары бар,
Тәмле нәмә ашайҙар,
Көнө-төнө йөк ташыйҙар.

1473. Бәләкәй генә ҡараңғы өйҙә
Ҡыҙҙар селтәр бәйләйҙәр.

1474. Һары айыу
Һарысай аҙыҡ әҙерләй.

1475. Тызлай ҙа бызлай,
Үпкән ере һыҙлай.

1476. Безләй ҙә безләй,
Бер ҙә йәне түҙмәй,
Үҙе тәмлене эҙләй.

1477. Әй мурғыл тау, мурғыл тау,
Мурғыл тауҙың аҫтында
Утыҙ дөйә муртлайҙыр,
Балалары меңгә етмәйенсә
Үлән өҙөп ҡапмайҙыр.

1478. Өй түрендә эҙ бар,
Бөҙрә сәсле ҡыҙ бар.
Тотор инем — хәлем юҡ,
Алыр инем — малым юҡ.

1479. Өй артынан эҙ киткән,
Бөҙрә сәсле ҡыҙ киткән.
Тотор инем — хәлем юҡ,
Юғалыр тип, ғәмем юҡ.

1480. Выж-выж выжлар,
Бала ҡуян сырлар.
Ун ике ботаҡ үрләр,
«Үләйем», — тип йырлар.

1481. Сыр-сыр итер ҙә,
Ситәнгә ҡуныр,
Алтын башлы, алама ҡашлы,
Уны белгән йөҙ йәшле.

1482. Бейек кенә бейек ҡаялар,
Ул ҡаяға ҡыйғыр оялар.
Һурпаһы ла хәләл, ите хәрәм,
Ул ни булыр икән, балалар?

1483. Бейек-бейек ҡоймалар,
Ҡоштар килеп оялар.
Ите хәрәм, һурпаһы хәләл,
Ул ни булыр, муллалар?

1484. Осалар, осалар
Һауалағы ҡарғалар.
Ите хәрәмгә китә,
Һөтө хәләлгә китә.

1485. Фи, фи, фиәләк,
Алты аяҡлы күбәләк,
Йоморҭҡаһы түңәрәк.

1486. Йылан түгел — саға,
Ҡош түгел — оса.

1487. Шыр-шыр итер — шырға ҡуныр,
Зыр-зыр итер — зырға ҡуныр,
Көнө-төнө йөк ташыр.

1488. Сый-сый итер — ситәнгә ҡуныр,
Уны тотҡан уңыр.

1489. Кешегә асыуы килһә, үҙе үлә.

1490. Ҡоҙалар, ҡоҙалар
Юғары менеп оялар.
Оялары булыр селтәр,
Селтәрендә булыр шәкәр.

1491. Ары ла бер ҡоласай,
Бире лә бер ҡоласай,
Тал буйында тоноҡ һыуҙы
Һайлап эсер ҡоласай.

1492. Елә килә, елә килә,
Ике еңен һелкә килә.
Ҡайынһарға керә килә,
Ҡайын һыуын эсә килә.

1493. Әлхиәләр, бәлхиәләр
Юғары менеп оялар,
Алтын селтәр
Бохар үтәр.

1494. Алтын келәтем эсендә
Ураҙ ҡыҙы быҙлаша,
«Әллү!» — типте беләккә, —
Әле булһа һыҙлаша.

1495. Мырыҡ-мырыҡ мырҡыһы,
Йөҙ илле баш йылҡыһы.
Кимерһәң, бар кимеге,
Һурһаң, бар елеге.

1496. Барлыҡ сәскәләрҙе күрә,
Кәрзинкәләр ҙә үрә.
Ашы татлы, өйө затлы
Йәй тырышҡанға күрә*.

1497. Елә-елә елә килә,
Ике еңен һала килә.
Ҡарағай һыуын эсә килә,
Ҡара ҡанын ҡоя килә.

## Ҡырмыҫҡа

1498. Бейек тауға менәләр,
Тоҡтар йөкмәп киләләр.

1499. Бейек тауға менәләр,
Утын йөкмәп киләләр.

1500. Йомро башлы ҡәйнә
Йүгереп-йүгереп йөк ташый.

1501. Бәләкәй генә урыҫ малайы
Йүгерә-йүгерә йөк ташый.

1502. Шау, шау, шау ҡамыш
Шыуҙырышып бара, имеш,
Утыҙ ике йомортҡаһын
Ташлап китеп бара, имеш.

1503. Йомро башлы, нескә билле.

1504. Тауға менгәндә таймаҫ,
Ат тояғы тейгәндә үлмәҫ.

1505. Үҙе бәләкәй булһа ла
Үҙенән ҙур күтәрә.

1506. Билән-билән билән атым,
Тауға менһә, таймаҫ атым.

1507. Билән-билән билән ат,
Биле нәҙек көрән ат.
Тауға менһә, таймаҫ ат,
Талаҡ тейһә, үлмәҫ ат.

1508. Биле нәҙек билән ат,
Барынан да көслө ат.
Тауға менһә, таймаҫ ат,
Арыу-талыу белмәҫ ат,
Ул нимә була? Уйлап тап.

1509. Билән-билән билән ат,
Биләнский[139] көрән ат.

1510. Тауға менһә, таймаҫ ат,
Һыуға төшһә, батмаҫ ат.

1511. Түше ҡалын, биле нәҙек,
Эҙләгәне — аҙыҡ.

1512. Ерән атым бик ярһыу:
Бар белгәне — йөк ташыу.

1513. Үҙе бәләкәй генә булһа ла тау-таш аҡтара.

## Ҡырмыҫҡа иләүе

1514. Иләк тулы тарым бар,
Күтәрә алһаң, барын да ал.

1515. Ҡырҙа ҡыҙыл ҡаҙан ҡайнай[140].

1516. Ҡара урман уртаһында
Ҡара-ҡыҙыл ҡаҙан ҡайнай.

1517. Ҡайынһарҙа ҡара ҡаҙаным ҡайнай.

1518. Ите лә юҡ, һыуы ла юҡ,
Ҡаҙаны ҡайнап тора.

1519. Яланда майлы сүлмәгем ҡайнай.

1520. Яланда Ялбай, майлы сүлмәк ҡайнай.

## Ҡуңыҙ

1521. Ҡош-ҡош итә — ҡапҡаға ҡуна,
Дыу-дыу итә — дуғаға ҡуна.

1522. Алтын башлы, көмөш ҡанатлы.

1523. Сөм ҡара — йылан түгел,
Мөгөҙө бар — һөҙгәк түгел,
Ҡанаты бар — беснәк түгел,
Осҡанда мыш-мыш килә,
Тупраҡҡа йәшеренә.
Был нимә? Йә, кем белә?

1524. Үҙе ҡара — ҡарға түгел,
Мөгөҙө бар — үгеҙ түгел,
Алты аяғы бар — тояҡһыҙ.

## Һағыҙаҡ

1525. Һаҙҙа һары айғыр кешнәй.

## Сиңерткә

1526. «Тоттом» тигәндә, тороп китте,
«Баҫтым» тигәндә, тороп ҡасты.

1527. Шем шекерә-мекерә[141],
Тотам тиһәң, һикерә.

1528. Ат башлы,
Болан мөгөҙлө,
Бүре күҙә,
Бүкән һын,
Ҡош ҡанатлы,
Ҡырмыҫҡа аяҡлы.

1529. Эт башлы,
Ырғаҡ муйынлы,
Бүре күҙәле,
Бүкән һынлы,
Ҡуш ҡанатлы,
Тиктормаҫ йәнле.

1530. Аяғы ҡулдан юғары,
Һикерә талдан юғары.
Ни ҡош түгел, ни ҡорт түгел,
Теҙе билдән юғары.

1531. Сик-сик итә лә ситкә ҡуна.

## Йорт сиңерткәһе

1532. Мейес артында бер әбей:
«Үләмен», — тип ҡысҡыра.

1533. Иҙән аҫтында Иләмән сәрелдәй.

## Күбәләк

1534. Ап-аҡ, ап-аҡ аҡсарлаҡ
Ҡояш көндө осалыр,
Төрлө сәскә ҡосалыр.

1535. Сыбар ала осҡалаҡ
Оса гөлдәр ҡосҡалап.

1536. Ике яҡлы ишек — китә йыраҡҡа осоп.

1537. Ел-ел еләә киләә,
Ике еңен һелкә килә,
Ҡамышлыҡҡа ҡуна килә,
Ҡамыш һыуын эсә килә.

1538. Сыбар ала күлдәге,
Тотһаң — уңа биҙәге.

1539. Ҡанаты бар — ҡаны юҡ.

1540. Ҡыш үләм, яҙ тереләм.

1541. Яҙ терелә, көҙ үлә.

1542. Елп-елп итер — елпеп китер,
Гөлгә ҡуныр — сәскә үбер;
Үҙе күп төрлө,
Алтын һырлы.

## Себен

1543. Еҙнәм аты йығылған,
Йөҙ меҢ халыҡ йыйылған.

1544. Сәпкәй бикә ҡыуа тора,
Бәҙкәй бикә ҡуна тора.

1545. Сөйҙөм, сөйҙөм, сөйҙөм ҡош,
Хан башына ҡунған ҡош.

1546. Сөйҙөм, сөйҙөм, сөйҙөм ҡош,
Бәләкәй генә ҡара ҡош.
Хан башына ҡунған ҡош,
Ҡара һыуға туйған ҡош.

1547. Беҙ-беҙ, беҙле ҡош,
Беҙ табанлы ҡара ҡош,
Хан башына ҡунған ҡош.

1548. Үҙе еҙҙән, аяҡтары теҙҙән.

1549. Бәләкәй генә ҡара ҡош,
Ҡан күрҙе иһә, ҡунған ҡош.

1550. Йәне бар, ҡаны бар,
Йөк тартырлыҡ хәле юҡ[142].

## Түшәмдәге себен

1551. Үҙе — беҙҙең өҫтә,
Аяҡтары — күктә[143].

## Күгәүен

1552. Ат артынан ҡалмаҫ,
Дуғанан уҙмаҫ.

1553. Дыу-дыу, дыу итә — дуғаға ҡуна.
Сей-сей, сей итә — ситәнгә ҡуна.

1554. Беҙ-беҙ итер — ситәнгә ҡуныр,
Дыу итер — дуғаға ҡуныр;
Алтын ҡашлы, алама башлы,
Уны белгән — йөҙ йәшле.

1555. Ике ай ғүмере бар,
Өсөнсө айға сыҡһа, үлә.

## Серәкәй

1556. Безелдәр, тезелдәр,
Ер соҡор ҙа һыу эсер.

1557. Быҙлай ҙа быҙлай,
Үпкән ере һыҙлай.

1558. Безелдәп оса ла семтеп ала.
Ул семеткән ерҙә ҡан ҡала.

1559. Урманда урыҫ ҡыҙы сеңләй.

## Бөрсә

1560. Ҡараңғы өйөм эсендә ҡара кәзәм һикерә[144].

1561. Ҡара тәкә ҡан эсә.

1562. Бәләкәй генә ҡарт бара,
Бөтөн ере ҡап-ҡара.

1563. Ары ла саба ҡараса,
Бире лә саба ҡараса,
Шешәләге тоноҡ һыуҙы
Тондороп эсә ҡараса.

1564. Ҡарасай атым тал төбөндә
Тондороп ятып һыу эсә.

1565. Иҙән аҫтында йөҙ үгеҙ,
Йөҙөһө лә ҡара үгеҙ.

## Ҡандала

1566. Кәштә буйлап ҡыҙыл йомғаҡ тәгәрәй.

1567. Аҫты таҡта, өҫтө таҡта,
Ҡаныңды эсеп тик ята.

1568. Аҫты таҡта, өҫтө таҡта,
Ҡыҙыл егет ҡарап ята.

1569. Ике таҡта араһында
Ҡыҙыл егет ҡыҫылып ята.

1570. Сытыр-мытыр араһынан[145]
Ҡыҙыл егет ҡарап ята.

1571. Ҡыҙыл ҡорһаҡлы бала
Кеше таларға бара.

1572. Өй тирәләй ҡыҙыл бойҙай сәселгән.

1573. Аҫта түшәге,
Өҫтә түшәге,
Мине таларға иҫәбе.

## Тараҡан

1574. Һайғағым тулы һары алтын.

1575. Кәштә тулы ҡыштырлаҡ.

1576. Кәштә тулы һыулы бәрәмес.

1577. Мейес башында тархан туйы.

1578. Аҡ тау[146] башында ҡара өйөр утлай.

1579. Аҡ тау күккә тейгән ерҙә
Ҡара айғырҙар утлай.

1580. Мөрйә төбөм еҙ ҡаҙаҡ.

1581. Өй түбәмдә еҙ ҡаҙаҡ,
Ай ҙа, йондоҙ ҙа түгел.

1582. Ике мөгөҙлө,
Алты аяҡлы,
Ике ҡанатлы,
Алтын ҡорһаҡлы.

1583. Тыума тыуыр, өйгә шыуыр.

## Үрмәксе, үрмәксе ауы

1584. Алты аяҡлы — Алып түгел,
Дүрт күҙе бар — дейеү түгел.
Арҡаһына арҡанлағаны — эсәк түгел,
Ебе нескә — ебәк түгел[147].

1585. Өй түрендә мөйөштә
Ҡыл иләк элгән фәрештә.

1586. Түшәмдә, мөйөштә
Ҡулһыҙ яһаған иләк тора.

1587. Балтаһыҙ килде, таҡтаһыҙ өй һалды.

1588. Арҡаны нәҙек булһа ла,
Эләкһәң, китә алмаҫһың.

1589. Күрер-күрмәҫ күҙҙәре,
Селтәр бәйләй үҙҙәре.

## Көйә ҡорто

1590. Йәнле ерҙә тора килер,
Итәк-еңен һуҙа килер.
Йөн-тирене йыя килер,
Йортҡа зыян ҡыла килер.

## Ҡырҡаяҡ

1591. Еүештә йөрөр хәле бар,
Ҡырҡ төрлө тәне бар,
Исеме менән есеме бер*.

1592. Үҙе бәләкәй, аяҡтары күп.

1593. Үҙе тере — ҡаны юҡ.

## Селәүсен

1594. Ер аҫтында еҙ туҡмаҡ.

1595. Ер аҫтында еп туҡыма.

## Ҡарышлауыҡ

1596. Кәүҙәһе менән ҡарышлап ер үлсәй.

# IV. КЕШЕ. УНЫҢ ТӘН АҒЗАЛАРЫ, ХӘРӘКӘТТӘРЕ

## Йәш бала

1597. Бауын ташлай,
Баҡыра башлай,
Саҡыра башлай,
Аҙ-маҙ ашай,
Күп йоҡлай.

1598. Уйнамай-көлмәй,
Һүҙен әйтә белмәй,
Уны аңламаған кеше булмай.

1599. Тәнем дә ул,
Йәнем дә ул,
Һикертә лә ул,
Йүгертә лә ул.

1600. Ҡунаҡ килде, сығып алығыҙ:
Аяғы бар — йөрөмәй,
Күтәрмәйенсә өйгә инмәй.

1601. Көйҙөрә, һөйҙөрә,
Батшаны баш эйҙерә.

## Бишектәге бала

1602. Тауышы бар — һүҙе юҡ,
Йәне бар — теле юҡ,
Менгән атының йәне юҡ.

1603. Юғары менә һау-һау,
Түбән төшә һау-һау,
Уртаһында ҡыңғырау.

## Бала имеүе

1604. Ике тупылдыҡҡа бер сипылдыҡ.

1605 Ике аҡҡош,
Араһында бер аҡ баш.

1606. Ике тубырсыҡ,
Килеп ҡунды сыйырсыҡ.

1607. Ике һанат,
Ике һанат ҡаршыһында бер һалдат.

1608. Һике-һике һиңк итә,
Һике башы мөлк итә.
Шур ҡашҡаһы баҡыра,
Майлы ҡарыны саҡыра.

1609. Елек-елек елкетә,
Елек төбөн һелкетә,

Һыу-һыу тиеп баҡыра,
Солтанбикә аҡыра.

## Имсәк һөтө

1610. Ҡаҙанда бешмәй,
Табаҡҡа төшмәй,
Уны эсмәгән үҫмәй.

1611. Һин дә эскән,
Мин дә эскән,
Шуны эскәнгә үҫкән.

1612. Үҙе аҡ ҡына,
Үҙе саҡ ҡына.
Бал тәме әйтә — бал түгел,
Унһыҙ донъя һан түгел.

## Ауырлы ҡатын

1613. Асылмалы һандығымда
Күҙе бәйле сәпсегем ята.

1614. Ҡырҡ бармаҡ,
Ҡырҡ тырнаҡ,
Ике йәнгә бер һулыш.

1615. Ике йәнле бер кеше.

## Ғәйбәтсе

1616. Анда ла саба,
Бында ла саба —
Аны ла саға,
Быны ла саға.

## Исем

1617. Бәләкәс кенә муйынса
Тағылған да ҡуйылған,
Ергә төшкәс юйылған.

1618. Муйынымдағы еҙ төймә
Ергә төшһә лә юғалмай[148].

1619. Атайым биргән еҙ ҡыңғырау
Ергә төшһә лә юғалмай.

1620. Бәләкәй генә бер муйынса
Ергә төшһә лә юғалмай.

1621. Еңем төбө еҙ алтын,
Ергә төшһә лә юғалмай.

1622. Хан ағайҙың балдағы
Ергә төшһә лә юғалмай.

1623. Һиңә лә йәбешкән,
Миңә лә йәбешкән,
Аллаға ла йәбешкән,
Донъяға ла йәбешкән.
Йәнлегә лә йәбешкән,
Йәнһеҙгә лә йәбешкән.

1624. Яратҡан да — йәбешкән.

1625. Йәбешкәнгә лә йәбешкән,
Йәбешмәгәнгә лә йәбешкән.

1626. Бер еҙ ҡомған бар ергә лә ҡунған.

1627. Йомшаҡ тәнгә тәңкә йәбешкән.

1628. Төшһә, һыуға батмайҙыр,
Ут тоҡанһа, янмайҙыр.
Күмһәң ергә, серемәйҙер,
Беләһеңме, ул ниҙер?

1629. Утҡа һалһаң, янмай,
Һыуға һалһаң, батмай,
Ергә төшһә лә серемәй.

1630. Үҙеңдәген өҙгөләнмәй таба алмаҫһың.

1631. Һәр кемдә лә бар.

1632. Бер нәмә һәр нәмәгә кәрәк.

## Кеше

1633. Иң башта була дүрт аяҡлы,
Шунан була ике аяҡлы,
Шунан була өс аяҡлы.

1634. Иртән — дүрт аяҡ,
Төш — ике аяҡ,
Кис — өс аяҡ[149].

1635. Иртә менән дүрт аяҡ,
Төштә ике аяҡ,
Кисен өс аяҡ,
Төндә өҫтөндә маяҡ[150].

1636. Донъяла бер йән бар,
Унан көслө кем бар?

## Кәүҙә

1637. Бер бүкәндә туғыҙ тишек.

1638. Ике бағана,
Бағана өҫтөндә мискә,
Мискә өҫтөндә шар,
Шар өҫтөндә урман.

1639. Шар,
Шар аҫтында мискә,
Мискә аҫтында ике бағана.

1640. Үҙе бер,
Йәбе дүрт,
Һәр йәбендә бишәр ботаҡ.

## Баш

1641. Бер йомғаҡта ете тишек[151].

1642. Бер бүкәндә ете тишек.

1643. Бер тауҙа ете мәмерйә.

1644. Бер бүлмәлә ете ишек.

1645. Бәләкәй генә бер һандыҡҡа
Донъялағы бөтә нәмә һыя.

1646. Шарҙы урман ҡаплаған,
Йылдар үткәс саллана.

1647. Белеп тора, күреп тора,
Ишетеп тора, тойоп тора,
Өҫкө ҡатта йөрөп тора,
Бар әмерен биреп тора.

1648. Тау ҙа урман, тау ҙа урман,
Был хикмәтте кем ҡорған?

1649. Бер бүректә ете ямау.

## Мейе

1650. Аҡ һандығым эсендә
Киҫмәгән кәйтәнем[152] ята.

1651. Асылмаҫ һандығымда
Кейелмәҫ күлдәгем ята.

1652. Еҙ һандыҡты асып булмай,
Эсендәген алып булмай.

1653. Алтын һандыҡ эсендә
Асылмаған хатым бар.

## Аҡыл

1654. Башта тора мулла(а)ғай.

1655. Ит һандығы эсендә
Иҫән ағай ултыра.
Ай ҙа тимәй, көн дә тимәй,
Иҫәп биреп ултыра.

1656. Өй түремдә кәңәшсем,
Шуға килеп кәңәштем.

1657. Үлсәүһеҙ йөрөтөлә,
Тота белмәһәң — юғала.

1658. Үлсәүһеҙ йөрөтөлә,
Һәр кемдә була[153].

1659. Үлсәүҙә үлсәнмәй,
Баҙарҙа һатылмай.

1660. Һыу төбөндә һылыу таш.

## Уй-фекер, күңел

1661. Төйҙөм — төпкә һалдым.

1662. Төймә төйҙөм — баҙға һалдым.

1663. Төймә төйөп, төпкә һалдым.
Төйөнсөгөм төйнәлгән,
Алыҫ ергә йүнәлгән.

1664. Төймәләй генә төйөнсөгөм
Төйнәп, төпкә тултырҙым.

1665. Йүгеректән йүгерек ни йүгерек?

1666. Иң етеҙҙең етеҙе нимә?

1667. Йүгерҙем — етә алманым.

1668. Иртән әйләндереп,
Кисен уратып килтерә.

1669. Үҙе күренмәй, юлы өҙөлмәй.

1670. Бер минутта донъяны урап сыға —
Шунда ла арымай.

## Хыял

1671. Һөрмәгән ер өҫтөндә
Тыумаған ҡуян балаһы йүгерә[154].

## Хәтергә алыу

1672. Һандыҡ төбөмдән төйөнсөк алдым,
Сисеп, күреп, ҡарап һалдым.

1673. Һандығымды аҡтарҙым,
Үтесемде ҡайтарҙым.

1674. Һандығымды астым,
Байлығымды сәстем.

## Сәс

1675. Ботаҡһыҙ урман,
Ул ҡайҙан булған?

1676. Ҡара урман, һары урман,
Урман эсен кем урған?

## Сәс тарау

1677. Алтмыш ағас башынан
Эйҙем, алдым һырғалаҡ.
Етмеш ағас башынан
Елдем-эйҙем һырғалаҡ.

1678. Бейек тауҙың баштарынан
Алдым-эйҙем һырғалаҡ.

1679. Бәләкәй генә мәрйә ҡыҙы
Өй түбәһенән сана шыуа.

## Үреүле сәс

1680. Ярға йылан йәбешкән.

1681. Тал башына ҡара йылан аҫылған.

1682. Хәмбил бауы ергә етмәй,
Ваҡытында тартмағас.

1683. Сәбәнәйҙең сыбыртҡыһы
Һырт буйына һуҙылған.

## Сәс толомо, уны өскә айырып үреү

1684. Өйөм арты өс сыбыҡ,
Өсөһө лә тиң сыбыҡ.

## Сәс толомо осондағы тәңкә

1685. Ҡара арҡан осонда
Сылтыр-сылтыр сыңлайҙыр.

## Сәс бүлеме (ярыуы)

1686. Өй түбәһендә һыңар саңғы юлы.

## Сәс, ҡаш

1687. Оло урман,
Кесе урман,
Береһен ҡыралар,
Береһен һаҡлап торалар.

## Бәке менән сәс алыу

1688. Мең баш йылҡыны
Бер сыбыҡ менән ҡыуҙым.

1689. Мең баш йылҡыны
Бер сыбыҡ менән әйҙәй.

1690. Ҡара һыйырым тау ялай.

1691. Ҡара урманды бер балта менән
ҡырып һалдым.

1692. Тау башында тай тояғы уйнаҡлай.

1693. Таҡыр тауҙа тәкә уйнай.

1694. Бәләкәй генә балта урман ҡыра.

1695. Йылтыр салғы алалар,
Тау башына баралар,
Тау бесәнен сабалар.

1696. Бәләкәй генә бер малай
Ҡара урманды ялай.

1697. Бәләкәй генә мәндәкәй
Тауҙан ботаҡ шыуҙыра.

1698. Бәләкәй генә бисура
Тауҙан ағас осора.

1699. Тимер тәкә тау шыуа (яра).

1700. Ялт-йолт итә,
Ҡара ерҙе аҡ итә.

**Сәс, ҡауаҡ**

1701. Ҡара урмандың ҡары бар,
Ҡарамаһаң, күренмәй.

1702. Ҡары күренмәгән ҡара урман.

**Таҙ**

1703. Кәштә башында һоло икмәге.

1704. Таяҡ башында көрпәле күмәс.

1705. Бағана башында киндераш күмәсе.

1706. Сым-сымыр,
Сейҙәй ҡутыр.

**Сәс, ҡаш, күҙ, танау, ирен, теш**

1707. Оло урман,
Оло урмандан кесе урман,
Кесе урмандан йылтыраҡ,
Йылтыраҡтан мышылдаҡ,
Мышылдаҡтан шапылдаҡ,
Шапылдаҡтан шаҡылдаҡ.

## Сәс, керпек, күҙ, танау, тел

1708. Ҡарурман,
Ҡарурманға етә ҡалтырауыҡ,
Ҡалтырауыҡҡа етә йылтырауыҡ,
Йылтырауыҡҡа етә мышылдауыҡ,
Мышылдауыҡҡа етә тәтелдәүек.

## Сәс, ҡаш, күҙ, танау, ирен, эйәк

1709. Оло урман, оло урман,
Оло урман артында кесе урман,
Кесе урман артында ялтырауыҡ,
Ялтырауыҡ араһында мышылдауыҡ,
Мышылдауыҡ артында шапылдауыҡ,
Шапылдауыҡ артында
Кескәй генә йомро тауыҡ.

## Сәс, маңлай, бит, танау, ирен-тел, эйәк

1710. Ҡарурман,
Шыма тау,
Киң ялан,
Мышҡылдыҡ,
Сәпелдек,
Ослоҡай.

## Сәс, ҡаш, маңлай, күҙҙәр, танау, ауыҙ, эйәк

1711. Оло урман,
Кесе урман,
Таҡыр баҫыу,
Йылтырҡай,
Бышылдыҡ,
Быгырҙыҡ,
Ослоҡай.

## Теш, танау, күҙ, ҡаш, маңлай, сәс

1712. Шаҡ-шаҡ шаҡылдаҡ,
Мышылдаҡтан тәрән күл,
Тәрән күлдән кесе урман,
Кесе урмандан киң ялан,
Киң яландан ҡарурман.

## Ҡаш, күҙ, танау, ауыҙ

1713. Ике турғай,
Ике тиктормай,
Бер малай,
Бер Ямай.

## Ҡаш

1714. Ике ҡара яҡташ ята.

1715. Ике батыр
Аяҡ осло ятыр.

1716. Ике бәндә
Аяҡ осташ хәлдә.

1717. Ике егет аяҡлы-осло ятҡан.

1718. Ишек башы уратма,
Уны эҙләрһең бер атна.

1719. Тау башына мендем,
Пар көйәнтә элдем.

## Ҡаш, күҙ

1720. Ике ҡара ат,
Ике ҡарағат.

1721. Күреүсе күл буйының
Юғары яғы урманлыҡ.

1722. Ҡамышлы күл ҡашлағында
Һыҙағай урман.

## Күҙ

1723. Тоҙ тубалында торомтай[155] уйнар.

1724. Тоҙло тәгәс эсендә
Ҡара тубым һикерә.

1725. Өй эсендә турғай уйнай.

1726. Ҡыл һарайым эсендә
Ҡылыҡһыҙ атым уйнай.

1727. Ике сүлмәккә берәр сүмес.

1728. Һыртлау аша ҡамышлы ике күл.

1729. Бер яланда ике күл.

1730. Тирә-яғы йөнлөкәс,
Уртаһы баҙлыҡас.

1731. Услаһаң — ус тулмай,
Ебәрһәң — ялан тула.

1732. Ике туған торалар,
Бөтә ерҙе күрәләр,
Береһен-бере күрмәйҙәр.

1733. Ике туған бер-берен күрмәһә лә
Ғүмер буйы бергә ятып, бергә торалар.

1734. Ике туған айырылмай,
Юл арҡыры торһалар ҙа
Бер-береһен күрмәй[156].

1735. Ике ағай рәттән тора,
Берен-бере күрмәй.

1736. Ике ағай йәнәшә баралар,
Берен-бере күрмәйҙәр[157].

1737. Ике күрше торалар —
Берен-бере күрмәйҙәр.

1738. Йәнәш торалар — берен-бере күрмәйҙәр.

1739. Ике малай бергә тора,
Берен-бере күрә алмай.

1740. Тау артында туғаным,
Юҡ уны һис күргәнем.

1741. Ике килен килендәш,
Берен-бере күрә алмай.

1742. Ике кәрәкле нәмә
Береһен-бере күрә алмай,
Көндөҙ асыла, төндә ябыла.

1743. Бәләкәс кенә яулығымды
Ауыл аша ташланым.

1744. Сите — ҡамыш,
Эсе — табыш.

1745. Ике сите ҡыллы, уртаһы дымлы.

1746. Йылтыр-йылтыр ике таш,
Уртаһында ҡара таш.

1747. Ул күлдәр һиңә таныш,
Тирәләре гел ҡамыш.
Ҡамышы көндөҙ һирәк,
Төндә ҡуйы бигерәк*.

## Күҙ йәше, илау

1748. Йомағым йомаҡ,
Ҡара ла борсаҡ.

1749. Түңәрәк күлем таша.

1750. Түңәрәк күлгә һыу тулған —
Көйәнтәләп алығыҙ.

1751. Бәләкәс кенә ҡойо,
Тамсылап сыға һыуы.

## Керпек

1752. Аръяҡта ла йөҙ йылҡы,
Бирьяҡта ла йөҙ йылҡы.
Ҡағыша ла тибешә,
Тояҡтары һыныша.

1753. Аръяҡта ла йөҙ йылҡы,
Бирьяҡта ла йөҙ йылҡы,
Тибешә ла ҡауыша.

1754. Ялт-йолт ябыла,
Төн еттеме —
Йоҙаҡһыҙ бикләнә.

1755. Йөҙлөк аҫтында йөҙ энә.

## Керпек, ҡул

1756. Арғы яҡта алтмыш ат,
Бирге яҡта алтмыш ат,
Ҡыуышыр ҙа тибешер,
Ҡыл ҡойроҡҡа йәбешер.

1757. Аръяҡта ла көрән ат,
Бирьяҡта ла көрән ат.
Атыша ла тибешә,
Араларға ҡырғыҙ барып йәбешә.

## Ҡолаҡ

1758. Яр буйында ярты аласыҡ
Ярын һайлап ултыра.

1759. Ярты аласыҡ
Ярҙан ҡоламаға тора.

1760. Аръяҡта ла,
Бирьяҡта ла
Ярты аласыҡ.

1761. Бер ағасҡа ике япраҡ.

1762. Тау яғалай ике бейәләй.

1763. Яр буйында ярты аҙбар.

1764. Яр буйында ярты ялғаш.

1765. Бер тау тирәләй
Ике тишек сүмес эленгән.

1766. Яр башында яры тамаҡ.

1767. Урал тауы битләүендә
Ағиҙелдең яғы бар,
Ағиҙелдең яғы эсендә
Тәрән бер мәмерйә бар.

## Танау

1768. Көндөҙ һулай,
Төндә мырҡылдай.

1769. Бер түңгәктә Тарбай,
Һис тә төшә алмай.

1770. Бер түңгәктә тәлмәрйен ултыра,
Һис тә төшә алмай[158].

## Танау, ауыҙ

1771. Ике тишек, бер ишек.

## Танау, ирендәр

1772. Ишек ябылған,
Ике мөрйәнән ел уйнай[159].

1773. Ҡапҡаһы асыла,
Тәңкәһе сәселә.

## Ирендәр

1774. Бәләкәй генә ел ҡапҡа
Асыла ла ябыла.

1775. «Ас!», — тиһәң, асыла,
«Яп!», — тиһәң, ябыла.

1776. «Мә!», — тиһәң, ябыла,
«Ал!» — тиһәң, асыла.

1777. Ике пипылдыҡ,
Ике мимылдыҡ,
Арҡа терәштек —
Бер булдыҡ.

1778. «Тей», — тиһәң, теймәй,
«Теймә», — тиһәң, тейә.

1779. «Мин», — тигәндә, тейә,
«Һин», — тигәндә, теймәй.

## Урт, теш, тел

1780. Ҡабыҡ аласыҡ,
Ҡабыҡ аласыҡтан — һөйәк аласыҡ,
Һөйәк аласыҡтан — ерән аласыҡ.

1781. Ит һарай,
Ит һарай эсендә аҡ ҡалай,
Аҡ ҡалай эсендә йүгерек малай.

1782. Өлкән өй,
Өлкән өй эсендә кесе өй,
Кесе өй эсендә болван бей.

## Теш

1783. Аҡ егеттәр аңһыҙ,
Анһыҙ донъя һанһыҙ[160].

1784. Бикләнмәгән һандығымда
Утыҙ ике ынйым бар.

1785. Бер мискәнең эсендә
Утыҙ ике аҡ тауыҡ.

1786. Бер соҡорҙоң эсендә
Утыҙ ике аҡ тауыҡ.

1787. Бер һарай эсендә
Утыҙ ике аҡ тауыҡ.

1788. Аҫлы-өҫлө аҡ тауыҡ.

1789. Ҡыҙыл кәртә өҫтөнә
Аҡ тауыҡтар ултырған[161].

1790. Кәштәм тулы аҡ тауыҡ.

1791. Бәләкәй генә бүлмәлә
Утыҙ ике аҡ ҡапсыҡ.

1792. Түңәрәк күлдә алтын таш,
Ау һалһаң да алынмаҫ.

1793. Кәштәм тулы аҡ шәшке.

1794. Мейес аҫтында аҡ себеш.

1795. Мейес аҫтында утыҙ ике аҡ бәрәс.

1796. Аҙбар тулы аҡ һарыҡ[162].

1797. Тирбәгәйҙең тирмәне
Тартҡан онон бирмәне.

## Теш төшөү

1798. Беҙ-беҙ, беҙ инек,
Утыҙ ике ҡыҙ инек.
Ике рәткә теҙелдек,
Берәм-берәм өҙөлдөк.

## Тештәр һәм тел

1799. Утыҙ ике аҡбуҙат,
Ҡағыша ла тибешә,
Ерән айғыр өйөрә[163].

1800. Утыҙ ике аҡ ат,
Бер сығынсы ерән ат[164].

1801. Утыҙ кеше әүен һуға,
Усман ағай әйләндерә.

1802. Утыҙ кеше он тарта,
Метри ағай әйләндерә.

1803. Аҡлы ағайҙар әүен һуға,
Аҡман ағай әйләндерә.

1804. Аҡ тунлылар ашлыҡ һуға,
Ҡыҙыл тунлы көлтә ташый.

1805. Аҡ тунлылар ашлыҡ һуға,
Көпөләләр көлтә әйләндерә.

1806. Аҡ тунлылар йыйып тора,
Мәзин бабай ташып тора.

1807. Аҡ кешеләр ҡырҡа,
Ҡыҙыл кеше алып кейеп тора.

1808. Арбаҙ тулы аҡ тауыҡ,
Уртаһында ҡарт әтәс.

1809. Ҡатар-ҡатар таш ҡуйҙым,
Ҡыҙыл һыйырым буш ҡуйҙым.

1810. Ҡыҙырым таштың аръяғында,
Ҡыҙыл танам уйнаҡлай.

1811. Ҡыҙыға-ҡыҙыға таш ҡойҙом,
Ҡыҙыл тананы буш ҡуйҙым.

1812. Һөйәк келәт, ит баҫтырыҡ.

1813. Иләләй, зиләләй,
Уртаһы ҡыҙыл бейәләй.

1814. Аҡ ҡорма, ваҡ ҡорма,
Аҡ ҡорма арты тиктормаҫ.

1815. Утыҙ ике туҡылдыҡ,
Бер мыймылдыҡ.

1816. Утыҙ ике терәү,
Бер һөйрәү.

## Тел

1817. Мейес аҫтында һыулы йыуғыс.

1818. Һике аҫтында ҡыҙыл бау.

1819. Ҡараңғы өйҙә ҡанлы балта.

1820. Ике таҡта араһында
Ҡыймылдай ҡыҙыл даға.

1821. Йылы мейес эсендә еүеш быҙау.

1822. Йөҙлөк аҫтында еүеш быҙау[165].

1823. Таш аҫтында булһа ла
Бер ҙә тик тормай.

1824. Һаҙлы ерҙә бер таҡта
Серемәй ҙә, батмай ҙа[166].

1825. Һөйҙөргән дә шул,
Биҙҙергән дә шул[167].

1826. Һөйәге юҡ, ние юҡ,
Һөйләмәгән һүҙе юҡ.

1827. Һөйәкһеҙ,
Ҡайҙа бөкһәң, шунда бөгөлә.

## Тел, ҡолаҡ, күҙ

1828. Берәү һөйләй,
Икәү тыңлай,
Тағы икәүһе ҡарап тора[168].

## Төкөрөк

1829. Бара торғас, аҡ төйөнсөгөм ташланым.

1830. Бара инем, бара инем,
Аҡ төргәгем төшөп ҡалды.

1831. Аҡ келәттән сыҡҡанда
Аҡ төйөнсөгөм төшөп ҡалды.

1832. Йүгереп бара инем,
Аҡ тауығым төшөп ҡалды.

1833. Ап-аҡ көсөгөмдө
Урамға ташлап киттем.

1834. Аҡ көсөгөм юлда ҡалды.

1835. Аҡ көсөгөм арбанан атылып төштө.

1836. Аҡ мендәрем юлда ҡалды.

## Мыйыҡ

1837. Башы улаҡта,
Ҡойроғо ҡолаҡта.

1838. Ҡыҙыл ҡолашаға[169]
Ҡарағош ҡанатын йәйгән.

1839. Ҡыҙыл ҡолашала
Ҡарт алаша ҡойроғо.

1840. Тишекле тамыр аҫтында
Төйөрөм тай ҡойроғо.

1841. Уртаһы уйылған,
Ике яҡҡа ҡыйылған.

1842. Атайымдың урманы,
Ике яҡҡа һуҙғаны.

1843. Йәйәһен киргән, уғы юҡ.

1844. Йәйәмде киреп ҡуйҙым,
Уғымды әлеп ҡуйҙым.

## Һаҡал

1845. Атайымдың урманы,
Түбән ҡарап уҙғаны.

1846. Атайымдың урманына
Ат кермәгә юлы юҡ.

1847. Атайым алды ҡарағай,
Башы түбән ҡараған.

1848. Атайым алды урман,
Осо-башы ҡырған,
Түбән ҡарап торған.

1849. Атайымдың урманы үҫкән,
Осо-башы ергә төшкән.

1850. Тау ҙа урман, тау ҙа урман,
Был хикмәтте кем ҡорған?

1851. Бер ағаста мең ҡара.

## Муйын

1852. Оло ағастың олоно
Төрлө яҡҡа боролдо.

1853. Олоном һонолдо,
Һонолған яҡҡа боролдо.

## Ҡулбаш, яурын

1854. Ике ягымда ике ҡарауыл.

1855. Үҙе түңәрәк, үҙе яҫы
Сатлы һәнәктең башы.

## Елкә

1856. Йыуан ағасҡа йөк аҫтым.

## Елкә, яурын, арҡа

1857. Һелтәнем дә ултырттым,
Ултырттым да юл тоттом.

## Арҡа

1858. Яҫы таҡта, ятып маҡта,
Ягырга ла ярамай,
Ябыуга ла ярамай.

## Кендек

1859. Тигеҙ ерҙә тай эҙе.

1860. Ҡырҡып алған ҡыл арҡандың
Ҡырҡ йылдан һуң эҙе ҡалды.

1861. Үҙ буйыңда уймаҡтай.

1862. Буйыңдагы уймаҡты
Эҙләһәң дә — тапмаҫһың.

1863. Үҙәнеңдә, үҙ буйыңда,
Эҙләһәң дә табалмаҫһың.

1864. Тәтәй инәй тотоп алды,
Төймәләй генә төйөн һалды.

## Бил

1865. Атайымдың тал сыбыгы
Бөгөлә лә һыгыла.

1866. Тал һыгыла, тал бөгөлә,
Бөгөлгән саҡта өҙөлә.

## Эс-ҡарын

1867. Ауыҙын бөргән ҡапсыҡ,
Эсе тулы балсыҡ.

1868. Әсәйемдең баҙы,
Эсе тулы ҡаҙы.

### Эсәк

1869. Сытырман эсендә
Сытыр-сатыр ҡыл арҡан.

1870. Сытыр-мытыр арҡан
Келәткә инеп ятҡан.

1871. Төйөнлө-төйөнлө арҡан
Тар келәткә инеп ятҡан.

### Ашҡаҙан

1872. Бер соҡор бар — тулмаҫ,
Бер көндө лә буш тормаҫ;
Буш торһа, тынмаҫ,
Унһыҙ кеше тормаҫ*.

### Йөрәк

1873. Яраһы юҡ — ауырта,
Төтөнө юҡ — яна.

### Бармаҡ

1874. Бер таяҡта өс быуын.

1875. Биш балаға бер исем.

1876. Биш туған
Эшләгәндә бергә эшләйҙәр,
Ял иткәндә бергә ял итәләр.

1877. Оҙон-оҙон ҡыҫҡалы,
Ҡырмыҫҡалы[170] ҡыҙҙары.

### Ҡул, бармаҡтар

1878. Бер әсәлә биш бала[171].

1879. Бер ағаста биш ботаҡ.

1880. Бер таяҡта биш тармаҡ.

1881. Биш-биш бишәгән,
Бишәүһен бергә теркәгән.

1882. Биш туған бер төҫтән,
Бишеһе лә бер төптән.

1883. Соҡалаҡта биш ҡалаҡ.

1884. Биш саталы һәнәк
Аҙым һайын кәрәк.

1885. Биш тармаҡлы ҡамсы.

1886. Ун ағай бер ерҙә.
Бер-береһен үтә алмай.

1887. Ике йыуан ботаҡ
Сығара бишәр ваҡ ботаҡ.

1888. Ике усымда ун бала.

1889. Бер ялсыға биш ҡамсы.

1890. Бер ялсы
Тотҡан ҡамсы:
Һабы берәү,
Тармағы бишәү.

1891. Уҡлау,
Уҡлау башы суҡлау,
Суҡлау башы биш тармаҡ.

1892. Ике әсәгә бишәр бала,
Һәммәһенә бер исем[172].

1893. Ун балаға ике ана.

1894. Ун кешегә бер исем.

## Бармаҡ, тырнаҡтар

1895. Ҡаланан килгән биш ҡашҡа,
Бишеһе ла тиң ҡашҡа.

1896. Бохарҙан килгән биш ат,
Бишеһе лә ҡашҡа ат.

1897. Өй эсендә биш бала,
Бишеһендә биш тана.

## Ҡул, бармаҡтар, тырнаҡтар, тырнаҡҡа яғылған ҡына

1898. Бер ағаста биш ботаҡ,
Биш ботаҡҡа ҡар яуған,
Ҡар өҫтөнә ҡан тамған.

1899. Уҡлау,
Уҡлау башы суҡлау,
Суҡ өҫтөнә ҡар яуған,
Ҡар өҫтөнә ҡан тамған.

1900. Әй әфтисуҡ, әфтисуҡ,
Әфтисуҡта таҡта суҡ.
Таҡта суҡта биш ботаҡ,
Биш ботаҡҡа ҡар яуған,
Ҡар өҫтөнә ҡан тамған.

1901. Мәғри, мәғри, мәғри тал,
Мәғри талда биш ботаҡ,
Биш ботаҡҡа ҡар яуған,
Ҡар өҫтөнә ҡан тамған.

## Бармаҡ, тырнаҡ, ҡына

1902. Бағана башына ҡар яуған,
Ҡар өҫтөнә ҡан тамған.

1903. Ялпаҡ ергә ҡар яуған,
Ҡар өҫтөнә ҡан тамған.

## Тырнаҡ, ҡына

1904. Аҡҡа ҡыҙыл тама.

## Ҡул, аяҡ бармаҡтары

1905. Ана[173] бер, бала биш,
Дүрт ананан егерме бала.

## Уймаҡ эсендәге бармаҡ

1906. Кескәй генә мит,
Эсе тулы ит.

## Бейәләй эсендәге бармаҡтар

1907. Аҡ тирмәнең эсендә
Эреле-ваҡлы биш егет.

1908. Биш малай бер өйҙә,
Береһен-береһе күрә алмай.

## Бирсәткә эсендәге бармаҡтар

1909. Ун бағана, ун ишек.

## Тырнаҡ

1910. Бохарҙан килгән биш бейә,
Бишеһе лә баш бейә,
Ҡолондары ҡара ала.

## Тырнаҡ кере

1911. Йөҙөк аҫтында беләү булыр,
Уны күрмәгән һеләү[174] булыр.

## Йоҙроҡ (бармаҡтар)

1912. Таралһа — биш,
Берекһә — бер.

## Эҙ

1913. Юламан юлын һуҙа бара,
Һүрәте юлда ҡала бара.

1914. Килдем-килдем,
Тышҡа ҡуйып керҙем.

## Аяҡ, ҡулдар

1915. Ерҙән килә тиктормағай,
Елеп килә ике тарбағай.

1916. Ерҙә тора тиктормағай,
Уртаһында тарбағай ҙа торбағай.

1917. Ерҙә тора сатлы-ботло,
Күктәгеһе йәпле-йөплө.

## Аяҡтар

1918. Ике ағай йәнәшә бара,
Береһен-береһе уҙыша бара.

1919. Ике ағай китеп бара,
Береһе уҙғанда, икенсеһе артҡа ҡала.

1920. Ике һылыу һыуға бара,
Берен-бере уҙа бара.

1921. Ике килен һыуға бара,
Берен-бере уҙышып.

1922. Береһе алға китеп бара.
Икенсеһе ҡалып бара,
Ҡыуып етә, уҙып китә,
Тегенеһен көтөп ала.

1923. Ерҙә тора ике ағай,
Тарбағай ҙа торбағай.

## Аяҡ, ҡул, күҙ

1924. Кис булһа «ял» тиҙәр,
Иртән «эш» тиҙәр.

## Балтыр (бурбай)

1925. Арҡаһы алда, ҡорһағы артта,
Үҙе мине алға тарта.

## Үксә

1926. Алға сыҡһа ла урыны артта,
Артта ҡалһа ла урыны артта.

1927. Ике тубырсыҡ артымдан ҡалмай.

## Үксә, аяҡ табаны

1928. Мин баҫам, ул башын күтәрә.

1929. Береһе ятҡанда, икенсеһе башын ҡалҡыта.

## Аяҡҡа сүп кереү

1930. Бара инем, бара инем, эмм...

## Тән тамыры

1931. Бөтөй-бөтөй бөтөгән,
Бөтөй менән төтөгән,
Күк еп менән һырыған.

1932. Үҙең буйы үрмәксең,
Үрелһәң дә тапмаҫһың.

## Елек

1933. — Ҡана, ҡайҙа ҡышланың?
— Ағиҙелдә ҡышланым.
— Ҡаны нисек теймәне?
— Уртаһында ҡышланым[175].

1934. — Ҡайҙа ҡышланың?
— Ҡәнзәфәрҙә[176] ҡышланым.
— Нисек ел теймәне?
— Уртаһында ҡышланым.

## Кеше ғүмере

1935. Шырт итмәй, мырт итмәй,
Кеше һиҙмәй, эт өрмәй;
Арта бара, тарта бара,
Килә бара, китә бара.

## Кеше ғүмере, йәшәү һәм үлеүе

1936. Бер юл бар — алыҫ,
Алыҫта булһа — «яҡын»,
Бер юл бар — яҡын,
Яҡында булһа — «алыҫ».

## Үҫеү

1937. Шырт итмәй, мырт итмәй,
Эт өрмәй, кеше күрмәй —
Арта бара.

## Йоҡо

1938. Төпһөҙ киҫмәккә ит тоҙланым.

1939. Үлсәүҙә үлсәнмәҫ,
Баҙарҙа һатылмаҫ,
Унан татлы бер нәмә лә булмаҫ.

1940. Баҙарҙа һатылмай,
Бизмәнгә һалынмай;
Балдан татлы —
Ашап булмай.

1941. Балтанан ауыр,
Балдан татлы.

1942. — Татлынан татлы ни татлы?
— Йоҡо татлы.

1943. Баш аҫтында баллы ҡашыҡ.

1944. Кәштәнән ҡайраҡ төштө.
Һәләяҡты[177] ҡыра төштө.

1945. Һауанан беләү төштө,
Халайыҡты ҡыра төштө.

1946. Башыбыҙға бәлә төштө,
Барыбыҙҙы ҡыра төштө.

## Биҙгәк ауырыуы

1947. Кешенән ҡурҡа,
Кеше лә унан ҡурҡа,
Шулай булһа ла
Кеше ҡуйынына кереп ята.

## Сир, дауаланыу

1948. Бушҡа килә, аҡсаға китә,
Китмәһә, башыңа етә.

1949. Ботлап керә,
Мыҫҡаллап сыға[178].

## Үлем, йоҡо, ат тояғы

1950. Әсенән әсе — ни әсе?
Татлынан татлы — ни татлы?
Ҡатынан ҡаты — ни ҡаты?

## Үлем, мәйет күмеү

1951. Йөрөй торғас, юҡ булды,
Ер ҡуйыны туҡ булды.

1952. Аҡ сәкмән кейҙем,
Ҡара өйгә индем.

1953. Йөрөнөм, йөрөнөм —
Ҡайтмаҫ ергә барып индем.

1954. Ҡоҙағый ҡыуа килә,
Артымдан етә килә.

1955. Берәү атта китеп бара,
Йәйәүлеләр етеп бара.
Сәләм бирҙем — алманы,
«Ҡал!» — тип әйттем — ҡалманы.

1956. Башһыҙ атҡа менгән,
Еңһеҙ күлдәк кейгән,
Ашыға-ашыға
Алыҫ сәфәргә китеп бара.

1957. Ураным, сырманым,
Сытырманға ташланым.

## Кәфен

1958. Яғаһы бар, еңе юҡ.

## Ҡәбер

1959. Ер аҫтында ябыҡ һандыҡ.

## Зыярат

1960. Ауыл ултырған,
Әтәс ҡысҡырмай,
Халыҡ тормай[179].

1961. Ауылы бар, төтөнө юҡ.

## Ҡайғы

1962. Тоҙ түгел — әсе,
Ҡылыс түгел — үткер,
Ут түгел — яндыра.

## Холоҡ, яҙмыш

1963. Ҡара һаҡалым
Ҡайҙа барһам да артымдан ҡалмай.

1964. Ҡайҙа барһам да
Ҡара ҡолоном ҡыуып етә.

## Байрам

1965. Яҙ ҙа килә, көҙ ҙә килә,
Япраҡ артынан шыуа килә дөлдөлө[180].

## Күләгә

1966. Сөм-ҡараңды тотоп бир,
Ат-тунымды бирәйем.

1967. Йүгерһәм, етә алмайым.

1968. Арымай-талмай,
Арттан ҡалмай.

1969. Атлаһаң — атлай,
Туҡтаһаң — туҡтай.

1970. Аяҙ көндө арттан ҡалмай.

1971. Айға-көнгә күренмәй,
Эйәһенән бер ҙә айырылмай.

1972. Арымай-талмай,
Ат артынан ҡалмай.

1973. Ҡып та итмәй,
Шып та итмәй,
Эҙәм белмәй,
Эт өрмәй.

1974. Йүгерһәң дә, йәшенһәң дә
Эргәңдән ҡалмай.

1975. Килтерҙем — ҡалдыра алманым,
Ҡайҙа барһам да эйәрә.

1976. Өйгә лә һөйәп булмай,
Арбаға ла тейәп булмай.

1977. Көн ҡыуырһың, төн ҡыуырһың,
Ай ҡыуырһың, йыл ҡыуырһың,
Барыбер миңә етә алмаҫһың.

1978. Торһам — тора,
Сапһам — саба,
Үҙен сапһам — сабылмай.

1979. Мин ышыҡҡа ҡасһам,
Ул яҡтыла көтә.

1980. Кешенән ҡалмай — эйәрә,
Ҡараңғыға инһәң — юғала.

## Һыбай кеше

1981. Ике башҡа алты аяҡ.

1982. Ике башлы,
Алты аяҡлы,
Бер ҡойроҡло.

1983. Алты аяҡ,
Ике баш,
Дүрт күҙ,
Бер ҡойроҡ.

1984. Ул йөрөгәндә — мин ултырам,
Ул ултырғанда — мин йөрөйөм.

1985. Ул сапҡанда — мин баҫып торам,
Ул атлағанда — мин ултырып торам.
Ул туҡтағанда — мин йөрөп торам.

1986. Типтем — тирәккә мендем,
Остом — ожмахҡа индем.

1987. Ергә типтем — тирәккә мендем,
Теләгемә юлыҡтым.

1988. Ултырҙым,
Типкем менән типтем —
Алға киттем.

# V. АҘЫҠ-ТҮЛЕК, АШ-ҺЫУ ӘҘЕРЛӘҮ

## Ҡурмас, тарма, киндераш

1989. Мең күҙ булып ҡарап тора,
Уны тотҡан бала ауыҙын йыра.

## Бутҡа

1990. Лыбыр-лыбыр һөйләшә,
Батырып тотһаң, тына.

## Ярма, бутҡа

1991. Меңәр йыйылып киләләр ҙә
Тар тоҡонға[181] инәләр,
Түр башына менәләр.

## Тары төйөү, бутҡа бешереү

1992. Дөп-дөп, дөпәнгеләй, мәнгеләй,
Беш-беш, бешәнгеләй, тәмгеләй.

## Икмәк, икмәк бешереү

1993. Йомро башлы түрәләр
Түр башына менәләр.

1994. Аҫты ҡыҙыл ғәләмәт,
Өҫтө ҡыҙыл ғәләмәт,
Алдым да һалдым,
Һөйәнем дә ҡуйҙым.

1995. Алдыңда булһа — моңайтмаҫ.

1996. Үткер бысаҡ алалар,
Яралар ҙа һалалар.

1997. Бысаҡ алалар ҙа бауырымды теләләр.

1998. Таяҡ менән туҡмайҙар,
Ут менән яндыралар,
Бысаҡ менән киҫәләр,

Мине ярат‌һындар өсөн,
Шулай интектерәләр.

1999. Туҡмап-туҡмап өйгә индерҙем,
Маҡтап-маҡтап тышҡа сығарҙым.

2000. Түп-түңәрәк,
Торған ере түбәрәк,
Кәрәк ере күберәк.

2001. Үҙе йәнһеҙ,
Унһыҙ донъя һанһыҙ.

2002. Үҙе түңәрәк,
Эсе тулы күҙәнәк.
Эскелтем-сөскөлтөм,
Бөтә нәмәнән ҡәҙерлерәк.

2003. Күперҙе, күперҙе,
Өйгә инеп ултырҙы.
Сыҡты ла сапты,
Үткер ҡылысҡа ҡапты.

2004. Киҫәм-киҫәм — ҡаны юҡ,
Уны белмәгән кешенең һаны юҡ.

2005. Сөсө түгел — әскелтем,
Телгеләнгән һыныҡлы,
Барынан да туҡлыҡлы.

2006. Ҡырҡтылар мине,
Һуҡтылар мине,
Тунап-тунап бөттөләр мине,
Ыуып-ыуып өф иттеләр,
Тәгәрләтеп артыма типтеләр —
Барыбер үҙемдекен иттем:
Алдарына килеп ултырҙым.

## Икмәк һалыу

2007. Ары ла лап-лап,
Бире лә лап-лап.
Күбеп ят.

### Апара, икмәк ҡабарыу

2008. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ағасҡа йәбешә.

2009. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,
Шыма ағасҡа шыуып менә.

2010. Таң атҡансы эсе күпкән.

### Көлсә

2011. Көлгә күмелә лә
Көлдөрә-көлдөрә күренә.

2012. Көмрө килен көлдөрә килер.

2013. Көмрө килен күмһегән[182].

### Бауырһаҡ

2014. Аҡ сәтләүектең тышы юҡ,
Ваҡ сәтләүектең теше юҡ.

### Бауырһаҡ, йыуаса

2015. Йәйҙем, йәйҙем дә һуҙҙым,
Һуҙҙым, һуҙҙым да өҙҙөм,
Һалдым саҡмаға
Йәнен ҡаҡмаға,
Ҡаҡтым да алып ҡаптым.

2016. Һары ҡуйҙар һыуға батты,
Шешенде лә өҫкә ҡалҡты.

### Йүрмә, пирог

2017. Уртаһы бөгөлгән,
Сите бөрөлгән.

## Бәлеш

2018. Эсе тулы ваҡ халыҡ,
Түрҙә ултыра маҡтанып.

2019. Эсе өрөлгән,
Сите төрөлгән,
Түбәһендә бер тишек.

2020. Тар ауыҙлы, киң төплө.

2021. Ауыҙы-башы бөрөшкән,
Байҙар менән йөрөшкән.

## Билмән

2022. Аҡ алаша батты,
Ҡолаҡтары ҡалҡты.

2023. Ҡола ҡолоном ҡойоға төштө,
Ҡолағы ҡарпая төштө.

2024. Ҡола атым ҡойоға төштө,
Ҡолаҡтары күренеп ҡалды.

2025. Ҡола атым һыуға төштө,
Ҡолағы ҡарпая төштө.

2026. Ҡола атым ҡомған күленә сумды.

2027. Ала үгеҙ бата,
Ике ҡолағы ҡалҡа.

2028. Аҡ ҡалағым һыуға батты,
Ҡолаҡтары өҫкә ҡалҡты.

2029. Ҙур-ҙур кешеләр таҡта быуалар,
Киләләр ҙә һыуға сумалар.

2030. Матур-матур ҡыҙҙар
Таҡта өҫтөнән шыуалар ҙа
Ҡайнар һыуға сумалар.

## Билмәндәр, сүмес

2031. Өйөрлө йылҡым һыуға төштө,
Бүҙәнә ялдап* төштө.

2032. Йөҙ йылҡы һыуға төштө,
Сөләймән ҡыуа төштө.

2033. Ҡырҡ йылҡым һыуға төштө,
Әбделғәлим ҡыуа төштө.

## Билмән яһау

2034. Ҡайсыһыҙ киҫелә,
Епһеҙ тегелә.

## Һалма, ҡаҙан

2035. Ҙур-ҙур балалар
Аҡ күлде быуалар,
Киләләр ҙә һыуға сумалар.

2036. Түңәрәк күлгә түңгәк һалдым.

2037. Түңәрәк күлгә япраҡ яуа.

2038. Өҙөп алдым, һыуға һалдым.

## Сумар, ҡаҙан

2039. Бер мәкегә ҡырҡ тәкә һикерә.

## Ит

2040. Йүгерҙем, йүгерҙем дә
Килеп ҡаптым бысаҡҡа;
Төрөлдөм, бөрөлдөм дә
Килеп керҙем усаҡҡа;
Яндым, көйҙөм,
Кәбәндәй өйөлдөм,
Алдығыҙға килдем.

2041. Ҡыҙартып һалдым,
Буҙартып алдым.

## Мал башын ярыу, өтөү

2042. Яр буйында ярты аласыҡ,
Ярғыла ла утҡа яҡ.

## Ҡурҙаҡ, бешкән ит

2043. Өф итмәгәндә өф иттерә,
Етешкәнде хуш иттерә,
Етешмәгәнгә аҫтын (төбөн) күрһәтә.

## Ҡаҙы

2044. Ҡыҙыл ҡамыт кейҙем,
Ҡупшы аҙыҡ ейҙем.

2045. Төрөп торбаға һалдым,
Тороп торбанан алдым.

2046. Ҡыҙыл ҡамыт эсендә
Ҡыҙ (туй) ризығы[183] яталыр.

## Картуф

2047. Ерҙә үҫтем, тун тышланым,
Өҫтәлгә мендем, туным ташланым.

2048. Тиреһен тунаным да
Итен сәйнәнем.

## Тоҙ

2049. Яңғыҙ мине ашамайҙар,
Минән башҡа йәшәмәйҙәр.

2050. Мине ашамайҙар,
Минән башҡа туй ҙа яһамайҙар.

2051. Аҡ көсөгөм аштан ҡалмай.

2052. Бәләкәй генә аҡ көсөк,
Сәп иткәндән ҡоро ҡалмай.

2053. Үҙе генә ашалмай,
Унан башҡа аш бармай.

2054. Һыуҙан тыуа, һыуҙан ҡурҡа.

2055. Ерҙән табыла,
Утҡа табына,
Һыуҙан ҡурҡа[184].

2056. Үҙем әсе булһам да
Ризыҡты тәмләндерәм.

2057. Үҙе өҫтәлдән төшмәй,
Тышҡа ҡуйһаң, эт еймәҫ.

2058. Әсе була, татлы була,
Үҙе туҙан саҡлы була.

2059. Үҙе аҡлы,
Тәме татлы,
Тышҡа ҡуйһаң, эт еймәҫ.

## Ҡаҙанға тоҙ һалыу

2060. Иҙел төбөнә таш һалдым.

## Тоҙ, шәкәр комо

2061. Аҡ ҡына, ваҡ ҡына,
Һыуға һалһаҡ, юҡ була.

2062. Сәйгә һалғанды ашҡа һалмайҙар,
Ашҡа һалғанды сәйгә һалмайҙар.
Һәр икеһе аҡ, үҙҙәре бик ваҡ,
Тиҙ генә уйла, сиселһен йомаҡ.

2063. Икеһе лә — аҡ,
Икеһе лә — ваҡ,
Айырайым тиһәң — ҡап!

## Киҫәкле шәкәр

2064. Ҡар түгел — аҡ,
Боҙ түгел — ҡаты,
Тоҙ түгел — ирей.

2065. Шаҡманайҙың шаҡылдағы
Баҙға төшһә, ирейҙер.

2066. Алыҫтан ҡараһам — аҡлы,
Татып ҡараһам — татлы.

2067. Аҡтыр үҙе — ҡар түгел,
Үҙе баллы — бал түгел.

2068. Таштан ҡаты, тәме татлы.

## Сөгөлдөр, шәкәр

2069. Ҡырҙа үҫә йәшәреп,
Ерҙә ята ҡыҙарып,
Өҫтәлгә килә ағарып.

## Йомортҡа

2070. Шаҡ-шаҡ, шаҡ-шаҡан,
Шаҡ эсендә аҡ шалҡан,
Шалҡан эсендә һары бал,
Ҡулыңдан килһә, һалып ал.

2071. Тышы тамаҡҡа ултыра,
Эсе йөрәккә ята.

2072. Бәләкәй генә аҡ келәт,
Эсе тулы һары май.

2073. Таш келәт,
Аҡ келәт,
Аҡ келәт эсендә һары алтын.

2074. Өй артында ҡойом бар,
Ике төрлө һыуым бар.

2075. Бауға бәйләнмәй,
Сөйгә эленмәй.

2076. Аҡ тирмәнең эсендә
Һары сәсле ҡыҙ йоҡлай.

2077. Аҡ тирмәнең ишеге лә, тишеге лә юҡ.

2078. Бәләкәй генә аҡ таш пулат,
Ишеге лә юҡ, тишеге лә юҡ.

2079. Таш пулат,
Көмөш пулат,
Эсендә һары балауыҙ.

2080. Бәләкәй генә аҡ һандыҡ,
Асҡыс-биге юҡ һандыҡ.

2081. Туҫтаҡ өҫтөндә туҫтаҡ.

2082. Йомро ғына аҡ һарай,
Эсе тулы бал да май.
(Эсе тулы һары май.)

2083. Аласыҡта аҡ алма —
Ике төрлө һыуы бар.

2084. Аҡ көмбәҙле бер таш мәсет,
Инергә ишеге юҡ.

2085. Аҡ тәпән,
Аҡ тәпән эсендә һары май.

2086. Аҡ күл,
Аҡ күл эсендә һары күл.

2087. Аҡ тунымдың еге юҡ.

2088. Аҡ мискәнең йөйө юҡ,
Ҡоршауы юҡ, сөйө юҡ,
Эсендә шыйыҡ балы бар,
Һарыһы бар, ағы бар.

2089. Аласыҡта бер ил,
Уртаһында һары тал.

2090. Аҡ һарайым эсендә
Һары тауығым ултыра.

2091. Йәнленән йәнһеҙ тыуа,
Йәнһеҙҙән йәнле тыуа.

2092. Йәнһеҙҙән йәнле тыуыр,
Ул ни булыр? Шуны бел!

2093. Эсе һары,
Тышы аҡ,
Ул ни булыр?
Әйтеп баҡ!

2094. Аҡ май — ағы.
Һары май — һағы.
Бөгөн үле,
Иртән тере.

2095. Боҙон ватһаң, көмөш сығыр,
Көмөшөн ватһаң, алтын сығыр.

2096. Бер мискәнең эсендә ике төрлө аш.

2097. Бер сүлмәктә ике төрлө май.

2098. Бер батман эсендә ике төрлө ашамлыҡ
(эсемлек).

2099. Бер сынаяҡ эсендә ике төрлө һөт.

2100. Бер батмуста ике төрлө ҡамыр.

2101. Бер мискәлә ике төрлө бал.

2102. Бер өйҙөң эсендә ике төрлө шаршау.

2103. Бер ҡойонан ике төрлө һыу сыға.

2104. Бер мискә эсендә ике төрлө һарыҡ бәрәсе.

2105. Ҡаты-ҡаты аҡ ҡала,
Аҡ ҡаланың эсендә һары бала.

2106. Аҡ шыйыҡса эсендә һары туп.

## Йомортҡа һарыһы

2107. Бер һауыттың эсендә
Бәләкәй генә һары бәрәс.
Ергә теймәйҙер,
Көн сығышын күрмәйҙер.

## Йомортҡа бешереү

2108. Йылытырға һыу ҡуйҙым,
Һыу тигәнем боҙ булған.

2109. Йомарлаған аҡ ҡарым,
Утҡа ҡуйһам, боҙ була.

## Йомортҡа ашау

2110. Аҡ келәттә һары май,
Асып алыр асҡыс юҡ.
Бик асыҡтым — мәлем юҡ,
Биген ватмай хәлем юҡ.

2111. Аҡ келәтте ваттым,
Эҙләгәнем таптым.

## Һөт-ҡатыҡ

2112. Йәй көнө табаҡ менән,
Ҡыш көнө ҡалаҡ менән.

## Һөт

2113. Тамсы-тамсы тамып тора,
Һыу шикелле ағып тора.

2114. Үҙе аҡ — ҡар түгел,
Үҙе шыйыҡ — һыу түгел[185].

2115. Ҡар түгел — аҡ ҡына,
Эсеп ебәр саҡ ҡына.

## Ҡатыҡ

2116. Аҡ шишмәнең аҡҡан һыуын
Сапсаҡҡа ҡойоп ҡатырҙым.

## Һөт, ҡаймаҡ

2117. Аяҙҙы болот ҡаплай,
Бирхон[186] болотто ҡаплай.

2118. Ярлыһы аҫта ҡала тора,
Байы өҫкә ҡалҡа тора.

2119. Түңәрәк күлдең төбө күренмәй,
Ҡалҡына ла ҡалыная.

## Ҡаймаҡ

2120. Аҡ балаҫ өҫтөнә аҡ мендәр йәйелде.

## Ҡаймаҡ, ҡалаҡ

2121. Айҙы болот ҡаплаған,
Ҡуян балта һаплаған.

2122. Айҙы болот ҡаплаған,
Верхуш[187] балта һаплаған.

## Май, май яҙыу

2123. Һары көсөгөм һыуға бата,
Бер сума ла бер ҡалҡа.

2124. Ҡул[188] буйында эт йүгерә.

2125. Ары һуҡтым,
Бире һуҡтым,
Һары башлы ҡыҙ таптым.

2126. Баҙ эсендә айыу тулай.

2127. Тәрән баҙ,

Баҙ эсендә һаҙ,
Һаҙ эсендә һары ҡаҙ,
Тартам да алам,
Тартам да алам.

2128. Тәрән баҙҙа бүре олой.

## Ҡорот

2129. Тоҡос башлы түрәләр
Түр башына менәләр.

2130. Йомро-йомро йомарлам,
Йомроһоҙ тора алмам.

2131. Ыуаланым, ҡыҫтым,
Мөйөшкә инеп боҫтом.

## Ҡымыҙ

2132. Бешәләр, бешәләр ҙә
Ҡойоп эсәләр.

2133. Ҡолон ашын ҡойоп эстек.

2134. Ауыҙға инә, танауҙан ала.

2135. Ҡабарам, ҡабарам да
Ҡунаҡ алдына барам.

2136. Ҡылыҡһыҙҙы тилертә,
Булдыҡһыҙҙы тилмертә.

## Ҡымыҙ, ҡымыҙ бешеү

2137. Шапыр-шопор төпкә төшә,
Аҡ йылғаһы ташып сыға.

## Айран, май

2138. Бештем, бештем дә икегә айырҙым;
Береһен ҡойҙом, береһен ҡалдырҙым.

## Эремсек

2139. Ҡәйнәм һүҙен тыңламаны,
«Ҡайна» тигәндә, ҡайнаманы.

2140. Ҡәйнәм әйтте: «Ҡайна», — тип,
Ә ул ятты ла бөгәрләнде.

2141. Ҡәйнәһен килене тыңламай:
Ҡаймаҡ һорай — ҡатыҡ бирә.

## Сәй

2142. Һурпаһын эсәләр,
Итен түгәләр.

2143. Ите хәрәм, һурпаһы хәләл,
Был ни булыр, балалар?

2144. Тәнгә сихәт, йәнгә рәхәт —
Аҡ тауыҡтан ҡыҙыл ҡан.

2145. Ҡайнар һыуға ҡан һалдым.

2146. Мунсаға ингәндә ҡара ине,
Мунсанан сыҡҡанда ҡыҙарған.

2147. Һалдым, һалдым, артманы,
Эстем, эстем, кәмемәне.

## Кәрәҙле бал

2148. Инәйемдең иләге,
Иләгендә силәге,
Силәк эсендә һарыҡай еләге.

## Әсе бал, көрәгә

2149. Һары-һары балауыҙ,
Балауыҙҙың ҡаны бар,
Уҫал тигән даны бар.

2150. Эсһәң, ҡыҙҙыра,
Ҡылыҡты боҙҙора.

2151. Баҙҙа һары айғырым кешнәй.

### Һалат [солод], буҙа эшләй торған

2152. Мейес башы ҡортло кейеҙ.

### Ҡомалаҡ

2153. Келәткә килеп инде,
Күрәгәгә йәнен бирҙе.

### Бал, ҡаҡ

2154. Сәсмәй, урмай йыйып алам,
Сәй эскәндә, шуны һалам.

### Ҡоймаҡ, ҡоймаҡ бешереү

2155. Абалашты бармағым —
Ҡубып төштө тырнағым.

2156. Түңәрәк күл эсендә
Һөйәкһеҙ балыҡ һикерә.

2157. Айҙы болот ҡаплаған,
Ҡуян балта һаплаған.

2158. «Шыжж» итеп ҡала,
«Выжж» итеп ала.

2159. «Тыжж» иттереп алғански,
«Шыжж» иттереп һалғански,
Ялт иттереп алғански,
Ситен бөккән ялпаҡ тимер.

2160. Вәлдер-вәлдер, вәләй,
Шыжғы-быжғы...

2161. «Тажж» иттереп һалдым,
Ялт иттереп алдым.

2162. Эләктергес, ҡаптырғыс,

«Шыжж» иттереп һалалар,
«Ҡып» иттереп алалар.

2163. Электергес, ҡаптырғыс,
Гөжөлдәтеп һалалар,
Ҡыпылдатып алалар;
Электергес, ҡаптырғыс,
Башкирский аҙна кис[189].

2164. Йомабикә сәп тә сөп.

## Таба, май, ҡоймаҡ

2165. Тимер яр,
Аҫыл һыу,
Һөйәкһеҙ балыҡ.

## Талҡан төйөү

2166. Аҡ көсөгөм таҡ-таҡ итә,
Ҡолаҡтары шаҡ-шаҡ итә.

## Он иләү

2167. Сыҡты буран — өйҙә көрт.

2168. Ырҙын аша ҡар яуа.

2169. Өҫтө шаран[190], аҫты буран.

2170. Тәпәш күктән ҡар яуа.

2171. Болот үтә ҡар яуа.

2172. Шаҡ итер, таҡ итер,
Аҫтынан каруан үтер.

2173. Ләпәк өйҙән ҡар яуа.

2174. Йүкәле туғайға томан төшә.

2175. Келәт аҫтында буран уйнай.

## Туҡмас йәйеү

2176. Әбей тәгәрәтте иһә,
Бабай йәйелеп китә.

2177. Әбей бәүелә тора,
Бабай йәйелә тора.

## Ҡаҙанға туҡмас һалып, ижау менән болғатып ебәреү

2178. Өйөрлө йылҡым һыуға төштө,
Сөләймән сатан ҡыуа төштө.

## Һуған турау

2179. Ҡаланан килгән ҡарт урыҫ
Ҡалъя турап ултыра.
Һиңә лә бирмәй,
Миңә лә бирмәй,
Үҙе лә илап ултыра.

## Борос

2180. Әптеүәй ҙә һәптеүәй[191],
Тышҡа ҡуйһаң, эт еймәй.

## Ҡара борос

2181. Йомағым йомаҡ,
Ҡарасай борсаҡ.

## Ҡарта

2182. Ҡатлама, ҡатлама,
Ҡатламаны ашама,
Мәһәр килмәй башлама.

## Араҡы

2183. Ҡыҙыл башлы мулла
Алъяпҡысын бәйләй ҙә
Алдыма килеп ултыра.

2184. Ҡыҙыл башлы мулла килгән,
Уны саҡырған бәндә бөлгән.

2185. Килде, ултырҙы,
Шуға йәнем ҡоторҙо.

2186. Биленә бәйләгән алъяпҡыс —
Кеше нәфсеһен алдатҡыс.

2187. Теҙелеп ҡарап тора,
Эсһәң, аяҡтан йыға.

2188. Тышы — быяла, эсе — диуана.

2189. Бер һауыттың эсенә
Бөтә әшәкелек йыйылған.

## Ашау

2190. Алдан алдым — тирмәнгә һалдым,
Ҡапсығымды тултырҙым;
Ҡапсығымды тултырғас,
Ах-бух итеп ултырҙым.

2191. Утыҙ ике туҡылдыҡ
Юл башында ултыра,
Ун ат биргән көлтәне
Тапап-ҡырып ултыра.

2192. Ун утыҙға бирә,
Утыҙ Әлтемгә бирә,
Әлтем Кәлтемгә бирә,
Кәлтем этәрә бирә.

2193. Ун утыҙға бирә,
Утыҙ Бәйпеткә бирә,
Бәйпет ярҙан тәгәрәтә.

2194. Ун утыҙға бирә,
Утыҙ Тәлпескә бирә,
Тәлпес ярҙан осора[192].

2195. Ун утыҙға бирә,
Утыҙ Йәлберәйгә бирә,
Йәлберәй уны тәгәрәтә.

2196. Биш мишәр бер тишеккә таш ата.

2197. Иртән дә төймә төймәрләй,
Төш тә төймә төймәрләй,
Кис тә төймә төймәрләй.

## VI. КЕЙЕМ-ҺАЛЫМ

### Бүрек

2198. Төндә элеүле,
Көндөҙ кейеүле.

2199. Йомро төпкә — йомро ҡап.

2200. Ҡара ҡарағасҡа
Ҡара ҡаҙан ҡапланым.

2201. Ишектән инә — сөйгә ҡуна.

2202. Ағайҙан да бейек,
Бабайҙан да бейек,
Батшанан да бейек,
Һалдаттан да бейек.

2203. — Кешенән ҙур (бейек), үҙе бәләкәс.
Ул ни булыр?
— Кәпәс.

### Ҡолаҡсын

2204. Бер сысҡанға ике ҡойроҡ.

2205. Шуға шатландым:
Ике аяғым һәлберләтеп,
Менеп атландым.

2206. Ике аяғын һәлберләтеп,
Түр башында ултыра.

2207. Ҡолаҡлы ябалаҡ ҡыштан һаҡлай.

## Бүрек кейгән кеше

2208. Бәләкәй генә лапаҫ аҫтында
Ике аяҡлы бағана.

## Эшләпә

2209. Ҡояш төшөрмәй, ямғыр килтермәй.

2210. Өйөм башы ҡыйыҡсан,
Килеп ҡунды һайыҫҡан.

2211. Өй башына мендем,
Ҡанатымды йәйҙем.

## Түбәтәй

2212. Ҡара урмандың башында
Ҡара ҡарға ултыра.

2213. Ҡара урман өҫтөнә
Ҡара ҡарға ҡанат йәйгән[193].

## Яулыҡ

2214. Ҡорған аҫтында ҡәйнәм торған.

2215. Ике осо иңдә,
Ике осо ерҙә.

## Ҡашмау

2216. Аҡ ҡайыным башында
Ҡыҙыл әтәсем ултыра.

2217. Сытыр-мытыр,
Бейәләй ҡутыр.

2218. Ҡоймалыҡтың башында
Алтын этәс ултыра.
Ҡанатына ҡан тейгән,
Ҡағына ла һуғына.

2219. Кәкре ҡайын башында
Ҡаңҡый этәс ултыра.
Ҡанатынан ҡан тама,
Күрһәм, йөрәгем яна.

2220. Өй башында боҙло киле.

## Түшелдерек

2221. Сытыр-мытыр,
Ҡалай ҡутыр[194].

2222. Сытыр-мытыр,
Кругом ҡутыр.

## Дебет шәл

2223. Һоро кәзәм ҡуйыныма керҙе,
Ҡуйын арты иңемә менде[195].

2224. Егәрле еңгә елкәһенә
Кәзә менеп атланған.

2225. Еңгәм, еңгәм!
Елкәңә кәзә менгән!

## Ҡушъяулыҡ

2226. Ҡорған ҡорған[196],
Сите борған.

2227. Ҡорғаны ҡоролған,
Уртаһы йырылған.

## Салма

2228. Аҡтан аҡ,
Ҡаҙыҡ башындағы ҡап.

## Шарф

2229. Алды ла ҡойроҡ,
Арты ла ҡойроҡ.

2230. Һоро йылан сорналған,
Муйыныма килеп уралған.

2231. Урай уралған, муйынға сорналған.

## Күлдәк

2232. Көйө килмәк,
Кейә белмәк.

2233. Арҡыры ла торҡоро,
Оҙонлоғо — үҙем буйы.

2234. Тыуғанмын, үҫкәнмен,
Ғүмеремде шуның эсендә үткәнмен.

2235. Баш-аяҡһыҙ — буйы бар,
Кәүҙәһе юҡ — ҡулы бар.

2236. Бергә була көн дә төн,
Иң яҡының кем?

## Камзул

2237. Яланы йәшелдән,
Кәртәһе көмөштән.

2238. Бей-бей балаһы,
Бикә солтан инәһе,
Унның да бар самаһы —
Йөҙ мең алтын баһаһы.

2239. Биле бормалы,

Сите уҡалы,
Эсе юхалы.

2240. Биле бормалы,
Үҙенең ҡулы юҡ.

## Кейем

2241. Өйгә ингәндә, тороп ҡала,
Тышҡа сыҡҡанда, тотоп ала.

2242. Өйҙә саҡта сөйҙә,
Тышта саҡта буйҙа.

2243. Әҙәмдең күрке, йәмғенән береһе.

2244. Бураһы туҙа, бағанаһы ҡала.

2245. Байҙың ишеге бер генә,
Ярлының ишеге мең.

2246. Үңәсе бар,
Биле бар,
Кәүҙәһе бар,
Ҡулы бар — кеше түгел.

## Тун

2247. Тәкә тунын һалдырҙым,
Эсен тышҡа ябындым.

2248. Бер яғы урман,
Бер яғы ҡорған.

2249. Бер яғы урман,
Бер яғы ялан.

2250. Байҙы йылыта,
Ярлыны илата.

## Төймә

2251. Бер ҡапҡаға биш элгес.

2252. Түңәрәк сөйгә бау элдем.

2253. Ике яҡлап юл һуҙылған,
Бишәр һалдат теҙелгән.

2254. Бер түңгәктә дүрт тишек.

## Ҡаптырма

2255. Әбейемдең ҡапҡаһына
Бабайым барып аҫылынды.

2256. Эләктерҙе, ҡаптырҙы,
Тунды тунға яҡтырҙы.

2257. Эләктерҙе, ҡаптырҙы,
Сабыуымды тарттырҙы.

## Билбау

2258. Аҡ сапсаҡҡа ҡыҙыл ҡоршау.

2259. Уралдым, уралдым да
Уралған еремә инеп юғалдым.

2260. Көмөшлө ҡоршау,
Ҡорһаҡҡа тышау.

## Ҡайыш

2261. Тимер башлы ҡара йылан
Үҙ ҡойроғон үҙе тешләгән.

2262. Үҙе йылан төҫлө,
Үҙе кеше билендә.

## Бейәләй

2263. Биш егеткә бер ҡолаҡсын,
Уны тапмаған ситкә олаҡһын.

2264. Биш балаға бер инә.

2265. Биш ағайға бер күлдәк.

2266. Биш малайға бер бабай.

2267. Бәләкәй генә өйгә ҙур солан.

## Тире бейәләй

2268. Эсе мамыҡ, тышы ҡабыҡ.

## Бейәләй кейеү

2269. Дүртәү өйгә уҙа,
Берәү соланға инә.

## Бирсәткә

2270. Биш тишеккә бер ишек.

2271. Биш бүлмәгә бер ишек.

2272. Бер ағаста биш тармаҡ,
Тармағы һайын бармаҡ.

2273. Бер ишек астым,
Биш юл таптым.

2274. Ун бағана, ун ишек.

2275. Бер өйгә биш солан.

## Салбар, салбар кейеү

2276. Айыры һаны ике,
Ҡушылғаны — бер.

2277. Айыры ике, төбө бер.

2278. Ике айыры, төбө бер,
Үҙең менән бергә йөрөй — шуны бел!

2279. Ике яҡҡа айырҙым,
Башын өҫкә ҡайырҙым.

2280. Ике ботло, бер төплө.

2281. Юлға сыҡтым,
Ике юл сатына еттем,
Бер юлы икеһе буйлап киттем.

2282. Бөгөн торҙом,
Ике аяғым ике юлға китте.

2283. Иртән торҙом,
Ике айыры юлға төштөм.

2284. Бер кеше ике юлдан бара.

2285. Аяғы бар — йөрөй алмай,
Кешенән бер ҙә ҡалмай.

2286. Талсай миңә талсайҙы,
Талсайға мин талсайҙым.

## Ойоҡ, башалтай

2287. Алға килдем, аҫҡа төштөм.

2288. Башта урыным — әбейем итәгендә,
Һуңынан урыным — бабайым табанында.

## Бәйләм

2289. Биш бүрәнәнән өй һалғандар.

## Ситек

2290. Лығырлама, шығырлама
Кейеремде кейермен.

## Ҡата

2291. Башы бар, аҡылы юҡ,
Арҡаһы бар, эсе юҡ.

2292. Башы бар, эсе юҡ,
Ҡорһағы бар, һырты юҡ.

2293. Салпаһынан алдым,
Баҫып-баҫып һалдым.

2294. Ике һаҡбай
Ишек төбөн һаҡлай.

2295. Йөрөмәй түҙә алмай,
Түргә табан уҙа алмай;

2296. Урындығым аҫтында
Ҡарыны ярыҡ ҡарт ҡуй ята.

2297. Мейес аҫтында пар көсөк.

## Итек, быйма

2298. Баҙы туҙыр, бағанаһы ҡалыр.

2299. Ашағанда, өҫтәл аҫтында,
Йоҡлағанда, карауат аҫтында.

2300. Ике (ы)ристан,
Буйҙары тубыҡтан,
Уҙышалар ҙа ҡыуышалар,
Береһенән-береһе ҡалмайҙар.

2301. Башы бар — мейеһе юҡ,
Биле бар — бауы юҡ,
Кәүҙәһе бар — эсе юҡ.

2302. Ҡараңғы өйөм эсендә
Ҡарыны ярыҡ ҡуй ята.

2303. Бер туған ике гәрәп,
Буйҙары теҙҙән,
Ҡалышмайҙар беҙҙән.

2304. Ике ағай теҙҙән,
Ҡалышмайҙар беҙҙән.

2305. Ҡара тауыҡ ҡар йыра.

2306. Йәй көнө соланда ята,
Ҡыш көнө беҙҙән ҡалмай.

## Быйма менән ойоҡ

2307. Бер һыйыр бер һарыҡты йотҡан.

## Итек кейеү

2308. Ике ситенән тарттым,
Уртаһынан мал яптым.

2309. Ике ситенән тоттом,
Аяғымды баҙға тыҡтым.

## Олтораҡ

2310. Ҡыйын ерҙә ҡыл таш.

2311. Ҡыйын ерҙә ҡыйғыс ҡышлай.

2312. Ҡыйынлыҡта ҡыяҡ ҡышлай.

## Сарыҡ

2313. Арты биҙәр, донъяны гиҙәр.

2314. Арты биҙәлгән,
Алға төбәлгән (йүнәлгән).

2315. Ҡатай ҡыҙы сиккән биҙәр,
Ҡыпсаҡ ҡыҙы теккән биҙәр,
Донъяны атлап үткән биҙәр,
Бар ергә лә еткән биҙәр.

## Сабата, ҡынйыраҡ

2316. Бер сысҡанға ике ҡойроҡ.

2317. Ауыҙы бар — теле юҡ,
Ҡойроғо бар — йөнө юҡ.

2318. Башы бар — муйыны юҡ,
Арҡаһы бар — биле юҡ,
Ҡойроғо бар — йөнө юҡ.

2319. Башы бар — муйыны юҡ,
Биле бар — ҡорһағы юҡ,
Ҡабырғаһы бар — ите юҡ.

2320. Ике түңгәк,
Ике ҡойроҡ,
Бер кендек.

2321. Башы бар — мейеһе юҡ,
Ҡабырғаһы бар — ите юҡ,
Ауыҙы бар — теле юҡ,
Ҡойроғо бар — йөнө юҡ.

2322. Башы бар — мейеһе юҡ,
Арҡаһы бар — ҡорһағы юҡ,
Ике ҡойроғо бар, күҙе юҡ,
Көн дә бер мейескә кермәһә,
Күңеле юҡ.

2323. Шырым, шыҙырым,
Ике ҡойроғом[197].

2324. Ике ҡойроҡло бер сысҡан
Сабырға бик оҫта.

2325. Һатып алдым сыбарҡай.

2326. Алама күлдәк, еҙ тырнаҡ,
Ҡарт муйнаҡ, бәйләп ҡуймаҡ.

2327. Еҙ мыйыҡлы еҙнәм килгән,
Шаҡмаҡлы күлдәк кейгән,
Үҙе түргә уҙмай.

2328. Яңағы бар — көйшәнмәй,
Ҡойроғо бар — һыйпанмай.

## Сабата эҙе

2329. Шаҡмаҡ шәлем юл буйында төшөп ҡалды.

2330. Шаҡмаҡ яулығым юлда ҡала бара.

2331. Үҙе бара, тәңкә-тәңкә эҙе ҡала.

2332. Юл буйында сыбар яҫтыҡ.

## Сабата кейеү

2333. Иртән дә мыштыр,
Кисен дә мыштыр,
Көн дә мыштыр, мимыштыр[198].

2334. Мин дә мыштыр,
Һин дә мыштыр,
Ул да мыштыр, мимыштыр.

2335. Иртән дә мыстыр (лыстыр),
Кис тә мыстыр (лыстыр),
Лимамыстыр, мимыстыр.

## Калуш

2336. Эсе — ҡыҙыл йөн,
Тышы — ҡара ит,
Үҙенең йәне юҡ,
Үҙе йөрөй.

2337. Эсе — буҙыртмаҡ,
Тышы — һуҙылтмаҡ.

## Аяҡҡа кейеү

2338. Береһе ашағансы,
Икенсеһе көтөп тора.

## Үксә ҡаҙаҡтары

2339. Үҙе аяҡта — башы менән йөрөй.

## Таяҡ

2340. Үҙе бара, йомро-йомро эҙе ҡала.

2341. Баҫҡан ере бармаҡтай,
Атлаған ере атандай[199].

2342. Ҡартайғанға — бер аяҡ.

2343. Күҙе, башы булмаһа ла
Күҙһеҙҙе йөрөтә.

2344. Аяҡһыҙға ла таяныс,
Ҡулһыҙға ла таяныс,
Күҙһеҙгә лә таяныс.

2345. Юлда арымай, ашарға һорамай.

### Янсыҡ

2346. Сытыр-мытыр селтәре.

## VII. БИҘӘНЕҮ-ТӨҘӘНЕҮ ӘЙБЕРҘӘРЕ

### Тараҡ

2347. Ҡара тәкә тау шыуа.

2348. Тимер тәкә тау яра.

2349. Ҡара һыйырым тау ялай.

2350. Бәләкәй әбей тау шыуа.

2351. Ауыҙы юҡ, теше күп,
Көлтә һүтә, эше күп.

2352. Тырнағы мең, үҙе бер,
Тауға менеп тырмалай.

2353. Донъяла бар бер малай,
Тырнағы мең, юрғалай,
Тау башына менә лә
Һөрмәгән ер тырмалай.

2354. Кескәй генә толпар
Тауға менер, тауҙан төшөр,
Урман эсләп юртар.

2355. Тау башында титарай
Һөрмәгән ерҙе тырмалай.

2356. Теше күп — ашамай.

2357. Теше ҡырҡ — тешләмәй.

2358. Өй түбәһендә күк турғай,
Һөйәккә теше үтмәй.

2359. Илле кәртәле,
Ике тәртәле.
Ул нимә? Йә, әйт әле!

2360. Тәртәһе бар — аты юҡ,
Тештәре бар — башы юҡ.

2361. Етмеш ҡарағай башына
Менәм дә шыуып төшәм.

## Тараҡ тештәре

2362. Бәләкәй генә бала-саға
Тау шыуа ла тау шыуа.

2363. Күҙһеҙ ҡырҡаяҡ урман аралай.

## Көҙгө, көҙгөләге шәүлә

2364. Салт аяҙҙа болот юҡ,
Сал тәкәлә мөгөҙ юҡ[200].

2365. Аяҙ күктә болот юҡ.

2366. Алды — хуш,
Арты — буш.

2367. Бәҙри баҡты — йөҙө яҡты.

2368. Арты ла таҡта — өҫтө лә таҡта,
Уртаһы мәғрип яҡта.

2369. Ике яғы таҡта,

Әйләндереп ҡараһаң,
Нуры баҡта.

2370. Яҡ яғы таҡта,
Уртаһы баҡта.

2371. Бәләкәй генә Микитә,
Бер кешене ике итә.

2372. Бәләкәй генә мөлдө,
Миңә ҡарап көлдө.

2373. Бәләкәй генә бер бала
Миңә ҡарай ҙа көлә.

2374. Тигеҙ генә быяла,
Үҙе минән ояла.

2375. Ҡарайым да күрәм,
Боролам да көләм.

2376. Уртаһы көмөш, һырты ағас.

2377. Өҫтөндә көмөш алъяпҡыс.

2378. Кескәй генә тәрән күл,
Тирәк уның эсендә,
Күҙен-ҡашын ҡарайтҡан
Ҡыҙҙар уның эсендә.
Иңен-башын ҡупшайтҡан
Егеттәр уның эсендә.

2379. Кескәй генә тәрән күл,
Тирәк уның эсендә,
Ҡылыс бәйләп, ҡынын таҡҡан
Егеттәр уның эсендә.

2380. Күл өҫтөндә күҙем күренә.

2381. Ишек асһаң, ялтырай,
Ҡаты япһаң, ҡалтырай[201].

2382. Эйелгәнгә эйеләм,
Башым ергә тейгәнсе.
Һуҙылғанға һуҙылам,
Башым күккә тейгәнсе.

2383. Уңды һул итә, һулды уң итә.

## Эҫкәк, көҙгө

2384. Кәкре ҡумыҙ, яҡты йондоҙ.

## Йөҙөк

2385. Аҡ ҡайында һары билбау.

2386. Хан егете билендә затлы билбау күренә.

2387. Ялтырай-ялтырай килеп индем,
Ҡалтырай-ҡалтырай сығып киттем.

2388. Биш ҡайындың төбөндә
Йыпа матур ултыра.

2389. Ит бүкән, еҙ ҡоршау.

2390. Төпһөҙ мискә, эсе тулы ит.

2391. Төпһөҙ силәктең эсе тулы ит.

2392. Ит тәпән, тимер ҡоршау.

2393. Төпһөҙ тәпәнгә ит тоҙланым.

2394. Кеше кеҫәһенә ҡулым тыҡтым.

## Беләҙек

2395. Алдым, һалдым ҡулыма,
Хан билбауы етмәне.

2396. Хан билен быуа,
Билбауы биленә етмәй.

2397. Хан билбауы биленә етмәй.

2398. Аҡ ҡайында һары билбау.

2399. Бохарҙан алған билбауым
Билемә килеп етмәй.

2400. Ит бүкәндә еҙ ҡоршауым,
Ул да булһа өҙөлгән.

## Беләҙек, сәсмау

2401. Билбауы биленә етмәй,
Ҡойроғо теҙенә етмәй.

## Сулпы, сәсмау

2402. Артыма йәбешкән Алтынбикә
Бәреләләһуғыла.

2403. Тау артынан таныш килә,
Бәреләһуғыла тауыш бирә.

2404. Ҡара урмандың остарын
Тәңкә менән сыҡланым[202].

2405. Ҡара урмандың осонда
Аҡ ҡыңғырау шылтырай.

2406. Ҡара арҡан осонда
Сылтыр-сылтыр сыңлайҙыр.

2407. Һыу аға килә, тамсы тама килә.

## Алҡа

2408. Тамсы тама, ергә етмәй.

2409. Алтын тамсы ергә етмәй.

2410. Алтын тамсы өҙөлөп төшмәй.

2411. Үҙе тама — ергә төшмәй.

2412. Аҫылынған, һалынған,
Уға ҡыҙҙар ялынған.

2413. Ишетмештең ишеге төбөндә
Ике иш ат бәйләнем.

2414. Ишетер ишек алдында
Ике тәкә бәйләүле.

2415. Ишетмеш ишек ишелгән,
Ишегем төбө тишелгән,
Тишегенә бау taҡҡан,
Ике тамсы һыу аҡҡан.

## Алҡа һәм беләҙек

2416. Тамсы тама — ергә етмәй,
Көмөш билгау билгә етмәй.

2417. Тамсы тама — ергә етмәй,
Хан билбауы билгә етмәй.

## Сатыр (зонтик)

2418. Аҫтынан кеше бара,
Өҫтөнән һыу аға.

2419. Йыйып тотһаң — таяҡтай,
Йәйеп тотһаң — табаҡтай.

## Күҙлек

2420. Үҙе атҡа атланған,
Аяҡтарын артҡа һалған.

2421. Ике ағай атҡа менгән,
Аяҡтарын артҡа һуҙған.

2422. Бик күп уҡый, бер ҙә белеме юҡ.

2423. Дуғаһы бар, аты юҡ,
Ике тәгәрмәсле, ике тәртәле.

2424. Бер күсәрҙә ике көпсәк.

2425. Тәртәһе бар — аты юҡ,
Күҙҙәре бар — башы юҡ.

## VIII. ЙОРТ-ҠАРАЛТЫ. ӨЙ ЙЫҺАЗДАРЫ. ҺАУЫТ-ҺАБА Һ. Б.

### Тирмә

2426. Ун ҡанатын йәйгән[203],
Аҡ сәкмәнен кейгән.

2427. Күҙем-башым күккә баҡтым,
Күк сәкмәнем күтәрә яптым.

2428. Тәҙрәһе юҡ, түбәһе тишек,
Ямгыр үтмәй, ел өрмәй.

2429. Күк үләндән кәбән өйҙөм,
Кәбәнем осон асыҡ ҡуйҙым.

### Тирмә, өй

2430. Атаһы улын күтәрә,
Улы ҡулын күтәрә.

2431. Өҫтө-башы япҡан,
Урамға ҡарай баҡҡан.

### Кирәгә

2432. Арҡысаҡ-торҡосаҡ,
Йыйып алһаң, бер ҡосаҡ.

2433. Алтмыш атым ала аяҡ.

### Кирәгә төбө

2434. Етмеш йылан ер тешләй.

2435. Етмеш егет ер тишкән.

### Текмә, ситән

2436. Ҡаҙ юлы ҡатмыш,
Үрҙәк юлы үтмеш.

## Өй, мейес, мейестә таба, табала май, майҙа ҡоймаҡ

2437. Ағас пулат,
Ағас пулат эсендә таш пулат,
Таш пулат эсендә тимер пулат,
Тимер пулат эсендә түңәрәк күл,
Түңәрәк күл эсендә һөйәкһеҙ балыҡ.

2438. Ағас һарай,
Ағас һарай эсендә таш һарай,
Таш һарай эсендә тимер һарай,
Тимер һарай эсендә ҡулһыҙ ҡурсаҡ уйнай.

2439. Ағас,
Ағас эсендә таш,
Таш эсендә тимер,
Тимер эсендә һөйәкһеҙ бала.

## Өй

2440. Киртләс-киртләс кәбән өйҙөм,
Ҡолаҡ тиштем, күҙ тиштем.

2441. Өйөлгән, өйөлгән,
Ҡабырғаһы күмелгән.

2442. Үҙе йыуан, үҙе киң,
Дүрт яҡлы,
Яғы һайын ике тишек,
Башында бүрек.

2443. Сүмәлә өҫтөндә мүкәтә,
Мүкәтә өҫтөндә сүмәлә.

## Өй мөйөшө

2444. Сеүәтә өҫтөндә сеүәтә.

2445. Туҫтаҡ,
Туҫтаҡ өҫтөндә туҫтаҡ.

2446. Туҫтағым өҫтөнән туҫтаҡ,

Барыһы бер юлда,
Барыһы бер ҡулда.

2447. Өй артында дүрт ҡайын.

2448. Дүрт мөйөштә дүрт туҫтаҡ,
Өҫтө-өҫтөнә өйөлгән.

2449. Өйөм аҫты дүрт сыбыҡ,
Дүртеһе лә тиң сыбыҡ.

## Өй бүрәнәләре

2450. Сүкей өҫтөнә сүкей,
Сүкей өҫтөнә бүкей.

2451. Сүмес өҫтөнә сүмес.

2452. Тыштан йомро,
Эстән йәйпәк.

2453. Йомролор тыштан,
Эске яғы йышҡан,
Оҫталар шулай ҡушҡан.

## Нигеҙ балсығы

2454. Өй урата ҡыҙыл сүлмәк.

## Өй башы таҡтаһы

2455. Өй башында телем-телем икмәк.

## Мүк

2456. Өй урата ҡыл арҡан[204].

2457. Өй тирәм ҡыл дилбегә.

2458. Стенала еҙ дилбегә.

2459. Өйөм уратып арҡан һуҙҙым (иштем).

2460. Өй әйләнә,
Өйгә ебәк бәйләнә.

2461. Өйөмдө ҡылыс менән ураттым.

### Өй бүрәнәләре, мүк

2462. Ҡунаҡ һайын бер түшәк[205].

### Мүк, мөрйә

2463. Өй тирәләй һарғылт билбау,
Уртаһында бер егет.

### Мөрйә

2464. Өй башында бер ағай
Һыуыҡтарға ҡарамай
Һыбыҙғыһын һыҙғырта,
Тәмәкеһен борҡота.

### Ишек

2465. Бер батша меӊ батшаны баш эйҙергән.

2466. Ингәндә ҡаршы ала,
Сыҡҡанда оҙатып ҡала.

2467. Йылыны сығара ла
Һыуыҡты тартып ала.

2468. «Киттем!» — тип, китә,
Кире килә.

2469. Йөрөй-йөрөй, өйгә инмәй.

### Ишек тотҡаһы (бауы)

2470. Бер үгеҙҙең ҡойроғона
Меӊләп кеше йәбешкән[206].

2471. Бер һыйырҙың ҡойроғона меӊ кеше тотонған.

2472. Астым, яптым, кендегенән тарттым.

2473. Кергән менән керә,
Сыҡҡан менән сыға.

2474. Өй алдында ҡәйенһеңлем бар,
Килгән-киткән ҡул бирә.

2475. Уны гелән тоторҙар,
Тоторҙар ҙа тартырҙар*.

2476. Бер тоторҙо мең тотор.

## Ишек яңағы, һандыҡ

2477. Ишек төбөндә икәү,
Инәмен, тип ултыра.
Өйҙөң түрендә берәү,
Түрәмен, тип ултыра.

## Тупһа

2478. Кеше килһә, ишек аса,
Үҙе ишек артына ҡаса.

Өйҙә лә юҡ, тышта ла юҡ.

2479. Кергәндә кәкре тайға атланып керәм.

2480. Кескәй генә тайым бар,
Кергән-сыҡҡан атлана.

2481. Бәләкәй генә атыма
Кергән-сыҡҡан атлана.

## Ишек, ике яңағы, тупһаһы, тотҡаһы, күгәндәре

2482. Икеһе баҫып тора,
Икеһе ятып тора.
Бишенсеһе йөрөй,
Алтынсыһы йөрөтә,
Етенсеһе йыр йырлай[207].

## Ишек һәм уның яңаҡтары

2483. Ике килен тик ултыра,
Ҡәйнәләре эшләп йөрөй.

2484. Икәү баҫып тора,
Икәү ятып тора,
Берәү йөрөп тора.

## Ишек яңаҡтары

2485. Ике егет буй үлсәшә.

2486. Ағалы-ҡустылы, икеһе лә типә-тиң.

## Ишек келәһе

2487. Ҡараңғы өйҙә ҡарт ҡоҙа
Ҡармаҡ һалып ултыра.

2488. Кискә керһә, келт итә.

2489. Келт-келт итер,
Келтегенә китер.

2490. Көндөҙ сөйҙә эленеп тора,
Төнөн өңөнә керә.

2491. Көндөҙ тик тора,
Кисен урын эҙләй.

2492. Көндөҙ йоҡлай, төндә өй һаҡлай.

2493. Көндөҙ үҙ урынында тора, кис эленә.

2494. Иртә киткән ҡара тәкә,
Кис ҡайтып, тоҡонлоҡ эҙләй.

2495. Төн еткәс тә ҡармаҡ һала.

2496. Урманда юҡ, ҡырҙа юҡ,
Өйҙә эленеп тора.

## Һәндерә

2497. Өй алдында ишек,
Ишек өҫтөндә бишек.

2498. Ишек,
Ишек өҫтөндә бишек.

## Бүрәнә ярығы

2499. Ҡарт әбей үлеп ята,
Үҙе көлөп ята.

## Бүрәнәләге ботаҡ урындары

2500. Артыңда атаң күҙе.

2501. Өй эсендә дөйә күҙе.

2502. Өй яғалай үгеҙ күҙе.

## Өрлөк һәм түбә таҡталары

2503. Атаһы арҡылы ятҡан,
Балалары буй ятҡан.

2504. Оҙон ағай һуҙылып ята,
Балалары теҙелеп ята.

2505. Алып батыр арҡыры ятҡан,
Балалары буй ятҡан.

2506. Алып батыр арҡыры ятҡан,
Балалары үҙен баҫҡан.

2507. Берҙән берәү,
Алтмыш егеткә терәү.

2508. Балапан,
Балапанды балалары баҫҡан.

2509. Ураҙ ағай үлеп ята,
Балаларын баҫып ята.

2510. Батшалары һуҙылған,
Вәзирҙәре теҙелгән.

2511. Оҙон-оҙон гирда,
Мәскәүски бирда.

### Өрлөк, иҙән

2512. Өй арҡыры ағайым ятҡан,
Өҫтөнә балалары баҫҡан.

2513. Атаһының өҫтөндә балалары.

2514. Ҡарт ҡоҙам ҡыҙынып ята,
Балалары теҙелеп ята.

### Түбә таҡтаһы ярығы

2515. Өй түбәмдә саңғы юлы.

### Таҡта менән ябылған өй түбәһе

2516. Өй башына оҙон ағайҙар теҙелгән.

### Түбәләге баҫтырыҡ

2517. Һыйырым аранда, ҡойроғо аран башында.

### Өй башы тупрағы

2518. Өй башында тарым бар,
Күтәрә алһаң, барын да ал[208].

### Иҙән, иҙән ярығы

2519. Ишектән ингән дә һуҙылып ятҡан.

2520. Өҫтәл аҫтында йәш килен көлә.

2521. Оҙон булған — киҫелгән,
Йыуан булған — ярылған,

Ни бәләгә тарыған?
Кергән-сыҡҡан тапаған.

## Баҙ

2522. Олатайҙан ҡалған иҫке ҡаҙан.

## Сөй, ҡаҙау

2523. Анда ла, бында ла
Ишек төбө ҡандала.

2524. Ишек янында ишәк мөгөҙө.

2525. Көн буйы кейем күтәрә,
Бер ҙә арымай.

2526. Кәүҙәһе эстә, башы тышта.

2527. Күк көсөгөмдө көн дә берәү түпәләй.

2528. Үҙе бәләкәй — үҙе көслө.

2529. Бабам бармағы тун күтәрә.

## Ҡаҙау

2530. Пипыр-пипаҡ, башы тупаҡ.

## Төнлөк

2531. Аҡ танамдың һыртын тиштем.

2532. Көндөҙ асыҡ, төндә ябыҡ.

2533. Һыңар күҙен күккә баҡҡан,
Күк болотто күреп ятҡан.

## Төнлөк һәм уның бауҙары

2534. Ҡара тауҙың башынан
Ҡарағош осоп килә.

Ҡанатына боҙ ҡатып,
Ҡайырыла алмай бөгөлә[209].

## Мунса

2535. Мөгөҙ-мөгөҙ мөңрәгән,
Мөгөҙөн күккә терәгән,
Танауына һыу һипкән,
Татлыһына ҡыуанған.

2536. Тау башына тары сәстем,
Татлыһына кинәндем.

2537. Ҡара һыйырымдың ҡабырғаһы тишек.

## Мунса ташы

2538. Бер бүректә ҡырҡ ямау.

2539. Ҡырҡ ямаулы ҡара түбәтәй.

## Ҡойо

2540. Тоҡ, күләгәһе юҡ.

2541. Ауыҙы өҫтә,
Күҙе төптә.

2542. Соҡоро ҙур, күҙе бәләкәй.

2543. Ишек,
Уртаһында өлкән тишек.

2544. Бер соҡор, дүрт һуҡыр,
Төшә алмағас, намаҙ уҡый Аллаһҡа[210].

2545. Тәрән күлдә балыҡ юҡ.

## Ҡойо сиртмәһе

2546. Аҡаңлаған ни нәмә,
Суҡаңлаған ни нәмә?

Һыуыр тип алған ни нәмә,
Һыуы тамған ни нәмә?

2547. Һыңар аяҡ бер торна
Ҡойоға һуҙылып һыу эсә.

2548. Ҡойма аша оҙон ағай ҡарай.

2549. Оҙон ағай ҡармаҡ һаплай.

## Мөгәрәп

2550. Түбән өйөмдөң күләгәһе төшмәй.

## Ситән

2551. Кәк(е)ре лә бөк(ө)рө,
Ҡойроҡтарын бөтөрҙө.

## Умарта

2552. Өс бағана ҡатҡан,
Башын ҡыя япҡан.

2553. Тартмаһына тары сәскән,
Татлыһына кинәнгән.

2554. Бер ояла йөҙ бүлек өй.

## Умарта, бал ҡорто

2555. Кескенә келәт,
Эсе тулы кеше,
Береһенең дә юҡ теше.

## Умартаға бал ҡорттарын ябыу

2556. Мөйөшһөҙ аранға ҡойроҡһоҙ һарыҡтар
яптым.

## Тәҙрә

2557. Өйгә лә инмәгән,
Тышҡа ла сыҡмаған,
Ике битен яры ҡаплаған[211].

2558. Арҡыры ла торҡоро
Беҙҙең бабай ырҙыны.

2559. Арҡыры, торҡоро
Баҫма һалдым тар һыуға.

2560. Алтын яңаҡ, еҙ тупһа.

2561. Аҡ бабайҙың баҡсаһы,
Арҡыры ла торҡоро.

2562. Өй түрендә дүрт табаҡ,
Дүртеһе лә күк табаҡ.

2563. Ике туған ҡараша,
Килә алмайҙар йәнәшә.

2564. Ел үтмәй, күҙ үтә.

2565. Керис-мерис[212] — ялтыр мейес.

2566. Йәй булһа, ябылмай,
Ҡыш булһа, асылмай.

2567. Ары тап, бире тап,
Уртаһында һөңгө һап.

2568. Ишектән кергәнгә
Әбейем көлөп ултыра.

2569. Эндрәй ҡарттың ындыры
Дүрткә-бишкә бүленгән.

2570. Әхтиәр улы Бәхтиәр,
Кем ҡараһа ла ихтыяр.

2571. Яланы быяла, мижаһы ағас[213].

2572. Өйкөтөмдә арҡыры-торҡоро күк боҙ.

## Тәҙрә, тәҙрә ҡапҡастары

2573. Өйөм тирәһе дүрт бүре,
Дүртеһе лә күк бүре,
Күтәрелде, бәрелде,
Ике яҡҡа ярылды!

2574. Дүрт мөйөштә дүрт бүре,
Дүртеһе лә күк бүре,
Күтәрелде, бәрелде,
Шарт-шорт ябылды.

2575. Иртә лә шаҡ-шоҡ,
Кис тә шаҡ-шоҡ.

2576. Асыла, ябыла,
Күк ҡатмаһы ярыла[214].

2577. Иртә киткән һаҡ ҡолағым кис ҡайта.

2578. Ҡарағолаҡ кис килә, көндөҙ китә.

2579. Шап итте — таба ярылды,
Шап итте — шәм һүнде.

2580. Өй алдында аҡ тана,
Ҡуш яулығы менән маҡтана.

2581. Беҙҙең аҡбай иртәнсәк китә, кис ҡайта.

## Тәҙрә, ишек яңаҡтары

2582. Түрҙә дүртәү ултыра, гүрәмен, тип,
Ишек төбөндә икәү ултыра, үләмен, тип.

## Тәҙрәгә бәҫ төшөү, тәҙрә туңыу

2583. Аҡтуған күҙенә аҡ һалған.

2584. Шағарбайҙың күҙе ағарған.

## Тәҙрә пәрҙәһе

2585. Өй тирәләй аҡ тауыҡ.

## Мейес

2586. Эсе ҡара, тышы аҡ.

2587. Аяғы ергә тейгән,
Түбәһе күккә тейгән,
Үҙе аҡ сапан кейгән.

2588. Эсе ҡыуыш,
Тышы таш,
Шуны белмәгән — тумалаҡ баш.

2589. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ —
Үҙе кершән яғынған.

2590. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ биҙәнә.

2591. Ҡышын күп ашай,
Йәйен күп йоҡлай.

2592. Кәүҙәһе эстә, башы тышта.

2593. Тәне йылы, ҡаны юҡ.

2594. Аҡ кейем кейгән,
Башы түшәмгә тейгән[215].

2595. Аҡлы күлмәк кейенгән,
«Мин оло», — тип һөйөнгән.

2596. Үҙе аҡ күлдәк кейгән,
Иҙеүе асыҡ, түше ҡара.

2597. Еҙнәм кейгән аҡ күлмәк,
Башында балсыҡ сүлмәк.

2598. Еҙнәм аҡ күлмәк кейгән,
Башы түшәмгә тейгән[216].

2599. Бабай ап-аҡ тун кейгән,
Түбәһе күккә тейгән.

2600. Аҡ бабайым баҫҡан,
Алаптай ауыҙын асҡан.

9 1.0125.07

2601. Бер аҡ тана,
Башы түбәгә тейеп тора.

2602. Өйөм-өйөм өйгән,
Башы түргә тейгән.

2603. Өй эсенә өй өйгәндәр,
Башын күккә сөйгәндәр.

2604. Өй эсендә аҡ әбейем,
Ауыҙы бар — тешһеҙ,
Үҙе тормай эшһеҙ.

2605. Өй эсендә ағайым
Аҡ кейемен кейеп ултыра.

2606. Ҡорап, ҡорап тун тектем,
Ҡолонло бейәгә биргеһеҙ.

2607. Бите аҡ,
Ауыҙы ҡап-ҡара,
Теле ҡып-ҡыҙыл.

2608. Ауыҙына башты тығып ҡараным —
Ҡурҡманым,
Унан һуң башына менеп,
Рәхәтләнеп йоҡланым*.

## Сыуал

2609. Түше ҡара кейәнке
Түргә ҡарап ултыра.

2610. Түше ҡара ҡоҙағый
Түргә ҡарап ултыра.

## Тимер мейес

2611. Дүрт аяҡлы ҡара ҡуй,
Төрөпкәһе артында.

## Тимер мейес, ут

2612. Аҫты ҡалай, өҫтө ҡалай,
Уртаһында йүгерек малай,
Яҡын барһаң, кешене ялмай.

## Мөрйә

2613. Бәләкәй генә төпөрә,
Үргә ҡарап төкөрә.

2614. Өй башында киле,
Уны белмәгән — тиле.

2615. Өй башында оҙон ағай.

2616. Ҡырҙа үҫкән ҡурай,
Ел сыҡҡанда, йыр һорай.

2617. Ауыл аша шайтан ҡарай.

2618. Һыңар күҙле бабай
Һәр ваҡыт күккә ҡарай.

2619. Аяғы юҡ — үрә баҫҡан.

2620. Мөгрөй-мөгрөй мөгрәгән,
Мөгөҙөн күккә терәгән.

## Мөрйә, төтөн

2621. — Оҙон ағай, ҡайҙа бараһың?
— Ҡараҡай, һин ни беләһең?!

2622. Һыйырым аранда,
Ҡойроғо яланда.

2623. Өй башында ҡарт бабам
Ҡарта тарап ултыра.

2624. Өй башына баҫҡан,
Төрөпкәһен тартҡан.

2625. — Оҙон ағай, ҡайҙа бараһың?
— Һинең ни эшең бар, ҡара төн?

2626. Күк этем күккә ҡарап өрә.

2627. Өй башында бөҙрә һаҡаллы бабай,
Һаҡалы тартыла күккә ҡарай.

## Мейес, ут

2628. Ҡыуыш эсендә ҡыҙыл этәс.

2629. Ҡыуыш алдында һары бесәй
Битен йыуып ултыра.

## Мейес, утын

2630. Аҡ әбейҙең тамағына
Ҡырҡ сыра ҡаҙалған.

## Мейес, утын, күмер тартыу

2631. Бәләкәй генә таш пулат бар,
Эсе киң дә ауыҙы тар,
Аҡты һалалар, ҡараны алалар.
Ул ни булыр, балалар?

## Мейес, ут, төтөн

2632. Әсәһе ултыра,
Ҡыҙы бейей,
Малайы оса.

2633. Әсәһе йыуан,
Ҡыҙы ҡыҙыл,
Улы һыуға бара.

## Мейес, ут, төтөн, киҫәү

2634. Инәһе йыуан,
Ҡыҙы ҡыҙыл,
Улы уңған,
Атаһы бөкрө.

## Мейес, усаҡ

2635. Инәһе илле ямау,
Ҡыҙы ҡырҡ ямау.

2636. Атаһы илле йәштә,
Балаһы егерме йәштә.

## Усаҡ, ҡаҙан

2637. Ҡалап-ҡалап таш ҡуйҙым,
Ҡара һыйырым буш ҡуйҙым.

## Мейес, усаҡ, күмер тартыу

2638. Оло аҙбарҙан кесе аҙбарға
Һәш теүә! Һәш теүә!

## Мейес, ҡаҙан, бутҡа

2639. Таш ҡала,
Таш ҡаланың эсендә суйын ҡала,
Суйын ҡаланың эсендә һөйәкһеҙ бала[217].

## Мейес, мөрйә, күмер

2640. Морай-морай мораған,
Моронон күккә терәгән.
Ауыҙына ағас тыҡһаң,
Шатлығынан илаған.

## Һүнгән күмер

2641. Әрйә тулы ҡара таш.

2642. Ҡыҙыл итеп һалдыҡ,
Ҡара итеп алдыҡ.

## Көл

2643. Турғай осто — тиҙәге ҡалды.

## Өй, мейес, ут

2644. Ағас һарай эсендә таш һарай,
Таш һарай эсендә ҡыҙыл көсөгөм уйнай.

## Мейес, бумала

2645. Бетәүемдең[218] эсенә албаҫты ингән,
Һарыҡтарым туҙҙыра.

## Йүшкә

2646. Ҡата эсендә ҡара бесәй.

2647. Ҡатлы-ҡатлы ҡатлама,
Ҡатламаһы ҡап-ҡара.

2648. Кескәй киленем кәзәһен
Бер сығара, бер яба.

2649. Асмалы — япмалы,
Шалтырауыҡлы йоҙаҡлы.

2650. Астым, астым — асмаҡлы,
Сыңғыраулы йоҙаҡлы.

## Йүшкә ҡапҡастары

2651. Оло бейәм йүгәне
Кесе бейәмә ярамай,
Кесе бейәм йүгәне
Оло бейәмә ярамай.

2652. Оло апайымдың яғаһы
Кесе апайыма ярамай.

2653. Оло килендең ҡашмауы
Кесе киленгә ярамай.

2654. Кесе килен ҡатаһы
Оло киленгә ярамай.

## Утын

2655. Оҙон инем — ҡырҡылдым,
Йыуан инем — ярылдым,
Инде утҡа тарылдым.

2656. Киҫәм, киҫәм — ҡаны юҡ.

2657. Ҡысҡыра-ҡысҡыра ҡоланым,
Шартлай-шартлай иланым.

## Батарея

2658. Түр башында күрекле гармун
Бөтөн өйҙө йылыта.

## Һепертке

2659. Ишек төбө — тай сүбе.

2660. Аҡланымдың алдында
Билен быуып ултыра,
Эләккәнде һөйрәргә
Әҙерләнеп ултыра.

2661. Ишек артында биле бәйләүле бей ятыр.

2662. Аҡ keләттең алдында
Билен быуып ултыра.

2663. Бәләкәй генә бисура
Билен быуып ултыра.

2664. Һаҡаллы бабай иҙән буйлап йөрөй.

2665. Билен быуған Биктимер
Ишектән түргә һикерер.

2666. Эшен-ҡошон бөтөргән,
Мөйөшкә инеп ултырған.

2667. Нескә билле бер ҡыҙыҡай
Бейеп, туҙан туҙҙыра.

2668. Кәүҙәһе бар, аяғы юҡ —
Үҙе тыпыр-тыпыр бейей.

2669. Ишекле-түрле йүгерә,
Өй сүп-сарын бөтөрә.

2670. Бәләкәй генә бер малай
Һикерә-һикерә лә мөйөшкә боҫа.

2671. Ары йүгерҙем, бире йүгерҙем,
Бер мөйөшкә тығылдым.

2672. Үҙе йәшел суҡ,
Башы бәйле туҡ,
Тарҡау йортҡа алып барһаң,
Сабыуҙан башҡа эше юҡ.

2673. Йәшел күлдәк кейгән,
Мөйөштә баҫып тора.

2674. Варвараның бармағы,
Етмеш ике тырнағы.

2675. Үҙе йәшел күлдәк кейгән,
Арҡаһы ергә тейгән.

2676. Йөҙ ҙә бер туған
Бер таяҡҡа бәйләнгән.

2677. Ишекле-түрле йөрөй,
Эләккәнде һөйрәй.

2678. Ары ла тә-тә,
Бире лә тә-тә,
Ҡунаҡ килһә,
Йүгерә тә-тә.

## Умарта, мендәр, һепертке

2679. Баҙҙа Батман,
Түрҙә Түтмән,
Ишек төбөндә дайсрук[219].

2680. Баҙҙа Батман,

Түрҙә Түрәймән,
Ишек төбөндә Иштуған.

## Һепертке, умарта, түшәк, иләк, ҡырлы ҡурай, һөлөк, йылан, ҡамыш, йомран

2681. Ишек төбөндә Абдрахман,
Баҙҙа Батман,
Түрҙә Түрәймән,
Илдә Иләймән,
Ҡырҙа Ҡырайман,
Һыуҙа Һөләймән,
Ерҙә Ерәймән,
Күлдә Күләймән,
Юлда Юлайман.

## Бумала

2682. Бәләкәй генә эт,
Башы тулы бет.

2683. Сәсен-башын туҙҙырған,
Атаһынан уҙҙырған.

## Иҙән йыуғысы

2684. Мейес аҫтында һимеҙ бесәй.

2685. Мейес аҫтында һимерәк.

## Миндек

2686. Өй башында йәшел ҡаҙ,
Йәшел ҡаҙҙың башы таҙ[220].

2687. Бәләкәй генә бисура,
Билен быуып, эләүкәлә ултыра.

2688. Йәшел сапан кейгән,
Билен ҡыҫып быуған,
Эләүкәлә ултыра.

2689. Урманда үҫә, мунсала бешә.

2690. Егет йәшел елән кейгән —
Башы таҙ.

2691. Алып ҡайттым йәшел ҡаҙ,
Йәшел ҡаҙҙың башы таҙ.

2692. Үҙе суҡ-суҡ,
Әйтә: «Арҡама һуҡ-һуҡ!»

## Туҡмаҡ

2693. Һике аҫтында һимеҙ бесәй.

## Самауыр

2694. Ике сите һыу булыр,
Уртаһында ут булыр,
Байҙарҙы көлдөрөр,
Ярлыларҙы бөлдөрөр.

2695. Аяғы — дүртәү,
Ҡолағы — икәү,
Һарай эсендә һайрай.

2696. Һарай эсендә һандуғас һайрай.

2697. Алтын һарай эсендә аҫыл ҡош һайрай.

2698. Алтын бишек, арҡаһы тишек.

2699. Һарайҙағы һары айғыр,
Һыу алдыниһәң, кешнәй.

2700. Еҙ һарайым эсендә еҙнәм аты кешнәй.

2701. Һары айғырым һарнап кешнәй,
Бышҡыра ла бышҡыра.

2702. Һары айғырым гел кешнәй.

2703. Һары бейәм ыңғыраша,
Оҙаҡламай ҡолонлар.

2704. Һары бейәм һаҙға түгә.

2705. Көлөн сәсеп, ҡарт әбей
Түрҙә көлөп ултыра.

2706. Аҫты ла тишек,
Өҫтө лә тишек,
Уртаһында ут та һыу[221].

2707. Өҫ тишектән сыға быу,
Уртаһында ут та һыу.

2708. Өҫтө — һыу, аҫты — ут.

2709. Тышым көлә,
Эсем көйә.

2710. Бура-бура буралы,
Эсе ҡыуыш уралы,
Эсендә ут, тышында һыу,
Нисек ултыра, күр әле!

2711. Ҡарынында ут,
Ҡорһағында һыу,
Башында төпһөҙ эшләпә —
Бына донъя нишләтә.

2712. Аяғы бар — атламай,
Ҡолағы бар — ишетмәй.

2713. Ҙур, ҙур, ҙурский,
Бохарский, царский[222].

2714. Һамарҙан килгән һары айғыр
Ҡыҙырым-ҡыҙырым һыу эсә.

2715. Аяғы бар — атламай,
Тауышы бар — һөйләшмәй.

2716. Танауы бар — тын алмай,
Ауыҙы бар — ашамай,
Ҡолағы бар — ишетмәй,
Аяғы бар — атламай,
Һыу эсеүҙән туҡтамай.

2717. Аяғы бар — атламай,
Эсендәгеһен һаҡламай.

2718. Һары айғыр һарнап кешнәй,
Аяҡтары күк ала.

2719. Ары тәтәй, бире тәтәй,
Ҡунаҡ килһә, йүгерә тәтәй.

2720. Ары ла тәсәй, бире лә тәсәй,
Ҡоҙа килһә, йүгерә тәсәй.

2721. Ялт-йолт итә,
Ҡунаҡ килһә, йүгереп китә.

2722. Бохарҙан килгән ҡунаҡ
Ут ашай ҙа һыу эсә.

2723. Ултырҙым рәхәткә,
Сит-сите рәшәткә,
Уртаһы — тамуҡ,
Сите — ожмах.

2724. Эсе ҡара, күмер кеүек,
Тышы һары, шалҡан кеүек,
Ултырыуы мулла кеүек,
Һыҙғырыуы шайтан кеүек[223].

2725. Эсе ҡара, ҡором кеүек,
Тышы һары, шалҡан кеүек.

2726. Мейес алдында алтын өйрәк
Ут ашай ҙа һыу эсә.

2727. Мейес алдында еҙ бүкән.

2728. Эй үңерҙән, үңерҙән,
Ятҡан уты күмерҙән.

2729. Буйға еткән ҡыҙ бала
Йөрәгенә ут һала.

2730. Түрәкәй килгән,
Түргә менгән,
Ут ашаған,

Һыу биргән.

2731. Бәләкәй генә бисура
Йөрәгенә ут һала.

2732. Сите — һыу иле,
Уртаһы — ут иле.

2733. Сите — сит,
Уртаһы — ут,
Ғазраилдай һыҙғыра.

2734. Күл уртаһында ут яна.

2735. Үҙе ултыра, эсе яна.

2736. Үҙе эсмәй, эсе яна.

2737. Үҙе эсмәй, үҙе йырлай.

2738. Үҙе йырлай, үҙе һыйлай.

2739. Эй, Туйбикә, Туйбикә,
Ҡунаҡ килһә, ҡуй бикә,
Һалпы ҡолаҡ, киң битле,
Һөйләшергә бик ипле.

2740. Түр башында түрә
Ҡунаҡ күңелен күрә.

2741. Ике яғы һыулы,
Урта араһы утлы.

2742. Өйөм эсендә еҙ бүкән.

2743. Һалбыр ҡолаҡлы, киң битле.

2744. Йыуан ҡорһаҡлы,
Оҙон моронло,
Бәләкәй генә башлы,
Дүрт аяҡлы.

2745. Ҡолаҡтары ҡарпыш,
Танауы аҫта,
Ауыҙы өҫтә.

2746. Һыу ҙа һыу,
Уртаһында ут,
Өҫтөндә быу.

2747. Һары бейәм һыуға батҡан,
Ике ҡолағы һерәйеп ҡатҡан.

2748. Ҡашы ҡара ҡарт әбей
Көлә биреп ултыра.

2749. Мулла кеүек ултыра,
Шайтан кеүек һыҙғыра.

2750. Түр башында бер һары ҡарт,
Түрәмен, тип ултыра.

2751. Һары ситса күлдәкте
Һарайҙағы ҡыҙ кейер.

2752. Борлап тора, йырлап тора,
Ҡорһағы шыбырлап тора.
Тын алышы — быу ғына,
Эсе тулы һыу ғына*.

2753. Эсендә һыу ҙа, ут та бар,
Ул үҙе һәр йортта бар.

## Самауыр шаулауы

2754. Тәрән баҙҙа бүре олой.

## Самауыр, сынаяҡтар

2755. Һарайымда һары айғырым
Һикереп тороп кешнәйҙер.
Биш ҡолонло биш бейәм
Бер ҙә ҡулдан төшмәйҙер.

2756. Һарайымда һары айғырым
Һикереп тороп кешәнләй,
Битләүҙәге биш бейәм,
Бишеһе лә ҡолонлай[224].

2757. Аталары еҙ бүкән,
Балалары сылдыр-мылдыр.

## Сынаяҡ

2758. Бәләкәй генә аҡ тауығым
Көнгә өс тапҡыр өҫтәлемә ҡуна.

2759. Кескәй генә ҡыҙым бар,
Кергән-сыҡҡан үбәлер[225].

## Самауыр, батмус, сынаяҡтар

2760. Бейек-бейек тау,
Уның янында түңәрәк күл,
Түңәрәк күлдең эсендә
Ун ике аҡҡош.

2761. Атаһы еҙ күкрәкле,
Инәһе киң күкрәкле,
Балалары сылтыр ҙа солтор.

2762. Атаһы — Ғәбделсамат,
Инәһе — киң күкрәк,
Балалары — салтыр-солтор.

2763. Береһе ята, береһе тора,
Береһе ултыра ҡуҡырайып.

## Батмус, сынаяҡтар

2764. Бер күлдә ун аҡҡош.

2765. Баҡсам тулы аҡ сәскә.

## Сынаяҡтар, сәйнүк

2766. Ун ике аҡҡош араһында бер өйрәк.

2767. Ваҡ ҡына аҡ себеш
Ҡулдан ҡулға йөрөш.

## Самауыр, сәйнүк

2768. Оло йылғаның һыуы аҡ,
Кесе йылғаның һыуы һары.

2769. Атаһы һыу ҡойһа,
Улы ҡан ҡоя.

2770. Кәкре ҡайын башында
Ҡаңғыл (ябыҡ) әтәс ултыра.
Ҡанатына ҡан тейгән,
Тама-тама ултыра.

2771. Саталы ағас башында
Сандаллы ҡош ултыра.
Танауына ҡан тейгән,
Ағыҙа алмай ултыра.

2772. Алтын бағана өҫтөндә
Аҡ күгәрсен ултыра.

2773. Аҡ бағана өҫтөндә
Бәләкәй генә сәпсек балаһы.

2774. Һары тауыҡ, аҡ себеш.

2775. Үргә менһә лә илай,
Түбән төшһә лә илай.
Ҡойроғо семәрле,
Үҙе генә аяулы.

2776. Мейес башынан төшмәй,
Үҙе нисек бешмәй?

2777. Тулғанда, йөҙөн күрһәтә,
Бөлгәндә, артын күрһәтә.

## Сәйнүк

2778. Бәләкәй генә аҡ тана,
Мөгөҙөм бар, тип маҡтана.

2779. Бәләкәй генә аҡ тана,
Һөтөм күп, тип маҡтана.

2780. Өйөмдәге аҡҡошом
Түр башында ултыра.

2781. Аҡҡошом ҡара ҡан ҡоҫа.

2782. Кәкре тауыҡ ҡан тамыҙа.

2783. Аҡ тауығым көндә аунай.

2784. Аҡ ҡына көсөгөм ҡан ҡоҫа.

2785. Бохаранан килгән буҙ бейә,
Әйләнә лә ҡан ҡоҫа.

2786. Аҡ үрҙәктең арҡаһы тишек.

2787. Бәләкәй генә аҡ килен
Йүгерә-йүгерә ҡунаҡ һыйлай.

2788. Аяҡһыҙ аҡ бесәйем
Өй эсендә йүгерә.

2789. Кәштә башында аҡ тауыҡ
Ултырып тора маҡтанып.

2790. Тимер торба өҫтөндә
Бер аҡ тауыҡ ултыра.

2791. Муйынын һуҙған мулла
Төшөп ҡарай ҙа һаба төбө ялай.

2792. Бәләкәй генә бөкрө
Эйелә лә ҡан ҡоҫа.

2793. Өҫтәлемдә аҡ үгеҙ,
Маңлайында бер мөгөҙ.

2794. Аяҡһыҙ-күҙһеҙ аҡ бесәй
Ашъяулыҡ аша һикерә.

2795. Ары ла этәс,
Бире лә этәс,
Ҡунаҡ килһә, йүгерә этәс.

2796. Ҡыу ҡарағас башында
Ҡоҙам ҡурмас ҡыҙҙыра[226].

2797. Аҡ күгәрсен ултыра,
Һабаға һыу тултыра.

2798. Ҡыу ҡарағас башынан
Ҡыуылдырыҡ осорҙом.

## Сәйнүк төбө һәм мороно

2799. Бер ботаҡҡа ике ҡарға ултырған.
Береһе әйтә: «Суҡышың бысраҡ»,
Икенсеһе: «Аяғың бысраҡ».

## Күмер һауыты

2800. Өс аяҡ, ике ҡолаҡ,
Алтынсыһы — оло ҡорһаҡ.

2801. Яҫы аяҡ, тырпа ҡолаҡ,
Шунан килеп — ҡап ҡорһаҡ.

2802. Яҫы аяҡлы, тырпа ҡолаҡлы.

## Самауыр торбаһы

2803. Мейес янында төпһөҙ итек.

## Сүмес

2804. Өйрәк сума китер,
Ҡойроғо күренә китер.

2805. Ҡайнаған ҡаҙанда балыҡ уйнай.

2806. Ҡойроғо ҡоймала, башы ҡоҙоҡта.

2807. Ҡойроғо ҡоймала,
Башы — даръяла.

2808. Башы һыуҙа, ҡойроғо тауҙа.

2809. Ҡолонло бейә һыуға төштө,
Әлибай сабан ҡыуа төштө.

2810. Һыңар аяҡ һайыҫҡан
Һыуға төшөп һыу эскән[227].

2811. Ҡойроғо бар — болғамай.

2812. Эҫе күлдең эсендә
Сыр яланғас һыу инә.

## Ултырғыс, сүмес

2813. Аяғы бар — атламай,
Ҡойроғо бар — сипанламай.

## Биҙрә, һыу, сүмес

2814. Тимер ярлы күл эсендә
Алтын өйрәк йөҙәлер.

## Табаҡ, тәрилкә

2815. Өйөм алды түңәрәк күл.

## Табаҡ

2816. Өйөп-өйөп тә килтереп ҡуя,
Йыйып-йыйып та килтереп ҡуя;
Төбөнә баҡҡанды яратмай,
Тик ултырғанға эләкмәй.

## Ҡалаҡ

2817. Биш туғанға баш булам,
Асыҡҡанға аш булам.

2818. Үҙе бер ҙә ашамай,
Ашағанда бушамай.

2819. Ашҡаҙарҙың ашнаҡсыһы
Ашыға-ашыға аш ташый.

2820. Бер малайҙың йомро башы
Йүгерә-йүгерә һыу ташый.

2821. Бер юрғам бар,
Ҡойроғонан тотмаһам, һыуға инмәй.

## Бысаҡ

2822. Мөгөҙ һаплы, ҡара ҡашлы[228],
Уны белгән — йөҙ йәшле.

2823. Оҙон һалдат ит турай.

## Көбө, бешкәк

2824. Оҙон-оҙон упарым,
Эсендәге йопарым,
Йопарымды йотарым,
Йотарым да сығарым.

2825. Оҙон-оҙон упарым,
Эсендәге йопарым.
Ҡара һауырым ҡарҡыны,
Эсендәге — ярҡыны.

## Көбө

2826. Ишек төбөндә көтөп ултыра,
Килеп ингәнде һүтеп ултыра.

## Һаба

2827. Ҡара бейәм ҡайҡалай,
Эсендәген сайҡалай.

## Турһыҡ, башкүнәк

2828. Тун ябынған Туғаҙаҡ
Туйҙы көтөп ултыра.

2829. Түрҙә ултырған түрә,
Туй еткәндә, тунын сисә.

## Иләк

2830. Алтын бишек, төбө тишек.

2831. Әлли-бәлли бер бишек,
Ул бишектә мең тишек.

2832. Бер соҡорҙа мең соҡор.

2833. Үҙе бер, күҙе мең.

2834. Бер ауыҙлы, мең күҙле.

2835. Түңәрәк ялан, аҫты буран.

2836. Бикә бите сәп-сәп итә,
Эсендәге ҡойолоп китә.

2837. Бите тишек Бикә
Бейегән һайын ҡар һибә.

2838. Урманда бөккән,
Өйҙә теккән,
Үҙе өр-яңы —
Тишелеп бөткән.

2839. Урманда киҫтем,
Юлда бөктөм,
Өйгә ҡайтып тектем,
Уртаһында лөп-лөп.

2840. Урманға барҙым — бөктөм,
Өйгә ҡайттым — тектем,
Сит-ситтәре түәй-түәй,
Урталары иһаһай!

2841. Сите сәпе-сөпө,
Уртаһы иһаһай!

2842. Яп-яңы һауыт — тишелеп бөткән.

2843. Үҙе өр-яңы,
Үҙенең төбө тишек.

### Иләк, ҡырлығурай, һөлөк

2844. Илдә Иләймән,
Ҡырҙа Ҡыраймаң,
Һыуҙа Һөләймән.

### Икмәк силәге

2845. Мейес башында бисура,
Ҡапырайып ултыра,
Он ашай ҙа һыу эсә,
Ҡорһағынан туп сыға,
Уны ашаған туҡ сыға.

2846. Мейес башында бисура
Билен быуып ултыра.
Бутҡа бирһәң, бутҡа алмай,
Икмәк һорап ултыра.

2847. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ бәндә,
Урыны гел түрҙә.

### Сыбағаш, ҡайсы, һелкәүес

2848. Дөп-дөп дөбәнәй килә,
Зыҡ-зыҡ зығанай килә,
Һәп-һәп һәбәнәй килә.

### Тәпән

2849. Биле биләндәй,
Эсе арандай,
Ауыҙы яландай.

### Мискә

2850. Билен биш ерҙән быуған,
Үҙе урманда тыуған.

2851. Имән таҡта бил быуған,
Ҡабырғаһында тишек.

2852. Аҙбарҙа ҡара танам бар ине,
Уның да ҡабырғаһы тишелгән.

2853. Ҡара һыйырымдың ҡабырғаһы тишек.

2854. Ялҡау ята,
Танауынан тартһаң, һыу ата[229].

## Арба өҫтөндә мискә

2855. Ишек,
Ишек өҫтөндә бишек,
Урамда йөрөй,
Ҡабырғаһы тишек.

2856. Ишек,
Ишек өҫтөндә бишек,
Бер үгеҙем бар ине,
Ҡабырғаһы тишек.

## Киле

2857. Алап ауыҙ, башы юҡ.

## Киле һәм төйгөс

2858. Әсәһе балаһын һөйә,
Балаһы әсәһен төйә.

2859. Нескә билле бер килен
Ҡойо ауыҙында бейей.

## Көршәк

2860. Эсе ҡыуыш, тышы таш.

2861. Эсе соҡор, тышы таш,
Английский орсоҡбаш.

## Һөт машинаһы

2862. Бәләкәй генә ҡара һыйырым,
Һөт тә, ҡаймаҡ та бирә.

2863. Һыйыр түгел мин үҙем,
Шулай ҙа бар мөгөҙөм.
Көтөүҙә йөрөгәнем юҡ,
Һөтһөҙ ҙә торғаным юҡ.
Әйләнәм зырлап ҡына,
Ултырам йырлап ҡына*.

## Биҙрә, унын менән һыу алыу

2864. Ҡолағы бар — башы юҡ.

2865. Ҡара һыйырым ҡырға китте,
Ҡолаҡтары ҡарпая китте.

2866. Ҡара бейәм батты,
Ҡолағы тырпайып ятты.

2867. Ҡола бейәм ҡойоға батты,
Ике ҡолағы һерәйеп ҡатты.

2868. Ике туған һыу инергә киттеләр.

2869. Иркә ике ҡыҙым бар —
Иртә лә, кис тә
Һыу ҡойонорға баралар.

2870. Ике һылыу һыуға бара.

2871. Мәскәүҙән килгән күк айғыр
Боһороп-боһороп һыу эскән.

## Биҙрә тотҡаһы

2872. Һыу арҡыры тимер күпер.

## Көйәнтә, күнәк

2873. Бер дуғала ике күл[230].

2874. Кәкре ботаҡҡа ике бүкән аҫылынған.

2875. Өс ағайым һыуға киткән,
Икеһе һыу төшә,
Береһе ярҙа ҡыҙынып ята [231].

2876. Ике егет бейей,
Аяҡтары ергә теймәй.

## Көйәнтә

2877. Баш башында киртек,
Уртаһында биртек.

2878. Ике башлы, киртекле,
Ҡыҙҙар шуға интекте.

2879. Кирмә ҡашлы,
Китек башлы.

2880. Һыртыңдағы һырыңды,
Аҡылың булһа, белеп ал.

## Һыу һиптергес

2881. Мороно оҙон үҙенән,
Үҙе минең теҙемдән,
Шыбыр-шыбыр шабырлап,
Ямғыр яуа үҙенән.

## Ҡомған

2882. Өй артында еҙ тәкә,
Етәкләтә, күтәртә,
Үҙе бармаҫ,
Эйәртһәң, ҡалмаҫ.

2883. Мороно мортас,
Ҡарыны ҡартас,
Атҡа менмәҫ,
Йәйәү бармаҫ.

2884. Мороно мортас,
Ҡарыны ҡартас,
Йәйәү йөрөмәҫ,
Тик тормаҫ.

2885. Аяҡһыҙ, ҡулһыҙ мәстүбәгә менә.

2886. Аяҡһыҙ булһа ла йөрөп тора.

2887. Бәләкәй генә ҡара атты
Муллалар менеп арытты.

2888. Өй артында бер әтәс,
Муйынын бороп ултыра.

2889. Өй артында еҙ тәкә,
Етәкләтә, күтәртә.
Үҙе бармаҫ,
Эйәртһәң — ҡалмаҫ.

2890. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,
Үҙе етәккә бик шәп.

2891. Бохар бесәйем бит ағарта.

2892. Бохарҙан килгән йылтыр,
Ҡойроҡ осо сонтор.

2893. Арымаҫ, талмаҫ,
Үҙе йәйәү йөрөмәҫ.

2894. Арымай-талмай,
Атҡа менмәй,
Йәйәү йөрөмәй.

2895. Арымаҫ, талмаҫ,
Эйәрһә, кешенән ҡалмаҫ.

## Ҡаҙан

2896. Өҫтө яҡты, төбө ҡараңғы.

2897. Йом, йом, йом ҡара,
Йомаҡ эсе сөм-ҡара.

2898. Йомабикә йомтой ҡара,
Йомабикәнең арты ҡара.

2899. Йомаҡ өйҙөм йомтой ҡара,
Йомағолдоң арты ҡара,
Ышанмаһаң, ят та ҡара.

2900. Уттан һыуҙы һөйҙөрә,
Тотһаң, ҡулды көйҙөрә.

2901. Ҡолағы бар — ишетмәй,
Тигеҙ ергә ултырмай.

2902. Ҡара һыйырымдың ҡарыны йыуан.

2903. Ҡола бейәм ҡойоға батҡан,
Ҡолағы күренеп ятҡан.

2904. Муйылдай ҡара егет
Көҙгө тотоп ултыра.

2905. Ҡараңғы өйҙә ҡара ҡалпаҡ.

## Ҡаҙан, ут

2906. Ҡарабайҙы Ҡыҙылбай ялай.

2907. Ҡараһы ҡарап тора,
Ҡыҙылы ялап тора.

2908. Ҡара һыйырым ҡарап тора,
Ҡыҙыл һыйырым ялап тора [232].

2909. — Оҙон ағай, ҡайҙа бараһың?
— Ырылдама, ҡарап ут,
Ҡара арҡамды ялап ут.

## Тағанға аҫылған ҡаҙан

2910. Ҡара бесәйем ҡойроғонан аҫылған.

2911. Ҡарабай аттан йығылды,
Иле, йорто йыйылды.

## Ҡаҙан ҡапҡасы

2912. Ҡара һыйырымдың ҡабырғаһы
Ҡаҙаныма һыйманы.

2913. Атаһы балаһын күтәреп тора.

2914. Ҡорап-ҡорап таш ҡуйҙым,
Ҡара һыйырым буш ҡуйҙым.

## Ҡаҙан менән сүмес

2915. Оло ҡатыны бешерер,
Кесе ҡатыны төшөрөр.

## Ҡаҙан, самауыр

2916. Ҡара һыйырым ҡарап тора,
Ҡыҙыл һыйырым йырлап тора.

2917. Ҡолағы бар — ишетмәй,
Ҡойроғо бар — сипанламай.

## Ҡор, мылтыҡ, ҡаҙан, табаҡ, ҡалаҡ

2918. Урманға инер,
Ҡойроғо сыбар,
Мәһәҙейе атыр,
Оло бисәһе бешерер,
Кесе бисәһе төшөрөр,
Балалары ашап бөтөрөр.

## Ҡаҙанға ит һалыу

2919. Түңәрәк күлгә таш ташланым,
Ташлаһам да батманы.

## Таба

2920. Бәләкәй генә ҡара мүскә
Өйҙән өйгә йүгерә.

2921. Ҡара айғырым утҡа һикерә.

2922. Ҡара тай, арты май.

2923. Мейес артында беләү,
Уны белмәгән — һеләү.

2924. Еңгәмдең ҡара тауығы өйҙән өйгә йөрөй.

2925. Йомаҡ өйҙөм йомоҡ ара,
Йомағолдоң бите ҡара.

## Таба менән табағас

2926. Арбаһы тимер, аты ағас.

2927. Йомаҡ әйтәм тап:
Йомабикәне ҡап.

2928. Йомаҡ әйттем тап:
Йомро әбейҙең битен ҡап.

## Табағас

2929. Таба, таба, табалама,
Таба өҫтөнән юрғалама,
Кеше күрһәң, кешнәмә,
Таба башын тешләмә;
Эләктергес, ҡаптырғыс,
Килендәргә тарттырғыс.

## Тәртешкә

2930. Оло аҙбарға йыйылғанды
Кесе аҙбарға ташый.

2931. Кәкре йылан утта уйнай.

2932. Бәләкәй генә ағас тырма
Бөтөн көтөүҙе ҡыуа.

2933. Ҡара атым утҡа ҡарап юрғалай.

2934. Көрән айғыр утҡа һикерҙе.

2935. — Кәкре ҡойроҡ, ҡайҙа бараһың?
— Ҡоҙағыйға ҡунаҡҡа.

2936. Кәкре һалдат алтын ҡаҙый.

2937. Ут башында оҙон тимер.

2938. Буҙартып тыҡтым, ҡыҙартып алдым.

## Тәртешкә һәм ҡыҫҡыс (йәмкә)

2939. — Кәкре ҡойроҡ, ҡайҙа бараһың?
— Ҡыҫҡырмасәле, ҡара ҡарға,
Үҙем янып-көйөп барам әле!

2940. — Кәкре ҡойроҡ, ҡайҙа бараһың?
— Һорашма, аҙаҡ үҙең дә барырһың.

## Лампа

2941. Атаһы улын күтәргән,
Улы бүреген күтәргән.

2942. Үзбәктең үҙ улы
Үҙен тотоп ултыра.
Үзбәк ҡара һаҡаллы,
Күҙгә тотоп ултыра;
Күҙгә матур быяла,
Ергә төшһә, ыуала.

2943. Аҫты диңгеҙ, өҫтө нур.

2944. Ултыра ҡыҙ төрмәлә,
Сәсе үрмәлә.

2945. Башы булмаһа ла эшләпәле.

2946. Һуҡыр әбейҙең башына ут ҡапҡан.

2947. Теленә ут ҡапҡан,
Уны кем уйлап тапҡан?

2948. Тәтәй тауҙың битендә
Тәкә телен сығарған.

2949. Тирә-яғым рәшәткә,
Мин ултырам рәхәттә.

2950. Таяҡ,
Таяҡ өҫтөндә табаҡ,
Бәлтер,
Бәлтер өҫтөндә ялтыр.

2951. Эсе һыу,
Тышы быяла,
Мороно еҙ.

2952. Бәләкәй генә ҡойом бар,
Эсендә алтын һыуым бар.

2953. Быяла һарайым эсендә
Һары тауығым ултыра[233].

2954. Теленә ут тоҡанған —
Ауыҙы ярылып бара.

2955. Атайымдың уты алтын һарай эсендә.

2956. Яңы өйөмдөң эсендә
Аҡшам етһә, ут уйнай.

2957. Күлдәге эсендә,
Кәүҙәһе тышында.

2958. Һыу өҫтөндә ут яна.

2959. Атаһынан улы юғары.

2960. Өйө лә быяла,
Тәҙрәһе лә быяла,
Кәрнизе селтәр,
Тәҙрәһе мең.

## Лампа селтәре

2961. Бер кешелә мең күҙ.

## Филтә

2962. Таҫма һуҙыла, таҫма һуҙыла,
Таҫма башы — һары алтын.

2963. Бер башым һыуҙа,
Бер башым утта.

## Лампа, кәрәсин, филтә, ут

2964. Ҡоҙоҡ,
Ҡоҙоҡ эсендә һары һыу,
Һары һыу эсендә ҡара йылан,
Ҡара йылан ауыҙында ағыу.

## Филтәнең күмерләнгән өлөшөн тигеҙләү

2965. Таяғыңды төрт,
Танауыңды һөрт.

2966. Танауын һөртһәң, ялтырай.

## Ҡыуыҡ

2967. Өфө-өфө, өфө баш,
Эсе ҡыуыш, тышы таш.

2968. Ике башы тишек,
Уртаһы быяла ишек,
Күрергә күркәм,
Тоторға ҡурҡам.

## Шәм

2969. Ҡолағын борҙом, —
Күҙен ҡыҫты.

2970. Бағана яна, көлө-күмере аға.

2971. Һары бағана янып тора,
Ҡара күмере ҡалҡып тора.

2972. Тешһеҙ айыу май ашай.

2973. Фәлән ерҙә сәмсерәк ташы яна.



10 – 1.(

2974. Ҡаланан килгән ҡарый
Ҡарта турап ултыра,
Һиңә лә бирмәй,
Миңә лә бирмәй,
Тик ҡаратып ултыра.

2975. Күмере юҡ, көлө юҡ,
Бағанала ут яна.

2976. Табаҡ,
Табаҡ өҫтөндә таяҡ,
Таяҡ өҫтөндә әлтерәй,
Әлтерәй өҫтөндә бәлтерәй,
Бәлтерәй өҫтөндә ҡалтырай,
Ҡалтырай өҫтөндә ялтырай.

2977. Әлтерәй ҙә бәлтерәй,
Тирә-яғы ялтырай.

2978. Ана тора маяҡ,
Маяҡ өҫтөндә таяҡ,
Таяҡ өҫтөндә ялтырай,
Ялтырай өҫтөндә ҡалтырай.

2979. Ҡараңғы өйҙә аҡ ҡына бер ҡыҙ,
Танауын һөртһәң, ялт итә.

2980. Ябалаҡ күҙе ялтырай.

2981. Һыңар күҙле ябалаҡ
Төн буйына ялтырай.

2982. Баҡыр башлы йылан күҙе,
Ҡояш байығас, асыла.

2983. Бағана яна, баҙы ҡала.

## Шәм, уның көлө

2984. Аҡ кеше ҡараһын ҡоя.

)125.07

## Шәмдәл

2985. Аягы ҡатлы,
Башы сатлы.

## Электр лампалары

2986. Оҙон-оҙон ҡыҙ-ҡырҡын
Аҫыл алҡа таҡҡандар,
Быңдай матур нәмәне
Ҡайҙан уйлап тапҡандар?

2987. Ҡаҙ күкәйен тапҡандар,
Эсенә ут яҡҡандар.

2988. Алтын йомортҡа таптым,
Эсенә ут яҡтым.

2989. Үҙе яна — яндырмай.

2990. Аҫылынып тора груша,
Ашарға ярамай.

## Электр лампаһын ҡабыҙыу

2991. Төймәһе селт итә, үҙе гөлт итә.

2992. Ем-ем итә, емелдәп китә,
Шырпыһыҙ үрләп китә.

## Шырпы

2993. Бәләкәй генә әрйә,
Эсе тулы мәрйә.

2994. Бер бүлмәгә япҡандар,
Теҙелешеп ятҡандар.
Бик ғәжәп был кескәйҙәр,
Ашамайҙар, эсмәйҙәр,
Булмай уларҙан башҡа
Ҡайнар сәй, эҫе аш та*.

2995. Бәләкәй генә һандыҡ,

Эсе тулы халыҡ,
Баштарында бүрек.

2996. Бәләкәй генә амбар,
Эсендә етмеш биш пожар.

2997. Бер вагондың эсендә етмеш биш кеше,
Бөтәһе лә аҡ халатлы,
Ҡара эшләпәле.

2998. Бер өйҙә етмеш биш кеше,
Барыһы ла ҡара салмалы.

2999. Бәләкәй генә оя,
Етмеш биш кеше һыя.

## Шырпы ҡабыҙыу

3000. Бәләкәй генә малайҙың башы ҡанай.

3001. Тотһам, бармаҡ осона һыя,
Һыҙһам, өйгә һыймай.

## Һабын

3002. Мин ни күрҙем, ни күрҙем,
Күпереп торған май күрҙем.

## Өҫтәл

3003. Дүрт киленгә бер яулыҡ[234].

3004. Бер бөркәнсек эсендә
Дүрт килен ултыра.

3005. Дүрт бисәгә бер шәл.

3006. Дүрт кешегә бер эшләпә.

3007. Дүрт Шәфигә бер шәпкә.

3008. Дүрт малайға бер түбәтәй.

3009. Дүрт егеткә бер бүрек.

3010. Дүрт ағайға бер кәпәс.

3011. Бер эшләпә аҫтында дүрт малай.

3012. Бер эшләпә аҫтында дүрт ағайым ултыра[235].

3013. Дүрт апай, дүрт апай,
Дүрт апайға бер супай.

3014. Дүрт аяҡ,
Дүртеһе лә пар килгән.

3015. Бер кешелә дүрт аяҡ,
Дүртеһе лә пар аяҡ.

3016. Дүрт кешегә бер ҡалпаҡ.

3017. Бер аҙбарҙа дүрт килен һыйыр һауа.

3018. Дүрт аяҡлы ҡарт бер эшләпә кейгән.

3019. Бер бөркәнсек аҫтында
Дүрт ҡунаҡ ҡыҙ ултыра.

3020. Бер сатырҙың дүрт сатында
Дүрт ҡоҙағый ултыра.

3021. Башы булмаһа ла эшләпәле,
Аяғы булһа ла итекһеҙ.

3022. Бер бүрек аҫтында дүрт бүре.

## Ултырғыс

3023. Ары ла этәс,
Бире лә этәс,
Ҡунаҡ килһә, йүгерә этәс.

3024. Ары тәки, бире тәки,
Ҡунаҡ килһә, йүгерә тәки.

3025. Арҡаһы бар, түше юҡ,

Аяғы бар, ҡулы юҡ.

3026. Аяҡтары бар — йөрөмәй,
Арҡаһы бар — ятмай.

3027. Түтәрәм, түтәрәм,
Ҡунаҡты мин күтәрәм.

## Ултырғыс, өҫтәл

3028. Ике апай буй һынаша.

## Урындыҡ (һике), урындыҡ таҡтаһы

3029. Ишектән инәләр ҙә
Миңә менәләр.

3030. Өй түрендә хан урыны,
Хан урыны — ял урыны.

3031. Арығандар ҙа миңә менә,
Асыҡҡандар ҙа миңә килә.

3032. Миндә тыуалар, миндә ашай-эсәләр,
Миндә йоҡлайҙар, миндә үләләр.

3033. Оҙон инем, йығылдым,
Йыуан инем ярылдым,
Инде ни хәл итәйем —
Кеше итәген ялайым?

3034. Оҙон булдым — киҫтеләр,
Йыуан булдым — ярҙылар,
Инде хәҙер нишләйем,
Кеше итәген ялайым?

## Карауат

3035. Ике баш, бер кәүҙә, дүрт аяҡ.

3036. Ике терәкле, дүрт аяҡлы.

## Карауат, түшәк

3037. Дүрт аяҡлы — ат түгел,
Мамығы бар — ҡош түгел.

## Сәңгелдәк

3038. Үргә менһә, һу-һу,
Түбән төшһә, һу-һу,
Уртаһында былбыл ҡош.

3039. Төшә-төшә — ергә теймәй,
Менә-менә — күккә етмәй.

3040. Юғарыла гәү-гәү,
Түбәндә лә гәү-гәү,
Уртала былбыл ҡош һайрай.

3041. Юғары менә гәү-гәү,
Түбән төшә гәү-гәү,
Уртаһында ҡыңғырау.

3042. Ерек-ерек еректер,
Ерек төбөн һелкетер.

3043. Күктән тубал һәленгән.

## Балаҫ, кейеҙ

3044. Ҡағылдым, һуғылдым,
Түргә килеп һуҙылдым.

3045. Өрөлдөм, төрөлдөм,
Түр башында йәйелдем (үрелдем).

## Балаҫ, тула, киндер

3046. Башым бороп бөктөм,
Биш ағасҡа еттем,
Күнә һыуы йүгерттем,
Өйөнә кереп ураным,
Иҙәнгә төшөп ҡоланым.

## Мендәр

3047. Ҡабара-ҡабара, ҡабартма кеүек,
Ҡабарып бешкән икмәк кеүек.

3048. Түрҙә Түрәймән.

3049. Күпкән ҡорһаҡ бай ағай
Һике түрендә аунай.

3050. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ — күлдәк кейә[236].

3051. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ —
Кейем туҙҙыра.

3052. Йәнһеҙ — күлдәк кейә.

3053. Ҡош түгел — мамыҡлы.

## Түшәк менән яҫтыҡ

3054. Ҡарсыға менән ҡорсоға,
Береһе аҫта, береһе өҫтә.

## Түшәк, тараҡан

3055. Түрҙә Түрәймән,
Мейес башында һары тархан.

## Юрған

3056. Бабай бүрке йөҙ ямау.

3057. Көндөҙ — хөрмәттә,
Кис — хеҙмәттә.

3058. Көндөҙ ҡыҫыр, кис быуаҙ.

## Шаршау

3059. Килен артынан килдем,
Донъяны уртаға бүлдем.

3060. Ятһа — йәймәләй,
Торһа — дөйәләй.

3061. Торһа — дөйәләй,
Ятһа — ҡуяндай.

3062. Бер яғында: һай ҙа вай,
Бер яғында: быш та быш.

## Сымылдыҡ

3063. Аҡ һарайымдың ишеге лә юҡ,
Тишеге лә юҡ.

3064. Аҡ тирмәнең төнлөгө юҡ.

3065. Аҡ келәттең эсенә индек,
Тәҙрә-ишеген тапманыҡ.

3066. Ишекһеҙ аҡ өйөмә
Себен кермәһә лә кеше керә.

3067. Балтаһыҙ солан ҡуйҙым.

## Таҫтамал

3068. Ике башлы торомтай тәҙрә башын һаҡлай[237].

3069. Тәҙрә башында йоҡлайым,
Кеше битен һыйпайым.

3070. Үҙе йәнһеҙ — ике башлы.

3071. Ике башлы мүктәрге (ҡош)
Ҡыҙыҡтыра күптәрҙе.

3072. Оҙон-оҙон оҙарған,
Ике башы ҡыҙарған.

3073. Үҙе оҙон ғына,
Баштары ҡыҙыл ғына.

3074. Аҡ тауыҡтың ҡойроғона ҡан тейгән.

## Нағыш, ҡайыу-сигеү

3075. Ҡыҙҙар әҙерләй, килендәр ялтырата.

3076. Ҡыҙҙың ҡайғыһы,
Килендең (ҡәйнәнең) шатлығы.

3077. Сытыр-мытыр, сөйәлле ҡутыр.

## Өҫтәл, ашъяулыҡ

3078. Дүрт аяҡҡа бер күлдәк.

## Һандыҡ

3079. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ мал йыя.

3080. Аҫлы-өҫлө тирмән,
Хан килһә лә, бей килһә лә
Тороп, урын бирмәм.

3081. Ике ҡолағын тарттым,
Түр башына аттым.

3082. Дүрт мөйөш, ике теш.

3083. Дүрт мөйөш, ике теш,
Түр башынан төш!

3084. Тышы йылтыр, эсе ҡыуыш,
Күп нәмәләр һалына.

3085. Дүрт мөйөшлө,
Ике ҡолаҡлы,
Эсе-тышы затлы.

3086. Эсе ҡыуыш,
Тышы тимер,
Үҙе ағас.

3087. Биҙәкле тау эсендә
Туй бүләге теҙелгән.

3088. Сатрашлы күлдәк кейгән,
Инәйем артынан килгән,
Атайым түренә менгән.

3089. Әсәйемдең асҡысы ла йомғосо.

3090. Эсе — һарай, тышы — ҡалай.

## Һандыҡ асыу

3091. Ҡара һыйырымдың ҡарынын ярҙым.

## Һоҫа

3092. Сытыр-мытыр араһына
Зыңғы таяҡ ташланым.

3093. Сытыр талдың араһына
Алтын таяҡ ташланым.

3094. Аҫты ла бесән, өҫтө лә бесән,
Үтеп сыға кәкре сысҡан.

## Һоҫа, шүре,

3095. Сытыр-сытыр — араһында мытыр.

## Ҡаба, ҡолға

3096. Йүкә санамды ектем,
Йүгерә-йүгерә киттем.

3097. Йүкәгә ултырып, башын тарай.

3098. Йүкәгә ултырҙым, өҙәңгегә ҡараным.

3099. Дөйә сәсен тараным,
Үркәсенә (елкәһенә) ҡараным.

3100. Ултырһа — һике өҫтөндә,
Ятһа — һике аҫтында.

3101. Әбейем тарағы — илле теш.

## Ҡаба, көнйәлә

3102. Ҡабыҡ күпер аҫтында
Ҡаптыр бабай һаҡалы.

3103. Ҡырҡ кәртә араһына
Эт эсәге ҡыҫылған.

3104. Сәсен-башын туҙҙырған,
Атаһынан уҙҙырған.

3105. Әбейем башында аҡ төйөнсөк.

## Орсоҡ

3106. Бәләкәй аҡ көсөгөм йүгерә-йүгерә ҙур булды.

3107. Бәләкәй генә тайым бар,
Бәйҙә тороп һимерә.

3108. Бәләкәй генә бер бала
Йүгерә-йүгерә йөк ала.

3109. Бәләкәй генә бер бала
Йөҙлөк буйлап йүгерә.

3110. Бәләкәй генә Ураҙбикә
Йүгерә-йүгерә йөк ташый.

3111. Бәләкәй генә әбей
Йүгерә-йүгерә еп йыя.

3112. Бәләкәй генә бөтмәрсек
Йүгерә-йүгерә йөк ташый.

3113. Бәләкәй генә әбейем
Йүгерә-йүгерә йыуан булды.

3114. Йүгерә-йүгерә йөн йыйыр.

3115. Артыҡбикә арымай,

Әйләнә лә әйләнә,
Әйләнгән һайын һимерә.

3116. Зыр-зыр зырыштырай,
Зырыштырай, быштырай.

3117. Зыр-зыр әйләнә,
Үҙе килеп бәйләнә.

3118. Ҡыҫыр танам бар ине,
Йүгерә-йүгерә быуаҙ булды.

3119. Өйөрөлөп-өйөрөлөп, быуаҙый.

3120. Өйөрөлә-өйөрөлә,
Өйөрөлгән һайын һимерә.

3121. Өйҙәге өйрәгем
Өйөрөлә-өйөрөлә йыуаная[238].

3122. Йүгерә-йүгерә йыуаная.

3123. Бәләкәй генә бисура
Йүгерә-йүгерә быуаҙый.

3124. Бәләкәй генә киленсәк
Әйләнә-тулғана быуаҙый.

3125. Бәләкәй генә ҡәйнә
Бейей-бейей һимерә.

3126. Бей һаҡалын кимерә,
Бейей-бейей һимерә.

3127. Үҙе йөрөй — атламай,
Өйөрөлөүҙән туҡтамай.

3128. Йомаҡ ҡойҙом юл менән,
Юрғалаттым ҡул менән.

## Орсоҡ башы

3129. Эсе ҡыуыш, тышы таш.

3130. Уҡый-уҡый, уҡый баш,
Эсе ҡыуыш, тышы таш.

3131. Өфөй-өфөй, өфөй таш,
Эсе ҡыуыш, тышы таш,
Уны белмәгән ҡыҙҙарҙың
Башына тейер ошо таш.

3132. Бәләкәй генә йомро баш,
Эсе ҡыуыш, тышы таш.

## Ҡалтырса

3133. Зыр-зыр зыраҡтыр,
Зыраҡтырын быраҡтыр.

3134. Зыр-зыр зырылдап,
Убыр ултыра пырылдап.

3135. Зыр-зыр зыраҡтыр,
Зыраҡтырым, быстрей.

3136. Ҡолдор-ҡолдор ҡоҙаса
Бармағына еп аҫа.

3137. Дыр-дырый дырастырый.

## Киндер станогы (көрөҫ)

3138. Бәләкәс кенә өй, сатлы-ботло сөй.

3139. Бәләкәй генә ҡара атты
Бисәләр менеп арытты.

3140. Бәләкәй генә туры атымды
Бисәләр менеп арытты.

## Ҡылыс

3141. Мең таш араһынан мең юл һуҙыла.

3142. Мөгрөй башлы, мең тешле.

3143. Ҡыҫып ала, ҡымтып ала,
Этеп ҡуя, килтереп ҡуя.

## Тәбәлдерек

3144. Баҫһам, бырыҡты,
Тейһәм, тырыҡты.

3145. Иҙән аҫтында әбей менән бабай һуғыша.

3146. Береһе менә, береһе төшә,
Ике тәкә һөҙөшә.

## Ойоҡ энәһе

3147. Бишәү килдек, башҡа мендек,
Оя яһаныҡ, өй ҡорҙоҡ.

## Энә, энә менән еп

3148. Бәләкәй генә биҙәр,
Бар донъяны биҙәр,
Ялангас көйө ил гиҙәр.

3149. Бәләкәй генә беләүер,
Ул беләүер юҡ булһа,
Йорттоң бары йылауыр.

3150. Шыума шыуыр, йылан ҡыуыр.

3151. Бәләкәй генә ҡылҡайым,
Ергә төшһә, юғала.

3152. Ҡойроғо — башында,
Ҡолағы — күҙендә.

3153. Сума-сума ла ҡойроғон юғалта.

3154. Көмөш һөлөк шыуып бара,
Бер бата ла бер ҡалҡа.

3155. Күк үрҙәгем күлгә сума,
Ҡойроғо ярҙа һуҙылып ҡала.

3156. Тегеүсе үҙе,
Һыңар ғына күҙе,
Кешегә кейем тегә,
Яланғас үҙе.

3157. Оҙон ағай атлап бара,
Уймаҡ-уймаҡ эҙе ҡала.

3158. Үҙе яланғас, кешене кейендерә.

3159. Үҙе бер ҡарыш,
Һаҡалы биш ҡарыш.

3160. Һаҡалы оҙон, үҙе бәләкәй генә.

3161. Тишеккә инһә, ҡойроғон ҡалдыра.

3162. Күк имәндең башы тишек.

3163. Күҙе бар, ауыҙы юҡ,
Ҡойроғо бар, йөнө юҡ.

3164. Тимер ат, сүс дилбегә.

3165. Тимер сәпсек, сүс ҡойроҡ.

3166. Тимер турғай, еп ҡойроҡ.

3167. Мороно тимер, ҡойроғо сүс.

3168. Башы ҡорос, ҡойроғо етен.

3169. Һоро сысҡан, аҡ ҡойроҡ.

3170. Бер сысҡанға ике ҡойроҡ.

3171. Тимер сысҡан, сүс ҡойроҡ.

3172. Осло морон, сонтор ҡойроҡ.

3173. Йыртыҡты бөтәйтә.

3174. Аҡ быҙауым муйынсағын сосолдороп, китеп бара.

3175. Күк бейәм арҡан һөйрәй.

3176. Күк тәкәмдең ҡойроғо ҡырҡ ҡолас.

3177. Кикреге ҡорос, ҡойроғо сүс.

3178. Күк этем ҡойроҡ һөйрәй.

## Энә, уймаҡ

3179. Бабай бахыр бер күҙле,
Әбей мең күҙле.

3180. Ҡәнәфи бер күҙле,
Ҡәнәфиә мең күҙле.

## Бармаҡса (уймаҡ)

3181. Метри башлы, мең күҙле.

3182. Мөгрөй башлы, мең күҙле.

3183. Үҙе тимер — күҙе йөҙ.

3184. Йомро башлы, мең күҙле[239].

3185. Бер башҡа мең күҙ.

3186. Әбейем күҙенә бармағым кереп китте.

3187. Ҡаҙыҡ башында ҡарсыға.

3188. Бер соҡорҙа мең соҡор.

3189. Бармаҡ башындай үҙе,
Йөҙҙән артыҡтыр күҙе.

3190. Бармаҡ башлы, мең күҙле,
Һис бөгөлмәйҙер үҙе.

## Йомғаҡ

3191. Бәләкәй генә ҡарсыҡ
Һике өҫтөндә өҙгөләнә.

3192. Ҡойроғонан күтәреп булмай.

3193. Тартһаң, тауға менмәй.

3194. Ҡойроғонан күтәреп булмай,
Үргә табан тәгәрәтеп булмай.

3195. Ҡойроғонан тартһаң,
Эсәге сығып бөтә.

## Ҡайсы

3196. Ике айыры, ике түңәрәк,
Уртаһында бер төймә.

3197. Йомоғомдоң башы йәпле,
Ҡойроғо кәкре.

3198. Ике ботаҡ араһында бер ҡаҙау.

3199. Ике осонда дүңгәләк,
Уртаһында бер ҡаҙаҡ.

3200. Ике осло,
Ике йөҙөклө,
Уртаһында бер ҡаҙаҡ.

3201. Еңгәм ҡуш бармағын асһа,
Ағайым ауыҙын аса,
Еңгәм йомһа, йома.

## Ҡайсы менән энә

3202. Ағаһы турай, энеһе ялғай.

3203. Ағаһы ҡыя торор,
Энеһе йыя торор.

## Тегеү машинаһы

3204. Һыңар ҡолаҡ әбеймен,
Өҫтәренән әйберҙең
Үрмәксе ауы тартам,
Еп һуҙырға яратам*.

3205. Тек-тек итер,
Текмештән китер.

## Сәғәт

3206. Көн үткәнде кем белә?
Мин онотһам, ул белә.

3207. Иртә лә, кис тә —
Һәр ваҡыт эштә,
Хәл йыймай һис тә.

3208. Ағайым алған бер ҡатын,
Бармаҡтары шау алтын,
Түңәрәк йөҙлө,
Уҡа һырлы.

3209. Барабыҙ ҙа барабыҙ,
Урыныбыҙҙа ҡалабыҙ.

3210. Көн китә, төн китә,
Энә буйы ер китә.

3211. Үҙе йәнһеҙ,
Көн бара, төн бара,
Бер ҡарыш ер бара.

3212. Аҡылы бар, йәне юҡ.

3213. Аҡылы юҡ,
Йәне юҡ,
Үҙе кешегә иҫәп өйрәтә.

3214. Ағиҙелдең аръяғында
Ун ике ҡара ҡаҙ уйнай.

3215. Ары ләйләй, бире ләйләй,
Эйәк аҫты биҙәкәй,
Күрмәнеңме, Зәйнәкәй?

3216. Ары тә-тә,
Бире тә-тә,
Бүрәнәлә ҡандала.

3217. Ашамай, эсмәй — көнө-төнө эшләй.

3218. Йәне юҡ — йөрөй.

3219. Үҙе йәнһеҙ,
Көн бара, төн бара.

3220. Аяғы юҡ — йөрөй,
Теле юҡ — һөйләй.

3221. Ауыҙы юҡ — теле бар.

3222. Бер туҡтамай йөрөһә лә
Бер урындан китә алмай.

3223. Келт-келт йөрөй —
Урынынан китә алмай.

3224. Келт-келт итә, үтеп китә,
Ризыҡ-нәфҡәләрен[240] әйтеп китә.

3225. Күк һарайҙың эсендә
Күк күгәрсен гөрөлдәй.

3226. Бер башта ун ике күҙ.

3227. Ала аяҡ, йомро таяҡ,
Уртаһында тел —
Һин уны бел.

3228. Бер урында баҡа ултыра,
Һикерә-һикерә — китә алмай.

3229. Бара-бара тауҙан ашмай.

3230. Бара-бара, һаман барып етә алмай.

## Сәғәттең сәғәт һәм минут телдәре

3231. Ике ағай-эне,
Береһе торғансы, икенсеһе
Урам әйләнеп ҡайта.

3232. Кибет, кибет эсендә ике егет.

3233. Оло ҡыҙым да йүгерә,
Кесе ҡыҙым да йүгерә,
Көнө-төнө йүгерә,
Йомошон ҡасан бөтөрә?

3234. Улы бер өйгә ингәнсе,
Атаһы ун ике өйгә инә.

## Герле сәғәт

3235. Йөк тағып йөрөй,
Йөкһөҙ йөрөй алмай.

3236. Йөк һалһаң — йөрөй,
Йөгөн алһаң — туҡтай.

3237. Кискеһен: «Ашамайым, туҡмын, — ти,
Һаҡалымдан тартмаһаң,
Таң атҡансы юҡмын», — ти.

3238. Ике туҡмаҡ,
Бер көрәк,
Уны тапмаған — дүрәк [дурак].

3239. Икеһе һәлпелдәп тора.
Береһе ләңгелдәп тора.

## Будильник

3240. Йәнһеҙ йәнлене уята.

## Үтек

3241. Ҡыҙыу табанлы сана
Бер сигенә, бер бара,
Юлы шымарып ҡала.

3242. Һаҙлыҡлы юлдан пароход бара,
Уның артынан тап-таҡыр юл ҡала.

## Йоҙаҡ, асҡыс

3243. Шырт итте, мырт итте,
Ауыҙын асты, тороп ҡасты.

3244. Шырт итте, мырт итте,
Уртаһына инеп китте.

3245. Аҫылынған аҫыл ҡоштоң
Асылырға уйы бар,
Аса белһәң — һинеке,
Аса алмаһаң — китеп ҡал.

3246. Ишек алдым абалай,
Бүре килһә, аралай.

3247. Ишеккә килә, керә белмәй.

3248. Бәләкәй генә бер көсөк,
Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә.

3249. Бәләкәй генә бер этем йорт һаҡлай.

3250. Бер тумалаҡ ит кенә,
Башы, күҙе ныҡ ҡына.

3251. Был донъяла бер эт бар,
Өй һаҡлай, өрмәй.
Аяғы юҡ, йөрөмәй,
Әҙәм телен белмәй,
Тамағын тыҡһаң, һөйләй.
Шул эттән һорауһыҙ
Өйгә берәү инмәй.

3252. Бәләкәс кенә быстыҡ,
Елкәһенә баҫтыҡ.
Бер нәмәһе бар ине,
Уны ла урлап ҡастыҡ.

3253. Бәләкәй генә, бит кенә,
Ҡара киҫәк ит кенә,
Өйҙө һаҡлай тик кенә.

3254. Бәләкәй генә, бит кенә,
Ҡараҡ килһә, кит кенә.

3255. Өрмәй-нитмәй,
Ташлап китмәй,
Берәүҙе лә ебәрмәй.

3256. Өрмәй-нитмәй, бер кемде лә керетмәй.

3257. Кескәй генә көсөгөм,
Аяғы юҡ, йөрөмәй,
Кеше килһә, өрмәй,
Уғры килһә, ебәрмәй.

3258. Бәләкәй генә турғай өйөмдө һаҡлай.

3259. Бәләкәй генә турғай
Тау-ташты ҡарауыллай.

3260. Бәләкәй генә бер малай
Ишек төбөм һаҡлай.

3261. Үҙе тора, үҙе өрмәй,
Аяғы юҡ, йөрөмәй,
Күмәйен[241] тыҡһаң, һөйләшә.

3262. Телен бер кем дә белмәй,
Унан башҡа берәү ҙә өйгә инмәй.

3263. Бәләкәй генә булһа ла өйҙө һаҡлай.

3264. Бәләкәй генә бер сәпсек
Келәт һаҡлап ултыра.

3265. Келт-келт итә, өйөнә кереп китә.

3266. Сылт-сылт итә, сылт эсенә кереп китә.

## IX. ХЕҘМӘТ ҠОРАЛДАРЫ, ТӨРЛӨ ХУЖАЛЫҠ КӘРӘК-ЯРАҠТАРЫ

### Ҡороҡ

3267. Эйелмәҫ, бөгөлмәҫ,
Кейәү егете өйгә инмәҫ.

3268. Эйелмәй, бөгөлмәй,
Ҡобағай егет өйгә инмәй.

3269. Эйелмәй, бөгөлмәй,
Эленер муйын эҙләй.

3270. Тотҡан һырғый өйгә һыймай.

3271. Ҙур һандығым эсендә
Эшләнмәгән уғым ята.

## Һабан, төрән

3272. Ер аҫтында ай йөрөй.

3273. Ер аҫтында йылтыраҡ.

3274. Шар-шор итәлер,
Ярып кереп китәлер.

## Тырма

3275. Ҡырға һыйыр, урманға һыймаҫ.

3276. Аяғы күп, башы юҡ,
Ҡырҙан арҡаһы менән ҡайта.

3277. Ҡырҙа аяғы менән йөрөһә лә
Өйгә арҡаһы менән ҡайта.

3278. Аяғы әллә нисә булһа ла
Ҡырҙан арҡаһы менән ҡайта.

3279. Ҡырҙа ҡырҡ имсәкле һыйырым ҡалды.

3280. Ҡырға һыйыр — барыр,
Урманға һыймаҫ — ҡалыр.

3281. Тешле-тешле бер ағай
Бөтә яланға тарма һуҙа.

## Балта

3282. Бәләкәй генә малай
Урман төбөн ялай[242].

3283. Бәләкәй генә бер бәндә
Бөтөн урманды яңғырата.

3284. Күккә менһә, ялт итә,
Ергә төшһә, шалт итә.

3285. Йәнле һуға, йәнһеҙ яра.

3286. Бара ағай урман буйлап,
Билбауында көҙгөһө.
Көҙгөһөн алды, эйелде —
Имән йығылды.

3287. Өйгә ҡайта, һике аҫтына кереп ята.

## Билгә ҡыҫтырған балта

3288. Урманға барғанда, өйгә ҡарай,
Өйгә ҡайтҡанда, урманға ҡарай.

## Балта һабы

3289. Үҙ туғанын үҙе киҫә.

3290. Бер тишеккә — бер тошоҡ.

## Сүкеш

3291. Үҙе ябыҡ — башы бер бот.

## Ураҡ

3292. Кәк(е)ре лә бөк(ө)рө,
Йыһан ерҙе бөтөрҙө.

3293. Кәк(е)ре лә бөк(ө)рө
Донъя эшен бөтөрә.

3294. Бәләкәй генә бөк(ө)рө,
Ялан ерҙе бөтөрҙө.

3295. Бәләкәй генә ялтырауыҡ
Бөтөн ерҙе бөтөрә.

3296. Ҡамыш араһынан яңы тыуған ай йүгерә.

## Салғы

3297. Ялан ерҙә ялт-йолт.

3298. Ялт-йолт итте, йылан үтте.

3299. Аяғы йөрөмәй, таяғы йөрөй.

3300. Кәкре таяҡ, кәкре тимер үлән ҡыра.

3301. Ялт-йолт итә, ялмап йота.

3302. Өйөм башында Биртәғол бото ята.

3303. Шамбы сума — сабаҡ ҡырыла.

3304. Төкөр, төкөр, төкөрләмә,
Айғыр булып кешнәмә,
Үлән төбөн тешләмә.

3305. Таба-таба табалама,
Тау башында юрғалама,
Кеше күрһәң, кешенләмә,
Үлән башын тешләмә.

## Салғы, күбә, кәбән

3306. Йылтырсағы — йылан,
Ултырсағы — улан,
Иң олоһо — Бәҙрихан.

## Һәнәк

3307. Бер сысҡанға өс ҡойроҡ.

3308. Ағас үгеҙ, өс мөгөҙ.

3309. Үгеҙ килә уң яҡтан,
Өс мөгөҙөн тырпайтҡан,
Бесәнгә күҙен аҡайтҡан.

3310. Бер үгеҙгә өс мөгөҙ.

3311. Ауыҙы юҡ, өс мөгөҙ.

## Сыбағаш

3312. Бәлди-бәлди күккә етмәй,
Ҡара билбау билгә етмәй.

3313. Боҙ өҫтөндә болан уйнай,
Ҡойроғонда йылан уйнай.

## Әүен

3314. Төбө ҡырҡ, түбәһе бер.

## Тоҡ

3315. Киндер келәт, йүкә асҡыс.

3316. Тарма келәт, йүкә йоҙаҡ.

3317. Киндер йоҙаҡ, йүкә асҡыс[243].

3318. Ас булһа — ята,
Туҡ булһа — тороп ултыра.

## Сар

3319. Өфөй, өфөй, өфөй таш,
Эсе ҡыуыш, тышы таш.

## Бысҡы

3320. Кәүҙәһе юҡ — ҡулы бар,
Ауыҙы юҡ — теше бар.

3321. Тиҙ ашай, ваҡ сәйнәй,
Үҙе йотмай, баш бирмәй.

3322. Икәү тарта, берәү илай,
Илай-илай ҡалъя турай.

3323. Ваҡ тешле,
Үҙе ашамаҫ,
Кешегә лә ашатмаҫ.

3324. Ауыҙы юҡ — теше бар.

3325. Ашағанын йоталмай,
Ҡулы менән тоталмай.

3326. Ике һабы бар,
Тартҡанда ашай,
Ашағас, ҡырҡып ташлай.

## Йышҡы

3327. Бәләкәй генә карап,
Ары-бире йөрөй,
Торбаһынан таҫма сығара.

3328. Бәләкәй генә малай
Еңгәм йөҙөн ялай.

## Бырау

3329. Кәк(е)ре-бөк(ө)рө төҙ киткән.

## Ҡасау

3330. Күк көсөгөмдө көн дә берәү түбәләй.

## Артмаҡ

3331. Ситән аша эт тартыша.

## Солоҡсолоҡ ҡорамалдары, киндер, балаҫ һуғыу ҡоралдары

3332. Атайымдың артмағы ла тартмағы,
Әсәйемдең асҡысы ла йомғосо.

## Үлсәү

3333. Ике табаҡ, бер сабаҡ.

3334. Өс аяҡҡа бер тояҡ.

3335. Ике табаҡ,
Береһе: «Төшәм», — ти,
Береһе: «Менәм», — ти.

3336. Ике тояҡҡа алты аяҡ.

3337. Алты аяҡ, ике тояҡ,
Уртаһында тел,
Аҡылың булһа, тап та бел.

3338. Алты аяҡ, ике тояҡ,
Елкәһе юл, уртаһы тел,
Тояғы йөрөмәй,
Аҡыллы аңлар,
Ахмаҡ тыңлар.

3339. Алты аяҡ,
Алты аяҡҡа ике тояҡ:
Уртаһында тел,
Теле тирбәнмәй,
Тояғы йөрөмәй,
Аҡыллы аңлай,
Ахмаҡ тыңлай.

3340. Алты аяҡ, ике тояҡ,
Кәмбер-кәмбер, уртала бер тел.

3341. Ике сарыҡ, алты аяҡ,
Уртаһында тел,
Аҡылың булһа, уйлап бел.

3342. Бохарҙан килгән пел[244],

Уртаһында тел,
Алты аяҡ,
Алты аяҡҡа ике сарыҡ.

3343. Бер ағайға өс ҡул.

## Бизмән

3344. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ хөкөм итә.

3345. Һыңар аяҡ һайыҫҡан
Өйҙән өйгә ҡыҙыра.

## Шөшлө

3346. Бәләкәй генә шаян малай тау шыуа.

## Лом

3347. Һыңар аяҡ һайыҫҡан
Ҡойоға барып һыу эскән.

## Эйәр

3348. Арбаға ултырмаҫ, йәйәү йөрөмәҫ.

3349. Ятһа, эттән тәпәш,
Торһа, аттан бейек.

3350. Аттан бейек, эттән тәпәш.

3351. Ятһа — ҡуяндай, торһа — дөйәләй.

## Эйәр, өҙәңге

3352. Ултырған ерем уй соңҡа,
Баҫҡан ерем бай соңҡа.

3353. Ултырғаны — уба,
Баҫҡаны — баҡыр һаба[245].

## Эйәр сергеһе

3354. Ҡылдан сигелгән ҡыҙ бүләге,
Уны һатмайым йөҙ һумға.

3355. Ҡыҙылдан сигелгән,
Хаҡы тыу бейәгә торған.

## Эйәр, өҙәңге, теҙген, ҡамсы

3356. Ултырған ерем уй соҡор,
Баҫҡан ерем буй соҡор;
Бер ҡулымда ҡыптырым,
Бер ҡулымда сыптырым.

3357. Ултырған ерем уй соҡор,
Баҫҡан ерем буй соҡор;
Бер ҡулымда этмә,
Бер ҡулымда йәтмә.

## Теҙген, ҡамсы

3358. Бер ҡулымда албырғы,
Бер ҡулымда болдорғо.

3359. Бер ҡулымда ҡыптырым,
Бер ҡулымда сыптырым.

3360. Бер ҡулымда тартҡылыҡ,
Бер ҡулымда ҡаҡҡылыҡ.

## Ҡамыт

3361. Ишектән һөйрәлеп инер,
Сөйгә ҡуныр.

3362. Алыҫтағы Алып,
Китте елкәһенә һалып.

3363. Ике тәкә һөҙөшә,
Мөгөҙө ҡалай килешә.

## Ыңғырсаҡ

3364. Ыңғырлы ла шыңғырлы,
Атҡа менһә, шылдырлы.

## Ҡамсы

3365. Ҡулымдағы ҡороғом
Талдырмаҫ та ҡалдырмаҫ.

3366. Һелтәнер, һелтәнер,
Һелтәнгәндә, үртәнер.

3367. Беләгемә йылан йәбешкән,
Атымдың арҡаһын саға.

3368. Кәүҙәһенән ҡойроғо оҙон.

## Арба, сана

3369. Йәй йүгерә, ҡыш саба,
Икеһе лә атҡа маҙа.

## Арба

3370. Дөбөр-дөбөр — дүрт,
Ултырғысы — бер,
Йөрөткөсө — ике.

3371. Дүрт ағай өҫтөндә бишек ултыра,
Ул ағайҙар йәйҙе бик ярата.

3372. Тәкә-тәкә тәкәсәк,
Дүрт аяғы бөгәсәк,
Урман атайың өйҙәме,
Утын ҡосаҡлап киләме?

3373. Ербәгәй ҙә сербәгәй,
Эйәһеҙ өйгә кермәгәй,
Атһыҙ йөрөмәгәй.

## Сана

3374. «На...», — тиһәң, — бармай,
«Трр...», — тиһәң, — туҡтамай.
Бесән һалһаң — ашамай.

## Сана, арба, ат

3375. Береһе әйтә: «Йәй тыныс»,
Икенсеһе әйтә: «Ҡыш тыныс»,
Өсөнсөһө әйтә: «Йәй ҙә, ҡыш та бер тормош,
Юҡ ул миңә тиктормош».

3376. Береһе әйтә: «Йәй рәхәт»,
Икенсеһе: «Ҡыш рәхәт»,
Өсөнсөһө: «Миңә икеһе лә бер», — ти.

3377. Береһе йәйҙе яратмай,
Икенсеһе ҡышты яратмай,
Өсөнсөһө: «Миңә икеһе лә бер», — ти.

3378. Береһе әйтә: «Аҡты яратам»,
Икенсеһе әйтә: «Ҡараны яратам»,
Өсөнсөһө әйтә: «Миңә икеһе лә бер».

## Арба, тәгәрмәстәре, тәртә, ат

3379. Дөбөр, дөбөр дөбөрләй,
Дөбөрләүгә бар дүртәү.
Ҡуштан ағаһы икәү,
Шибан ағаһы шыпа яңғыҙ.

3380. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Ишәй ағай икәү,
Шибай ағай шыпа яңғыҙ.

3381. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Дөбөрсөгө менән бишәү,
Ишәй ағай икәү,
Ҡушай ағай шыр яңғыҙ.

3382. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Иван ағай икәү,
Йыуан ағай бер үҙе.

3383. Дөбөрлөгө дүртәү,
Дөбөрсөгө бишәү,
Шаһибап ағай икәү,
Шәһәүәл ағай бер үҙе.

## Арба тәгәрмәстәре, тәртәләр, дилбегә, ат

3384. Дөбөр-дөбөр дүртәү,
Имән ағас икәү,
Мыймылдығы берәү,
Шыбағаһы шыпа яңғыҙ.

## Тәгәрмәстәр

3385. Дүрт айыу бер-берен ҡыуа —
Тота алмай.

3386. Дүрт ағай юлға сыҡҡан,
Икеһе алдан, икеһе арттан бара.

3387. Икәүһе алдан йүгерә,
Икәүһе арттан йүгерә,
Алдағылар етәлмәй,
Арттағылар тоталмай.

3388. Игеҙ улы алдан бара,
Ата-инәһе арттан бара,
Малайҙары еткермәй.

3389. Дүрт ағай, дүрт ағай,
Йүгерешә лә уҙыша,
Береһен-береһе ҡыуыша.

3390. Дүрт ағай ҡыуыша,
Береһен-береһе уҙа алмай.

3391. Ике малай, ике ағай,
Береһен-береһе ҡыуалай.

3392. Дүрт малай берен-бере ҡыуалай.

3393. Ҡустылары алдан йөрөй,
Ағалары арттан йөрөй.

## Йүгән

3394. Яңағы бар — көйшәнмәҫ,
Ҡойроғо бар — ҡыйпанмаҫ.

3395. Бәләкәс кенә бура
Айғырға баш була.

## Ауыҙлыҡ

3396. Асауҙың ауыҙынан ала.

3397. Ике яҡҡа айырған,
Айғыр ауыҙын ҡайырған.

## Дуға

3398. Ат башында аҡ ҡапҡа.

3399. Атҡа атланыр,
Үҙе ултырмаҫ,
Арбаға менмәҫ,
Йәйәү йөрөмәҫ.

3400. Егәрле еңгә елкәһендә
Ем-ем ҡара көйәнтә.

3401. Ат башында аҡ көйәнтә.

## Дуға дүңгәләге

3402. Тыр, тыр, тырлама,
Туры атым, тулама.

## Ҡыңғырау

3403. Алтын аҙбар эсендә
Ала ҡолоном кешнәй.

3404. Еҙ аҙбарым эсендә
Кескәй генә ҡолон кешнәй.

3405. Еҙ һарайым эсендә
Еҙнәм аты кешнәйҙер.

3406. Үҙе аранда, тауышы яланда.

3407. Алтын аяҡ күбәләк,
Йомортҡаһы түңәрәк.

3408. Тилли-тилли-тилликәй,
Тилереп килә тилекәй.

## Баҫҡыс

3409. Өйөм-өйөм өйөлгән,
Өйөмә берәү һөйәлгән.

3410. Тышта һөйәү,
Өйгә инмәҫ кейәү.

3411. Өйөм-өйөм өйәлә,
Өйөмә кейәү һөйәлә.

3412. Оҙон-оҙон йүрмәләр,
Унан кеше үрмәләр.

3413. Өйөм-өйөм өйкәлә,
Өйөмә килеп һөйкәлә.

3414. Оҙон-оҙон өйәлә,
Өйөмә килә лә һөйәлә.

## Тирмән

3415. Ел-ел, арба, ел, арба,
Ете йылға кис, арба,
Елде-һыуҙы эс, арба.

3416. Зыр-зыр зырайман,
Зырайманда килтеки,
Элемтеки, бештеки,
Осто буран, осто ел.

3417. Йәш үгеҙ тулай,
Оло үгеҙ үкерә — йөн төкөрә.

3418. Айыу аҡыра, йөнөн ҡоя.

3419. Саң юҡтан саң сығара.

3420. Һике-һике һикелдәй,
Һике башы мөңкөлдәй,
Ялан-йолан саҡыра,
Тәлмәрйене баҡыра.

3421. Ҡайнап ятҡан таш күрҙем,
Тоҙһоҙ бешкән аш күрҙем.

3422. Ҡоро ағас башында айыу олой.

3423. Үҙе ил туйҙыра,
Үҙенең тамағы туймай.

## Ел тирмәне

3424. Ҡанатын елпеп торһа ла оса алмай.

3425. Пыр-пыр итер — осалмаҫ.

3426. Ҡанаты күп — оса алмай.

3427. Дүрт ҡоҙағый[246] береһен-береһе ҡыуа —
Етә алмай.

3428. Дүрт ҡанат,
Алты аяҡ,
Уны белмәгән кешенең
Арҡаһына — тал-таяҡ.

3429. Етмеш егет ел эшләй.

3430. Үҙем ел-һыу менән торам,
Бөтә халыҡты туҡ ҡылам.

3431. Мөгрөй, мөгрөй, мөгрәгән,
Башын күккә терәгән,
Аш та ашаған — туймаған,
Таш та ашаған — туймаған.

## Кәмә

3432. Ана бара — юлы юҡ.

3433. Үҙе бара, эҙе юғала.

3434. Ана бара үҙе,
Күренмәйҙер күҙе,
Һыу өҫтөндә ҡиммәте,
Хоҙайҙың ҡөҙрәте,
Әҙәмдең миннәте[247].

3435. Яр башында ярты түш,
Ҡарап ята ҡайҡы түш.

3436. Үҙе бара — эҙе юҡ,
Маңлайында күҙе юҡ.

3437. Һуҡыр дөйә һыуҙа йөҙә.

3438. Һуҡыр тәкә һыуҙа йөрөй.

## Ишкәк, кәмә

3439. Юллаһаң — юлы юҡ,
Боғаҙлаһаң — ҡаны юҡ.

3440. Киҫәм-киҫәм — ҡаны юҡ,
Барам-барам — юлы юҡ.

3441. Тегәм-тегәм, йөйө юҡ.

## Нәрәтә, йылым

3442. Һыуға сума,
Һыуҙан балалары менән сыға.

3443. Ете йөҙ ҡапҡаға бер ишек.

3444. Башы ағас,
Эсе селтәр,
Бото таш.

## Септә

3445. Аламаҫ,
Аттка менә алмаҫ,
Йәйәү йөрөмәҫ,
Сөйгә эленмәҫ.

## Талкы

3446. Талғыр һыйырым тал сәйнәй.

## Күрек

3447. Тишеге бар,
Ауыҙы юҡ,
Танауы юҡ,
Баҫһаң — тын сыға,
Тимер ҡыҙа.

# X. ҺУНАР, ЯУ-ҺУҒЫШ ҠОРАЛДАРЫ

## Уҡ

3448. Айыры-айыры күрке бар,
Башында аҡ бүрке бар.

3449. Йәне юҡ, өнө юҡ,
Йөнлө ҡошто еткермәй.

3450. Аҡ таяҡ,
Утлы баш,
Тимер бүрек.

3451. Аҡ йылан атылды,
Йән эйәһен ҡатырҙы.

3452. Ул ниҙер, кем?
Башы айыры тоғо бар,
Баш аҫтында бүрке бар,
Ыҫҡындырып ебәрһәң,
Йән алмаға ирке бар.

3453. Тап, тап, табаны юҡ,
Елеп китһә, еткермәй,
Ергә төшһә, таптырмай.

3454. Ҡылт итте, күҙҙән китте.

3455. Ул ниҙер, кем?
Башы айыры күрке бар,
Аҡ тимерҙән бүрке бар,
Фарман итһәң, осоп китеп,
Йән алмаға ирке бар[248].

3456. Ул ниҙер, кем?
Дошманын күрһә — оса,
Йәне юҡтыр,
Тән тишеп, ҡан эсә.

3457. Аҡҡош оса,
Уны күргән боҫа,
Тейгәне — ҡара ҡан ҡоҫа.

3458. Йәне юҡ, тән тишеп, ҡан эсә.

3459. Аттым — ҡайтманы,
Ергә барып ятманы.

## Уҡ, йәйә

3460. Яртыһының яртыһы —
Үҫкән ағас яртыһы;
Яртыһының яртыһы —
Тос тимерҙең яртыһы;
Яртыһының яртыһы —
Осҡан ҡоштоң яртыһы.

3461. Һыуҙа балыҡ яртыһы —
Яртыһының яртыһы;
Урмандағы ағастың —
Яртыһының яртыһы;
Осор ҡоштоң яртыһы —
Яртыһының яртыһы.

3462. Түшен кирген ни икән,
Осоп киткән ни икән,

Барып тейгән ни икән,
Ҡан сығарған ни икән?

## Наган, пистолет, алтатар, револьвер

3463. Алты егет юлға сыҡҡан,
Алтыһы ла бәйлеүән,
Алты һуҡтым, алты типтем,
Уң битенән сыҡты ҡан.

3464. Бәләкәй генә ҡалай,
Эсендә йүгерек малай.

3465. Бәләкәс кенә бөк(ө)рө,
Алыҫ ергә төкөрҙө.

3466. Биш туғандың биле бөк(ө)рө,
Биле бөк(ө)рө булһа ла
Алыҫҡа төкөрҙө.

## Мылтыҡ

3467. Бәләкәс кенә малай,
Бейгә лә ярай,
Ханға ла ярай,
Үҙе гел ҡан даулай.

3468. Кәк(е)ре ҡайын ут төкөрә.

3469. Бер төкөрҙө —
Бөтөн ерҙе бөтөрҙө.

3470. Бәләкәс кенә нәл ташы,
Хандар, бейҙәр юлдашы.

3471. Кәк(е)ре ботаҡ алыҫ төкөрә.

3472. Биле бөк(ө)рө алыҫҡа төкөрҙө.

3473. Ҡаны юҡ, йәне юҡ,
Төкөрөгө кеше үлтерә.

3474. Атаһы шарт итә,
Балаһы ялт итә,
Төкөрөгө дорфанға китә.

3475. Йәне лә юҡ, ҡаны ла юҡ,
Эсендәге балаһының һаны ла юҡ.

3476. Үмер, үмер, үмерҙән,
Яҡҡан уты күмерҙән,
Оҙон буйлы бер ҡош бар —
Йомортҡаһы тимерҙән.

3477. Тимерҙән заты,
Борсағы таштан ҡаты,
Әҙәмдең хикмәте.

3478. Артында беләк була,
Ҡабырғаһында эйәк була,
Өҫтөндә күҙ була,
Үҙе төҙ була.

3479. Йүткерә, төкөрә,
Төкөрһә — үлтерә.

3480. Ҡара атым ҡалт итте,
Ҡабырғаһы ялт итте.

3481. Үңер, үңер, үңерҙән,
Үңәсе оҙон тимерҙән,
Шатырлауыҡ-шартлауыҡ
Бар донъяны емергән.

3482. Эргәлә — һуға,
Алыҫта — йыға,
Хатта тауышы
Һала ҡурҡыуға*.

## Мылтыҡ атыу

3483. Күк көйәнтәм күкрәне,
Бөтөн халыҡ тетрәне.

3484. Салт аяҙҙа болот,
Ауыл этен олот.

3485. Ҡоро танауҙан ҡоторған сыҡҡан.

## Йәҙрә

3486. Ҡанаты юҡ, йәне юҡ,
Осҡан еренең һаны юҡ.

## Мөгөҙҙән эшләнгән дары һауыты, ҡайсы

3487. Олатайымдың артмағы ла тартмағы,
Өләсәйемдең асалағы ла йомалағы.

## Пушка

3488. Ашағаны тимер, төкөргәне ут,
Унан дошманға тынғы юҡ.

3489. Аҡ көсөгөм ерҙә — тауышы убаға етте.

## Туп, пушка

3490. Сәмреғоштай бер ҡош,
Йомортҡаһы тимерҙән.

## Пулемет

3491. Ҡытыр-ҡытыр туҡмас баҫа
Йомабикә яланда.

## Ҡылыс

3492. Өйҙә тора, сөйҙә тора,
Алһаң — ялтырай,
Таҡһаң — шалтырай[249].

3493. Биле ҡайҡы, үҙе үткер.

3494. Бейҙе бей иткән бөк(ө)рө бил.

3495. Дуға тиһәң — ағас түгел,

Ураҡ тиһәң — тимер түгел,
Айға оҡшаш, йәнгә хас.

3496. Ҡара бейәм ҡылт итә,
Ҡабырғаһы ялт итә.

3497. Көндөҙ буйҙа,
Кис өйҙә,
Алһаң — ялтырай,
Таҡһаң — шалтырай.

3498. Ялтыр башым, ялтырама,
Яныма алам, ҡалтырама.

## Суҡмар

3499. Артыңда атайың тора.

3500. Өйгә эленгән атаң башы.

3501. Тупаҡ баш, йәнгә хас.

3502. Ҡулыңды талдырһа ла ҡалдырма.

## Һөңгө

3503. Оҙон-оҙон осло ул,
Осло тимер башлы ул.

3504. Бер ағасым бар —
Япраҡһыҙ, ботаҡһыҙ.
Уға ҡаршы сыҡҡан —
Ҡулһыҙ, аяҡһыҙ.

## Ҡапҡан

3505. Аҡылы юҡ — хәйләкәр.

3506. Мин-мин минеке,
Бармаҡтары ун ике.
Ҡаптырырға йүне бар,
Ҡойроғонда миңе бар.

# XI. ХЕҘМӘТ

## Һабан һөрөү

3507. Һоро һарыҡ һыртын
Һөңгөм менән йырҙым.

3508. Ана бара — юлы ҡара.

3509. Ҡара ҡуйҙың тиреһен
Әйләндереп ҡапланым.

3510. Ай аҫтынан ҡайтҡан —
Алтын ҡурай тартҡан;
Көн аҫтынан ҡайтҡан —
Көмөш ҡурай тартҡан.

3511. Китеп бара — өтөп бара,
Ҡара-ҡара — юлы ҡала.

3512. Һигеҙ тарта,
Икәү тота — эш бөтә.

## Сыбағаш менән ашлыҡ һуғыу

3513. Ары ла лап-лап,
Бире лә лап-лап,
Кейеҙ ҡаплап,
Һеңгө һаплап.

3514. Ары ла лап-лап,
Бире лә лап-лап,
Кейеҙ ҡаплап,
Һеңгө һаплап,
Өйҙө болот,
Яуҙы ямғыр.

3515. Юғары менә тил-тилли,
Түбән төшә тил-тилли,
Бер бөтмәгән тил-тилли.

## Тирмән тарттырыу

3516. Айыу үкерә, йөнө ҡойола.

3517. Ҡоторған айыу йөнөн туҙҙыра.

## Тары төйөү

3518. Ике яғы туҡмаҡ,
Уртаһынан тотаһың да,
Туҡмайһың да туҡмайһың.

3519. Дөп-дөп, дөпәнгеләй,
Дөпәнгеләй, мәнгеләй.

3520. Бер соҡорҙа ике һалдат һуғыша[250].

3521. Бер соҡорҙа ике килен бейей.

3522. Дөп-дөп дөпәнгеләй,
Дөпәнгеләй, мәнгеләй.
Менгеләй ҙә төшкөләй
Андеркоуш, мандеркоуш.

## Тары төйөү, һелкеү

3523. Дөп-дөп, дөпәлмән,
Һеп-һеп, һепәлмән.

3524. Туп-туп, тупалағым мәнгеләй,
Кеш-кеш, кешәләгем мәнгеләй.

## Тары төйөү, һелкәүес менән һелкеү, елгәреү

3525. Дөп-дөп, дөпәнгеләй, мәнгеләй,
Кеш-кеш, кешәнгеләй, мәнгеләй,
Аластыҡы, баластыҡы таҡ.

## Орлоҡ сәсеү

3526. Инәһен үлтерҙем — балаһын үстерҙем.

3527. Әсәһен үлтереп, ергә күм,
Әсәһе терелер ҙә
Балаларын тыуҙырыр.

## Иген урып-йыйыу

3528. Йәй көнө йәйгән йәймәмде
Көҙ көнө йыйып алдылар,
Бер келәткә һалдылар,
Ҡараңғы баҙға яптылар.

## Иген киптереү

3529. Мейес-мейес таңаҡ,
Абау, Алла, бармағым,
Көйә төштө тырнағым.

## Балыҡ тотоу

3530. Яр аҫтында яҫман ята,
Уны һаҡлап, Уҫман ята.
Уҫман алған еңгә ҡатын,
Тырнаҡтары көмөш, алтын.

## Бесән сабыу, салғы

3531. Ялт-йолт итә, ялмап китә.

3532. Ялт-йолт йылан шыуа килә,
Йылға ярын емерә килә.

3533. Ялт-йолт итте, яр аҫтына кереп китте[251].

3534. Ялт итә лә йолт итә,
Ете саҡрым ер китә.
Ялма йылан былай килә,
Ялт яланды ялай килә.

3535. Шыр яланға сыҡтым,
Айғыр ялын йыҡтым.

3536. Йылан шыуа килә,
Яр емерелә килә.

3537. Йым-йым иткән ниҙер ул?
Ялмап алған ниҙер ул?
Биле бөк(ө)рө ниҙер ул?
Яуҙы ҡырған ниҙер ул?

3538. Ағын һыу аға килә,
Текә яр емерелә килә.
Йөҙө йылтырап бара,
Ялы йығылып бара.

3539. Үлән аҫтында ут йүгерә.

3540. Ялт-йолт итә,
Яҫтыҡ ташлап китә.

## Бесән сабыу, кәбән ҡойоу

3541. Һелтәнем, йыҡтым —
Осланым киттем.

## Күбә, кәбән һалыу

3542. Инәһенән элек ҡыҙы тыуа.

3543. Атаһынан алда улы тыуа.

3544. Инәһенән элек балаһы тыуа,
Балаһынан инәһе тыуа.

## Салғы яныу, сүкеү

3545. Төфә-төфөй,
Төф-төфәк;
Зыңғыл-сыңғыл
Таш түшәк.

## Бысаҡ ҡайрау

3546. Ҡых-тфу, ҡых-тфу,
Ауыҙы майлай,
Ҡулы яйлай,
Ҡошо һайрай...

3547. Тфү-тфү, нәй-гәй,
Ул ни нәмәкәй?

## Ағас бысыу

3548. Икәү тартыша,
Берәү ҡоҫа.

3549. Тешен батыра бара,
Сәйнәп төкөрә бара.

3550. Икәү тартыша,
Берәү ыңғыраша.

3551. Ситән аша ике эт талаша.

3552. Икәү һелтәнгәнгә берәү илай,
Күҙ йәше — тамсы түгел,
Һелтәгәне — ҡамсы түгел.

3553. Икәү туҡмай,
Берәү илай,
Күҙ йәше ваҡ ҡына,
Үҙе аҡ ҡына.

## Утын ярыу

3554. Мин «һайт» иттем — ул «шарт» итте;
Мин «ух» иттем — ул «уф» итте;
Ауыҙын асты, тороп ҡасты,
Ҡуйыныма кереп ятты.

3555. Тап итте — табағы ярылды.

3556. Орҙом, бәрҙем — ҡарынын ярҙым.

3557. Өйөм артында дүрт бүре,
Дүртеһе лә күк бүре,
Һуҡтым — ауыҙын асты,
Ҡосаҡҡа кереп ҡасты.

3558. Юғары менде, түбән төштө — шарт итте!

## Сыра ярыу

3559. Оҙон малай ҡалай турай.

3560. Тимер тәкә тауҙан төшә.

## Соҡор ҡаҙыу

3561. Атайымдың ҡаҙанын
Түңкәрә алмай кис иттем.

3562. Минән ни саҡлы алһалар,
Шул саҡлы ҙурая барам.

## Соҡорға әйбер һалыу

3563. Һалған һайын бәләкәсәйә бара.

## Дегет ағыҙыу

3564. Ҡыҙыл һыйырым китеп бара,
Ҡара һыйырым ятып ҡала.

## Дегет ҡайнатыу

3565. Урманда айыу үлтерҙем,
Өйгә ҡанын килтерҙем.

3566. Ҡара айыу өңөндә ҡара аҙыҡ әҙерләй.

## Һыу алыу

3567. Һөҫөп алдым — урыны юҡ.

3568. Башын тыҡтым — мороно юҡ,
Бауырын киҫтем — урыны юҡ.

3569. Ҡола ҡолоном ҡойоға төштө,
Ҡолағын ҡарпап, ҡалҡып сыҡты.

## Муйыл тиреү

3570. Сытыр-мытыр араһында
Кәзә һауып ултырам.

## Тағараҡ күтәреү

3571. Түбәһенән баҫтым,
Кендегенән аҫтым.

## Ситән үреү

3572. Алам-һалам алдым,
Сытыр-мытыр үрҙем,
Уны бөтөн күрҙем.

## Тәртешкә менән көл-күмер йыйыу

3573. Оло аҙбарҙан кесе аҙбарға
Һөштөр-һөштөр һөҙөштөр.

3574. Оло аҙбарҙан кесе аҙбарға таш түгелә.

3575. Оло ҡапҡанан бәләкәй ҡапҡаға прр-рриин.

3576. Ҡара атым мендем,
Янған утҡа индем,
Уңға тарттым, һулға тарттым,
Урыныма инеп яттым.

3577. Ҡара айғырым өйөр ҡыуа,
Өйөр менән аҙбар тула.

3578. Бәләкәй генә тимер тырма
Бөтөн көтөүҙе ҡыуа.

## Сабата үреү

3579. Һары таҫма элдем дә
Һары күлдәк туҡыным.

3580. Аламаны йәйҙем дә
Аласа күлдәк туҡыным.

## Етен талҡыу

3581. Аҡ көсөгөм наҡ-наҡ итә,
Ҡолаҡтары шаҡ-шаҡ итә.

3582. Аҡ көсөгөм таҡ-таҡ итә,
Ҡаҡ ҡулдары шаҡ-шаҡ итә.

3583. Ҡарт әбей һөйәк һындыра.

3584. Ике эт ситән аша тартыша.

3585. Аҡ этем ситән артынан һөйәк тартҡылай.

## Мүк тығыу

3586. Өй урата арҡан иштем.

## Ойоҡ бәйләү

3587. Арҡандан бура бурайҙар.

3588. Арҡан ураным,
Бура бураным,
Йылыһына ҡыуандым.

3589. Биш ағай бура бурай,
Береһе сыға ла ҡарай,
Береһе сыға ла ҡарай.

3590. Унау килеп еттеләр,
Аҡ арҡанды тоттолар,
Бура бурап киттеләр.

3591. Биш бүре,
Бишеһе лә күк бүре,
Береһен-береһе ҡыуған,
Ҡойроғон быуған.

3592. Биш ағай һуғыша.

3593. Биш аға
Бишеһенә бер өй һала.

3594. Биш малай
Береһен-береһе ҡыуалай.

3595. Биш турғай
Берен-бере ҡыуалай.

3596. Биш бағанаға ситән үрәләр.

3597. Биш туған ситән үрә.

3598. Ун оҫта арҡандан бура бурай.

3599. Өфөнән килгән биш егет
Берен-бере ҡыуалай.

3600. Ун кешегә биш бағана,
Бер арҡан,
Тарталар ҙа һуҙалар,
Йомро ситән үрәләр.

3601. Дүрт ағай арҡан һала,
Бер ағай үрә.

3602. Дүрт ағай ситән үрә,
Береһе арала йөрөй.

3603. Дүрт ағай бура бурай,
Береһе бүрәнә һөйрәй.

## Ҡабала еп иләү

3604. Берәү һауа,
Берәү имә,
Имә лә төшөп йүгерә,
Йүгерә-йүгерә һимерә.

3605. Һике аҫтында ҡартығыҙ,
Һаҡалынан тартығыҙ.

3606. Ситән аша эт эсәк һөйрәй.

3607. Юғары менер — бәлли,
Түбән төшөр — бәлли.
Бүтәгәһен күтәрә алмай
Илап торор бәлли[252].

3608. Юғары менер аҡҡанат,
Түбән төшөр аҡҡанат,
Бүтәгәһен күтәрә алмай,
Илап торор аҡҡанат[253].

3609. Ултырҙым төпкә,
Ҡараным мүккә,
Тоттом аҡ ҡайын,
Яланым майын[254].

## Киндер һуғыу

3610. Шылтыр ҡыуаҡ араһына
Мылтыр таяҡ ташланым.

3611. Сытыр-мытыр араһына
Йомро таяҡ ташланым[255].

3612. Бәләкәс өйрәк сума бара,
Артынан моҙ туңа бара.

3613. Кәртә аша бүре тартыша.

3614. Гөбөргәйел һөйәк кимерә.

3615. Ары аттым,
Бире аттым,
Уртаһына бер ҡаҡтым.

3616. Сытырман-сатырман,
Сатырмандың араһына
Бүре инеп ҡасҡан,
Аяғына баҫҡан,
Сатын-ботон асҡан.

3617. Сытыр-сытыр сытырман,
Сытырмандың араһында
Кәзә һауып ултырам.

3618. Сытыр-мытыр араһына
Сыңғыл таяҡ ташланым.

## Мамыҡ аялау

3619. Ситән аша эт тартыша.

## Йөн сиратыу

3620. Зыр-зыр зырманиха,
Здравствуй, старуха!

## Септә һуғыу

3621. Сытыр-мытыр өҫтөнән еп ырғыттым.

3622. Ситән аша арҡан тартам.

## Балаҫ һуғыу

3623. Сүрәгәй[256] үрҙәк сума бара,
Артынан күле туңа бара.

3624. Ситән аша суртан һикерә.

3625. Һалдым-һалдым һалаҡҡа,
Һалып элдем беләккә,
Муйыныма урай-урай,
Йәнә элдем беләккә.

## Балаҫ аҫалау

3626. Боҙ аҫтында бөтөр,
Ҡар аҫтында ҡатыр,
Дөйә йөнө түшәк,
Уны белмәгән — ишәк.

## Кейеҙ баҫыу

3627. Менеп тапаным, йәймә яһаным.

## Теген тегеү

3628. Ай киттем, йыл киттем,
Энә буйы ер киттем.

3629. Ай үтер, йыл үтер,
Күҙ күреме ер үтер.

3630. Шыума шыуа, йылан ҡыуа.

## Сигем сигеү

3631. Сытыр-мытыр өҫтөнән
Энә ырғыттым.

# XII. ФӘН ҺӘМ ТЕХНИКА[257]

## Самолет

3632. Ҡанаты бар — елпенмәй,
Тамағына ел кермәй,
Елдән етеҙ ел арба!

3633. Ҡанаты бар — йөнө юҡ,
Күккә менһә, тиңе юҡ.

3634. Ҡанаты бар — йөнө юҡ,
Үҙе бара — юлы юҡ.

3635. Ҡош та түгел,
Ат та түгел,
Үҙе оса, йөк ташый.

3636. Ҡара ҡош килә ҡалтыр-ҡалтыр,
Ҡанат арты ялтыр-ялтыр.
Балаһы илай — шар-шар,
Танауы ҡанай лар-лар.

3637. Ҡуңыҙ түгел — гөжләй,
Ҡош түгел — оса.

3638. Сикһеҙ зәңгәр быялаға
Һоҡланып торҙом, ҡарап.
Ошо быяланы ярып,
Үтте бер ҡорос ҡанат*.

3639. Аҡҡош оса,

Эҙе ҡала,
Үҙе китеп юғала.

3640. Сылбырһыҙ өҫкә менә,
Сылбырһыҙ аҫҡа төшә.

3641. Пыр-пыр пырылдар,
Зыр-зыр зырылдар,
Күккә менер, ергә төшөр,
Ыласындан бейек осор.

3642. Пыр-пыр пырылдар,
Зыр-зыр зырылдар,
Күккә менер, ергә төшөр,
Бик күп ерҙәрҙе гиҙер,
Ни ҡушһаң, шуны эшләр.

3643. Ерҙән ҡалҡына башлаһа,
Артынан туҙан туҙа,
Үҙе ҡанатлы ҡош түгел,
Үҙе бар ҡоштан уҙа.

## Парашют

3644. Баш осомда сатырым,
Остом алты саҡ(ы)рым,
Осоп төшкәс ҡайтырым.

## Пароход

3645. Агастан аты,
Тимерҙән ҡанаты,
Ил өҫтөндә миннәте,
Һыу өҫтөндә ҡөҙрәте.

3646. Балыҡ түгел, ҡош түгел,
Һыуҙа йөрөй үҙе гел.
Суммай ҙа ул, осмай ҙа ул,
Ҡоро ергә сыҡмай ҙа ул.

## Якорь

3647. Бер уйлаһаң, иҫ китерлек:
Кәрәк булһа, ташлайҙар,

Кэрэклеге бөтөү менэн,
Күтэрэ лэ башлайҙар.

3648. Кэрэк саҡта ташлайҙар,
Кэрэкмэгэндэ алалар.

### Паром

3649. Агастыр аты,
Тимерҙэндер заты,
Әҙэмдең хикмэте,
Һыу өҫтөндэ һиммэте.

3650. Ана бара Алып,
Ике еңен һалып,
Тимер уның белэге,
Дарья уның йөрэге.

3651. Тэбигэттең ҡөҙрэте,
Һыу өҫтөндэ мөлкэте.

### Һыу аҫты кэмэһе

3652. Ана сумды ҙур балыҡ,
Ҡорһагы тулы халыҡ.

### Паровоз, поезд

3653. Дөбөр-дөбөр дөбөрҙэн,
Дөбөр килэ Себерҙэн.

3654. Ике тауҙың араһында
Минһаж агай ҡысҡыра.

3655. Ҡамыты юҡ,
Дугаһы юҡ,
Ҡара атым егеүле.

3656. Оло күҙле ҡара айгыр
Ҡырҡлап арба тарталыр.

3657. Хайран итэ йөрөүе,
Бик йыраҡтан күреүе.

Кеше-меше күренһә,
Бүре кеүек олоуы.

3658. Хайран унының йөрөүе,
Бик йыраҡтан килеүе,
Ай-һай, унының кешнәүе,
Аяғында тимере,
Тамағында күмере,
Ерҙе ярып килеүе.

3659. Дилбегә юҡ, йүгән юҡ,
Ҡамыт кәрәк тигән юҡ.
Ҡара айғырҙы ектеләр,
Ултырҙылар киттеләр.

3660. Ул ниҙер, кем?
Ауыҙынан уттар сәсә,
Айлыҡ юлды көндә үтә,
Күмер ашап, һыу эсә.

## Паровоз, тимер юл

3661. Ҡара ҡаҙанды күтәрә алманым,
Тимер дилбегәне йыя алманым.

## Автомобиль

3662. «На-а», — тиһәң, атламай,
«Тр-р», — тиһәң, туҡтамай.
Бесән һалһаң, ашамай.
Ҡысҡыра-ҡысҡыра саба,
Йүгереүҙән бушамай.

3663. Дүрт аяғын ат иткән,
Ике күҙен ут иткән.
Төнөн йөрөп, ут йотҡан*.

3664. Аяғы юҡ — йүгерә, ауыҙы юҡ — үкерә.

3665. Һоро айғырҙы ектеләр,
Ултырҙылар киттеләр.

3666. Һыу эсә, бесән ашамай,
Үҙе дүрт аяҡлы.

3667. Эй, ат саба, ат саба,
Һығыла билгенәһе.
Тояҡтары резинка,
Тимерҙән дилбегәһе.

3668. Йөк ташый, тик ат түгел,
Үҙе йәнле зат түгел.
Кеше ултырһа — китә,
Кәрәк ереңә илтә*.

3669. Атһыҙ йөрөгән арба.

## Мотоцикл, велосипед

3670. Ике аяҡлы үгеҙ,
Маңлайында ҡуш мөгөҙ.

3671. Аяҡтары түңәрәк,
Ҡыуышалар тәгәрәп.

3672. Ике тәгәрмәсле арба
Атһыҙ ҙа алға саба.

## Мотоцикл

3673. Йомаҡ әйтәм, дуҫҡайым,
Уйлап тап яуапҡайын.
Мөгөҙөм бар, йәнем юҡ,
Тауышым бар, телем юҡ.
Ә үҙемде менәләр,
Алыҫ ерҙән еләләр*.

3674. Үҙе ике генә тәгәрмәсле,
Ике кешене йөрөтә.

## Трамвай

3675. Дуғаһы бар, тәртәһеҙ,
Йөрөй үҙе бик етеҙ*.

3676. Ҡылға аҫылына,
Тимергә таяна,
Ултыртып саба
Теләһә ҡая*.

## Экскаватор

3677. Аягым юҡ — атлайым,
Тау аҡтарып ташлайым.
Күмер, тимер тейәйем,
Һис арыным, тимәйем*.

## Кран

3678. Торна торор һерәйеп,
Суҡышынан төшөрөп,
Уға әйбер тағырҙар,
Юғарыла алырҙар.

## Трактор

3679. Ат түгел, кешнәмәй,
Йөҙ аттан кәм эшләмәй.

3680. Баҫыу буйлап юрғалай,
Үҙе йөрөй тыр ҙа тыр,
Йә, был нимә, кем әйтер?

3681. Ашамай ул бесәнде,
Ҡапмай ул һаламды.
Үҙе китә һөйрәтеп,
Ун бер кәҫле һабанды.

3682. Бесән ҡапмай, һоло ҡапмай,
Торған ере ҡап-ҡара.
Эшкә тиһәң — айыумы ни,
Бар донъяңды аҡтара*.

3683. Батырып ала, айҡап ала,
Эҙе йомшарып ҡала.

3684. Ер өҫтөндә ҡара ҡарға
Юлы ҡарайып бара.

3685. Кешнәй-кешнәй ер ҡыҙыра
Ҡара айғыр колхозда.

3686. Оло танау ҡара үгеҙ
Ерҙе йыра аяуһыҙ.

3687. Бер айыуҙа биш балта,
Балталарын ергә сапһа,
Ҡара ерҙе ҡабарта.

3688. Бәһлеүән китеп бара,
Ерҙе киҫәккә яра.
Ни ҡушһаң, үтәй шуны,
Кем генә белмәй уны?

## Комбайн

3689. Гөрләй-гөрләй,
Эшләй берҙәй,
Тоғо тулһа, һөрәнләй.

3690. Дыу-дыу үкерә,
Баҫыу буйлап йүгерә.
Ҡамылдағы игенде
Урып-һуғып елгәрә.

3691. Ҡырҡа барыр,
Тартып алыр,
Ҡырҡҡылар ҙа һуҡҡылар.
Һабағын ергә өйөр,
Тосон тоҡҡа тултырыр.

3692. Тырнай ҙа һоҫа,
Йота ла ҡоҫа,
Барын бергә эшләй,
Был ниндәй оҫта?

3693. Ура, һуға, елгәрә,
Үҙе тейәп ебәрә.

3694. Үҙе ура,
Үҙе һуға,
Үҙе һура.

3695. Үҙе ура, үҙе һура,
Үҙе ҡапсыҡҡа һала,
Геүелдәп үтеп китә лә
Ҡыр таҡырланып ҡала.

3696. Сәйнәй һалам — төкөрә алтын.

## Һуҡҡыс машина

3697. Айыу аҡыра, йөнөн түкөрә.

3698. Әйләнә ул зырылдап,
Зырылдап та пырылдап.
Ашай һалам, төкөрә бойҙай,
Тауыш бирә тырылдап.

## Урғыс машина

3699. Ел тирмәне тиһәң — аты бар,
Арба тиһәң — ҡанаты бар.

## Телеграф бағаналары, телефон

3700. Ике тауҙың араһында
Ваҡ-ваҡ ағас ултыра.
Ай ҙа тимәй, көн дә тимәй,
Үкереп илап ултыра.

3701. Теҙелеп киткән күп ағас,
Япраҡ ярмаҫ ҡыу ағас.

3702. Еп һуҙыла, еп һуҙыла,
Оҙон юлдың буйына,
Иван менән Степан
Тотоп тора ҡулына.

3703. Һөйләп бирә тел менән,
Үҙе китә юл менән,
Юлы ағас башында.

3704. Үҙе бында ултыра,
Һүҙҙе тегендә тултыра.

## Электр

3705. Таш ватыр, тау аҡтарыр,
Ни ҡушһаң да башҡарыр,
Йонсоуҙа ла иренмәҫ,
Үҙе күҙгә күренмәҫ.

3706. Күҙгә күренмәй,
Бик шәп йүгерә.

3707. Һүндерһәң — һүнә,
Яндырһаң — яна,
Барып тотһаң — үлтерә.

## Электр бағанаһы

3708. Бер бағана яна,
Уты ла, күмере лә юҡ.

3709. Кәүҙәһендә йәне юҡ,
Йәне юҡ тиһәм, ярамаҫ.
Йәне бар тиһәм, үҙенә
Ҡылыс сапһаң, ҡанамаҫ,
Нимә булыр шул ағас?

## Радиоалғыс

3710. Ҙур бер эшләпә,
Бөтә өйҙө яңғырата.

3711. Йырлай ҙа, һөйләй ҙә —
Кешеһе күренмәй.

3712. Үҙе һөйләй — күренмәй.

3713. Үҙе һөйләй, үҙе көйләй,
Үҙе күҙгә күренмәй,
Саҡырһаң — килмәй.

3714. Тәҙрә башымда торәү,
Һөйләп тора берәү.

3715. Түрҙә ултырып, донъя гиҙәм,
Бар телдә лә һөйләй беләм.

## Телевизор

3716. Ҡумта эсендә кеше,
Йырлау, һөйләүҙә эше.

3717. Дүрт мөйөшлө көҙгөгә
Бөтә донъя һыйған.

3718. Самолет та, пароход та,
Поезд да түгел үҙем.
Теләгән бер кешегә мин
Күрһәтәм донъя йөҙөн*.

3719. Зәңгәр төҫлө көҙгөлә
Бөтә донъя күренә.
Ултыртып ҡуйҙыҡ уны
Өйөбөҙҙөң түренә*.

## Ракета

3720. Ҡош түгел — оса,
Йыһанға етә.

3721. Ҡош түгел — пипелдәй.

3722. Айға тиһәң, айға осор,
Ҡайҙа ҡушһаң, шунда төшөр.

3723. Ҡояш күрҙе, ай тартып алды.

3724. Үҙе бара — эҙе ҡала,
Бер аҙ барғас, юғала.

# XIII. АҢ-БЕЛЕМ, ЯҘЫУ-ҺЫҘЫУ[258]

## Белем

3725. Аҡыллы сәсә барыр,
Аҡылһыҙ йыя барыр.

3726. Кешегә биргән һайын
Үҙеңдә арта бара.

3727. Бер байлыҡ бар — янмай,
Бур ҙа урлай алмай,
Төшөп тә юғалмай.

## Китап

3728. Ағас түгел — япраҡлы,
Тун түгел — тегелгән.

3729. Ҡат-ҡат ҡатлама,
Ҡатламанан атлама.

3730. Ҡат-ҡат ҡатлама,
Аҡылың булһа, ташлама.

3731. Ике яғы таҡта,
Асып ҡараһаң —
Эсе тулы нурлы баҡта.

3732. Теле юҡ — үҙе аңлата.

3733. Оҙон, оҙон юл киткән,
Осона тиклем кем бағыр?
Ҡар өҫтөнән эҙ киткән,
Ҡара һыҫар кем табыр?

3734. Асыла ла ябыла,
Йәбешкәһе зирәк кешегә табыла.

3735. Аҡ ер,
Ҡара тап,
Нимә булыр?
Уйлап тап.

3736. Ҡат-ҡат, тиерҙәр,
Ҡәбделдәхир, тиерҙәр.
Шуны белгән кешенең
Нәҫеле яҡшы тиерҙәр.

3737. Аҡ ялан, ҡара һуҡмаҡ,
Йөрөй белгән эҙ табыр.

3738. Сытыр, сытыр, сытырман,
Сытырманға инә алмам,
Аҡбур менән бурлаған,
Көмөш менән һырлаған.

3739. Бик күп телдәр белһә лә,
Һөйләшмәй бер телдә лә.

Өйрәнәм, тиһәң — өйрәтә,
Ҡарышмай бер кемгә лә*.

3740. Аҡ һандығым эсендә
Сыбар-ала күбәләк.

3741. Кеше түгел — һөйләй,
Кеше күңелен көйләй.

3742. Биттәре бар, телдәре юҡ,
Күрмәйҙәр — юҡ күҙҙәре.
Дуҫ булдыңмы, төрлө телдә
Һөйләшәләр үҙҙәре*.

## Карта

3743. Диңгеҙе бар — йөҙөп булмай,
Юлы бар — йөрөп булмай,
Ере бар — һөрөп булмай.

3744. Ҡалаһы бар — халҡы юҡ,
Диңгеҙе бар — һыуы юҡ.

3745. Ҡалалары йортһоҙ,
Диңгеҙҙәре һыуһыҙ.

3746. Бәләкәй генә ҡағыҙға
Бөтә донъя һыйған.

3747. Ямауы бар — йөйө юҡ,
Ҡалаһы бар — өйө юҡ.

3748. Бар ауылы,
Бар шәһәре — кешеһе юҡ,
Диңгеҙе бар,
Йылғаһы бар — һыуы юҡ.

3749. Бик күп төрлө илдәре,
Диңгеҙҙәре, күлдәре.
Йылғалары тар, ҡыҫҡа —
Атлап сығыр ҡырмыҫҡа*.

## Глобус

3750. Бабай бүрке йөҙ ямау.

3751. Бөтә донъя бер шарҙа.

## Компас

3752. Йүнәлештәрҙе күрһәтә,
Сәғәт түгел — теле бар.
Аҙаштырмай бер ҡасан,
Нимә һуң ул, балалар?

3753. Өнһөҙ юлдар күрһәтер,
Күп нәмәгә өйрәтер.

## Календарь

3754. Аҡҡоштоң бер үҙенә
Өс йөҙ алтмыш биш ҡанат,
Мин торам уны һанап,
Көн дә кәмей бер ҡанат.

3755. Көн һайын ябыға,
Йыл аҙағында үлә.

3756. Өс йөҙ алтмыш биш кеше —
Һәр көндө береһе үлә бара.

3757. Ҡабат, ҡабат,
Бер ҡошта 365 ҡанат,
Мин торам уны һанап.
Көн дә кәмей бер ҡанат.
Бите аҡ, күҙе ҡара,
Байрамдарҙа ҡыҙара*.

## Ҡаурый ҡәләм

3758. Тояғы булмаһа ла
Аҡ яландан юрғалай.

3759. Башын ҡырҡтым,
Йөрәген һурҙым,
Юлға төшөрҙөм,
Күп кешене һөйләштерҙем.

3760. Башын ҡырҡтым,
Йөрәген һурҙым — һөйләштем.

3761. Аҡ ҡаҙым быяла ҡойонан һыу эсә.

3762. Бер ҡош бар телен телгән,
Ҡулға алып һөйләштерһәң,
Етмеш төрлө тел белгән.

3763. Йәне юҡ,
Үҙе ҡырҡ төрлө тел белә,
Ғүмер буйы яҙына.

3764. Үҙе уҡый белмәһә лә
Ғүмер буйы яҙына.

3765. Үҙе наҙан, үҙе ғүмер буйы яҙа.

3766. Грамотам булмаһа ла яҙа беләм[259].

## Перо, ручка

3767. Ауыҙы бер, теле икәү,
Һөйләйҙер һүҙ,
Унын кәрәген күрер күҙ.

3768. Тимер ҡоҙоҡ,
Оҙон ҡойроҡ,
Бирә бой(о)роҡ.

3769. Ауыҙы бер,
Теле икәү,
Йәне юҡ,
Һөйләгәндә һүҙенең һаны юҡ.

3770. Төклө ҙур ҡашы,
Йыраҡтыр башы.
Керәлер, сығалыр,
Ағалыр күҙенән йәше.

3771. Һыңар аяҡлы һайыҫҡан
Мәке һаҡлап ултыра.

## Ҡара һауыты, ручка, яҙыу

3772. Тәрән ҡоҙоҡ,
Оҙон ҡороҡ,
Бирә бой(о)роҡ.

3773. Аҡ ергә ҡара орлоҡ.

## Ручка, ҡәләм, яҙыу

3774. Һабаным аҡ ер һөрә.

## Яҙыу, уҡыу

3775. Ере аҡ,
Орлоғо ҡара,
Ҡул менән сәсәләр,
Ауыҙ менән йыялар[260].

3776. Аҡбур менән бурлайыҡ,
Көмөш менән һырлайыҡ.

3777. Иген сәсте биш малай,
Урҙылар ике ағай.

3778. Бишәү сәсә, берәү йыя.

3779. Аҡ ер, ҡара тары,
Кем сәсһә, шул урыр.

3780. Аҡ еремә ҡарағура сәстем.

3781. Аҡ ер өҫтөндә
Ҡара төлкө саба,
Эҙен белгән тотоп ала,
Белмәгәндәр ҡоро ҡала.

3782. Ап-аҡ ҡарҙың өҫтөндә
Ҡара юрға юрғалай.

3783. Ҡар өҫтөндә ҡара ҡарға.

3784. Аҡ ерҙә эҙ ҡалған,
Эҙ ҡалмаған, һүҙ ҡалған.

3785. Ағы йәйелгән, ҡараһы һибелгән.

3786. Ҡара ҡарға йүгерә,
Юлы ҡарайып ҡала.

## Хат

3787. Һүҙе килә — үҙе килмәй.

3788. Ялан ерҙең тапсығы,
Бында килеп тап итте.

3789. Алыҫтан килгән аҡ тап,
Ишегем алдына килеп төштө.

3790. Бәләкәй генә туры атым
Ырымбурҙан ураттым.

3791. Мәскәүҙә ярған бүрәнә юнышҡыһы
Өфөгә килеп тап итте.

3792. Аҡбур менән бурлаған,
Көмөш менән һырлаған,
Хаждан килеп тап итә.

3793. Мәскәүҙәрҙә ағас ҡырҡтым,
Япрағы бында килеп төштө.

3794. Бохарҙан килгән аҡ тай,
Бында килеп ер тапай.

## Конвертлы хат

3795. Дүрт мөйөшлө keләттең
Аҡкош ята эсендә,
Ишегенә мисәт һуҡҡан,
Билдәһе бар түшендә.

## Конверт йәбештереү

3796. Эсен ялайҙар, тышын һыйпайҙар*.

## Почта йәшнигенә хат төшөрөү, алыу

3797. Асыусыһы күп, алыусыһы берәү.

3798. Бәләкәй генә аҡ көсөктө
Илтеп һалдым диңгеҙгә.

## Хат алышыу

3799. Аҡ ер астым,
Ҡара бойҙай сәстем,
Дуҫым менән һөйләштем.

3800. Аҡ ер һөрҙөм,
Ҡара бойҙай сәстем,
Бураҙнаһы менән һөйләштем.

3801. Сәлиәнән Сәлимәгә
Сәләм ташый Сәмиғә.

## Ғәрәп алфавитындағы хәреф өҫтөндәге нөктәләр

3802. Берәү, икәү,
Өсәүҙән артыҡ булмаған,
Дүртәүе бер ерҙә торғанын
Һис бер әҙәм күрмәгән.

## Хәрефтәр

3803. Аҡ ер, ҡара орлоҡ.

## «А» хәрефе

3804. Һарайҙа бар — өйҙә юҡ,
Урманда бар — ҡырҙа юҡ.

3805. «Атайым»да бер «тайым» бар,
Ырыҫ шул малҡайымда.
«Атайым»дан «тайым»ды алғас,
Ни ҡалды «атайым»да?*

## «Н» хәрефе

3806. Һиндә лә бар,
Миндә лә бар —
Әҙәмдә юҡ;
Донъяла бар —
Ғаләмдә юҡ,
Йыһанда бар.

3807. Урманда бар — ҡырҙа юҡ;
Мунсала бар — өйҙә юҡ.

3808. Ҡомғанда бар — һыуҙа юҡ.

3809. Донъяла бар — мирҙә юҡ.

## «К» хәрефе

3810. Кешелә бар — хайуанда юҡ,
Көлдә бар — йылғала юҡ.

## «Ә» хәрефе

3811. Этем ята әлһерәп,
Теле тора һәлберәп.

3812. Кәкре ҡарт телен сығарған.

## «У» хәрефе

3813. Тауҙа бар — ерҙә юҡ,
Һыуҙа бар — өйҙә юҡ.

3814. Ҡорола юҡ — һыуҙа бар,
Төтөндә юҡ — быуҙа бар.

## «Х» хәрефе

3815. Атайымдан «хат» алдым,
Хат эсенән «ат» алдым.
Бер ваҡыт ат юғалды,
Ә хатында ни ҡалды?*

## «Һ» хәрефе

3816. Һыйырҙа бар — кешелә юҡ,
Һарыҡта бар — эттә юҡ.

## «Р» хәрефе

3817. Арбала бар — атта юҡ,
Тәртәлә бар — тәжелә юҡ.

## XIV. МУЗЫКА, СПОРТ ҠОРАЛДАРЫ

### Ҡурай

3818. Ауыҙы бар, һүҙе юҡ,
Тауышы бар — теле юҡ.

3819. Еҙ ҡамсы илата,
Төрлө көйҙө көйләтә,
Ҡош теле менән һөйләтә.

3820. Йәнле йәнһеҙҙе көйләтеп,
Халыҡты илата.

3821. Йәнле йәнһеҙҙе көйләтә,
Тыңлаганды илата.

3822. Аяғын-башын киҫтем,
Ҡорһағын тиштем.
Эсенә өрҙөм —
Моңайғанын күрҙем.

3823. Таҡыя башын тарбайтып,
Үҙе урманда үҫә.
Елкендереп күңелде,
Йәшен-ҡартын бейетә.
Наҙлы моңло был ҡорал
Ниндәй исем йөрөтә?

### Ҡумыҙ

3824. Кире йәҙәс кире һикерә.

### Гармун

3825. Ауыҙы юҡ — йырлай.

3826. Йәне юҡ, ҡаны юҡ,
Үҙе илай, үҙе йырлай.

3827. Ауыҙы юҡ — күп телле,
Дәртләндермәй һуң кемде?

## Скрипка

3828. Ебенә тейһәң, илаған,
Тауышы матур сыңлаған.
Өҫтөндә эсәге бар,
Аҫтында түшәге бар.

## Думбыра

3829. Тейһәң, илаған,
Тауышы халыҡҡа унаған[261],
Эсендә эсәге бар,
Тышында түшәге бар.

3830. Ҡолағы — ҡойроҡ осонда,
Эсәге — кендек өҫтөндә,
Тейһәң, илай.

## Патефон

3831. Ауыҙы юҡ — йырлай,
Теле юҡ — һөйләй,
Күп кешене көйләй.

## Патефон пластинкаһы

3832. Өҫтө тулы һыр уның,
Һыры һайын йыр уның,
Ул ярата йырларға,
Мин яратам тыңларға.

3833. Өҫтө тулы һыр,
Эсе тулы йыр.

## Барабан

3834. Йәнле йәнһеҙҙе ҡыйнай,
Йәнһеҙ ҡысҡырып илай.

3835. Эсе ҡыуыш,
Дыңғылдарға уны ҡуш.

3836. Йәнле Юлай
Йәнһеҙ балаһын ҡыйнай.

3837. Йәнһеҙ булған балаһы
Үкереп-баҡырып илай.

## Шахмат

3838. Утыҙ ике һаны,
Ҡыйыш йөрөй, тура йөрөй,
Салыш йөрөй, ҡыя йөрөй,
Сатраш йөрөй, йыя йөрөй.
Ниндәй уйын? Таны!

## Бильярд

3839. Аръяҡта ла яры бар,
Бирьяҡта ла яры бар,
Дүрт мөйөштә, ике ярҙа
Йылым һымаҡ тоғо бар.

## Саңғы

3840. Тек-тек итер,
Текмешенән китер.

3841. Ишек төбөмә ике Иштуған һөйәлгән.

3842. Кәкре муйын ағайҙар
Ҡарға батмай баралар.

3843. Кәкре муйын ағайҙар
Аҡ ҡарҙан ҡырғалайҙар.

3844. Тек-тек итер, текәнән китер,
Китә белмәгән тәкмәсләп китер.

3845. Шыма табанлы сана,
Атһыҙ ҙа алға саба,
Етеҙ булһа аяҡтар,
Ҡулда булһа таяҡтар.

## Коньки, боҙ шыуыу

3846. Бик ҙур көҙгө өҫтөндә
Тимер аттар сабалар.

## Туп

3847. Үҙе түңәрәк, йәне күбәләк.

3848. Уны туҡмайҙар, һуғалар,
Ул иламай, һикерә генә.

3849. Йүгерә белмәй, һикерә белә.

3850. Яратам һине,
Яратам һине,
Яратҡан өсөн
Туҡмайым һине.

# XV. ТӨРЛӨЛӘР

## Алтын-көмөш

3851. Ер эсенән еҙ сыға,
Ҡаҙый-ҡаҙый тир сыға.

3852. Ер аҫтында — тилмертә,
Ергә сыҡҡас — тилертә.

## Нефть

3853. Ер ҡуйынында ҡара алтын.

3854. Ер аҫтында ҡара айғыр,
Ялдары ялбыр-йолбор
Ҡоҙоғом тулы ҡара май.

## Фонтан

3855. Яҡты күрмәнем,
Өҫкә ырләнем,
Кейеп ҡара күлдәгем.

## Таш күмер

3856. Ҡоҙоҡҡа төштөм — таш сығарҙым,
Таш тигәнем ут булды.

## Һал

3857. Ер өҫтөндә ятмайҙыр,
Үҙе һыуҙа батмайҙыр.

3858. Урманда үҫә, һыуҙа күсә.

## Күпер

3859. Taҡ-таҡ итер, өҫтөнән каруан үтер.

## Ҡурсаҡ

3860. Йәнһеҙ булһа ла кейем кейенә.

## Лифт

3861. Бармаҡ менән төрт кенә,
Ишек китер асылып.
Теләгән ереңә илтер,
Тауыш-тынһыҙ атылып.

## Алдау

3862. Йомағым күп, тәме юҡ.

## Аҡса

3863. Хат-хат хат эсендә,
Хатлы ҡәләм эсендә,
Кәләмиҙең бер ҡыҙы бар
Бикле һарай эсендә.

3864. Бәләкәй генә һары атым,
Бөтә илде ураттым.

3865. Бәләкәй генә биҙәр,
Бөтөн донъяны гиҙәр.

## Мулла

3866. Көндә башын биш эйә,
Һарыҡ тиреһен кейә.

3867. Башына сепрәк ураған,
Манараға менеп илаған.

## Намаҙ уҡыу

3868. Фәлән ерҙә бер тирәк
Эйелә лә бөгөлә.

3869. Алланың бар бер ҡошо,
Йылына ике балалай,
Балаһының ҡаны юҡ,
Инәһенең йәне юҡ.

## Бай кеше йәки батша

3870. Шау-шау, шау ҡамыш,
Шау ҡамыштың араһында
Йылтыр башлы бер ҡамыш.

## Донъя, донъя мәшәҡәте

3871. Аҙаштыра шытырмаҡ,
Яңылыштыра шытырмаҡ,
Юл күрһәтә шытырмаҡ.

3872. Сытыр-сытыр сытырмаҡ,
Сытырмаҡтан кем үтмәй?

## Хәҡиҡәт

3873. Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ,
Батһа ла, ятып ҡалмаҫ.

## Әүлиә

3874. Ҡайҙа һөйләшһәң дә ишетә.

## XVI. ӘЙТЕШ ЙОМАҠТАРЫ

3875. Оҙон-оҙон сауылдың
Осона-башына кем сығыр?
Сыбар ала көйгәнәк,
Йоморҭкаһын кем йыйыр?
Морал-морал моралған,
Тауға барып терәлгән,
Тау аҫтында татлы таш,
Татлыһына кинәнгән,
Ни икәнен кем белгән?

— Оҙон-оҙон сауылың —
Юл була түгелме һуң?
Сыбар ала көйгәнәк —
Күбәләк түгелме һуң?
Морал-морал моралып,
Төтөн урғылмаймы һуң?
Тау аҫтында татлы таш,
Ул мунса булмаймы һуң? (БХИ, 247*)

* * *

3876. — Ана бара, эҙе юҡ —
Ул ни булыр, серҙәшем?
Үҙе йөрөй, йәне юҡ —
Ул ни булыр, серҙәшем?
— Ана бара, эҙе юҡ —
Һыуҙа кәмә түгелме?
Үҙе йөрөй, йәне юҡ —
Сәғәт йөрөү түгелме? (БХИ, Ш, 298)

3877. Ауыҙы бар, көйшәмәҫ —
Ул ни булыр, сәсәнем?
Арҡаһы бар, аунамаҫ —
Ул ни булыр, ҡәрҙәшем?
Ҡамыл төбө ике айыры —
Ул ни булыр, сәсәнем?
Екән төбө ете айыры —
Ул ни булыр, серҙәшем?
— Ауыҙы бар, көйшәмәҫ —
Йылҡы тигән түгелме?
Арҡаһы бар, аунамаҫ —
Һыйыр тигән түгелме?
Ҡамыл төбө ике айыры —

Атаң-әсәң булмаҫмы?
Екән төбө ете айыры —
Ете ағаң булмаҫмы? (РҒ, 45)

## XVII. ҺОРАУ ҺӘМ МӘСЬӘЛӘ ЙОМАҠТАР, БАШВАТҠЫСТАР

3878. Алманың яртыһы нимәгә оҡшаған?

*(Икенсе яртыһына.)*

3879. «Алфавит»та нисә хәреф бар?

*(Ете.)*

3880. Ат ниңә улаҡ янына килә?

*(Улаҡ уның янына килмәгәнгә.)*

3881. Атайындың улы һиңә туған түгел. Кем?

*(Һин үҙең.)*

3882. Аш янында иң кәрәк ер нимә?

*(Урын.)*

3883. Аш килтергәндә уға иң башта нимә һалабыҙ?

*(Күҙ.)*

3884. «Баҫма» тиһәң, баҫалар,
Нимә һуң ул, балалар?

*(Баҫма.)*

3885. Бар әҙәмде кем көлдөрә?

*(Бала.)*

3886. — Беренсе, икенсе,
Өсөнсө, дүртенсе,
Бишенсе, алтынсы,
Етенсе, һигеҙенсе,
Туғыҙынсы, унынсы —
Ул ни?
— Беренсеһе — беләү,
Икенсеһе — игәү,
Өсөнсөһө — өсаяҡ,
Дүртенсеһе — дүрткел һандыҡ,
Бишенсеһе — бешкәк,
Алтынсыһы — ашыҡ,
Етенсеһе — Етегән йондоҙ,

Һигеҙенсеһе — һикерәндәк,
Туғыҙынсыһы — тумыртҡа,
Унынсыһы — сыбар ала йомортҡа.

3887. — Был донъяла ете нимә юҡ? Ул ни?
— Күккә менергә баҫҡыс юҡ,
Йомортҡала йөй юҡ,
Күктән төшөргә сылбыр юҡ,
Атта мөгөҙ,
Һыйырҙа ял,
Ҡошта һөт,
Ташта тамыр юҡ.

3888. Бысаҡ киҫкән ризыҡ нимә була?

*(Ит.)*

3889. «Волга» тигән машинаның
Уртаһында ниндәй часть?

*(«Волга» һүҙенең уртаһында «л» хәрефе.)*

3890. Донъяла нимә тамырһыҙ үҫә?

*(Таш.)*

3891. Донъяла ни нәмәнең осо юҡ?

*(Юлдың.)*

3892. Донъяла иң әсе нимә?

*(Ҡоллоҡ.)*

3893. Донъяла иң кәрәк,
Иң кәрәктән ни кәрәк?

*(Һаулыҡ.)*

3894. Донъяла иң ауыр нимә?

*(Ут.)*

3895. Донъяла өс нимәнең осо юҡ?

*(Һыу, юл, баҫыу.)*

3896. Донъяла керпекһеҙ йән буламы?

*(Йылан.)*

3897. «Дәрес» башында беҙ нимә ишетәбеҙ?

*(«Д» хәрефен.)*

3898. Иҫәр ҡасан аҡыллы була?

*(Шым ғына торғанда.)*

3899. Йомоҡ күҙ менән
Нимә күреп була?

*(Төш.)*

3900. Йәнһеҙ тыуа.
Ул ни булыр?
Бел!

*(Йомортҡа.)*

3901. Кем ашамайынса йөрөй?

*(Сәғәт.)*

3902. Кем тыуғанда һаҡалтай булып тыуа?

*(Кәзә.)*

3903. Кем үҙендә урман йөрөтә?

*(Болан.)*

3904. Кем үҙенән ҙур һалам ташый?

*(Ҡырмыҫҡа.)*

3905. Кәзә башында нимә бар?

*(«К» хәрефе.)*

3906. Ҡаҙ ниҙән йөҙөп китә?

*(Ярҙан.)*

3907. Ҡаҙ ниңә йөҙә?

*(Аяғы һыу төбөнә теймәгәнгә.)*

3908. Ҡанатһыҙ, йәнһеҙ нимә оса?

*(Ракета.)*

3909. Ҡара диңгеҙгә төшкән таш ни эшләй?

*(Еүешләнә.)*

3910. Ҡауырһынһыҙ, ҡанатһыҙ кем оса?

*(Ел.)*

3911. Машинаның ҡайһы тәгәрмәсе әйләнмәй?

*(Запас тәгәрмәсе.)*

3912. Ниҙең торған еренә үлән үҫмәй?

*(Уттың.)*

3913. Ниндәй агас елһеҙ шаулай?

*(Уҫаҡ.)*

3914. Ниндәй ат кешнәмәй?

*(Шахмат аты.)*

3915. Ни нәмәнең килмәгәне яҡшы?

*(Үлемдең.)*

3916. Нимә йүгерә аяҡһыҙ?
Нимә оса ҡанатһыҙ?
Нимә үҫә тамырһыҙ?

*(Һыу, ел, таш.)*

3917. Нимә килә урынынан күсмәй?

*(Ваҡыт.)*

3918. Нимә өҫтән аҫҡа табан үҫә?

*(Түбә аҫтындагы боҙ.)*

3919. Ниндәй ерҙе ҡараңгыла ла табалар?

*(Ауыҙҙы.)*

3920. Ниндәй күлдең төбө күренмәй?

*(Һауыттагы һөттөң.)*

3921. Ниндәй тараҡ тарарга ярамай,
Ниндәй ураҡ урырга ярамай?

*(Әтәс тажы менән әтәс ҡойрого.)*

3922. Сәсмәй, нитмәй,
Нимә үҫә донъяла?

*(Үлән.)*

3923. Татлынан татлы ни нәмә?

*(Бала.)*

3924. Тау менән тау араһында нимә бар?

*(Соҡор.)*

3925. «Тау»ҙың уртаһында нимә бар?

*(«А» хәрефе.)*

3926. Түтәлдә ниндәй ике нота үҫә?

*(Фа, соль.)*

3927. Тәҙрә «төбөндә» нимә бар?

*(«Ө» хәрефе.)*

3928. Урманға нимә менән баралар?

*(Юл менән.)*

3929. Һимеҙҙән һимеҙ — ни һимеҙ?

*(Ер.)*

3930. Һандыҡҡа нимәне йәшереп булмай?

*(Ҡояш нурҙарын.)*

3931. Һыйыр ниңә ята?

*(Ултыра алмағанға.)*

3932. Һыуҙа ниндәй таш булмай?

*(Ҡоро таш.)*

3933. Һыуҙы ҡасан иләк менән ташыйҙар?

*(Ҡар булғас.)*

3934. Һыу ҡайҙа ҡоро була?

*(Географик картала.)*

3935. Эт ниңә өрә?

*(Баҡыра белмәгәнгә.)*

3936. Әҙәм балаһына иң яҡын торған нәмә була?

*(Күлдәк.)*

3937. Әҙәм башына нимә ҡуна?

*(Бүрек.)*

3938. Әҙәмде нимә бөлдөрә?

*(Ҡунаҡ-төшөм.)*

3939. Әҙәмдең терәге нимә?

*(Таяҡ.)*

3940. Әйт, кем бер йыл эсендә
Дүрт төрлө кейем кейә?

*(Ер.)*

3941. Әсәйеңдең һеңлеһенең еҙнәһе кем була?

*(Атайың була.)*

3942. Этәс алтыһы тулғас ни эшләй?

*(Етегә сыға.)*

3943. Атайым 32 йәшта саҡта, миңә 8 йәш ине.
Хәҙер атайым минән ике тапҡырға олораҡ.
Миңә нисә йәш? Атайым нисә йәштә?

*(Атайың 48 йәштә, үҙең 24-тә.)*

3944. Аталары икәү, улдары икәү.
Тапҡандар өс йомортҡа.
Шуны үҙ-ара бүлгәндәр —
Кеше һайын берәр йомортҡа тейгән.
Нисек ул шулай?

*(Улар өсәү генә: атаһы, улы, ейәне.)*

3945. Бер һаҡаллы ҡарт менән 12 йәшлек бер ҡыҙ
китеп барған. Кешеләр ҡыҙға: «Оялмайһыңмы
шул ҡарт менән барырға?» — тигәндәр.
Ҡыҙ: «Ниңә оялайым, уның әсәһе минең әсә-
йемдең ҡәйнәһе», — тип яуап биргән.
Теге ҡарт ҡыҙҙың кеме булған?

*(Атаһы.)*

3946. Дүрт кешелә өс йомортҡа булған.
Йомортҡаларҙы бүлгәс, һәр береһенә берәр
йомортҡа тейгән.
Ҡарт ҡыҙы менән, егет ҡатыны менән берәр
йомортҡа ашағандар.
Нисек шулай булған?

*(Ҡарттың ҡыҙы егеттең ҡатыны булған.)*

3947. Ике һигеҙ ун алты,
Тағы һигеҙ, тағы алты.

*(Утыҙ.)*

3948. Ике һигеҙ, бер туғыҙ,
Тағы һигеҙ, ун туғыҙ.

*(Илле ике.)*

3949. Ҡырҙа ҡырҡ бағана,
Бағана һайын ҡырҡ ҡулса,
Ҡулса һайын ҡырҡ ҡолонсаҡ,
Барыһы нисәмә ҡулса ла
Нисәмә ҡолонсаҡ?

*(1600 ҡулса, 6400 ҡолонсаҡ.)*

3950. Мөйөш һайын бер бесәй.
Һәр бесәйҙең ҡаршыһында тағы өсәр бесәй.
Бүлмәлә бөтәһе нисә бесәй?

*(Дүрт бесәй.)*

3951. Бер ҡаҙ килә, ти.
Бер төркөм ҡаҙ ултыра икән.
«Әссәләмәғәләйкүм, йөҙ ҡаҙ!» — тип әйтә, ти, теге яңғыҙ ҡаҙ. Ултырған ҡаҙҙар: «Беҙ йөҙ түгел. Беҙҙең хәтле бер өлөш, тағы ярты өлөш, тағы сирек өлөш, һин үҙең ҡушылһаң, беҙ йөҙ булабыҙ».
Унда нисә ҡаҙ булған?
36+36 = 72
72+18 = 90
90+9 = 99
99+1 = 100
Киренән һанарға.
100 — 1 = 99
99 — 18 = 72...
Иҫкәрмә: «36»ны тапҡас, ҡушһаң да була.

3952. Бер алмағаста алты ботаҡ,
Ботаҡ һайын һигеҙ сәтләүек,
Бөтәһе нисә сәтләүек?

*(Алмағаста сәтләүек үҫмәй.)*

3953. Бер кеше төшөндә диңгеҙгә балыҡ тоторға сығып китә. Диңгеҙҙә дауыл ҡуба ла кәмә бата башлай. Кеше ҡысҡыра, ярҙам һорай — уға һис ярҙам итеп булмай. Нисек ҡотҡарырға?

*(Йоҡоһонан уятырға.)*

3954. Өсәр-өсәр өс ерҙә,
Ике нөктә бер ерҙә.
Ике һигеҙ, бер туғыҙ,
Бер егерме, бер утыҙ.

*(Һикһән алты.)*

3955. Яҙып ҡарағыҙ әле һеҙ
Һан менән «300 техник».
Төҙөрһөгөҙ яңы бер һүҙ,
Ниндәй һүҙ ул?

*(Зоотехник.)*

3956. Яҙып ҡарағыҙ әле һеҙ
Һан менән «300 парк».
Төҙөрһөгөҙ яңы бер һүҙ,
Ниндәй һүҙ ул?

*(Зоопарк.)*

3957. Әллә күпме әйберҙе беҙ
Һәйбәтләп уға һалдыҡ.
Кемдәрҙә бар — шулар белер,
Исеме уның?

*(Һандыҡ.)*

3958. Юл, һуҡмаҡтар юҡ булғандыр,
Ҡар менән тулған урам.
Бындай хәлгә беләһеңме,
Ғәйепле бары...

*(Буран.)*

# АҢЛАТМАЛАР

## ТӘБИҒӘТ

### Ер һәм күк, тәбиғәт күренештәре

[1]Йомаҡтың икенсе яртыһын: «Ун ике торна, бер аҡҡош, белмәһәң, урыныңдан төш», — тип тә әйтәләр (БХЙ, 21)*.

Йыл хисабы тураһындағы башҡорт халыҡ йомаҡтары образдары менән башҡа халыҡтарҙың йомаҡтарына яҡын торалар. Йыл эсендәге ай, аҙна, көн төшөнсәләрен ҡош, ағас, ботаҡ, япраҡ исемдәре аша тасуирлау бик күп халыҡтарҙың ижадында сағыла. Бына, мәҫәлән, ҡайһы бер миҫалдар. Рус йомаҡтары: «Двенадцать орлов, пятьдесят две галки, триста шестьдесят пять скворцов одно яйцо снесли» (ЗМ, 147); украин йомағы: «Двенадцать орлов, пятьдесят две галки, триста шестьдесят пять скворцов в одно яйцо залезли» (ЗНС, 236); белорус йомағы: «Двенадцать орлов, пятьдесят две галки снесли одно яйцо»**. (ЗГГ, 56);

коми-пермяк йомағы: «Двенадцать голубок, триста шестьдесят пять скворцов снесли одно яйцо» (ЗНС, 236);

эвенк йомағы: «У загадочного дерева двенадцать веток, на каждой ветке по тридцать листьев» (ЗНС, 236);

ҡаҙаҡ йомағы: «Одно дерево имеет двенадцать сучков, а каждый сук по тридцать листьев» (ЗНС, 237);

төрөкмән халыҡ йомағы: «У меня есть дерево, на нем двенадцать веток; на каждой ветке тридцать листьев; одна сторона черная, а другая — белая» (ЗНС, 237).

---

*Шартлы ҡыҫҡартыуҙан һуң килгән һан сығанаҡтың бит һанын аңлата.

**Типографик ҡыйынлыҡтарҙы булдырмау ниәтендә миҫалдар рус телендә килтерелде.

Тәбиғи, йыл хисабы тураһындағы һәм башҡа йомаҡтарҙа, оҡшаш образдарҙан тыш, һәр халыҡтың милли ерлеге, йәшәгән урынына бәйле үҙенсәлекле образдар ҙа бик күп. Әйтәйек, кедр тураһындағы йомаҡ шул кедр үҫкән урында, йәғни Себер халыҡтары ижадында, ғына барлыҡҡа килә ала. Ләкин был осраҡта ла теге йәки был йомаҡтың нигеҙендә дөйөм традицияның һаҡланғанлығы күҙгә ташлана. Түбәндә килтерелгән хакас йомағы — бының асыҡ миҫалы:

«На одном кедре двенадцать сучьев, на двенадцати сучьях триста шестьдесят пять шишек» (ЗНС, 236).

[2]Варианты:

Бер тирәк,
Ун ике ботаҡ,
Һәр ботаҡта дүрт сәпсек,
Һәр сәпсектең ауыҙында ете япраҡ,
Һәр япраҡтың бер яғы ҡара,
Бер яғы аҡ,
Уйлап тап та менеп ят (ФН, 2).

[3]Сағыштырығыҙ:

«Есть семь братьев,
Годами равные,
Именами разные» (ЗМ, 148).

Аҙна эсендәге көндәрҙе ете туған образы аша һүрәтләү төрөкмән халыҡ йомаҡтары араһында ла күҙәтелә:

«Семь братьев друг за другом гоняются» (ЗНС, 238).

[4]Сағыштырығыҙ:

«К вечеру умирает,
Поутру оживает» (ЗМ, 148).
Йомаҡтың яуабы «ҡояш» тип тә әйтелә (СМ, 58; БХЙ, 32).

[5]Сағыштырығыҙ:

«Черная корова весь мир поборола» (ЗМ, 148);
«Пришла черная корова,
Да всех поборола» (ЗГГ, 60).

[6]Туҡһан ике йәшле — яҙ айҙарының көн хисабын күрһәтеүсе һүрәтләмә.

[7]Әҙәби сығанаҡтан ингән булһа кәрәк.

[8]Үҙе илай — көҙҙөң ямғырлы булыуына ишара.

[9]Варианты:

Айбикәнең кәртәһе,
Шатыр-шотор итәлер;
Ҡолағында алҡаһы
Ялтыр-йолтор итәлер (ФЭ, 1972, 283).

[10]Икенсерәк әйтелеше:

Ҡара ҡаҙым ҡаңғылдай,
Ҡанат осо ялтырҙай (БХЙ, 27).

[11]Билтерҙәге — бәйҙә торған.

[12]«Башҡорт халыҡ йомаҡтары» йыйынтығында: «Ватылды — борсағы сәселде» (БХЙ, 28).

[13] Варианты: Йомабикә юрған һырған,
Лаҫтыр-лоҫтор эсе туҙған (КМ, 2).

[14] Икенсерәк әйтелеше: «Аяғы юҡ — йөрөй, күҙе юҡ — илай» (ФН, 5).

[15] Шиғыр төҙөлөшөнә ҡарағанда, яҙма сығанаҡ аша халыҡ теленә инеп киткән йомаҡҡа оҡшай.

[16] «Ҡайынһар», «ҡайынсар» — фарсы телендә — сар ялғауы беҙҙең телдәге *-лы* ялғауына тура килә, йәғни «ҡайынсар» — «ҡайынлы», «ҡайынлыҡ» тигәнде аңлата.

[17] Сағыштырығыҙ: «С неба пришел, а в землю ушел» (ЗМ, 26).

[18] Варианты: Иртә килә, иртә килә,
Тәҙрәмде сиртә килә (КМ, 3).

[19] Сағыштырығыҙ: «Один льет, другой пьет, третий растет» (ЗМ, 25).

Белорус йомағы ла килтерелгән текст менән һүҙмә-һүҙ тап килә (ЗГГ, 44).

[20] Сағыштырығыҙ: «Красное коромысло через реку повисло» (ЗМ, 26).

Эвенк йомағы: «На небе коромысло, а ведер нет» (ЗНС, 229).

[21] Варианты: Һыр-һыр һыры бар,
Һыры һайын юлы бар,
Юлы һайын нуры бар (ФЭ, 1972, 284).

[22] Алып — бында ҙур, дәү батыр мәғәнәһендә.

[23] Айҙы, ҡояшты, өй башындағы икмәк, күмәс һ. б. шуның кеүек ашамлыҡтар менән сағыштырыу башҡа халыҡтар ижадында ла киң урын ала. Сағыштырығыҙ, рус йомағы: «За дедушкиной клетушкой висит хлеба краюшка» (ЗМ, 20); «Над домом у дорожки повисло пол-лепешки» (ЗМ, 21).

Мари йомағы: «На крышке избушки полкаравая» (ЗНС, 210);
ҡалмыҡ йомағы: «На верхушке юрты полблина» (ЗНС, 210);
хакас йомағы: «Над берегом лежит краюха хлеба (ЗНС, 209);
осетин йомағы: «На нашей кровле лепешка» (ЗНС, 209);
ҡаҙаҡ йомағы: «Жастыҡ астында жарты күлше» (М. Әбж., 17).

[24] Сағыштырығыҙ: «Сестра к брату в гости идет, а он от сестры прячется» (ЗМ, 21).

[25] Украин йомағы менән сағыштырығыҙ: «Золотой ушел, а серебряный пришел» (ЗНС, 21).

[26] Сағыштырығыҙ: «Золот хозяин — на поле, серебрян пастух — с поля» (ЗМ, 21).

[27] Сағыштырығыҙ: «Из окошка в окошко — золотно веретешко» (ЗМ, 22).

Ошондай уҡ йомаҡ белорустарҙа ла бар (ЗГГ, 26).

[28] Варианты: «Өйөм башы ярты бәлеш» (ФН, 9).

[29] Сағыштырығыҙ: «Среди поля лежит копыток» (ЗГГ, 27).

[30] Руссанан тәржемә аша инеп киткән булырға тейеш. Сағыштырығыҙ: «Поле не мерено, овцы не считаны, пастух рогат» (ЗМ, 20). Белорус халыҡ йомағы ла рус йомағы менән һүҙмә-һүҙ тап килә (ЗГГ, 27).

[31] Был йомаҡ ҡаҙаҡ йомағы менән ауаздаш: «На юрте рассыпаны мелкие камешки» (ЗНС, 205).

[32] Ошондай уҡ йомаҡ башҡа халыҡтар ижадында ла осрай. Мәҫәлән, белорустарҙа: «Один пастух пасет тысячу овец» (ЗГГ, 29); әрмәндәрҙә: «Один пастух всю ночь овец пасет» (ЗНС, 207).

Йондоҙҙарҙы һарыҡ образы аша һүрәтләү рус, украин халыҡ йомаҡтарында (ЗНС, 207), шулай уҡ себер халыҡтары ижадында күҙәтелә. Мәҫәлән, бүрәт йомағы: «Полна ограда овец, с ними волк степной» (ЗНС, 207).

[33] Сағыштырығыҙ: «Без рук, без ног, а рисовать умеет» (ЗМ, 26). Шул уҡ форма һәм мәғәнә белорус йомағында ла һаҡлана (ЗГГ, 47). Тағы ла сағыштырығыҙ, эвенк йомағы: «Ног нет, рук нет, рисовать мастер» (ЗНС, 221); украин йомағы: «Сроду рук своих не имеет, а узоры вышивает» (ЗНС, 231).

[34] Сағыштырығыҙ: «Скатерть бела весь свет одела» (ЗМ, 27; ЗГГ; 50).

[35] Ҡар — аҡ юрған образы бүрәт халыҡ йомаҡтары араһында ла урын ала: «Белое одеяло свернуть не смог» (ЗНС, 231).

[36] Ҡантар — көҙгө ай исеме.

[37] Һәүер (г.) — яҙғы ай исеме, апрель.

[38] Сағыштырығыҙ: «На дворе горой, а в избе водой» (ЗМ, 27). Украин һәм белорус халыҡтарында: «На дворе горою, а в хате водою» (ЗНС, 232; ЗГГ, 50).

[39] Икенсерәк әйтелеше: «Ятты-ятты ла тороп йылғаға аҡты» (ФЭ, 1968, 440).

[40] Балалар араһында киң билдәле йомаҡ.

[41] Ҡар менән ерҙе «аҡ айыу менән ҡара айыу» образы аша һүрәтләү — башҡорт халыҡ йомаҡтары араһында ғәҙәттән тыш һирәк осрай торған күренеш. Уның ҡарауы, халыҡта «аҡ һыйыр менән ҡара һыйыр» образы киң билдәле.

[42] Варианты: «Һыуҙан тыуа, һыуҙан үлә» (ФЭ, 1972, 284).

[43] Сағыштырығыҙ: «В огне не горит, в воде не тонет» (ЗМ, 30).

[44] Сағыштырығыҙ: «Не драгоценный камень, а светится» (ЗМ. 30); яҡуттарҙа: «Я так свечусь, как драгоценный камень» (ЗНС, 225).

[45] Был йомаҡтың яуабын *ҡар* тип тә әйтәләр.

[46] Ысыҡ, ҡырауҙы төшөп ҡалған асҡыс образы аша һүрәтләү — башҡа халыҡтар ижадында ла урын ала. Сағыштырығыҙ: «Долгая Орина по мосту ходила, ключи обронила, месяц видел, солнце взяло» (ЗМ, 23); белорус йомағы: «Шла пани в ночи, потеряла ключи, месяц видел, а солнце украло» (ЗНС, 231).

[47] Варианты: «Аҡ сәпсек боҙ төртә» (СМ, 55).

[48] Варианты: «Өй уратып ҡойо ҡаҙҙым» (БХЙ, 43).

[49] Сағыштырығыҙ: «Без рук, без ног, а ворота отворяет» (ЗМ, 23; ЗГГ, 41). Йомаҡтың «Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ишек аса» тигән формаһы ла йыш осрай. Сағыштырығыз: «Без рук, без ног, дверь отворяет» (ЗМ,

23, ЗГГ, 40); үзбәк халыҡ йомағы: «Без рук, без ног, без крыл, а двери отворил» (ЗНС, 217).

[50] Сағыштырығыҙ: «Без рук, без ног под окном стучит, в избу просится (ЗМ, 23). Рус йомағы формаһы яғынан камилыраҡ.

[51] Сағыштырығыҙ, ҡаҙаҡ йомағы: «Пока мать надевала ичиги, дочь достигла Москвы» (ЗНС, 64).

[52] Оҡшаш йомаҡ төрөкмән халҡында бар: «Пока отец на лошадь садится, сын базара достигнет» (ЗНС, 64).

[53] Сағыштырығыҙ, мари йомағы: «Пока отец обувается, сын уже до города дошел» (ЗНС, 64).

[54] «Йүгереп сыға, күккә оса», тип тә әйтелә.

[55] Варианты: Елдән көс ала, һыуҙан ҡурҡып ҡала (БХЙ, 50).

[56] Был йомаҡтағы «ҡара ҡыҙ» образы бик үк асыҡ түгел, усаҡҡа, мейес эсенә ишара булһа кәрәк.

[57] Оҡшаш йомаҡтар башҡа халыҡтар ижадында ла осрай. Сағыштырығыҙ, төрөкмән халыҡ йомағы: «На земле, где паслась красная корова, трава не растет» (ЗНС, 65); молдаван йомағы: «Есть вол красный: где он отдохнет, там трава не растет» (ЗНС, 66); әрмән йомағы: «У меня есть буйволица: где ложится, там трава не родится» (ЗНС, 65); хакас йомағы: «Там, где была красная коза, не растет сорок лет трава» (ЗНС, 66).

[58] Варианты: «Ике яҡ тәртә тик тора, аты китеп ултыра» (ФН, 19).

Сағыштырығыҙ: «Кобыла бежит, оглобли лежат» (ЗГГ, 35); «Сани бегут, а оглобли стоят» (ЗМ, 29); мари йомағы: «Вороной конь бежит — оглобли на месте стоят» (ЗНС, 224). Эстон йомағы: «Конь бежит, а вожжи стоят» (ЗНС, 224).

[59] С. Мирас йыйынтығында йомаҡтың һуңғы юлы: «... уртаһында мөһөрө».

[60] С. Мирас йыйынтығында: «Кәкре ҡайын төбөнән атылып сыға йыландар» (СМ, 58).

[61] Сағыштырығыҙ: «Не конь, а бежит, не лес, а шумит» (ЗМ, 29).

[62] Һырғалаҡ — һырланып ҡатҡан тайғаҡ боҙ.

[63] Икенсерәк әйтелеше: «Ҡайынлыҡ аша ҡайыш һуҙыла» (БХЙ, 44).

[64] Ҡобайыр стилендә ижад ителгән йомаҡтарҙың әйтеш формаһында йөрөгәндәре лә бар. Ундай үрнәктәрҙе ошо китаптың XVI бүлеген ҡарағыҙ (367—368-се биттәр).

## ҮҪЕМЛЕКТӘР ДОНЪЯҺЫ

[65] Сағыштырығыҙ, хакас йомағы: «Рост с дерево, а не виден ни луне, ни солнышку» (ЗНС, 122).

[66] С. Мирас йыйынтығында йомаҡтың тәүге юлы ғына бирелгән (СМ, 61).

[67] Сит-ситендәп (диал.) — сит-ситләп, сит ситенән.

[68] Варианты: «Иҙәнем аҫты еҙ бүкән» (ФН, 27).

[69] Бистер (диал.) — йүкәнән йәки талдан үреп эшләнгән кәрзинкә.

[70] «Бар зәхмәтте алып китте» — ҡәнәферҙең дарыу үләне булыуы иҫкәртелә.

[71] Варианты:

Ҡырҙан килгән диуана
Өргөн һайын моңлана (КМ, 7).

[72] Ҡырайман, Еләймән, Һөләймән — өңдәр (ижектәр) оҡшашлығына нигеҙләнеп яһалған исемдәр. Ошо принципта образдар тыуҙырыу йомаҡтарҙа бик йыш күҙәтелә.

[73] Сағыштырығыҙ: «Не огонь, а жжется» (ЗМ, 70; ЗГГ, 77). Мари йомағы ла килтерелгән йомаҡтар менән һүҙмә-һүҙ тап килә (ЗНС, 145).

[74] Аҙ ғына үҙгәртелгән формала был йомаҡ бер нисә төрлө образда йөрөй (ҡомалаҡ, һоло, миләш тәлгәше һ. б.).

[75] Ҡытат — яҡшы сифатлы беше тауар.

[76] Икенсерәк әйтелеше: «Былтыр илтеп ҡуйғандар, быйыл барып алғандар» (БДУ, ФФ, № 9, 187).

[77] Йомаҡтарҙағы һандар, нигеҙҙә, шартлы рәүештә алынып, теүәл бер иҫәпте аңлатмайҙар, ә «күп», «бик күп» тигән мәғәнәне белдерәләр. Был осраҡта ла шулай.

[78] Сирта — таяҡ.

[79] Бызырый — бызлап янып торған күҙле.

[80] Был йомаҡтың икенсе яуабы — «һуған».

[81] Салма (диал.) — әҙәби телдә сәллә.

[82] Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында (1941—1945) тыуған йомаҡ.

[83] Сағыштырығыҙ, карел йомағы: «Семьдесят одежек, нет ни петельки, ни пуговки» (ЗНС, 139); хакас йомағы: «Семьдесят одежек надето, а семи пуговиц не пришито» (ЗНС, 139); белорус йомағы: «Семьдесят одежек, да все без застежек» (ЗГГ, 93).

[84] Сағыштырығыҙ, мари йомағы: «Белый гусь на одной ножке» (ЗНС, 138); молдавандарҙа: «Белая курочка стоит на одной ноге» (ЗНС, 138).

[84а] Икенсерәк әйтелеше: Ямал яулығы йөҙ йөйлө.

[85] Оҡшаш йөкмәткеле йомаҡтар башҡа халыҡтар ижадында ла осрай. Сағыштырығыҙ: «Кругла, а не месяц, желта, а не масло, с хвостиком, а не мышь» (ЗМ, 87); карел йомағы: «Кругло-кругло, да не месяц, зелено-зелено, да не веник, есть хвост, да не мышь» (ЗНС, 137).

[86] Сағыштырығыҙ, литва халыҡ йомағы: «Красный петушок под землей сидит» (ЗНС, 136); мордва халыҡ йомағы: «В земле красный петух» (ЗНС, 136). Сөгөлдөрҙө әтәс образы аша һүрәтләү украин һәм белорус халыҡ йомаҡтары араһында ла күренә (ЗГГ, 95; ЗНС, 136).

[87] Сағыштырығыҙ: «Без окошек, без дверей, полна горница людей» (ЗМ, 83; ЗГГ, 98).

## ЙӘНЛЕ ДОНЪЯ

[88] «Алып китте сәкмәнде...» — Бүренең мал (һарыҡ) алып китеүе ошо рәүешле образлаштырылған.

[89] С. Мирас йыйынтығында йомаҡтың тәүге ике юлы ғына бирелгән (СМ, 64).

[90] Икенсерәк әйтелеше: «Ваҡ-ваҡ ҡайын аҫтында Ураҙбикә бөксәңләй» (ФН, 40).

[91] Сағыштырығыҙ: «Зимой белый, летом серый» (ЗМ, 57).

[92] Динге (рус. — деньги) — аҡса.

[93] Был йомаҡта килтерелгән яңғыҙлыҡ исемдәр, башҡа йомаҡтарҙағы кеүек үк, осраҡлы рәүештә генә һайланмаған, улар образдың мәғәнәһен асыусы сара булып торалар: Бикәнтәй — һүҙҙең тәүге ижеген алып ташлаһаң, кәнтәй (эт) икәнлеге асыҡлана, ә Биктимер иһә — тимер, нәмәнең (был осраҡта бысаҡтың) — тимерҙән эшләнгән булыуына ишара яһай.

[94] Сағыштырығыҙ: «Не портной, а с иголками не расстается» (ЗМ, 52); «Иглы при себе носит — шить не умеет» (ЗМ, 52).

[95] Сағыштырығыҙ, хакас йомағы: «Иголка имеется, а шить не умеет» (ЗНС, 172).

[96] Терпене әнәле йомғаҡ образы аша һүрәтләү үзбәк халыҡ йомаҡтары араһында ла күҙәтелә: «Схоронился под пенек с иголками клубок» (ЗНС, 171).

[97] Йыланға ҡарата әйтелгән арбау һүҙе. Йомаҡ та, арбау һүҙе булып та йөрөй.

[98, 99] Күпселек йомаҡтар үҙҙәренең тапҡыр образлы, камил формалы булыуҙары менән быуаттан быуатҡа үҙгәрмәйенсә тиерлек күсә киләләр. Килтерелгән йомаҡтар, мәҫәлән, шундайҙарҙан: улар XIV быуат ҡомартҡыһы булған «Ҡуман мәжмүғәһе»ндә (Codex Cumanicus) теркәлеп ҡалғандар: «Йазда йаулы каеш йатыр. Ол: йыландыр» (С. Е. Малов. К истории и критике Codex Cumanicus. — Изв. АН СССР. Отд. гуманитарных наук». 1930. С. 366).

[100] Был йомаҡтың икенсе яуабы — мүк.

[101] Болан ала — төҫкә ҡарата әйтелгән: ҡоба мәғәнәһендә.

[102] Сағыштырығыҙ:

«Есть крылья — не летаю,
Ног нет — а гуляю,
По земле не хожу,
На небо не гляжу,
Звезд не считаю,
Людей избегаю» (ЗМ, 31).

[103] Сағыштырығыҙ, ҡаҙаҡ халыҡ йомағы:

«Есть голова, да нет волос,
Есть глаза, да нет бровей.
Есть крылья, да не летает,
В холоде не зябнет, жары не боится» (ЗНС, 195).

[104] Сағыштырығыҙ:

«Ног нет, а ходит,
Крылья есть, а летать не может» (ЗМ, 31; ЗГГ, 172).

[105] Сағыштырығыҙ, осетин йомағы: «В воде жива, на суше мертва» (ЗНС, 196).

[106] Сағыштырығыҙ:

«Сапожник не сапожник,
Портной не портной,
Держит во рту щетину,
В руках — ножницы» (ЗМ, 82).

[107] Сағыштырығыҙ: «Не земледелец, не кузнец, не плотник, а первый на селе работник» (ЗМ, 46; ЗГГ, 134).

[108] Ғ. Вилданов йыйынтығында: «Дүрт ҡарый, дүртеһенең дә һаҡалы артҡа ҡарый» (FB, 7). «Ҡарай» — «ҡарый» формаһында рифма талаптарына яраҡлаштырып бирелгән.

Оҡшаш йомаҡ рустарҙа ла бар. Сағыштырығыҙ: «Четыре деда назад бородами» (ЗМ, 46).

[109] Сағыштырығыҙ, шор йомағы: «Если в воду войдет — тысяча, если на сушу выйдет — один» (ЗНС, 164); әзербайжан йомағы: «В воду войдет — разойдется, из воды выйдет — соберется» (ЗНС, 164).

[110] Иһаһай — ат кешнәүенә ишара.

[111] Сағыштырығыҙ: «Среди двора стоит копна, спереди вилы, сзади метла» (ЗМ, 45; ЗГГ, 130).

[112] Сағыштырығыҙ: «Два бодастых, четыре ходастых, пятый замахайка» (ЗМ, 45); «Два бодала, четыре ходала, седьмой махала» (ЗГГ, 130).

[113] «Башҡорт халыҡ йомаҡтары» йыйынтығында: «Өҫтөндәге кейеменең ямауы бар, йөйө юҡ» (БХЙ, 91).

[114] Сағыштырығыҙ, ҡаҙаҡ йомағы: «Ек ожаҡҡа бір көсеү» (М. Әбж., 64).

[115] Сағыштырығыҙ, хакас йомағы: «На кривую березу снег не пристает» (ЗНС, 162); алтай йомағы: «К раздвоенному дереву снег не пристает» (ЗНС, 162); шор йомағы: «На кривом дереве вода не держится» (ЗНС, 162).

[116] Сағыштырығыҙ, ҡаҙаҡ йомағы: «Ел әңатса да енекөм жатпайды» (М. Әбж., 64).

[117] Сағыштырығыҙ: «Төсек аҫтында төрт бауырсаҡ» (М. Әбж., 64).

[118] Сағыштырығыҙ, абхаз йомағы: «Четыре брата в одно место стреляют» (ЗНС, 162).

[119] «Атыр» ҡылымының «атар» формаһы «татар» һүҙе менән рифмалашыу ниәтендә ҡулланылған.

[120] Яҙма сығанаҡтар аша рустарҙан ингән йомаҡ булырға тейеш. Сағыштырығыҙ: «По горам, по долинам ходят шуба да кафтан» (ЗМ, 47).

[121] Сағыштырығыҙ, сыуаш халыҡ йомағы: «У кого рога длиннее хвоста?» (ЗНС, 165).

[122] «...Ашайым тиһәң, ите юҡ» — башҡорт халҡында кәзә ите артыҡ баһаланмай. Йомаҡта ошо күренеш кәүҙәләнеш тапҡан.

[123] Сағыштырығыҙ: «С бородой родится — никто не дивится» (ЗМ, 47).

[124] С. Мирас йыйынтығында: «Аҡ мендәрҙең өҫтөндә ҡуҡрай мулла ултыра» (СМ, 63).

[125] Сағыштырығыҙ: «Без рук, без топоренка построена избенка» (ЗМ, 40); «Без рук, без секиры, а хату срубил» (ЗГГ, 166).

[126] «...ҡыҙыл ситек, аҡ күлдәк», тип тә әйтелә (БХЙ, 98).

[127] Земля ҡупай — күгәрсендең ерҙә тибенеп йөрөүенең руссалап әйтелеүе: «Землю копает» тигәне, булһа кәрәк.

[128] С. Мирас йыйынтығында:

Урмандан сығар,
Һырты сыбар,
Алтын ҡырлы,
Үҙе ҡайры ашар (СМ, 66).

[129] «... ҡараһы ерҙәй», тип тә әйтелә.

[130] Белис — плюш.

[131] Был йомаҡтың икенсе яуабы — «Етегән йондоҙ».

[132] Ҡайһы ваҡыт йомаҡтың аҙағынан: «Уны белмәгән — дурак», — тип тә әйтеп ҡуялар. Әтәстең башын тараҡҡа, ҡойроғон ураҡҡа оҡшатыу башҡа халыҡтар йомағында ла күҙәтелә. Мәҫәлән, мари йомағы: «Хвост серпом, голова с гребешком» (ЗНС, 178).

[133] Сағыштырығыҙ: «Не часы, а время сказывают» (ЗМ, 42).

[134] Сағыштырығыҙ:

«Не княжеской породы, а ходит с короной,
Не ратный ездок, а с ремнем на ноге,
Не сторожем стоит, а всех рано будит» (ЗМ, 42).

[135] Икенсерәк әйтелеше: «Бәләкәй генә ҡоҙасаның итәген-башын ел аса» (ФН, 59).

[136] Сағыштырығыҙ: «Белы хоромы, красны подпоры» (ЗМ, 43).

[137] Яҙма сығанаҡтарҙан таралған.

[138] С. Мирас йыйынтығында: «Килгән юл менән, йәшел хәтфә тун менән... » (СМ, 66).

[139] Биләнский — биле нескә (информатор аңлатмаһы).

[140] Ҡырмыҫҡа иләүен ҡырҙа, яланда, юл буйында ҡайнаған ҡаҙанға оҡшатыу башҡа халыҡтар йомағында ла күҙәтелә (ЗНС, 190).

[141] Өн оҡшатыуға ҡоролған.

[142] С. Мирас йыйынтығында йомаҡтың ҡыҫҡа формаһы (тәүге юлы) ғына баҫылған (СМ, 65). Икенсе яуабы — «ҡорт».

[143] Сағыштырығыҙ: «Над нами вверх ногами» (ЗМ, 39). «Кто над нами вверх ногами?» (ЗГГ, 177).

[144] «Ҡараңғы өйҙә ҡара тәкәм һикерә», тип тә әйтелә (ФЭ, 1968, 460).

[145] «Сытыр-мытыр араһынан» тигәндә, мүк күҙ уңында тотола.

[146] Аҡ тау — мейес.

[147] С. Мирас йыйынтығында йомаҡ биш юлдан тора: тәүге дүрт юлы бында килтерелгән текст менән тап килә, һуңғы юлы: «... ай ҙа, йондоҙ ҙа түгел» (СМ, 65).

[148] Ғ. Вилданов йыйынтығында: «Бәләкәс кенә аҫыл төймә ергә төшһә лә, юғалмай» (FB, 27).

[149] «Башҡорт халыҡ йомаҡтары» йыйынтығында: «Иртәнсәк — аяғы дүртәү, көндөҙ — икәү, кисен — өсәү» (БХЙ, 115).

Сағыштырығыҙ: «Утром — на четырех ногах, в полдень — на двух, вечером — на трех» (ЗМ, 53); «Утром ходит на четырех ногах, днем — на двух, а вечером — на трех» (ЗГГ, 111); украин йомағы: «Кто утром ходит на четырех (ногах), днем на двух, а вечером на трех» (ЗНС, 11); эвен йомағы: «Кто сначала ходит на четырех ногах, затем на двух, потом на трех?» (ЗНС, 11); ҡаҙаҡ йомағы: «Таңертең тарт аяҡпен, түсте еки аяҡпен, кешке үш аяҡпен жүреди» (М. Әбж., 62).

[150] «... төндә өҫтөндә маяҡ» — ҡәбер ташы.

[151] Сағыштырығыҙ: «В одном клубочке семь дырочек» (ЗГГ, 113).

[152] Кәйтән (диал.) — таҫма.

[153] Сағыштырығыҙ: «Ни на меру, ни на вес, у всех людей есть» (ЗМ, 59).

[154] Йәбешкеһен алып ташлаһаң, был йомаҡ әйтемгә әйләнә.

[155] Торомтай — ыласындың бер төрө (пустельга).

[156] Йәнәш тороп, бер-береһен күрә алмаған ике туған (күҙ) образы рус, белорус, әрмән, мари халыҡтарының йомаҡтарында ла урын ала (ЗНС, 21).

[157] Икенсерәк әйтелеше:

Ике ағай бергә килә,
Береһен-береһе күрмәйҙәр (ФЭ, 1968, 410).

[158] Сағыштырығыҙ: «На скале сидит лягушка, а спрыгнуть не может» (ЗМ, 55).

[159] Ел уйнай — тын алыуға ишара.

[160] Йыйынтыҡтарҙа йомаҡтың ҡыҫҡа формаһы ғына теркәлгән: «Анһыҙ донъя һанһыҙ» (FB, 27; СМ, 67).

[161] Сағыштырығыҙ: «На красной жердочке сидят белые курочки» (ЗМ, 57); мари халыҡ йомағы: «На красной перекладине белые куры сидят» (ЗНС, 29).

[162] Сағыштырығыҙ: «Полон хлевец белых овец» (ЗМ, 57).

[163] Сағыштырығыҙ, яҡут халыҡ йомағы: «Два белых жеребца дерутся, рыжий жеребенок их разнимает» (ЗНС, 28).

[164] Сағыштырығыҙ, алтай халыҡ йомағы: «Тридцать два белых коня, посредине — беспокойный рыжий конь» (ЗНС, 28).

[165] Сағыштырығыҙ: «Мокрый теленочек в подполье лежит» (ЗМ, 58).

[166] Сағыштырығыҙ: «Колода среди болота не трухнет, не гниет» (ЗМ, 58; ЗГГ, 117); карел йомағы: «Какое дерево в болоте никогда не гниет?» (ЗНС, 25).

[167] Йәбешкәһен алып ташлаһаң, мәҡәлгә күсә. Тик «шул» урынына «тел» һүҙе ҡулланыла.

[168] Сағыштырығыҙ: «Один говорит, двое глядят да двое слушают» (ЗМ, 55).

1 0125 07

[169] Ҡолаша — ялғаш, улаҡ.

[170] Ҡырмыҫҡалы — Башҡортостандың көньяғында урынлашҡан район исеме. Йомаҡ Ҡырмыҫҡалыға күрше район — Ауырғазыла яҙып алынған.

[171] Сағыштырығыҙ: «У одной матери по пять сыновей» (ЗМ, 59).

[172] Сағыштырығыҙ: «У двух матерей по пяти сыновей, одно имя всем» (ЗМ, 59; ЗГГ, 127).

[173] «Әсә» һүҙе урынына «ана» атамаһы ҡулланыу йомаҡтарҙағы өндәр гармонияһы законына буйһоноп килә.

[174] Һеләү — ялҡау, йүнһеҙ мәғәнәһендә.

[175] Был йомаҡтың бер варианты XIV быуатҡа ҡараған «Ҡуман мәжмүғәһе»ндә лә («Codex Cumanicus») осрай:

— Аҡча ҡайда ҡышламыш?

— Ҡанлы йердә ҡышламыш.

— Ҡаны нечик йоҡмамыш?

— Ҡап ортада ҡышламыш.

Ол: карын йавудыр.

Йомаҡтың айырым һүҙҙәрен аңлатыу буйынса ғалимдар араһында төрлө ҡараштар бар. Минең уйлауымса, татар яҙыусыһы һәм ғалимы Нәҡи Исәнбәттең аңлатмалары хәҡиҡәткә тура килә һымаҡ: «Акча» монда ак төстәге әйбер дигәнне аңлата. (*Акча, карача, сарыча* дип әйтү Тубылда; казахта: *агча, кой*; төректә: *әгъча ҡоюн* һ. б.)... Беренче сүзе — *каны* — йә әле, каячы мәгънәсендә (мишәрдә — *кань, кане, канеча*, татарда *ни әйттең иде, кана*! һ. б.). 3-нче юлдагы *каны* исә тәндәге кан сүзеннән». (Татар халык табышмаклары. Җыючысы һәм төзүчесе Нәкый Исәнбәт. Казан, 1970, 503-нче бит.)

[176] Ҡәнзәфәр — ауыл исеме булырға тейеш.

[177] Һәләяҡ (г.) — халыҡтар тигән мәғәнәлә. Йомаҡтың икенсерәк яңғырашы: «Кәштәнән ҡайраҡ төштө, бөтә кешене ҡыра төштө», «... тирә-яҡты ҡыра төштө».

[178] Яуабын алып ташлаһаң, был йомаҡ әйтем була.

[179] Сағыштырығыҙ: «Село заселено, петухи не поют, и люди не встают» (ЗМ, 62).

[180] Мәғәнәһе бик асыҡ түгел.

## АҘЫҠ-ТҮЛЕК, АШ-ҺЫУ ӘҘЕРЛӘҮ

[181] Тоҡон (диал.) — көтөү туплау өсөн кәртәләп алынған урын.

[182] Икенсе яуабы — көйгән күмәс (ФЭ, 1972, 287).

[183] Башҡорт халҡында ҡаҙы бик хөрмәтле аҙыҡ. Шуға күрә лә йомаҡта «ҡыҙ» йәки «туй ризығы» образында һүрәтләнә.

[184] Сағыштырығыҙ: «В воде родилась, в огне крестилась, на воду пала и пропала» (ЗМ, 128); «В воде родится, в воде вырастает, а как в воду попадает — знай пропадает» (ЗГГ, 242); әрмән халыҡ йомағы: «В воде родится, как солнце вырастает, в воде умирает» (ЗНС, 86).

[185] Икенсерәк әйтелеше: «Шыйыҡ булһа ла, һыу түгел, аҡ булһа ла, ҡар түгел».

[186] Бирхон — яһалма яңғыҙлыҡ исем.

[187] Верхуш — яһалма яңғыҙлыҡ исем.

[188] Ҡул — уйһыулыҡ, тау ҡулы.

[189] Башҡорт, татарҙа кесаҙна (аҙна кис), йома көндәр, дини ышаныу буйынса, изге көндәр итеп иҫәпләнгән. Таба еҫе сығарыу, йәғни ҡоймаҡ бешереү, гәҙәттә, ошо көндәргә тура килтереп эшләнгән. Йомаҡтағы «башкирский аҙна кис»те шул йолаға бәйле әйбер тип уйларға мөмкин.

[190] Шаран — асыҡ (шар асыҡ) мәғәнәһендә, булһа кәрәк.

[191] Эптеүәй ҙә һәптеүәй — борос еҫенән кешенең сөскөрөүенә ишара.

[192] «Тәлпес эткә бирә», — тип тә әйтәләр.

## КЕЙЕМ-ҺАЛЫМ

[193] «... ҡара ҡаҙ ҡанат йәйгән», — тип тә әйтелә.

[194] Ҡалай (тимер) ҡутыр — тәңкәләргә ишара.

[195] «... ҡуйын арты башыма менде», — тип тә әйтәләр.

[196] «Ҡорған» һүҙе тәүге осраҡта исем (шаршау); икенсе осраҡта ҡылым (ҡороу) булып килә.

[197] Икенсерәк яңғырашы: «Шыҙырым — ике ҡойроҡ» (ФН, 98).

[198] Образы шаҡтай алыҫлаштырылған йомаҡ. Өн оҡшатыуға ҡоролған, булһа кәрәк.

[199] Атан — бескән дөйә.

## БИҘӘНЕҮ-ТӨҘӘНЕҮ ӘЙБЕРҘӘРЕ

[200] Йомаҡтың икенсе яртыһындағы образ («сал тәкә») ҡуянды аңлата.

[201] Стена көҙгөһө күҙ уңында тотола.

[202] Варианты: Ҡара урмандың остарын ебәк менән суҡланым (СМ, 69; БХИ, 160).

## ЙОРТ-ҠАРАЛТЫ. ӨЙ ЙЫҺАЗДАРЫ

[203] «... туғыҙ ҡанатын йәйгән», — тип тә әйтәләр.

[204] С. Мирас йыйынтығында: «Өйөм түңәрәк еҙ арҡан» (СМ, 69). «... ҡоро арҡан» тигән варианты ла бар (ФН, 105).

[205] Сағыштырығыҙ: «Что гость, то постеля, что гость, то постеля» (ЗМ, 97). «Каждому гостю по постели» (ЗГГ, 248).

[206] Хәҙерге тимер тотҡа урынына элек ишекте тишеп үткәрелгән ике осо төйөнлө бау булған. Шуға күрә «ишек бауы» «үгеҙ (һыйыр) ҡойроғо» рәүешендә килеп ингән.

[207] Сағыштырығыҙ: «Два стоят, два лежат,
Пятый ходит, шестой водит,
Седьмой песенки поет» (ЗМ, 100).

[208] Был йомаҡтың «ҡырмыҫҡа иләүе» тигән яуабы ла бар.

[209] Был йомаҡта тирмә төнлөгө хаҡында һүҙ бара.

[210] «Бер соҡор» — ҡойо, «дүрт һуҡыр» — ҡойоноң бура мөйөштәре, «төшә алмағас, намаҙ уҡый муллаға» — ҡойо сиртмәһе.

[211] Боронғо ҡарындыҡ тәҙрә хаҡында һүҙ бара.

[212] Керис-мерис — крест-на крест. Тәҙрә рамдарына ишара.

[213] Сағыштырығыҙ, рус халыҡ йомағы: «Межи деревянные, а поля стеклянные» (ЗНС, 57).

[214] Варианты: Күтәрелде, бәрелде,
Күк ишеге ярылды (КМ, 16).

[215] Варианты: Аҡ киндер күлдәк кейгән,
Башы түшәмгә тейгән (ФН, 111).

[216] Варианты: «Аҡ еҙнәйҙең башы түбәгә тейә» (БДУ, фф, № 31, 244).

[217] Икенсе яуабы: мейес, таба, икмәк.

[218] Бетәү (диал.) — аран; һарыҡ, кәзә ояһы.

[219] Дайсрук — мәғәнәһе асыҡ түгел. Ҡайһы яҡта (мәҫәлән, Ишембай районында) «Ишек төбөндә — дай сюды!» тиҙәр, һуңғыһы, дөрөҫөрәктер, сөнки унда эш-хәрәкәткә ишара бар.

[220] С. Мирас йыйынтығында: «Йәшел ҡаҙ, башы таҙ» (СМ, 73).

[221] Сағыштырығыҙ: «Сверху дыра, снизу дыра,
Посредине огонь да вода» (ЗМ, 118; ЗГГ, 299).

